# Ағиҙел

Өфө,
сентябрь
2011

9(1061)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Азамат ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.09. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 248 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0155.11.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2011 (9,1061)**

# БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Шамил Хажиәхмәтов**. Яңғыҙ инә бүре. П о в е с т ь . ......................5
**Тимерғәле Бүләков.** Баҫым. *Сиҙәм сәхифәләре.* Аҙағы. .................34

ШИҒРИӘТ

**Фәниә Чанышева**. Йылдар ағышы – күңел һағышы.
Ш и ғ ы р ҙ а р . .........................................................................87
**Зөһрә Ҡотлогилдина.** Башҡорт йыры. Ш и ғ ы р ҙ а р . ..................93
**Гөлназ Ҡотоева**. Йәшәү ҡәҙере. Ш и ғ ы р ҙ а р . ............................98

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Зәки Әлибаев.** Тормоштан илһамланып
*(Ҡәҙим Аралбайға 70 йәш)*. ..........................................................105

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Әнғәм Хәбиров.** Аҫыл икән затың – һүҙең булһын алтын
*(Шағирәләребеҙҙең быуат башында “Ағиҙел“ биттәрендәге ижадына бер ҡараш)*. Аҙағы. ......................................................115

*„Ағиҙел“ ҡунағы*

Китапһыҙ өй – ҡошһоҙ урман
*(Зөфәр Тимербулатов менән Сабир Шәриповтың әңгәмәһе)*. ........129

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

*(Ж.Ғ. Кейекбаевтың тыуыуына – 100 йыл)*

Мәшһүр лингвист һәм яҙыусы. ....................................................134
**Ғиниәт Ҡунафин**. Ғалим – әҙәбиәт майҙанында. ........................135
**Зөһрә Кейекбаева.** Ебәрелгән һәм алынған хаттар. Башы. ........150

ТЕРЕ ХӘТЕР

**Дилара Мәхмүтдинова-Мутикова**. Иле менән бергә күрҙе.
Аҙағы. .........................................................................................183

РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

**Гөлнара Аҫкарова.** Аҡыл байлығын һаҡлаған усаҡ. ..................190

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**Ш. Хазиахметов**. Одинокая волчица. *Повесть*.
**Т. Буляков.** Нажим. Летопись целины. *Окончание.*

ПОЭЗИЯ

**Ф. Чанышева, З. Кутлугильдина, Г. Кутуева.** *Стихи.*

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**З. Алибаев.** Вдохновение от жизни *(Кадиму Аралбаю 70 лет)*.

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**А. Хабиров.** Слово благородных – золото. *Окончание.*

*Гость «Агидели»*

Дом без книг – что лес без птиц
*(беседа С. Шарипова с З. М. Тимербулатовым)*.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

*(К 100-летию Ж. Г. Киекбаева)*

Знаменитый лингвист и писатель.
**Г. Кунафин.** Писатель-ученый.
**З. Киекбаева.** Отправленные и полученные письма... *Начало.*

ЖИВАЯ ПАМЯТЬ

**Д. Махмутдинова-Мутикова.** Перенес вместе со всей страной. *Окончание*.

ДУХОВНЫЕ КОРНИ

**Г. Аскарова.** Хранительница богатства умов.

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Шамил ХАЖИӘХМӘТОВ**

# ЯҢҒЫҘ ИНӘ БҮРЕ

**ПОВЕСТЬ**

Яй ғына таралышҡан ҡатлы-ҡатлы ялбыр болоттар араһында ваҡыт-ваҡыт ай күренгеләп ҡала. Йоп-йомро ай кисә генә һалҡын, хатта тоноғораҡ ине, ә бөгөн – сағыу, яҡты.

Ярым ҡараңғы, тынсыу бүлмәлә йоҡлаған ҡатын уяна ла мөйөшкә текәлә. Һынсыл ҡарашын үҙенә генә билдәле бер нөктәнән алмайынса, тар ғына аҡ күлдәген кейә, аяҡтарын һалҡын иҙәнгә төшөрә. Көтмәгәндә мөйөштән үткер бысаҡ йөҙө ише сағыу нур атыла. Ҡатын, ҡурҡып, ҡысҡырып ебәрә, шунан, әлеге үткер нурға атҡа атланған кеүек, ҡараңғылыҡҡа шыуыша. Нур һелкенә, ҡалтырана, бер һүнә, бер яна, шунан яй ғына мөйөшкә тартыла...

Атам-әсәм менән Үзбәкстанға күсеп барғанда, мин бәләкәй генә ҡыҙсыҡ булғанмын. Бохаранан көньяҡтараҡ урынлашҡан кескәй ҡалала үтте минең балалыҡ һәм йәшлек йылдарым. Атайым нефть сығарыу буйынса яҡшы белгес ине. Уны урындағы ябай халыҡ та, етәкселәр ҙә ихтирам итте. Йылдар үтә килә, беҙҙең ҡала кешеләренең атайымды, ихтирам итеүҙәренән бигерәк, ололоҡлауҙарын күрҙем. Күптәр уны, тәү сиратта, ҡаҙна машинаһында йөрөүсе, йәшелсә-емеш баҡсаһы, һыу арығы булған ҙур йортта йәшәүсе түрә итеп күрҙе. Сөнки атайым белгестәр менән лыҡа тулы конторала ултыра, барыһы ла уға буйһона ине. Көнсығышта түрә иң беренсе сиратта кешелә ҡурҡыу тойғоһо тыуҙыра. Ул эшкә ҡабул итә, хеҙмәт хаҡы тәғәйенләй, премия, утын, төҙөлөш материалдары, башҡаһын бүлә, кәрәк икән, бер нисә сәғәткә, хатта көнө буйына йөк машинаһын биреп тора ала. Ҡыҫҡаһы, начальниктың мөмкинлектәре киң. Әйтергә кәрәк, көнсығышта һәм Рәсәйҙә начальникты ихтирам итеү – икеһе ике нәмә. Рәсәйҙәге түрә вазифаһынан киткәс тә, үҙенә булған элекке ихтирамды юғалтмай, ә көнсығышта юғалта, йыш ҡына хөрмәттән генә түгел, бөтәһенән дә ҡолаҡ ҡаға.

---

*Шамил Хажиәхмәтов 1941 йылдың 8 сентябрендә Өфөлә тыуған. Нефть техникумын, институтын тамамлай, төньяҡта, Себерҙә, Үзбәкстанда эшләй. Өфөлә, Мәскәүҙә сыҡҡан байтаҡ китаптар авторы. Уны юбилейы менән ихлас ҡотлайбыҙ, ижади уңыштар теләйбеҙ.*

Йәшеллеккә күмелгән был ҡалала йәшәүе миңә оҡшай ине. Йәй ифрат эҫе, йыш ҡына ел сүллек яғынан ҡом, сәнскеле ҡамғаҡтар осортоп алып килә, уның ҡарауы емеш-еләк күп, ҡалын, йылы кейем кейергә лә кәрәкмәй. Ә ҡарлы, һыуыҡ һәм тун кейергә мәжбүр иткән Рәсәй ҡыштарын мин фильмдарҙа ғына күрә торғайным.

Урындағылар мине лә яҡын күрҙе, тип әйтә алам: ихлас һөйләштеләр, йылмайҙылар, атайыма булған хөрмәтте миңә лә күрһәтергә тырыштылар. Әсәйем өйҙә ултырҙы, хужалыҡ менән шөғөлләнде, мине тәрбиәләне. Берәй төрлө эшкә сыға ҡалһа, уның был ҡылығына бөтәһе лә аптырар ине. Йәшлегем менән ул саҡта мин күп һанлы дуҫтарыбыҙҙың, таныштарыбыҙҙың ихласлығынан ике йөҙлөлөгөн айыра алмағанмын. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ике йөҙлөлөк байтаҡҡа күберәк булған. Әммә быны бик һуңлап аңланым.

Атайым бар ваҡытын, көсөн, һаулығын эшенә бирҙе. Ул республика буйлап нефть һәм газ ятҡылыҡтары эҙләне, скважиналар быраууланы, аҙналар буйы командировкаларҙа йөрөнө, техник журнал редакциялары менән хат алышты, уларға мәҡәләләр яҙҙы – бай тәжрибәһе менән эскерһеҙ уртаҡлашты. Унан минең менән дә шөғөлләнде, йыш ҡына үҙе менән Бохараға, Үргенсҡа, Сәмәрҡәндкә ала торғайны. Ул боронғо ҡалаларҙың архитектураһы һәм мәҙәниәте күңеләмә мәңгелеккә һеңеп ҡалды.

Нефть менән газ был көньяҡ республиканың барса төбәген ашатты, эсерҙе, һәр хәлдә, партия һәм совет чиновниктары, ҙур түрәләр иркен йәшәне. Мәгәр ябай халыҡ ярлы көн итте. Күп ғаиләләрҙә ете-һигеҙ, унан да күберәк бала. Айына бер бирелә торған балалар пособиеһын алыр өсөн почта бүлексәһе алдына оҙон сират теҙелә. Ундай ғаиләләр, ғәҙәттә, ҡабартма һәм сәй менән генә мөрхәтһенә, былау байрамдарҙа ғына бешерелә.

Үҫә килә күп нәмәгә төшөнә лә барҙым. Әйтәйек, үзбәк ҡатындарының урамда ирҙәре менән йәнәш түгел, ә арттан барыуҙары, ирҙәр менән һөйләшкәндә йыш ҡына ҡулъяулыҡтары менән биттәрен ҡаплауҙары миңә оҡшамай торғайны. Ә партия етәкселәре йыйылыштарҙа ирҙәр менән ҡатындарҙың тиңлеге хаҡында һөйләй, ҡатын-ҡыҙға, әсәгә ихтирам күрһәтергә саҡыра, өндәй, өйҙәрендә иһә үҙҙәре уларҙы ҡатын-ҡыҙ яғында ғына тота, ҡунаҡтар менән бергә өҫтәл артына ултырыуҙан тыя...

Ҡатын-ҡыҙҙың нисек кейенеүен әйт! Йөҙлөктәренә тиклем төшөп торған оҙон сыбар күлдәктәренә ҡарап, атайым уларҙы, шаяртып, «огнетушителдәр» тип көлә торғайны. Беҙҙең ҡаланан бер нисә егет Украинала хеҙмәт итте һәм сибәр хохлушкаларҙы эйәртеп алып ҡайтты. Меҫкендәрҙе тәүге көндәрҙән үк бейек балсыҡ диуарҙар менән уратып алынған өйгә бикләп ҡуйҙылар. Кисәге комсомолкалар өсөн донъя тар ихата, кухня менән сикләнде лә ҡуйҙы. Кистәрен ирҙәре ҡайҙа теләй, шунда сығып китә, ҡатындарында ҡайғылары ла юҡ, ә тегеләре илап-һыҡтап ултырыуҙан башҡа бер ни ҙә эшләй алмай. Торараҡ улар төндә ҡала аша үткән поездарға эләгеп ҡасып ҡайтып бөттө, тик берәүһе генә балаһын үҙе менән алып китә алды.

Мин Ташкентта һәйбәт иҡтисади белем алыуға ирештем. Университетты тамамлаған йылда беҙҙең бөйөк ил, кортон ҡумта кеүек, шауҙырлап емерелде. Тимәк, ҙур, ҡасандыр бөтә донъяның ҡотон алып торған мәмләкәт балсыҡ аяҡлы һынташ булып сыҡты. Фашизмды еңгән держава быға тиклем күҙгә күренмәгән көстәр арҡаһында тарҡалды ла бөттө. Киләсәктә ул турала бәхәстәр күп буласаҡ, китаптар яҙыласаҡ, барыһы ла быны ни сәбәптән килеп сыҡҡанын аңлатасаҡ әле.

Атайымды пенсияға оҙатҡандан һуң ҡалала беҙгә ҡарата мөнәсәбәт күҙгә

күренеп үҙгәрә башланы. Ҡапыл ғына сит-ят кешеләргә әүерелдек тә ҡуйҙыҡ. Мине эшкә алманылар. Етеш йәшәгән кешеләрҙән ярлыға әйләндек, оҙаҡламай беҙ ҙә әлеге ҡабартма менән сәйгә күстек. Урындағыларға барыбер ҙә еңелерәк ине: баҡсалары бар, күпләп емеш-еләк үҫтерәләр, тирә-яҡтағы ҡышлаҡтарҙа мал, ҡош-ҡорт тотоусы туған-тыумасалары йәшәй.

Тәүҙәрәк атайым башыбыҙға төшкән бәләләрҙең сәбәбен бер нисек тә аңлай алманы. Өндәшмәй генә ҡайғырҙы, эстән һыҙҙы. Әсәйем, тыуған яҡҡа ҡайтайыҡ, тип өгөтләй башланы. Хәлебеҙ көндән-көн ауырлашты. Беҙҙең ҙур, матур йортҡа түбәтәй, буйлы сапан кейгән ниндәйҙер кешеләр килеп, һөмһөҙ рәүештә бүлмәнән бүлмәгә йөрөнө, мыҫҡыллы көлдө һәм, был өй беҙгә оҡшай, оҙаҡламай ошонда йәшәй башлаясаҡбыҙ, тинеләр. Атайым йортто һатырға тырышып ҡараны, әммә алыусы табылманы. «Һатмай ғына китерһең, – тинеләр уға, – иҫән-һау табаныңды ялтыратҡаның өсөн рәхмәт әйтерһең әле». Урындағыларҙың күҙендә сүп булып йөрөмәҫ өсөн, ул йортто кухня ишараты, солан һымаҡ төкөтмәһе булған бер бүлмәле торлаҡҡа алыштырырға мәжбүр булды. Иркен ихата, емеш-еләк баҡсаһы, арыҡ тороп ҡалды. Килгән аҡсаға мине юлға йыйындырҙылар. Рәсәйҙә лә тыныс түгеллеген, ҙур предприятиеларҙың эштән туҡтағанын, эшселәрҙең аҡсаһы йән аҫырарға саҡ еткәнен ишетеп, уҡып белә инем. Ә инфляция һаман үҫә, ҡулдағы аҡса, яҙғы ҡар һымаҡ, күҙгә күренеп юҡҡа сыға бара. Иҡтисадсы булараҡ шуныһын да самалайым: Рәсәй – потенциаль мөмкинлектәре киң булған ҙур ил, күп тапҡырҙар көлгә ҡалғандан һуң терелеп киткән ил, хәҙер ҙә күтәреләсәк, һәр хәлдә минең балалар – быға мин ныҡлы ышанам – беҙгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ йәшәйәсәк. Йәнә шуныһын да беләм: яңы урында, йөҙгә ҡарап, «урыҫ» тип битәрләмәйәсәктәр.

Станцияла күҙемә йәштәр тығылды, йөҙҙәрен ҡайғы-хәсрәт баҫҡан атай-әсәйемә тыныс ҡарай алманым һәм шунда үҙ-үҙемә ант иттем: Рәсәйгә ҡайтам да үҙ эшемде асам, байыйым, баҡсалы ҙур йорт һатып алам, ғәзиздәремде шунда күсереп килтерәм. Улар миңә хәлдәренән килгән бөтә нәмәне бирҙеләр, уҡыттылар, кеше иттеләр, үҙ сиратымда, мин дә шулай эшләйәсәкмен. Бына шундай сая, тәүәккәл уй-ниәттәр менән үҙемдең тарихи Ватаныма юлландым...

Рәсәйҙәге тәүге йылдарҙа миңә бик ауырға тура килде. Ҡайтып төшөү менән үҙем өсөн күңелһеҙ бер нәмәне астым: бер нәмә лә эшләй белмәйем икән дә! Бизнесты урамда ваҡ-төйәк һатыусы булып башланым, әгәр ул һөнәрҙе бизнес тип атап булһа инде. Күп нәмә ишеттем, күрҙем, сағыштырҙым. Бәхеткә күрә, һатыусы булып бер нисә ай ғына эшләргә насип итте. Бер сауҙа фирмаһының директоры, минең кеше менән һөйләшә, үҙ-үҙемде тота, етди клиенттар менән аралаша-әңгәмәләшә белеүемде күреп, үҙенә менеджер итеп алды. Был фирмала матди хәлем күпкә яҡшырҙы, дөйөм ятаҡтан китеп, бер бүлмәле айырым фатирға күстем. Айырым фатирға түләү эш хаҡымдың яртыһын алһа ла, үҙемде күпкә иркенерәк, ышаныслыраҡ тоя башланым.

Фирмала бер йыл эшләү осоронда Рәсәйҙе ныҡлап өйрәндем, бындағы тәртип-закондарҙы белдем. Директриса эшем менән ҡәнәғәт ине, эш хаҡын да күтәрҙе, һөҙөмтәлә яҡшыраҡ кейенергә, яҡшыраҡ туҡланырға мөмкинлек тыуҙы. Әммә ап-асыҡ аңлай инем: кешегә эшләп, бер ҡасан да байып булмаясаҡ, бер ҡасан да атай-әсәйем өсөн йорт һатып алырлыҡ аҡса туплай алмаясаҡмын. Оҙаҡ уйлағандан һуң, хәл иткес аҙым яһаным: фирманан киттем дә үҙ эшемде башлап ебәрҙем. Тирә-яғыма ҡарайым, үҙем иҡтисади хәлде өйрәнәм һәм шундай һығымтаға киләм: халыҡтың дәүләт, унан да бигерәк коммерция магазиндарында кейенерлек хәле юҡ, сөнки уларҙа хаҡтар юғары. Магазиндар ҙур штат

тота, күтәргеһеҙ һалымдар түләй, клиенттарҙы хеҙмәтләндереү буйынса ла, идара итеү йәһәтенән дә динозавр кеүек яй ҡуҙғала. Универмагтағы ҡиммәт тауарҙарға ҡарағанда ваҡ коммерсанттар сит илдән алып ҡайтып һатҡан осһоҙ әйберҙәр күпкә тиҙерәк үтә. Уйланым-уйланым да, бер көндө булған бар аҡсамды йыйып, долларға алмаштырҙым һәм тауар артынан Төркиәгә олаҡтым.

Тәүге ике барыуым бигүк уңышлы булманы. Осон осҡа саҡ ялғаным, тигәндәй. Йәнә тирә-яҡтағы хәлде күҙәтеп, шуны аңланым: тауарҙы баҙарҙа һатып хитланып, ваҡытты бушҡа үткәрергә түгел икән, ә уларҙы күмәртәләп һатыусыларға тапшырырға йәки – уныһы тағы ла отошлораҡ – киоск алырға ла бер-ике һатыусы ялларға кәрәк. Үҙеңә иһә тауар артынан йөрөргә – әлеге киоскыға ҡалдыраһың да йәнә сығып китәһең.

Шулай эшләнем дә. Оҙаҡламай бизнес күҙгә күренеп тигәндәй үҙ емештәрен бирә башланы. Иҡтисади белемем күп тапҡырҙар һәләкәттән ҡотҡарып алып ҡалды. Әммә йыш ҡына үҙемдең асыҡ ауыҙлығым, бер ҡатлылығым, ябай халыҡты аңлап еткермәүем, дөрөҫөрәге, уларҙың йәшәйешен белмәүем, «тормошта насар кешеләргә ҡарағанда яҡшыраҡтары күберәк» тип ышаныуым ҡамасауланы, уңайһыҙ хәлгә ҡалдырғыланы. Дөйөм алғанда, әлбиттә, тирә яғымда һәйбәт яҡшы кешеләр күберәк, әммә улар, йыш ҡына өмөтһөҙлөккә бирелгән, ҡулдары төшкән, йәмғиәткә файҙаһыҙ ине. Ә насар кешеләр актив, өлгөр, уҫал, үҙҙәренә кәрәк саҡта күндәм, тыңлаусан, хатта намыҫлы, ярҙамсыл күренә, дөйөм мәнфәғәт өсөн яныуын иҫбат итә белә.

Яҡшының яманды мотлаҡ еңәсәгенә мин ышанып етмәйем. Ялҡау, яй ҡуҙғалыусан, сентименталь яҡшылыҡтың һүлпән энергияһы көсө ташып торған яманды нисек еңһен? Яҡшы һәм насар кешеләр тураһында һүҙ сыҡһа, минең алға ошондай күренеш килеп баҫа: күҙ күреме етмәҫ сикһеҙ үҙәндә ҡабаланмай ғына динозаврҙар йөрөй, улар араһында бәләкәй генә йыртҡыстар – бүреләр ҙә бар. Был йыртҡыстар сос, етеҙ, иң мөһиме, баштарында мәкерле уй: ошо үҙәнгә хужа булып алыу. Улар бер-береһен яратмай, бер-береһе менән ҡанға туҙышып һуғыша, ә баяғы шул уртаҡ маҡсат – үҙәнгә хужа булыу – уларҙы берләшергә мәжбүр итә. Һәм бына үҙҙәренән күпкә ҙур һәм көслө динозаврҙарға күмәкләп ташланалар ҙа берәм-берәм үлтерә башлайҙар. Динозаврҙарҙың һәр ҡайһыһы әлеге ҡанлы күренешкә битараф һәм аңламай аңшайып ҡарап тора, дошмандарына бергәләшеп ҡаршы торорға меҫкендәрҙең баштарына ла килмәй.

Төркиәгә киләһе барыуҙарым уңышлы булды. Халыҡ алған, һәр хәлдә бына-бына ала башларға тейеш тауарҙар алып ҡайттым, һәм улар, ысынлап та, тиҙ арала һатылып бөттө. Шулай ҙа уңыштан баш әйләнмәне, сөнки тынысланһам, баҙарҙағы хәлдәр миңә ҡаршы үҙгәрәсәген яҡшы аңлай инем. Бер нисә йылдан Рәсәйҙә Төркиәнән алып ҡайтылған осһоҙ, әммә сифатһыҙ тауарҙарҙы алмаусы урта синыф барлыҡҡа килгәнен күрҙем. Икенсе яҡтан, Рәсәй үҙе лә үҙгәрҙе, яйлап сифатлы тауарҙар етештерә башланы, илгә төрөк тауарҙарының ағымын туҡтатты.

Һәм мин, төрөк баҙарын ташлап, Ғәрәп Әмирәттәре баҙарына күстем. Унда тауар ҡыйбатыраҡ, уның ҡарауы, сифатлыраҡ ине. Төркиәгә бергә йөрөгән коллегаларым был ҡылығымды аңламаны. «Былай ҙа насар йәшәмәйбеҙ, – тине улар. – Тағы ла яҡшыраҡ буламы икән?» – «Бөгөн һәйбәт, ә иртәгә?» – тиеүемә: «Иртәгә тиклем йәшәргә кәрәк әле», – тип ҡул ғына һелтәнеләр.

«Иртәгә» тиҙ килеп етте. Коллегаларым, күпләп алған төрөк тауарын осһоҙ хаҡҡа һатыу арҡаһында, тиҙ арала бөлдөләр ҙә ҡуйҙылар. Ике йылдан мин ҡаланың экологик йәһәттән таҙа районында ике бүлмәле фатир һатып алдым. Йәнә бер йыл уға ремонт яһау, мебель, башҡа кәрәк-яраҡ алыуға китте. Йәнә бер

йылдан машиналы булдым. Хәҙер әҙерәк тынысланырға ла киләсәк тураһында уйларға мөмкин ине. Минең төп маҡсат – атай-әсәйемде Рәсәйгә күсереп алыу – һаман хыял ғына булып ҡала килде. Улар элеккесә ҡыҫыҡ торлаҡта көн итә, атайҙың бәләкәй генә пенсияһына йәшәй. Оҙаҡламай уларҙың астан үлмәҫ өсөн яйлап йорт йыһаздарын, көнкүреш әйберҙәрен һата башлағанын белдем. Күҙемә йәш тулды, тамағыма төйөр тығылды...

Дөрөҫ, элек атайым эшләгән быраулау контораһында аңдарына килә башлағандар. Етәкселеккә амбициялы, тәкәббер, әммә белемһеҙ, түбән квалификациялы кешеләр килгән. Бер нисә етди аварияннан һуң, предприятие үҙен үҙе юҡҡа сығара башлағас, тегеләр атайыма кәңәш-төңәш һорап килгәндәр, торараҡ ҙур булмаған ставкаға эшкә лә алғандар.

«Тормошобоҙ саҡ ҡына рәтләнә төштө», – тип яҙҙы атай-әсәй һәм үҙҙәре өсөн нык борсолмаҫҡа ҡуштылар. Әммә мин уларға сит-ят ерҙә йәшәүе нисек ҡыйын икәнен бик яҡшы беләм. Ҡартлыҡтарында етеш тормошта йәшәтергә тигән теләгемдән ваз кисмәнем. Шулай ҙа ҡала ситендә баҡсаһы, мунсаһы булған, газ үткән арыу йорт һатып алыу еңел түгеллеген дә аңлай инем. Союз тарҡалғандан һуң халыҡ күҙгә күренеп ярлыланды, ә торлаҡ хаҡы тиҙ темптар менән үҫте.

Бер нисә йыл дауам иткән предприниматель тормошо интуициямды нык үҫтергәйне. Иҡтисадта оҙаҡламай катастрофа буласағын мин асыҡ тоя инем. Ил өсөн фажиғәле ул йәйҙең башында тауарҙарымды йәһәт кенә түбән хаҡҡа булһа ла осороп бөттөм, бурыстарымды ҡайтарҙым, унан, ике киоскымды ла һатып, һатыусыларыма эш хаҡын түләнем. Август урталарында ҡулдағы бөтә аҡсаны үҙем дә аңлап етмәгән бер һиҙем менән ҡабаланып долларға алыштырҙым.

Иртәгәһенә халыҡ «Киндер-сюрприз» тип нарыҡлаған премьер-министр үҙенең шаҡ ҡатырғыс алдаҡ телмәрен һөйләне. Йәнә бер көндән һумдар түбәнгә тәгәрәне. Паникаға төшкән халыҡ банктарға, магазиндарға ташланды. Тәүгеләре «ваҡытлыса» ябылды, икенселәрендә көн һайын хаҡтар үҫте.

Бер көн әхирәтем Лариса ҡунаҡҡа килде. Бынан ике йыл элек беҙ уның менән тауар артынан Ҡытайға барғайныҡ. Бер барғанында ауыр сумка күтәреп имгәнде лә больницала ятып сығырға мәжбүр булды, шунан үҙенең элекке эшенә – мәктәбенә ҡайтты.

Әхирәтемде йогурт менән һыйланым. Ул, ашап ултырған көйө, уның этикеткаһын тикшерҙе.

– Ҡара, беҙҙең һөт комбинаты, ниһайәт, тәмле йогурттар эшләргә өйрәнде, – тип аптыраны ул, – тик этикеткаһы насар. Илебеҙ космосҡа оса, йыһанға спутниктар сығара, ә бына көнкүрештәге ниндәйҙер ябай ғына әйберҙе лә эшләй белмәй. Ғәфү ит, быны сәбәбен мин бер ҡасан да аңлай алманым. Ниндәй төҫһөҙ, примитив этикеткалар йәбештерелгән беҙҙең шарап, һыу шешәләренә. Уларҙы өҫтәлгә ултыртыуы ла оят.

Лариса элекке совет иленең иҡтисади хаталары, мәктәбендәге эштәре тураһында сөкөрҙәне лә, ҡапыл ғына ҡуҙғалып, ҡайтып китте. Ә мин кухня менән кабинет, кабинет менән кухня араһында туҡтауһыҙ йөрөп «Эврика!» тип уйланым.

Иртәгәһенә ял иткән баш, яҡшы кәйеф менән уяндым: артабан ни менән шөғөлләнергә хәл иткәйнем инде – ҡаптар, этикеткалар яһарға тотонам. Мин уларҙы бөтөнләй икенсе төрлө итеп эшләйем: заман талаптарына ярашлыса. «Ой, ҡыйбат бит» тип ҡаршы төшөүҙәре ихтимал. Булһа ни? Шул уҡ йогурт йәки майонез банкыһының хаҡы ун йәки ун нисә тингә генә артасаҡ, уның ҡарауы һатып алыусы өҫтәлен йәмләйәсәк, кәйефен күтәрәсәк. Бына күрерһегеҙ!

Бер аҙна эсендә яҡшы дизайнер таптым, бергәләп ҡеүәтле компьютер, төҫлө принтер, сканер, программалар һатып алдыҡ, офис өсөн бүлмә таптыҡ һәм эшкә keрештек... Йәнә ике аҙнанан мин ҡала һөт комбинаты директорының ҡабул итеүен һораным. Ул минең төҫлө өлгөләрҙе иғтибарлап ҡараны, башын сайҡаны ла кәңәшләшергә урынбаҫарҙарын саҡыртты...

Бер нисә аҙнанан һуң үҙемдең беренсе ҙур заказым менән Мәскәүгә остом. Яңы пландар, уй-ниәттәр, хыял-өмөттәр менән... Юлым уңды. Типографияла бер олпат ир – Стригунков Константин Григорьевич менән таныштым. Ул менеджмент бүлеге начальнигы булып эшләй, нәшриәт бизнесын ярайһы уҡ яҡшы белә. Заказымды ентекләп өйрәнеп, мине тыңлағас, Стригунков һоҡланыуын йәшермәне:

– Идеяларығыҙ шәп, Маргарита Наумовна! – тине ул, хатта маҡтап уҡ ебәрҙе. – Ирҙәрсә фекер йөрөтәһегеҙ. Мин дә һеҙгә бер серемде асайым әле.

Ул типографиянан китергә һәм, урын табып, унда типографиянан сағыштырмаса осһоҙға һатып алған иҫке ҡорамалдарын ҡуйып, үҙенең шәхси эшен асырға ниәтләнгәнен белдерҙе.

– Һеҙҙең бындай заказдарығыҙ минең өсөн бик тә ваҡытлы булыр ине, – тине, – ҙур ҡалаларҙа заказдар күптән таратып алынып бөткән.

Константин Григорьевич миңә оҡшаны. Мыҡты кәүҙәле, алпан-толпан хәрәкәтле был кеше ҡабаланмай ғына, еренә еткереп, дәлилләп һөйләй, араһында ихласлап көлөп тә ебәрә. Ҡатыны, улы бар икән – был хаҡта һүҙ араһында ғына ҡыҫтырҙы, артабан ғаилә темаһына бер ҡасан да кире ҡайтманы.

Беҙ этикетка һәм ҡаптар етештереү производствоһы асырға килештек. Мин Көньяҡ Урал регионында заказдар йыйҙым да, уларҙы эшкәртеп-барлап, Мәскәүгә, Стригунковҡа килтерҙем. Ул үҙенең станоктарын да эшкә екте. Заказдарҙан килгән табышты былай бүлешергә һөйләштек: өстән ике өлөшөн мин алам, бер өлөшөн – ул.

Уртаҡ бизнесыбыҙ ярайһы уҡ уңышлы башланды, тип әйтергә була. Стригунков беҙҙең продукция Мәскәүҙекенән ҡайтыш булмаһын өсөн бөтә көсөн, энергияһын һалды. Табышты иһә заманса яңы техника һатып алыуға тотондо.

Этикеткалар минең заказсыларға оҡшаны. Яйлап улар арттандан-артты, миңә күрше ҡалаларға ла сығырға тура килә башланы. «Нива» машинаһы алдым, уға водитель ялланым. Оҙаҡламай офисты киңәйтергә, йөк машиналарына йәнә ике водитель, бер нисә менеджер йәлеп итергә тура килде.

Стригунковҡа үҙемдең ғаилә хәлдәрен һөйләгәйнем инде, йәғни атай-әсәйемде Рәсәйгә күсереп алыу хыялымды белә ине. Бер көндө, Арбаттағы үҙебеҙҙең яратҡан кафела һөйләшеп ултырғанда, былай тине:

– Беләһегеҙме, Маргарита Наумовна, беҙ арыу табыш алабыҙ, тик ул тулыһынса тиерлек производствоны яңыртыу, киңәйтеү өсөн китеп тора. Мин ҡоролмалар яңыртам, һеҙ йөк машиналары, компьютерҙар, оргтехника алаһығыҙ, штатығыҙҙы киңәйтәһегеҙ. Ҡасанға тиклем шулай барасаҡ? Ҡала ситендә өй һатып алыу – оло бәхет. Бына нимә тәҡдим итәм: һеҙҙең табыштың бер өлөшөн мин долларға әйләндерәйем дә сейфҡа һала барайым. Бер нисә йылдан өйгә етерлек аҡсағыҙ йыйыласаҡ. Етмәһә, бурысҡа биреп торормон.

Минең өсөн был көтөлмәгән һәм бик уңайлы тәҡдим ине. Ҡара иҫәбем буйынса, өйлөк аҡса өс йылда тупланыуы ихтимал. Сираттағы дефолт килтереп бәрмәһә, әлбиттә.

Константин Григорьевич – һөймәлекле ир заты. Төплө белемле, ауыр тормош юлы үткән, минән һигеҙ йәшкә оло. Үҙемдең уға оҡшағанымды һиҙә инем.

Хәйер, минең заказдарым арҡаһында фирмаһын тотҡан кешенең, иғтибарһыҙ һәм битараф булыуы мөмкинме?

Мәскәүҙә үҙемде тыныс һәм иркен тойҙом. Стригунков мине аэропортта ҡаршы ала ла уртаҡ аҡсаға алынған сит ил машинаһына ултыртып ҡунаҡханаға алып бара, ресторанда киске аш менән һыйлай, шунан ғына өйөнә ҡайтып китә. Ошоға тиклем ҡатыны менән таныштырмауы, үҙенең фатирына саҡырмауы ғына сәйер. Дөрөҫөн әйткәндә, уныһы мотлаҡ та түгел һәм кәрәкмәй ҙә. Йомшаҡ яҡтары ла бар ине уның. Мәҫәлән, тәмәкене самаһыҙ күп тарта, һыра ярата, тик виски эсә һәм унан донъяһын онотоп, балаларса күңелсәккә әйләнә. Бер саҡ мин дә ул эсемлекте тәмләп ҡараным, әммә бүтән бер ҡасан да эсмәҫкә тигән ҡарарға килдем. Ҡаты эсемлек эскең килә икән – үҙебеҙҙең араҡынан да яҡшыһы юҡ.

Стригунковтың ҡатын-ҡыҙға ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә икәнен аңлауы ҡыйын ине. Уларҙы ул күҙенә лә элмәгән дә һымаҡ. Ресторандағы ике-өс рюмка вискиҙан һуң тамам эйфорияға бирелә, ҡәнәғәт йылмая башлай, вайымһыҙ ҡарашы менән күрше өҫтәлдәрҙе ҡапшарға керешә. Әммә ҡарашы берәй сибәр ҡатын-ҡыҙға төртөлһә лә, үҙенең ҡыҙыҡһынғанын һиҙҙермәй.

– Миңә булған мөнәсәбәтеңде белгем килә, – тинем дә һалдым бер шулай ресторанда ултырғанда. Беҙ күптән «һин»гә күскәйнек инде.

– Һин бизнеста ла, тормошта ла бик теүәл, тәртипле ҡатын, – тип яуапланы Стригунков. – Унан килеп, белемлеһең, нәзәкәтле кейенәһең, һинең менән рәхәт, күңелле, кеше араһына сығыу ҙа оят түгел.

– Яҡшы партнер икәнем аңлашылды, – Стригунков, хәбәрҙең тайғаҡ боролошон самаларға тырышып, мине иғтибарлап тыңланы. – Ә ҡатын-ҡыҙға булараҡ мөнәсәбәтең нисек?

– Ыңғай, – тине ул оҙаҡ ҡына көттөрөп һәм шарҡылдап көлөп ебәрҙе.

Шулай ҙа ул йомоҡ ине. Һәм был сифат миңә оҡшаманы. Ниңә ғаиләһе, улы, һис юғында киләсәккә пландары тураһында һөйләмәй? Минең, ирһеҙ ҡатындың, күңелен яралауҙан ҡурҡамы? Әллә үҙенең донъяһына индергеһе килмәйме?..

Һорауҙарыма яуап таба алманым. Стригунков, арабыҙҙа килеп тыуған аңлашылмаусанлыҡты, күрәһең, үҙенсә йәйләргә уйланы, әммә бик үҙенсәлекле рәүештә. Бер килгәнемдә рейс байтаҡҡа тотҡарланды, һәм мин Мәскәүгә ярайһы уҡ һуң килеп төштөм. Стригунков ҡаршы алды, был юлы ресторанда түгел, номерҙа тамаҡ ялғаныҡ. Ул миңә һынсыл ҡараны, алдында теремек, күңелсәк, юлдан бөтөнләй ҙә арымаған йәш ҡатын торғанын күргәс, ышаныслы хәрәкәт менән пинжәген систе.

– Шкафҡа элеп ҡуй, – тип кәңәш иттем. – Юҡһа, бөтәрләнер. Һин миндә йоҡларға булдың шикелле?

– Тап шулай, – тиһә лә, Стригунков тура бирелгән һорауҙан ҡаушап ҡалды. – Һин минең уйҙы ҡайҙан белдең?

– Күҙҙәреңдән, – тип яуапланым. – Ир-аттың теләге тыуһа, ул ҡатын-ҡыҙға һынамсыл ҡарай һәм тиҙерәк кейемдәрен сисергә тырыша.

Стригунков текәлеп ҡараны ла ашығып галстугының төйөнөн бушатты. Ирекһеҙҙән көлөп ебәрҙем. Стригунков йәнә аптыраны.

– Мин шаяртмайым... – тине ул. – Ҡалырға рөхсәт итәһеңме?

– Төнгөлөккәме ни?

– Эйе.

– Ҡал, – тинем. – Һин миңә оҡшайһың, тик хәҙер үк ҡатыныңа шылтырат та бөгөн минең янда йоҡларға ҡалғаныңды әйт.

– Ә ниңә ҡатынға шылтыратырға? – тип ғәжәпләнде Стригунков.

– Костя, шулай итһәк, бөтәбеҙ өсөн дә ғәҙел була. Һин минең алда тәүәкәллегеңде, ниәттәреңдең етди икәнлеген күрһәтерһең.

– Шылтыратһаң, оло ғауға сығасаҡ бит, – тип мөгөрҙәне Стригунков һәм ҡыйыулығын шундуҡ юғалтты ла бәлтерәп төштө.

– Ысынлап та мине теләйһең, оҡшатаһың икән, ғауғанан ҡурҡырға тейеш түгелһең. Минең менән бер төн булыр өсөн йәнен шайтандың үҙенә лә һатырға әҙер иргә бирелергә ризамын. Ә һин көнкүрештәге ваҡ ғауға хаҡында һөйләйһең. Етди түгел, Костя.

Тамам юғалып ҡалған Стригунков галстугының төйөнөн тартты, шкафтан пинжәген алып кейҙе. Ишек янында асыулы тауыш менән:

– Һеҙ, Маргарита Наумовна, ҡаты сәтләүек икәнһегеҙ, ә шым ғына йөрөгән провинциалка булып ҡыланаһығыҙ… – тине.

Ишекте уның артынан шарт итеп яптым да шарҡылдап көлдөм. Минең өсөн йәнә бер миф, ҡатын-ҡыҙ күңеле тыуҙырған хыял юҡҡа сыҡты, ә ышана яҙғайным…

Фирмам яйлап киңәйҙе. Аҡса, финанс мәсьәләләрен ярайһы ғына уңышлы алып барҙым, партнерҙар, заказсылар менән мөнәсәбәттә килемдең сығымға ҡарағанда күберәк булыуын ентекле күҙәттем. Әммә бәғзе эштәрҙә көсһөҙ инем. Әйтәйек, миңә, водителдәр машиналарҙы йыш ҡына үҙҙәренең мәшәҡәте өсөн файҙалана, тип әйтәләр. Нимә ҡылырға кәрәк һуң? Водителдәр төнгөлөккә машинаны гаражға ҡуйғанын-ҡуймағанын тикшереп торорғамы, счетчик күрһәткестәрен кис һайын, бигерәк тә йома көндәре, яҙып алырға ла, дүшәмбе килгәс, сағыштырып ҡарарғамы? Әммә бындай эштәр минең өсөн ситен. Һәм бына бер көн миңә хәрби пенсионер, отставкалағы полковник Ишемов Ильяс Фәритович килеп инде. Армияла ул әллә дивизияның, әллә бригаданың штаб начальнигы булып хеҙмәт иткән икән. Һөйләшеү барышында уның гражданкала үҙенә урын таба алмай йонсоғанын, ҙур предприятиеларҙа ла эшләп ҡарағанын белдем. Уның асыҡлығы, күҙҙәренең ихлас ҡарашы миңә оҡшаны. Беҙҙең йәш айырмаһы 23 йыл булып сыҡты. Полковник миңә атайҙарса ҡарай ине һымаҡ.

Ильяс Фәритович иртәгәһенә үк эшкә төштө. Ябай ғына вазифаға билдәләнем: менеджер. Беҙҙең Рәсәй төпкөлөндә ул вазифала оло эштәр ҙә атҡарып була, фирма ишеге алдына ултырғыс сығарып ултыртып, үткән-һүткәнгә реклама ҡағыҙҙары тottороп ултырыу менән сикләнергә лә мөмкин. Тәүге көндәрҙә полковник нимәлер алып китте, нимәлер килтерҙе, командировкаларға йөрөнө, яйлап фирма тормошона эйәләште, өйрәнде. Әммә тиҙҙән мин предприятиеның бөтә хужалыҡ мәшәҡәттәренең дилбегәһе уның ҡулында икәнлеген аңланым. Тап ул беҙҙең бөтә эштәрҙең уртаһында икән: кем ҡайҙа киткән, ниндәй йомош менән, ҡайһы машина ремонтта ултыра, айына нисә литр бензин тотонола, күпме суммаға запас частар һатып алына – тотош күҙ уңында тота. Бер көн ярһыған водитель килеп инде лә өҫтәлгә ғариза һалды.

– Китһен, – тине Ильяс Фәритович. – Ул оятһыҙ әҙәм ял көндәрендә беҙҙең машина менән ауылдар буйлап йөрөп, кешеләргә бесән, утын ташый. Бензин хаҡын түләһәсе, исмаһам!

Яйлап мин уға иң яуаплы эштәрҙе лә ышанып тапшыра башланым һәм оҙаҡламай хеҙмәткәрҙәрҙең:«Ильяс Фәритовичтан һорарға кәрәк» йәки «Быны Ильяс Фәритович ҡына белә», торараҡ «Был эште Ильяс Фәритовичһыҙ атҡарып булмаясаҡ» тип һөйләнгәндәрен ишеттем. Уйлап ҡараһаң, элекке полковник үҙенең армияла тотҡан вазифаһын бында ла биләне лә ҡуйҙы.

Үҙем дә һиҙмәҫтән, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итер алдынан йыш ҡына Ильяс

Фәритовичты кабинетыма саҡырта башланым. Ул етди ҡарашын күҙҙәремә текләп хәбәрҙе иғтибар менән тыңлай, ҡайсаҡ ризалыҡ билдәһе итеп йә баш ҡаға, йә йөҙө боҙолоп ҡаршы төшә.

Шулай ҙа килеп сыға: бөтәһен дә белгән «управ»ка эстә асыу-ярһыу ҡайнай, әммә ул үҙенең фекерен оло түҙемлек һәм эҙмә-эҙлелек менән аңлата, ахырҙа миңә ике ҡулымды ла күтәреп «биреләм!» тиергә генә ҡала. Тик быңдай мөнәсәбәттәрҙең күпкә бармаясағы көн кеүек асыҡ ине.

Бер көн беҙ ысынлап та ғауғалашып киттек. Ильяс Фәритович, ултырған урынынан һикереп тороп: «Девчонка! Тормошта һин нимә аңлайһың? Мине, был донъяны арҡырыға ла, буйға ла гиҙеп сыҡҡан кешене, нисек йәшәргә өйрәтеп ултыраһың. Башҡа бәлә алдым даһа һин, цаца менән!» – тип ҡысҡырып ебәрҙе.

«Цаца»һын әйтмәһә лә булыр ине. Шуныһы оторо ярһытты мине. Етлекмәгәнмен, тимәк. Ырғып торҙом да өҫтәлдәге калькуляторҙы аяғы аҫтына алып бәрҙем һәм боҙҙай һалҡын тауыш менән шыбырҙаным:

– Миңә ҡысҡырмағыҙ, күҙгә төртөп «цаца» тимәгеҙ! Ниндәй ҡырағайлыҡ ул – мин ундай мөнәсәбәтте аңламайым. Ғөмүмән, һеҙ кем? Пенсионер ҡарт, етмәһә, мыжыҡ.

Былай уҡ әйтмәҫкә кәрәк ине, әлбиттә, Ильяс Фәритович шундуҡ тынысланды, ирендәрен тағы ла ныҒыраҡ ҡымтыны, күҙҙәремә туп-тура ҡараны ла хәрбиҙәрсә өҙөк-өҙөк, асыҡ итеп яуапланы:

– Эйе, мин хәрби пенсионер. Һалдат лямкаһын намыҫ менән тарттым, утлы нөктәләрҙә ике тапҡыр яраландым. Насар хеҙмәт иттең, тип бер кем дә ғәйепләй алмай. Ә һеҙҙән китәм. Даими рәүештә урлашҡан ике хеҙмәткәрегеҙҙе яҡлайһығыҙ, әйҙә улар артабан да урлашһын. – Ильяс Фәритович, ишеккә еткәс, хәрбиҙәрсә еңел генә боролдо ла шым ғына дауам итте: – «Һин» һәм «цаца» тигәнем өсөн ғәфү итегеҙ, ҡайсаҡ мин ҡыҙҙарыма шулай тип өндәшәм. Ә ҡалғаны... Биғәйбә. Хушығыҙ, Маргарита Наумовна.

Хәҙер был ипле, һылыу ир ишекте шарт ябып сығып китер ҙә тормошомдан мәңгегә юғалыр, тип күҙ алдыма килтергәйнем... ҡотом осто!

– Китмәгеҙ, зинһар, ташламағыҙ! – тип ялбарҙым. – Мин шундай яңғыҙ... – Урыныма ултырҙым да бәләкәй саҡтағы ише түгелеп илап ебәрҙем.

Ильяс Фәритович яй ғына яныма килде лә баҙнатһыҙ ғына яурындарымдан ҡосаҡланы.

– Һеҙ мине үлтерәһегеҙ. Иламағыҙ, зинһар.

– Ғәфү итегеҙ, «пенсионер», «зануда» өсөн... Һеҙҙе кәмһетергә теләмәгәйнем, шулай килеп сыҡты.

Мине тынысландырырға теләп, Ильяс Фәритович ҡытыршы усы менән сәсемдән һыйпаны. Тағы ла ныҒыраҡ иланым. Ильяс Фәритович бөтөнләй юғалып ҡалды. Мин, күрәһең, күптән иларға тулышҡанмын. Күңелдә был йылдар эсендә әллә күпме үпкәләр, әсе йәштәр йыйылған – уларҙан ҡотолорға, тышҡа сығарырға кәрәк булғандыр. Ильяс Фәритович, әлбиттә, китмәне, яңғыҙымды ҡалдырманы – ул миңә үҙенең өсөнсө ҡыҙы итеп ҡарай ине шикелле.

Нисек кенә сәйер булмаһын, әлеге бәхәс Ильяс Фәритович менән беҙҙе яҡынайтты ғына. Хәҙер мин хатта бәләкәй генә эштәремдә лә «управ»һыҙ башҡара алмайым. Хеҙмәткәрҙәрҙең дә йыш ҡына «Ильяс Фәритович килгәс, фирмала эштәр көйләнде, тәртип урынлашты» тип әйткеләгәндәрен ишетә йөрөнөм. Ҡайсаҡ үҙемдең был бөхтә, йыйнаҡ, эшлекле полковнигыма ҡарайым да, ҡараштарыбыҙ осрашһа, уға йылмаям, яуап итеп дуҫтарса, ягымлы, шул уҡ ваҡытта

саҡ ҡына кинәйәле йылмайыуын күрәм. Күңелемә рәхәт булып китә, һирәкләп уйҙарым гонаһ яғына ла боролоп ҡуя: шундай ҙур йәш айырмаһы булып та мин был кешене ярата алыр инемме икән? Ә кейәүгә сығып, унан бала таба алырмынмы? Бергә йәшәү өсөн ҡатын-ҡыҙға ирҙе ихтирам итеү ҙә етә, мөхәббәт тураһында күптәр хыялланмай ҙа бит... Ильяс Фәритович ҡапыл ғына минең арттан йөрөй башлаһа, моғайын да, уның һөйәркәһе булыуҙан баш тарта алмаҫ инем. Тик был ҡәҙимге «служебный роман» булыр ине: оҡшағанды ситтән эҙләргә ваҡыт юҡ, ә ул бында, эргәлә, янында йөрөй...

Мин уйланырға әүәҫмен, башҡа һыймаҫлыҡ уй-хыялдарға дусар булам. Мәҫәлән, хеҙмәткәремде яйлап ҡына үҙемә ҡаратып алдым, ти. Ильяс Фәритович аһ тип тә әйтергә өлгөрмәҫтән, ирем буласаҡ та ҡуясаҡ. Үҙ көсөмә мөкиббән ышанам. Ә артабан? Миңә өйләнергә теләрме һуң ул? Бына ошонда ята ла инде иң ҙур мәсьәлә. Ильяс Фәритовичтың ауырыу ҡатыны, үҫеп килгән ике ҡыҙы бар. Нишләптер, һуң тыуғандар. Ҡайсаҡ улар атаһы янына эшкә килә, ҡыҙыҡһынып юҡ-бар һорашалар, сөкөрләшәләр, иркәләнеп-яратып уға һыйынышалар. Наҙлыҡай ғына ике нимфетка, әйтерең бармы.

Үҙем дә һиҙмәҫтән күңелдә көнләшеү тойғоһо ярала, мосолман ҡыҙҙары нилектән улай аталарына уғата ылығыусан икән, тип аптырайым. Ә бына ҡатынынан ысынлап көнләшәм. Ул бер ҡасан да эшләмәгән икән, иренә эйәреп гарнизондар буйлап йөрөгән. Хәҙер ҡалала йәшәй, ниндәйҙер сир менән яфалана. Хәйер, етди ауырыуы юҡтыр тип тә уйлайым, уға, моғайын да, бәлә һалыу, яҡшы ирҙең хәстәрен күреү оҡшайҙыр.

Уф, был уҫал, хаҡһыҙ-урынһыҙ көнләшеү! Ул ҡатынды бөтөнләй белмәйем дәһә, бәлки, тормошта бәхетһеҙҙер ҙә... Барыбер уға асыуым килә. Ниңәлер, нилектәндер.

Ғәҙел булайымсы, асыуым шунан: мин тип Ильяс Фәритович үҙенең ауырыу ҡатынын бер ҡасан да ташламаясаҡ. Ундай аҙым яһар өсөн ул үтә тәртипле, намыҫлы, яуаплы. Әммә һөйәр була алыр ине. Тик ундай роль миңә кәрәкме? Юҡ, ул тотошлайы менән тик минеке булһын, булмаһа – бөтөнләй кәрәкмәй.

Тормошта бер генә була торған, баш әйләндергес, хатта үлемдән дә ҡурҡмаған романтик мөхәббәт миңә бер ҡасан да килмәҫме икән ни? Шулай фантазияға бай бер хыялый инде мин. Йыш ҡына ошондай күренеш күҙ алдыма килә: иғтибарлы ирем, өс балам бар, малай һәм ике ҡыҙ. Атай-әсәйем дә беҙҙең менән, улар миңә балаларҙы аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итә. Барыбыҙ ҙа ҡала ситендәге коттеджда йәшәйбеҙ. Эргәлә генә урман, йылға. Урман артында тәпәшәк ҡаялы тауҙар башлана. Иртәнсәк шул тарафтан беҙҙең яҡҡа һөттәй аҡ томан төшә. Ҙур булмаған баҡсабыҙ бар, уны һәр саҡ тәртиптә тотабыҙ. Эт аҫырайбыҙ, ул өйҙө, балаларҙы һаҡлай.

Ирем менән ҡалала эшләйбеҙ, эштән һуң ул мине фирманан килеп ала. Юлда һөйләшеп һүҙебеҙ бөтмәй, юҡтан ғына сәбәп табып көлөшәбеҙ. Бәғзе мәлдәрҙә үҙ уйыбыҙға батып өндәшмәй киләбеҙ, көҙгөлә ҡараштарыбыҙ осраша. Ниһайәт, урман артында тәпәшәк тауҙар теҙмәһе күренә һәм беҙ үҙебеҙҙең ояға боролабыҙ. Ҡаршыбыҙға болдорҙан балалар йүгерешеп төшә, улар артынан – аҡһайтуҡһай, атайым менән әсәйем... Ял көндәре күмәкләп баҡсала эшләйбеҙ, төшкө аштан һуң урманға йә яланға йөрөргә сығабыҙ. Ә кискеһен икенсе ҡатҡа күтәреләбеҙ ҙә музыка тыңлайбыҙ, балалар ҡатнашлығында концерт ҡуябыҙ. Төнгә ҡарай кескәйҙәр йоҡларға таралыша. Беҙ, ололар, тормош хаҡында һөйләшеп-гәпләшеп оҙаҡ ултырабыҙ әле... Бына шундай идиллик күренештәрҙе пәйҙә итә минең башы-ҡойроғо булмаған хыялым...

Ә хәҙер тормошомда булған иң етди һынау тураһында һөйләйем. Ул хәл Екатеринбургта булды. Ҡалаға беҙ төш алдынан килеп еттек. Бер фирманан ҙур ғына заказ өсөн аҡса алырға кәрәк ине. Фирма ишеген асырҙан алда сәғәткә күҙ һалдым, унан тәнәфескә тиклем байтаҡ ваҡыт бар әле, өлгөрөрмөн, тигәнде аңлатып тыныс ҡына ултырған Ильяс Фәритовичҡа ҡараным. Ул хуплап эйәк ҡаҡты ла, ҡайтыр юл алдынан бер аҙ ял итәм тип, машинала ҡалды, ә мин эскә инеп киттем.

Бындағылар менән мин бер нисә йыл эшләйем инде. Хеҙмәткәрҙәре етди, эшсән, бер-беребеҙгә ышанабыҙ. Ә бына миңә аҡса бирергә тейешле йылғыр ҡарашлы, аҡһыл сәсле менеджер егетте белмәйем, беренсегә күреүем. Яңы эшләй башлағандыр, күрәһең. Ул ике төргәккә бәйләнгән егерме мең долларҙы өҫтәлгә сығарып һалды ла, ведомосҡа ҡул ҡуйҙырып, хәйерле юл теләне.

Ҙур сумма аҡса йөрөтөргә яратмайым, әммә был долларҙар әлеге ваҡытта бик кәрәк ине – Стригунковҡа, Мәскәүҙәге йәнә бер типографияға бирәсәгем бар. Константин Григорьевич бына бер нисә көн рәттән борсолоп шылтырата һәм ҡабаландыра: картон, ҡағыҙ алырға, эш хаҡы түләргә кәрәк, тип аңлата. Мин аҡсаларҙы сумочкама һалдым, егет менән хушлашып, коридорға сыҡтым. Тик, косметичкамды онотоп ҡалдырғанымды ҡапыл иҫемә төшөрөп, кире керҙем. Кергәс, ғәфү үтендем һәм шунда әлеге аҡһыл сәсле егеткә иғтибар итә ҡуйҙым бит: ул ҡабалана-ҡарһалана кеҫә телефонының кнопкаларына баҫҡылай ине. Мине күргәс, ҡурҡҡандай, телефонын ташланы ла яһалма рәүештә йылмайҙы. Уның был ҡылығы, билдәле, миндә шик тыуҙырҙы.

Ильяс Фәритович руль артында йоҡомһорап ултыра ине. Машина ишеген асып ябыуыма һиҫкәнеп, ул миңә ҡараны, ҡаршылағы подъезды, урамды күҙенән үткәрҙе, ҡулымдағы йыуан сумканы, хәүефһеҙ йөҙөмдө күргәс, тынысланды.

– Ҡапҡылап алабыҙмы? – тип һораны ул, машинаны ҡуҙғатҡас.

– Юҡ, ҡайтҡас...

Бындай ҙур аҡса менән йөрөгәндә бер ҡайҙа ла туҡталмауың хәйерле – быны үҙемдең, башҡаларҙың тәжрибәһе буйынса ла яҡшы беләм.

Ярты сәғәттән ҡаланы сығып, оло юлға төштөк. Ильяс Фәритович машинаны ярайһы уҡ шәп ҡыуа ине – спидометрҙың теле «йөҙ»ҙән аҫҡа төшмәй. Алда күренгән тауға ҡарай еләбеҙ. Юл буш, тирә-яҡ гел бер төрлө. Әлеге тауға еткәс кенә ҡыҙығыраҡ була башланы тәҙрәнән ҡарап барыуы. Ошо зәңгәр тауҙарҙы артылғас, үбеҙҙең ватан ере башлана.

Ильяс Фәритович йыш ҡына ҡабырғалағы көҙгөгә ҡарап ала.

– Ниңә артҡа ҡарайһың? Берәй шикле нәмә бармы әллә? – тип һораным, хафаланып.

– Арттағы ҡара «Тойота» йәнде көйҙөрә, – тип яуапланы ул, йәнә көҙгөгә күҙ һалып. – Ҡаланан уҡ эйәреп килә. Шәберәк барып ҡарайым, булмаһа.

Ильяс Фәритович газ өҫтәне һәм шикле сит ил машинаһын артта ҡалдыра башланы. Байтаҡ шулай барҙыҡ, әммә юл тауға табан булғас ни, оҙаҡламай тиҙлек кәмене, «Тойота» беҙҙе ҡыуып етте лә көтмәгәндә юлды быуып, алға килеп туҡтаны. Кабинанан өс ир сыҡты. Берәүһе ҡот осмалы ине: тәпәш, ҡап-ҡара, киң яурынлы. Спортсмен-көрәшсе икәне күренеп тора. Мин уны «Көньяҡ кешеһе» тип атаным үҙемсә. Икенсеһе оҙон кәүҙәле, яшыҡ, шул уҡ ваҡытта сибәр, йәш. Уға ла исем таптым – «Славянин». Уларҙың артында ҡыҫҡа сәсле, хәрәкәтсән, бәләкәй битле, малай ҡиәфәтле берәү бөтөрөлә. «Хорек» – шул ҡушамат сәпәлде уныһына. Көньяҡтыҡы беҙҙең машинаға яҡын уҡ килеп, ҡабаланмай ғына киң күн курткаһын ысҡындырҙы. Куртка аҫтында автоматтың һалҡын ҡара көбәге ялтлап китте.

– Бандиттар! – тип шыбырҙаны Ильяс Фәритович. – Эләктек, тик сәбәләнмә, тыныс бул, ҡурҡҡаныңды һиҙҙермә.

Славянин машинаны әйләнеп сыҡты, шунан арҡама пистолет терәне. Хорек әле бер, әле икенсе иптәше янына барҙы, бәләкәй йөҙө тартышты, үҙе ҡулындағы килбәтһеҙ обрезды нишләтергә белмәне. Шунан уны эсенә ҡыҫты ла Көньяҡ артына барып баҫты. Уныһы, күрәһең, быларҙың башлығы ине.

– Ти – и – хо! – тине бойороҡло ҡалын тауыш менән Көньяҡ кешеһе, шунан минең яҡ ишекте асты, артҡы урынға күсеп ултырырға ишараланы.

– Бистро! – Көньяҡ юлбаҫары автомат көбәген Ильяс Фәритовичтың ҡабырғаһына терәне лә ҡарашы менән яҡындағы урман юлына күрһәтте. – Аңланыңмы, кәзә тәкәһе? Аңламаһаң, иҙмәңде иҙәм, дуршлаг яһайым. Ә һин, сука, ауыҙыңды асып ҡына ҡара. – Ул, кәкре ҙур танауы, эре тештәре менән имәнесле тойғо уятып, миңә боролдо. – Былай арыу ғына күренәһең, ә, кәнтәй...

Ильяс Фәритович яй ғына урман юлына боролдо, шунан тауышын бик күтәрмәй генә бандитҡа былай тине:

– Кацо, ҡатынды мыҫҡыллап тағы берәй һүҙ әйтһәң, автоматың бар тип тормам, белдеңме?

– Һин айҙан төштөңмө әллә, кәзә тәкәһе? – Бындай ҡыйыулыҡты көтмәгән Көньяҡ Ильяс Фәритовичтың был һүҙҙәренә тамам аптыраны. – Минең кем икәнде беләһеңме?

– Белмәйем, белергә лә теләмәйем, – шундай уҡ тигеҙ, тыныс тауыш менән яуапланы Ильяс Фәритович. – Өнөңдө тыҡмаһаң, машинаны ҡаянан төшөрөп ебәрәм.

Кацо текә юлға ҡарап алды, хәбәрен туҡтатты. Тегеләрҙең машинаһы ҡалған ике бандит менән беҙҙең арттан килә ине. Кескәй аҡланда Көньяҡ туҡтарға бойорҙо. Шунан миңә боролдо ла ҡулын һуҙҙы:

– Аҡсаны давай! Бистро!

Өндәшмәй генә сумкамды уға һондом. Көньяҡ уны ҡабаланып асты, ике төргәкте тубығына һелкеп төшөрҙө.

– Бөтәһе лә теүәл, – тине ул янына килеп еткән иптәштәренә.

«Фирмала наводчик бар. – Башыма ошо уй бәрҙе. – Аҡ сәсле менеджер, шул ғына шылтыратҡан. Вәт сволочь!»

– Беҙ һеҙҙе ебәрәбеҙ. – Көньяҡ ауыҙынан һүҙҙәрҙе һығып сығарҙы. – Телең өсөн кәрәгендә лә бирергә булыр ине. Милицияға әйтеп кенә ҡарағыҙ! Шәхсән үҙем ғаиләгеҙҙе һуйып сығасаҡмын. Аңлашылдымы?

Ильяс Фәритович өндәшмәне. Мин иһә ҡурҡышымдан ни тере, ни үле ултырам. Банда башлығы ҡапыл мине иҫенә төшөрҙө.

– Ә һин сыҡ, һүҙ бар, – тип бойорҙо ул. – Бигерәк сибәрһең, күҙҙәрең ана нисек уйнап тора.

Ул Славянинға нимәлер шыбырҙаны ла мине елтерәтеп машинанан төшөрҙө һәм ҡыуаҡлыҡтар яғына өҫтөрәне. Уға Хорек эйәрҙе.

Бындай ҡурҡыныс минуттарҙы кисергәнем юҡ ине әле. Көньяҡ кешеһе мине ергә йыҡты ла күлдәгемде өҙгөләй башланы. Мин бөтә көсөмә ҡаршылаштым, тырнаштым, юлдан үтеп барыусылар, бәлки, ишетерҙәр тип ҡысҡырҙым. Хорек, әшнәһенә ярҙамлашып, ҡулдарымдан тотто, ҡайырҙы. Көрмәкләшә торғас, бер мәлгә генә бармаҡтарын йомшарткайны, һыңар ҡулымды тартып алдым да туҡтауһыҙ тартышҡан хәшәрәт йөҙөнә талпандай йәбештем. Теге ауыртыныуҙан ҡысҡырып ебәрҙе, шунан башыма һуғырға тотондо. Асыу өҫтәлмә көс бирҙеме, тегене тибеп ауҙара алдым.

– Әйҙә, тәүҙә һин, – тип ҡысҡырҙы башлыҡ егеткә. – Бистро!

Хорек ҡабаланып ыштанын төшөрҙө лә минең өҫкә эйелде. Үҙе ауыр итеп мышнай, ҡалтырана. Мәшәҡәтләнә торғас, боттарыма йылы, йәбешкәк шыйыҡлыҡ ағып төштө.

– Кит, мужик түгел икәнһең! – Көньяҡ ҡырағай тауыш менән көлдө. – Эшкинмәгән.

Мышнаған егет, оялышынан күҙҙәрен йәшерә-йәшерә, ҡулдарымды тотто ла ергә ҡыҫты. Хәҙер минең алға Көньяҡ үҙе тубыҡланды.

«Бөттөм... харап итә, үҙ-үҙемә ҡул һалырға ғына ҡала, – тип уйланым, һәм һуңлаған бер фекер башҡа бәрҙе. – Ильяс, ҡәҙерлем, ниңә өндәшмәйһең? Ҡысҡырһаң ине, исмаһам, ярҙамға килһәң ине...»

Ҡапыл ағас ботағы һынғандағы һымаҡ тауыш ишетелде, һәм Көньяҡ лап итеп минең өҫкә ауҙы. Ерәнеп, уның ҙур кәкре танаулы йөҙөнә ҡулдарымды терәнем дә, тын ала алмай, көсһөҙ генә ҡысҡырҙым. Мәсхәрәләргә маташыусының маңлайында бәләкәй генә ҡыҙыл тап күреп ҡалдым. Быны этеп бер яҡҡа саҡ ауҙарҙым да аҫтынан сыҡтым. Эргәлә Ильяс Фәритович баҫып тора һәм иғтибар менән Хоректы күҙәтә ине. Унылы, тороп ҡасыу һәм урман эсенә кереп йәшенеү урынына, үлән араһында ятҡан автоматҡа һикерҙе. Алып тоҫҡарға ла өлгөрҙө, тик Ильяс Фәритович ике тапҡыр атып ебәрҙе, – теге ҡапыл бер яҡҡа ҡыйшайҙы ла үләнгә ҡоланы.

Ильяс Фәритович мине күтәреп торғоҙҙо ла «Нива»ға алып барып ултыртты. Машина эргәһендә Славянин ята ине.

– Мушкала тотоп тик торҙо бит, стервец, – тине Ильяс Фәритович тамаҡ төбө менән, – тауышыңды ишеткәс, тынысһыҙлана, борғолана башланы, теләге ҡуҙғалды, ахыры. Мин, уға сигарет тәҡдим иткән булып, бардачокка тығылдым.

– Эйе, эйе, – тип хәтерләнем мин. – Ул финка өсөн мин һеҙҙе гел генә, гаишниктар табыр ҙа бәйләнерҙәр, тип әрләй торғайным, тимәк, бөгөн килеп кәрәге тейҙе.

– Сумочкаңды алыҫҡараҡ йәшер. – Ильяс Фәритович аяҡ осо менән бандиттың мәйетен төрткөләне, тирә-яғына ҡаранды ла: – Быларҙы күмергә кәрәк, – тип өҫтәне.

– Күмергә? – мин аптыраным. – Ерләйбеҙ ҙә бер нәмә лә булмағандай китәбеҙ ҙә барабыҙмы?

– Милицияға әйтергә уйлайһыңмы әллә? – тип ҡоро ғына һораны Ильяс Фәритович. – Беҙҙән һорау алыуҙарын, был бандиттарҙың дуҫтары менән таныштырыуҙарын теләйһеңме? Ә улары беҙҙең адрестарҙы беләсәк тә подъезда засада ойошторасаҡ.

Мин өндәшмәнем. Ильяс Фәритович һай ғына соҡор ҡаҙҙы ла мәйеттәрҙе берәм-берәм шунда һөйрәп төшөрҙө, өҫтәренә ҡоралдарын ташланы һәм күмеп ҡуйҙы.

Бер нисә минуттан оло юлға боролоп сыҡтыҡ.

– Ильяс Фәритович, һеҙгә ҡыйынмы? – тип һораным ҡалаға керер алдынан.
– Өс кешене үлтерҙегеҙ...

Ул оҙаҡ ҡына өндәшмәй килде, шунан теләр-теләмәҫ кенә:

– Профессиям буйынса мин һалдат. Әйтәйек, мусорщик һымаҡ. Һаҫып ятҡан сүп-сарҙы йыйыштырыуы күңелле эш түгел, әммә уны кемдер эшләргә тейеш бит, – тип яуапланы.

Юлдағы хәлдең бөтә асылы башыма иртәгәһенә генә барып етте. Бер яттым, бер торҙом, йоҡларға тырышып ҡараным, өйҙә торған ике көндә уны онотҡом, хәтерҙән юйғым килде. Өсөнсө көнөнә мине алырға үҙенең «Москвич»ында Ильяс Фәритович килде. Бер ниндәй уйһыҙ, тойғоһоҙ, буш күңел, арыған баш

менән саҡ сығып ултырҙым машинаға. Бер-беребеҙгә ҡараштыҡ та өндәшмәнек. Ильяс Фәритович машинаһын ҡуҙғатты.

...Бер нисә мәртәбә төртөлдөм беҙҙе ғазаплаған бандиттарҙың гәзиттә баҫылған фотоларына. Яҡындары, белеүсе-күреүсе булһа, ире, ағаһы, улы тураһында нимә лә булһа хәбәр итеүҙәрен үтенә. Мин Хорек тип атаған егет тураһында бигерәк тә күп яҙалар. Уның фотографияһына ҡарайым да ошо йәш ҡәбәхәттең мине нисек туҡмауын, көсләргә маташыуын иҫемә төшөрәм, кеше тәбиғәтенең нисек ҡатмарлы, йыш ҡына ҡатлы-ҡатлы булыуы хаҡында уйлайым. Бына ул малай үҙенең ғаилә ағзалары араһында ултыра, бәләкәй, таҙа, бөхтә, әйтерһең дә, фәрештә. Ә бит тап ул, урамға сығыу менән, үҙе һымаҡ хаяһыҙ бәндәләргә ҡушылып, тамуҡ ялҡынына әйләнә...

Миңә 32 йәшемдә мәңгелек хаҡында уйларға иртә әле. Эш араһында саҡ ҡына ваҡыт булһа оҙайлы командировкаға китәм, унда мәшәҡәт табыла, уйланырға форсат ҡалмай. Өйҙә тик ултырһам, кем мин, ни тип йәшәйем, тигәнерәк һорауҙар борсой башлай. Юҡ, элекке рус йәмғиәтен борсоған «Нимә эшләргә?» тигән иҫке һорау уйландырмай мине, сөнки уныһын яҡшы беләм, уны үҙем өсөн хәл иткәнмен. Беҙҙең бөгөнгө йәмғиәттең был мәсьәләгә мөнәсәбәте миңә ҡыҙыҡ түгел. Ундай һорауҙар менән, әйҙә, хөкүмәт шөғөлләнһен, ул шөғөлләнмәһә – йәш парламент.

Ғүмер, йән ғәзизлеге уйға һала мине. Беренсе тапҡыр тауҙағы теге ваҡиғанан һуң бәйләнде миңә был халәт. Ул саҡта беҙҙе үлтергән булһалар, ошо көндә йәндәребеҙ ҡайһы тарафтарҙа йөрөр ине икән? Үткән тормошобоҙ берәй кемгә ҡыҙыҡ булыр инеме лә, ҡылып өлгөргән яҡшы йәки насар ҡылыҡтарыбыҙ ниндәй хөкөмгә дусар ителер ине? Теге донъяла нимә менән шөғөлләнер инек? Бүтән донъяларға сығып китер инекме, әллә, ергә яңынан ҡайтып, өр-яңы тормош башлар инекме?

Был һорауҙар менән ҡаңғырыу файҙаһыҙ икәнен аңлайым. Әммә аҡыл аңлағанды йөрәк ҡабул итмәй. Ул баш етмәҫлек һорауҙарға ла барыбер яуап табырға тырыша. Һөҙөмтәлә йыш ҡына зиһен офоғонда ошондай күренеш хасил була.

...Тормоштоң төп юлдарынан буддистар, иудейҙар, христиандар, мосолмандар атлай. Ошо төп юлдарҙан меңдәрсә һуҡмаҡтар айырылып сыға. Улар, әлеге һуҡмаҡтар, оло юлдар менән йәнәш тә бара, ситкә лә тартыла. Шундай шәхестәр була, улар оло юлды ла, әҙер һуҡмаҡты ла һанға һуҡмай, танымай, күрмәй, үҙһүҙләнеп ҡыуаҡлыҡтар, тәрән соҡор-саҡырҙар, ҡалҡыулыҡтар аша үҙ юлын һала, ҡул-аяҡтарының, биттәренең ҡанға туҙыуына ла иғтибар итмәй, ныҡышмалы алға барыуын белә. Уларҙың маҡсаты – ҙур һыуға барып етеү. Әлеге үҙһүҙлеләр шулай уйлай һәм шуға ышана. Ҡайһылары артынан һирәкләп булһа ла эйәреүселәр ҙә табыла, әммә улар тиҙлеккә, ҡаршылыҡҡа түҙмәй йә тороп ҡала, йә үҙҙәренә еңелерәк яңы һуҡмаҡ таба. Кешеләр һәм юлдар – миллиондарса улар. Ә хаҡлыҡ – берәү генә, уға алып барыр юл ифрат ауыр, ҡатмарлы. Бөйөк күрәҙәселәр уға барып еткән һәм серҙең асылына төшөнгән , тигән ышаныс та юҡ. Улар, уҙа барһа, юлдың башын ғына күрһәткән, ә уны аҙағынаса үтеү һәм хаҡлыҡтың һыуында аяҡтарыңды сайҡау хыялын ерҙәгеләрҙең бик күп быуынына көҫәйәсәк әле. Ошо осһоҙ-ҡырыйһыҙ оло юлдың һәр сатында кешене яңы күрәҙәселәр, яңы һынауҙар көтә булып сығамы, улайһа? Йыһандың сиге булмаған һымаҡ, оло юлдың да ахыры булмаһа, нишләргә? Кешелек донъяһының, хәйер, ниндәй ҙә булһа икенсе бер донъяны, хаҡлыҡты бер ҡасан да белмәүе, белә алмауы – ҡурҡыныс барыбер ҙә.

Бына ошондай уйҙарға тарыйым юлда, юлда ғына түгел, эштән буш сәғәттәрҙә лә. Ҡыҙҙарға университет белеме бирергә кәрәкмәй ул, уйға батып йөрөп, үҙҙәренә тәбиғәт инселәгәнде – сәләмәт балалар табыуҙы, шул арҡала кешелекте алға этәреүҙе онотоуҙары ихтимал.

Ильяс Фәритович минең уң ҡулым булып китте. Ул фирма өсөн ҙур һәм ҡатмарлы эштәрҙе атҡарып сығырға һәләтле, шул уҡ ваҡытта нисектер күләгәлә лә ҡала белә. Тағы ла бер һәйбәт сифаты бар: юҡ-бар һөйләнеп йөрөмәй. Бәләкәй фирмала был да бик мөһим. Яйлап Ильяс Фәритовичҡа мин фирма эшенән тыш та йомоштар ҡуша башланым.

– Һеҙҙә тормош тәжрибәһе лә, эшкә һәләт тә бар, үҙегеҙҙең эште аса алыр инегеҙме? – тинем бер көн мин уға.

Ул ҡәтғи рәүештә баш сайҡаны.

– Мин – тыумыштан башҡарыусы. Эргәмдә көслө шәхес булғанда ғына эшләй алам.

– Йылы һүҙегеҙ өсөн рәхмәт, – тинем, ә үҙемә уңайһыҙ булып китте.

– Был комплимент түгел, дөрөҫө шул, – тип ҡаршы төштө Ильяс Фәритович. – Бер нисә йыл элек үҙ эшемде асып ҡарағайным инде, шведтар Полтава янында янған һымаҡ, мин дә дөрләп яндым. Шул хәлдәрҙән һуң лидерлыҡтан ваз кисергә хәл иттем. Бөгөн дә шул уйҙамын.

– Тормошта һеҙҙең һымаҡ үҙ урынын белеүселәр күберәк булһа икән, – тип көрһөндөм. – Түрә креслоларында күпме буш ҡыуыҡ етәкселәр ултыра. Күбеһендә талант урынына – амбиция ғына.

– Улар булмаһа, беҙҙең менән кем етәкселек итә? – тип көтмәгәндә яҡлап сыҡты әлеге «буш ҡыуыҡтар»ҙы Ильяс Фәритович. – Аҡыллы, намыҫлы кешеләр бер ҡасан да власҡа ынтылмай. Улар властың ҡурҡыныс наркотик икәнен бик яҡшы аңлай. Көндәлек тормошта ҙур вазифалағы кешеләрҙең ни эшләгәнен күреп торабыҙ бит. Креслоға ултырыу менән ябай кешеләр тураһында бөтөнләй оноталар ҙа данға, малға мөкиббән китәләр.

– Бындай ҙа оҙон сығышты быға тиклем һеҙҙән ишеткән юҡ инем әле, – тип көлдөм мин.

– Илһам килде. – Ильяс Фәритович та көлдө.

Ул көн беҙ эш менән Ырымбурҙан ҡайтып килә инек. Хәҙер мин йыш ҡына водителде фирмала ҡалдырам да юлға Ильяс Фәритовичты алам. Уның менән ҡыҙыҡ та, ышанyслы ла.

Ильяс Фәритович ҡәнәғәтһеҙ төҫ менән баҫыуға ҡарап килә.

– Нимә тураһында уйлайһығыҙ? – тип һораным.

– Үҙемдең атай-бабайҙар тураһында, – тип яуапланы ул. – Уларға һәр ҡасан ер биләү зарур булған, улар ер талап итеп, дөрөҫөрәге, баҫып алынған ерҙәрен ҡайтарыуҙарын даулап, батшаға ҡаршы әллә күпме ихтилалдар күтәргән. Пугачев беҙҙең ер-һыуҙарыбыҙға теймәҫкә вәғәҙә бирҙе, уны тап шуның өсөн яраттыҡ. Ельцинды иһә тағы ла нығыраҡ яраттыҡ, сөнки ул, суверенитетты күпме кәрәк, шунса алығыҙ, тине. Ана, хәҙер ҡара инде, – Ильяс Фәритович ҡулдарын баранканан ысҡындырып йәйеп ебәрҙе. – Ер йүнләп һөрөлмәгән дә, йүнләп сәселмәгән дә, көҙ уңыш йыя алалармы, юҡмы бынан? Әллә фуражға ғына сабып аласаҡтармы – шулай уҡ билдәһеҙ. Ни өсөн ер бер кемгә лә кәрәкмәй булып сыҡты һуң әле? Шуны һис аңлай алмайым.

– Мин дә аңламайым. Берәй төрлө иҡтисади сәбәптәре барҙыр, бәлки, ерҙә эшләү хәҙер табыш килтермәйҙер.

– Халыҡты ерҙән айырҙылар – сәбәбе шул.

Бына ошондай әңгәмәләр менән юлда ваҡытты уҙғарам аҡыллы юлдашым менән.

Йәнә үҙемде йәлләргә теләйем һәм үҙемдең ятраҡкан сырхауыма әйләнеп ҡайтам. Миңә утыҙ ике йәш. Ҡатын-ҡыҙ өсөн хәтәр йәш. Ғаилә ҡорорға кәрәк. Йәки ирһеҙ бала табырға. Был донъяла яңғыҙ ҡалғы килмәй. Атай-әсәйем дә ейән йәки ейәнсәр көтә. Мин уларҙың өмөтөн һис алдай алмайым, хаҡым юҡ. Хәйер, хәл иттем инде: кейәүгә сыға алмаһам да, мотлаҡ ҡыҙ табасаҡмын. Бының өсөн һау-таҙа, аҡыллы, гендары яҡшы берәй ир кәрәк. Шундай ир миңә ҡыҙ бүләк итергә тейеш! Башҡаса унан бер нәмә лә кәрәкмәй. Ҡыҙыма әсәй ҙә, атай ҙа – үҙем булырмын. Өҫтәүенә, олатаһы ла, өләсәһе лә була бит әле. Быныһы баланы ҡарау, тәрбиәләү эшен күпкә еңеләйтә...

Шулай ҙа, үҙекәйемде йәлләүемде, илаҡ сентименталлекте ташлап, мәсьәләгә һалҡын аҡыл, айыҡ баш менән ҡарарға тырышам. Әйтәйек, эшем бар – аша-та, кейендерә. Мәскәүҙә Стригунков бар, ул атай-әсәйемде Рәсәйгә алып ҡайтыу өсөн аҡса һала бара, бер йылдан етәрлек сумма йыйыласаҡ һәм үҙемдең изге бурысымды үтәйәсәкмен.

Төҫкә-башҡа ла бигүк йәмһеҙ түгелмен шикелле. Һәр хәлдә байтаҡ ир-егет дуҫлашайыҡ тип арттан йөрөй. Шуға ла үҙемә йыш ҡына: «Рита, күп ҡойроҡ болғама, поезың китеп бара, йәш ҡыҙҙар һымаҡ мөхәббәт, ниндәйҙер принц көтөп йөрөмә, тирә-яғыңа ҡара ла һайлап ал берәй ирҙе», – тим.

Миңә ҡарап уфтаныусы ирҙәрҙең яртыһы өйләнгән, ғаиләләре бар, икенсе яртыһы – айырылған. Күптәрен мин шәхес булараҡ бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмайым да. Алдарында етеш тормошта көн иткән һылыу бисә – уларға шуныһы ла баштан ашҡан. Етмәһә, балаһыҙмын.

Ҡайсаҡ уйлап ҡуям: яҙмышыма яҙыр ул ир минең арттан йөрөүселәр араһында юҡтыр ҙа, ә бәлки, эргәмдәлер, күҙгә салынмай ғына йөрөйҙөр, үҙ сәғәтен, минең сәғәт еткәнен сабыр ғына көтәлер. Бындай уйҙар башҡа килһә, мин үҙемдең эргәлә һәм бер ни тиклем алыҫтараҡ йөрөгән ир-ат араһында «инвентаризация» үткәрә башлайым: иғтибарлап йөҙҙәренә бағам, ҡараштарын тотам, хәбәрҙәрен тыңлайым. Шул рәүешле яҙмышымдың серле һәм йәшерен ымдарын аңларға тырышам.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мин осрашып йөрөгән, һөйләшкән, көнкүрештә, эштә аралашҡан ирҙәр барыһы ла ҡәҙимге. Береһенең дә башына, бынау энергиялы, егәрле, сос ҡатынға аҡса һәм уңыштан башҡа тағы нимәлер кәрәк икән, тигән уй инеп тә сыҡмай шикелле.

Мин яңғыҙ ҙа йәшәй алам. Әммә яңғыҙ инә бүре лә тәбиғәт ҡанундарына буйһона. Уға өң-оя кәрәк. Ә ояла хужа булырға тейеш, йәшме ул, ҡартмы, уныһы мөһим дә түгел, тик үҙенең ғаиләһен туйҙырырлыҡ һәм һаҡларлыҡ көсө булһын. Хәҙер мин әҙәбиәт аша ла, тормошта ла никахтарҙың иҫәп-хисап буйынса төҙөлгәндәренең күплегенә төшөнә башланым. Был – кешеләрҙең боҙоҡлоғонан түгел, ә уларҙың һәр ҡайһыһының йәшәгеһе килә, ә битараф яҙмыш берҙәнбер, ятраҡкан, ҡабатланмаҫ кешене табырға мөмкинлек бирмәй. Хәс тә ҙур универсаль магазиндағы ише: зиннәтле залдар буйлап йөрөйһөң, күҙҙең яуын алырлыҡ йөҙҙәрсә күлдәктәр күрәһең, тик уларҙың һиңә хәжәте юҡ. Ә бит бөгөн кис ҡунаҡҡа саҡырылғанһың, үҙеңдең дуҫтарыңды, коллегаларыңды яңы күлдәк менән аптыратҡың килгәйне лә, барып сыҡмаҫҡа итә. Шунан, тамам өмөтөң өҙөлөп йәнә һайлайһың да булғанынан иң яҡшыһын алаһың. Ҡунаҡта күҙеңде күтәрмәй ултыраһың, көҙгө алдына бармаҫҡа тырышаһың, сөнки үҙеңде кеше күлдәген кейеп килгән кеүек тояһың. Ә нишләмәк? Тимәк, миңә ирҙе лә булғандары араһынан һайларға тура килә. Эсмәһә, ҡул күтәрмәһә ярай инде.

Шулай ҙа «32» һанынан уттан ҡурҡҡандай ҡурҡмайым. Мине бүтән һан – «40» ҡурҡыта. Кемдер хаҡында «Анау ҡырҡ йәшлек ҡатын байтаҡҡа йәшерәк күренә» йәки «Ҡырҡ йәшлек Наталья Н. саҡ аварияға эләкмәгән» һымағыраҡ хәбәрҙәр ишетһәм, миңә оло ҡатындар хаҡында һүҙ барған һымаҡ тойола башлай. Бер ҙә ҡырҡ йәшлек ҡатын булғым килмәй, эйе, мин «40» һанынан ҡурҡам...

Хәҙер күңелемдәге иң ҙур сер хаҡында. Бер көн мин эштән үҙем дә аңламаған сәйер бер кәйефтә ҡайттым. Ашағы ла килмәй, гәзит уҡығы ла, телевизор ҡарағы ла. Хатта нимәлер уйларға ла теләгем юҡ. Сәйер хәлемде арығанлыҡҡа япһарып сисендем дә йылы юрған аҫтына сумдым. Оҙаҡламай йоҡоға ла талдым.

Төн уртаһында ниндәйҙер сәйер тойғо менән уяндым. Юрған аҫтынан сығып, бүлмәнең бер мөйөшөнә текләп ятам. Бер мәл мөйөштән ҡапыл нур көлтәһе ялтырап китте лә аяҡтарыма килеп ҡаҙалды. Нур бысаҡ йөҙөләй йоҡа ғына, әммә ныҡ яҡты ине. Мин аптырап нурға текәлдем, ҡурҡытып-өркөтөп ҡуймайым тип, яй ғына ҡалҡындым да, үҙ-үҙемде лә аңғармай, ниңәлер күлдәгемде кейҙем, шунан, эйәргә ултырған кеүек, нурҙың өҫтөнә атланып ултырҙым да яй ғына шыуып диванға төшөп киттем. Әллә төштөм, әллә мендем, үҙем дә аңламаным, дөрөҫөн әйткәндә.

Бына мин ҙур булмаған ҡала урамында торам. Өйҙәр тәпәш һәм ниңәлер йомро формала, ә һәр йорттоң ҡыйығында йәшел буҫтау ябылған эскәмйәләр күренә,улар башняларҙы хәтерләтә. Урамда баштарына осло шлемдар кейгән баһадирҙар ике рәткә теҙелгән дә воеводаның килгәнен көтә кеүек. Эңер төшөп килә, ҡояш, күрәһең, яңы ғына офоҡ артына тәгәрәгән. Өйҙәргә иғтибарлап ҡарап та өлгөрмәйем – мөйөштән ҡапыл бер төркөм кеше килеп сыға ла йән-фарманға минең яҡҡа йүгерә башлай. Алдағыларын ҡарап-күреп өлгөрәм: эскеселәрҙең тупаҫ йөҙҙәре, моңһоҙ ҡараштар, нимәлер тип һөрәнләгән тешһеҙ ауыҙҙар. Тәртипһеҙ йүгерәләр, ҡабаланалар, пружинаға баҫҡан кеүек һикереп-һикереп киләләр. Төркөм яҡынайғандан-яҡыная бара, хәҙер ҡысҡырғандарын да асыҡ ишетәм: «Паспортыңды күрһәт, паспортыңды күрһәт!» Бәй, быларға минең паспорт нимәгә кәрәк булған һуң әле?

Ҡасып, ҡотолмаҡ, йүгерә башлайым. Һаташыу ҡатыш төштәрҙә аяҡтар, ғәҙәттә, сөгөн кеүек ауыр, ерҙән саҡ айырып алырлыҡ була, ә был төнгө мажарала мин иҫ китмәле еңел йүгерәм, уҡ кеүек осам. Мине ҡыуыусылар яй килә, хәлдәре бөтә, тындары ҡыҫыла, тик һаман бер үк һүҙҙе ҡысҡырыуҙарын дауам итәләр: «Паспортын күрһәтһен, паспортын күрһәтһен!» Урам буйлап йүгереүемде дауам итәм. Ҡайҙандыр ситтән, тыҡрыҡтарҙан ҡурҡыныс йөҙлө яңы кешеләр йүгерешеп сыға. «Нимә булды? – тип һорай улар мине эҙәрлекләүселәрҙән. Төркөм: «Паспортын күрһәтһен. Уға ҡырҡ йәш, тиҙәр бит!» – «Ә, шулаймы ни? Улайһа, ысынлап та, паспортын күрһәтһен!» – Яңы кешеләр ҙә мине баҫтырырға тотона.

Йүгерә торғас, ҡаланы сығабыҙ. Алда тар ғына йылға шәйләнә. Ниңәлер, һыу минең дуҫым һәм яҡлаусым кеүек тойола. Яр башына килеп етәм. Эйелеп һалҡын, таҙа һыу эсәм һәм шундуҡ тынысланам.

Төркөм шулай уҡ ярға килеп етә лә ҡаҡҡан бағаналай ҡатып ҡала. Кешеләр, ҡоттары осоп, минең һыу эскәнемде ҡарап тора. Хәҙер улар талап итмәй, ә үтенә: «Паспортыңды күрһәт».

– Ә нимәгә кәрәк ул һеҙгә? – тип һорайым был имәнес кешеләрҙән.

– Күрһәт инде...

– Күрһәтмәйәсәк, – тип көрһөнә берәүһе. – Уға ҡырҡ йәш тулған инде.

Паспортымды күрһәтмәйем. Эҙәрлекләүселәр, баштарын эйеп, үҙҙәренең ҡалаларына ҡайтып китә. Мин яр башына сүгәләйем, шунда ҡылт итеп башыма килә: паспорт үҙем менән түгел дәһә! Унан – миңә ҡырҡ йәшме ни? Саҡ утыҙ икем тулды бит.

Ҡапыл йылға аръяғынан аяҡтарыма көмөш нур һарылды. Мин йәһәт кенә уның өҫтөнә һикереп мендем һәм... карауатыма шылып төштөм. Бүлмә ҡараңғы ине. Ҡала уянып ҡына килә һәм үҙенең көндәлек шау-шыулы тормошо менән йәшәй башларға йыйына.

Иртәнсәгенә беҙ Силәбе өлкәһендәге бер ҡалаға елдерҙек. Төнгө «сәйәхәт» күңелде өйкәп тик тора ине. Түҙмәнем, көлә-йылмая ғәҙәти булмаған төшөмдө Ильяс Фәритовичҡа һөйләп бирҙем. Юлдашым ҡарашын бормалы-бормалы тау юлынан алмай ғына тыңланы.

– Хәҙер мин һәр төшкә етди ҡарайым, – тине ул көттөрөп кенә. – Йәш саҡта иғтибар ҙа итмәй торғайным. Афғанда ҡаты яраланып, клиник үлем кисергәс, минең материализмдан бер нәмә лә ҡалманы.

– Нисек уйлайһың, был әллә төш түгелме?

– Улай тимәнем бит, – Ильяс Фәритович йомшаҡ ҡына көләмһөрәне. – Шул уҡ ваҡытта, ғәҙәти төш күргәнһегеҙ, тип тә әйтә алмайым. Кеше үҙенең киләсәген юрай алған төштәргә ышанам.

– Миңә ни эшләргә?

– Ҡурҡмаҫҡа. Белемегеҙ, тормош тәжрибәгеҙ бар, был төштө рухи тормошоғоҙҙоң йәнә бер сағылышы тип ҡабул итегеҙ.

– Төш беҙгә кире ҡайтыр һымаҡ.

Тауҙарҙы артылдыҡ та үҙәнлеккә төштөк. Оҙаҡламай йылға буйлап ултырған металлургтар ҡалаһына килеп еттек. Мин кәрәкле кешеләр менән осраштым, унан кафеға инеп яҡшылап ашаныҡ та ҡайтыр яҡҡа боролдоҡ.

Кискә табан Ильяс Фәритович, юлды ҡыҫҡартмаҡ, тәпәш тау һыртлап, урман араларынан бара башланы. Килә-килә, юлды юғалтып аҙаштыҡ: машинабыҙ ниндәйҙер йылғаға килеп терәлде. Күпер урынында бағаналар ғына һерәйешеп тора ине.

– Бына һиңә кәрәк булһа! – тине юлдашым үкенес менән. – Күптән түгел тауҙарҙа ҡойма ямғырҙар үтте, йылға ташып, ағыҙған инде күперҙе.

Ул, ҡолға табып алып, яр буйлап кисеү эҙләп ҡараны, әммә төшөп килгән ҡараңғылыҡ был ниәттән баш тартырға мәжбүр итте.

Ошонда йоҡларға булдыҡ. Тәжрибәле кеше булараҡ, Ильяс Фәритович машинала йоҡлау ҡапсығы, котелок, балта, одеал, спирт, бер аҙ ризыҡ йөрөтә. Ул ут яғып ебәрҙе, сәй ҡайнатты, һәм беҙ еңелсә кискелекте ашап алдыҡ. Унан машинаның артҡы ултырғыстарын яткырып, өҫтөнә ыршы ботаҡтары йәйҙе. Мин йоҡлау ҡапсығына инеп яттым, Ильяс Фәритович эргәмә, дөрөҫөрәге, тышта урынлашты ла одеал ябынды.

Тауҙарҙа төн һалҡын. Мин ике тау араһына ҡыҫылған ҙур, яҡты айға ҡарап ятам, күңелемдә һиллек тоям. Тирә-яғымдағы донъя нисектер йәмле, нурлы һымаҡ. Миңә рәхәт. Тик бер мәлгә генә, энә осо менән төрткәндәй, атай-әсәйем тураһындағы борсолоу өтөп ала хәсиәтемде. Сит-ят яҡтарҙа нисек кенә йәшәп яталар икән? Үпкәләрен түҙемлек менән кисерәләрме? Ҡыҙҙары бындағы бәләнән берәй көн йолоп алыр, тигән өмөттәре һүнмәгәнме? Саҡ ҡына сабыр

итегеҙ инде, ҡәҙерлеләрем, оҙаҡламай ҡотҡарырмын һеҙҙе ул тамуҡтан. Көҙгә, Яңы йылға тиклем, мотлаҡ Стригунковка барып, йыйылған сумманы аласаҡмын. Баҡсалы, ихаталы йорт һатып алырға етәсәк ул ятҡан аҡса. Ә яҙға, 9 Май байрамы алдынан, һеҙгә яңы йортоғоҙҙо күрһәтәсәкмен...

Тәрән итеп көрһөндөм.

– Кисәге төштө ҡабат күрермен тип, йоҡларға ҡурҡаһығыҙмы әллә? – шулай шаяртты минең көрһөнөүҙе ишеткән Ильяс Фәритович.

– Мин ул төштө оноттом даһа, – тип яуапланым да һорай ҡуйҙым: – Һеҙгә унда һыуыҡмы әллә?

– Саҡ ҡына бар, – тип көлдө Ильяс Фәритович. – Нисауа, мин хәрби кеше, түҙергә тейешмен. Бындай ғына хәлдәрҙә булған бар, үлмәм.

– Түҙергә кәрәкмәй, – тинем дә бойорҙом: – Әйҙә, минең янға керегеҙ.

– Юҡ, юҡ, – тип уңайһыҙланды ул. – Двигателде ҡабыҙайым да салонды йылытайым, булмаһа.

– Шунан газға тонсоғоп үләйекме? Йә, йәһәт кенә кереп ятығыҙ! Мин һеҙгә бойорам. Хәрби кеше булараҡ, бойороҡто үтәргә тейешһегеҙ. Унан килеп, миңә лә һыуыҡ.

Ильяс Фәритович теләр-теләмәҫ кенә минең янға кереп ятты. Хатта тын алышы ла ишетелмәне. Көслө, сибәр, артыҡ ҡартаймаған мыҡты ирҙең йылыһын тойҙом, тәнем дә, йәнем дә имшене, майҙай ирене, яйлап ҡына уны үҙемдең йылым, тыным, ҡулдарым, ниһайәт, аурам менән солғаным. Күптән, бик күптән үҙемде ҡатын-ҡыҙ итеп тойғаным юҡ ине, ә ниндәй ләззәт икән был!

Ул төн беҙ яҡынлыҡ кисерҙек. Мин өлгөлө ғаилә башлығын аҙҙырҙым. Туҡта, нишләп мин? Беҙҙең уртаҡ гонаһта ул да ғәйепле түгелме ни? Был эштә берең таҙа, икенсең ғәйепле ҡалып буламы? Ниңә ул минең менән оялсан, йомшаҡ, иғтибарлы? Ниңә ул аҙашты ла мине гонаһ ҡылыуға ҡоторттო? Ирҙәргә ҡатын-ҡыҙҙы алдауы, юлдан яҙҙырыуы бер ни түгел, әгәр ҡатын-ҡыҙ быны үҙе теләһә – бигерәк тә...

Иртәнсәк уянғас, тәмле итеп кирелдем дә аптырап үҙемдең «управ»ҡа ҡараным.

– Бына беҙ һөйәр-һөйәркә лә булдыҡ, – тинем аңлайышһыҙ бер үкенес менән. – Ниңә, ни өсөн? Кәрәк инеме был беҙгә?

Ильяс Фәритович усы менән ирендәремде ҡапланы.

– Ул турала һөйләшмәйек...

Бер-беребеҙҙән ояла-тартына, йоҡлау тоғонан сыҡтыҡ, йылғаға төшөп йыуындыҡ та, сәй ҡайнатып эсеп, яр буйлап кисеү эҙләргә керештек.

Мин йәнә тар урам буйлап һаҡ ҡына атлайым, теге кешеләрҙе күрергә өмөтләнеп, иғтибарлап өйҙәргә ҡарайым. Күренмәйҙәр, әммә уларҙың эргәлә генә йөрөгәнен күңелем менән һиҙәм. Ҡотһоҙ йөҙҙәре күҙ алдына килә, ҡолаҡ төбөндә һөрәнләгәндәре яңғырай, тимәк мине күрәләр, тик, ниңәлер мин яҡынлағансы урамдар, тыҡрыҡтар, бүлмәләр, эскәмйәләр араһына китеп, ҡасып өлгөрәләр.

«Төҫлө төш күрәм», – тигән уй килә башҡа. Туҡтайым да газондағы үләндәрҙе һыйпайым, бер һабаҡты өҙөп алып усымда ыуғылайым, еҫкәйем. Танауға башты әйләндерерлек таныш булмаған әскелтем еҫ бәрелә. Юҡ, был төш түгел. Тик нимә? Бер өйҙөң тәҙрәһендә ир һыны шәйләнде, иғтибарлабыраҡ ҡарайым тип бер ике аҙым алғараҡ атлағайным, нимәгәлер эләгеп абындым да ҡомло юлға

йығылдым. Тубыҡтарым, усым ауыртты. Тубыҡтың тиреһе һыҙырылып, бер тамсы ҡан сыҡҡан. Ҡан, ниңәлер, үтә лә ҡыҙыл тойолдо миңә.

Киске Ҡала – мин ҡаласыҡты шулай атаным – буйлап йөрөүҙәрем төш булмаһа, нимә һуң? Бер бейек болдорға йүгереп мендем дә, түҙемһеҙләнеп ишекте тарттым. Ишек еңел генә асылғас, бүлмәгә индем. Бында, бүлмәлә, әле генә кемдер булған һымаҡ тойолдо, бынау диванға, ике ултырғысҡа ултырып әңгәмәләшкәндәр, әммә мин керер алдынан ғына сығып киткәндәр. Тик ҡайҙа? Икенсе бүлмәгә индем. Унда балалар уйынсыҡтары туҙышып ята. Миндә йәнә, был уйынсыҡтар менән әле генә уйнағандар, тигән шик тыуҙы. Хужаларҙың сәйер ҡылығына аптырап өҫкә, ҡыйыҡҡа, үрмәләнем. Өй башына сыбар балаҫтар йәйелгәйне. Өҫтән ҡараһаң, бында сәскә түтәлдәре үҫтерәләр, ахыры, тип уйларға ла мөмкин.

Ҡапыл ҡолағыма көлгән, шыбырлашҡан тауыштар салынды. Тауыш сыҡҡан яҡҡа боролдом, эскәрәк үттем. Бер кем юҡ. Инде мин бында яңы ғына, мин керер алдынан ғына кешеләр булғанына, тик ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында минең менән һис осрашҡылары килмәгәненә тамам ышандым. Ҡайҙа юғалалар икән һуң? Бына шуныһы сер.

Урамға төштөм, буш өйҙәргә ҡараным, күҙемә бер йән эйәһе лә салынмағас, һыу буйына атланым. Ҙур булмаған тымыҡ ҡына йылға ҡаланы ҡамап ағып ята. Ярҙарында – шул уҡ ҡыҫҡа итеп ҡырҡылған йәшел үлән, һыу өҫтө зәңгәрһыу... Тыныс, яҡты урамдар буйлап тағы йөрөйһө килде, тик аяҡтарыма бысаҡтай үткер нурҙар килеп төштө – үҙемдең донъяға кире ҡайтырға ваҡыт етте.

Бүлмәлә тәрән тынлыҡ. Тыштан машина шауы, моторҙар геүләүе, урам һепереүсенең кемгәлер асыулы ҡысҡырыуы ишетелә. Өҫтөмдәге юрғанды һирпеп ташланым да һаҡ ҡына тубыҡтарыма күҙ һалдым: уң тубығымда һаман алһыу ҡан ялтырай ине. Тетрәнеп ҡысҡырым ебәрҙем...

Йәшермәйем, төштәрем дөрөҫөрәге, төнгө сәфәрҙәрем, мине ҡурҡыта. Киске ҡала ҡәҙимге тормоштағы ише реаль. Йорттарҙың стеналарын һыйпайым да бармаҡтарым менән уларҙың ҡытыршылығын тоям. Аяҡ аҫтымда тупһаларҙы һиҙәм, ишек яңағына бәреләм. Һуңғы төштә йылғанан тәмле һалҡын һыу эстем, уянғас, көнө буйы һыуһау тойғоһо булманы. Бер көндө, йылға буйындағы ҡомлоҡтан атлағанда, артыма әйләнеп, үҙемдең эҙҙәрҙе күрҙем. Төшөмдә мин ысын булмыш халәттәмен улайһа? Бына шулай сәйер хәлдәр...

Төштәремде бер генә кешегә ышанып һөйләйем – Ильяс Фәритовичҡа. Ул минең хәбәрҙе иғтибарлап тыңлай, килешкән һымаҡ баш ҡаға, әммә аңлатмаларҙан тыйыла.

Тауҙағы иҫтәлекле төндән һуң беҙ бер-беребеҙҙән нисектер ояла башланыҡ. Бер көн тоттом да уға дөрөҫөн әйттем дә ҡуйҙым. Ильяс Фәритович күҙҙәремә тура ҡарап былай тине: «Беләһегеҙме, Маргарита Наумовна, мин һеҙгә һәр ваҡыт ҡыҙыма ҡарағандай ҡараным, йәғни атай һымаҡ».

– Ә хәҙер? – тинем мин һалҡын ғына.

– Хәҙер ҙә шулай, тик... – Ильяс Фәритович йәнә күҙҙәремә ҡараны, – тик хәҙер гонаһлы атай.

Көҙ етте. Стригунков миңә тейеш табыштың бер өлөшөн ғәҙел рәүештә тотоп ҡалып бара ине. Ҡара иҫәбем буйынса, өй һатып алырлыҡ сумма йыйылып килә. Бер көн уға шылтыраттым да, аҡса артынан ҡасан киләйем, датаһын әйт,

тинем. Сумма йыйылды, тик саҡ ҡына көт, тип яуапланы Стригунков. Бер айҙан һуң ул миңә йәнә, килмәй тор, тине.

Яңы йыл яҡынлашты. Шылтыратҡан һайын Стригунков төрлө сәбәптәр таба килде: «Яңы ҡоролма алдым», «әллә күпме һалым түләнем», «офисты ремонтланым...» 31 декабрь көнө Яңы Йыл менән ҡотланы – күрәһең, ҡаты ғына төшөргән – һөйләшеүе артыҡ иркен һәм ярайһы уҡ тотанаҡһыҙ ине. «Маргарита Наумовна, – тине ул ниндәйҙер пафос менән. – Мин һеҙгә тоғро һәм ғәҙел хеҙмәт итәм. Шулай булғас, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ... Ауыр ваҡыт, был ауырлыҡты беҙ уртаҡ күтәрергә тейеш».

– Нисек уртаҡ, аңламаным, – мин һағайҙым.

– Йәғни, – Стригунков тамаҡ ҡырҙы, – йәғни мин табышты уртаға бүлергә тәҡдим итәм.

– Был мөмкин түгел, Костя. Беҙ улай килешмәнек.

– Миңә каштанды уттан сығарыуы уйын түгел.

– Ко-стя, һин ул каштандарыңды бушҡа сығармайһың, былай ҙа табыштың өстән бер өлөшөн биреп торам. Бүтәндәр дүрттән бер өлөшөнә лә сығара, үҙең беләһең.

– Ярай, ярай, борсолма, – Стригунков тағы йүткергән булды. – Һөйләшербеҙ.

– Һөйләштек бит инде. Аҡса артынан миңә ҡасан килергә?

– Ҡабаланма, Рита, – Стригунков тауышына яһалма битарафлыҡ бирергә тырышты. – Яҙға табан, тип уйлайым.

– Бер айҙан көт, – тинем дә асыу менән трубканы һалдым.

Йөрәккә хәүеф кереп ояланы, атай-әсәйем иҫемә төштө.

Киске Ҡалаға бер барғанымда Хәмзәне осраттым. Был сибәр үзбәк егете менән мәктәптә бергә уҡығайныҡ, юғары кластарҙа хатта дуҫлашып та йөрөнөк. Әммә уның ата-әсәһе беҙҙең аралашыуҙы хупламаны – буласаҡ килендәрен мосолмандан алғылары килде.

Беҙ бәләкәй, аулаҡ скверҙа осраштыҡ, эскәмйәгә ултырҙыҡ. Хәмзә һәр ваҡыттағыса, баҫынҡы һәм уйсан ине. Ә бөгөн нимәгәлер уңайһыҙланған да һымаҡ.

– Хәмзә, бында нишләп йөрөйһөң? – тип һораным аптырап һәм, мәктәптәгесә, киң һәм көслө яурынына ҡулымды һалдым.

Хәмзә башын эйҙе.

– Мин һине бер күргәйнем инде, – тип асылды ул. – Тик борсоғом килмәне, шуға ла йәшенеп ҡалдым.

– Борсоғоң килмәне?

– Бәләгә тарыным мин, – тине Хәмзә, – әммә бында килеп сығыуымдың сәбәбен үҙем дә белә алмайым. Ә һин?

– Ҡунаҡҡа йөрөйөм, – тинем битараф ҡына. – Йә осоп киләм, йә шыуып төшәм.

– Рита, бында башҡа йөрөмәүең хәйерлерәк булыр, – тине Хәмзә һаҡ ҡына һәм ҡулымды үпте. – Һине тегендә көтәләр.

– Ҡайҙа «тегендә»? – ғәжәпкә ҡалдым. – Һин берәй нәмә беләһеңме әллә? Улайһа, ниңә һорайһың? Беҙ бит төштә генә осраштыҡ.

Хәмзә ҡулымды иплəп кенә яурынынан алды.

– Осрашыу өсөн рәхмәт. Һиңә бында оҙаҡҡа ҡалырға ярамай.

– Ҡайҙа ҡабаланаһың? Ултыра бир саҡ ҡына, – тип үтендем дә шаяртҡан булдым. – Беҙҙең ваҡыт – бер вагон.

– Юҡ, беҙҙең ваҡыт бик аҙ. Хуш, Рита-жан.

Ул мине әүәле осрашҡан сәғәттәрҙә шулай тип атай торғайны. Күңелем йомшап, мин уның уйсан ҡуңыр йөҙөнә, ҡара күҙҙәренә баҡтым.

...Уянғас, торғо килмәй оҙаҡ яттым түшәктә. Йөрәк тынысһыҙланып типте. Шул көндө үк, атай-әсәйемә шылтыратып, Хәмзә тураһында һораным.

– Бәй, беҙ һиңә әйтмәнекме ни? – тип аптыраны әсәйем. – Хәмзә бынан бер ай элек аварияла һәләк булды бит.

Киске ҡалаға икенсе сәфәремдә мин теге тыныс скверҙы эҙләп таптым. Хәмзә шундағы эскәмйәлә ултыра ине. Уның бойоҡ күҙҙәренә ҡараным да һораным:

– Һин гел генә ошонда ултыраһыңмы?

– Юҡ, мине күрергә теләгәнеңде белдем дә килдем.

– Ә нисек белдең?

– Әллә тағы?

Үткәнендәге һымаҡ ҡулымды яурынына һалырға теләгәйнем дә, ҡыймаһым.

– Ныҡ ауыртындыңмы?

– Юҡ, – тине ул тыныс ҡына. – Машина юлдан ситкә осто ла бер нисә тапҡыр әйләнеп сыҡты. Бында уяндым. – Ул ҡулы менән тирә-яғына ишараланы.

– Күңелһеҙ түгелме бында? Кире ҡайтаһың киләме?

– Юҡ, килмәй, – тип яуапланы ул ҡурҡып ҡына. – Бер нәмәгә лә үкенмәйем. Бында күсеүем Уға кәрәк булғандыр. Кирегә юл юҡ, алға ғына хәрәкәт итергә кәрәк. Был донъяға һин нисек килә алаһың ул?

– Үҙем дә белмәйем. Бәлки, аңымда берәй төрлө бушлыҡҡа осоп төшәмдер, бәлки, ваҡыт-ваҡыт бындағы берәйһенә кәрәгем барҙыр. Һинең донъяңа йөрөүем тураһында бер генә кеше белә. Әммә мине «тегендә» нормаль кеше тип иҫәпләйҙәр, – яурындарымды һикертеп ҡулдарым менән мин дә тирә-яғыма ишараланым. – Ҡайҙа ул «тегендә», ҡайҙа ул «бында» икәнен хәҙер үҙем дә белмәйем.

Хәмзә баш ҡаҡты.

– Мәктәптә уҡығанда, бер генә тормош бар, тип уйлай торғайным, – тине ул бойоҡ ҡына. – Иҫәр булғанмын. Уҡытыусыларыбыҙ ҙа иҫәр булған. Бер нәмә лә белмәгәндәр. Улар, беҙ берҙән-бер донъяла йәшәйбеҙ, тип ышанған. Ә донъялар берәү генә түгел, күп, – Хәмзә беренсе тапҡыр йылмайғандай итте, иҫкәртте. – Тиҙҙән мин бында булмаясаҡмын. Бында оҙаҡҡа ҡалмайҙар, ҡала алмайҙар. Аңдарына киләләр ҙә юғалалар, әйтерһең дә, ирейҙәр.

Паспорт талап итеп артымдан ҡыуған бер көтөү кеше тураһында хәтеремә төшөрҙөм.

– Ул йән эйәләре беҙҙең тыныс тарафтарға ла аҙашып килеп сыға шул. Берәүҙәре эсеп үлгән, икенселәре – һуғышып, өсөнсөләре – наркотиктан. Үҙҙәре менән нимә булғанын да, ҡайҙа йөрөгәндәрен дә аңламайҙар. Шулай көтөүе менән донъя буйлап гиҙәләр, бик уҫалдар. Уларҙың энергиялары юҡ, туйыныу, туҡланыу өсөн шуны эҙләйҙәр. Тынысландырыуҙың берҙән-бер юлы – көсләп һыу эсереү йәки биттәренә һыу һибеү, шул саҡта ғына улар аңдарына килә, айныға ла нимә булһа ла аңлай башлай. Шуға ла һыуҙан ҡоттары осоп ҡурҡалар, үткән тормоштарын хәтерләй башлаһалар, ҡалтыранырға тотоналар. Ул йән эйәләренең киләсәге юҡ – бихисап донъялар буйлап энергия эҙләп, мәңге шулай иләҫ-миләҫ ҡаңғырып йөрөйәсәктәр.

– Нишләп улар минән паспорт талап итте һуң? Минең ҡырҡ йәшем уларға нимәгә хәжәт?

– Улар һинең ҡурҡыуыңды белгән. Ҡартлыҡтан ҡурҡаһыңмы?

– Әлегә ҡурҡмайым. Ҡырҡ йәшкә тиклем бала табып өлгөрә алмам, тип кенә борсолам.

– Улайһа, ҡурҡыуыңдан арын, һин мотлаҡ һәм тиҙҙән, бала табасаҡһың.

– Хәмзә ҡулдарымды  усына алды. – Йәшеңдән ҡурҡма. Көсөң күп һинең, шуға ла  төрлө бысраҡлыҡтар йәбешергә генә тора.

Нурҙың бына-бына миңә һуҙыласағын һиҙә инем, шуға ла ҡабаланып һораным:

– Хәмзә, зинһар өсөн, мине семте, мин  бының төшмө, төш түгелме икәнен белгем килә.

Ул минең ҡулымды семтене – ауыртыуҙан хатта ҡысҡырып ебәрҙем.

Хәмзә ағарып китте лә күҙҙәрен йомдо.

– Кит, Рита-жан, – тине ул, ишетелер-ишетелмәҫ кенә шыбырлап. – Мин һиңә энергиямды бирҙем, шуға ла хәлем бөттө. – Кит...

Уянғас та ҡулыма ҡараным. Беләктә ҙур ғына күгәргән урын бар ине. «Йоҡлағанда үҙем семтегәнмендер», – аңым,  тормош тәжрибәм быны шулай тип аңлатты. Әммә йөрәк күкрәкте емереп сығырҙай булып ярһып тибә ине.

Яҙ яҡынлашты. Борсола башланым:  атай-әсәйемә, йәй башланғансы  күсереп алырмын, тип вәғәҙә бирергә өлгөргәйнем бит. Стригунков мине һаман тынысландыра һәм саҡ ҡына көтөргә ҡуша. «Һиңә кәрәкле сумма ышаныслы урында ята,  борсолма, – тигән була. – Ваҡ-төйәк формальностарҙы  ғына хәл итәһе ҡалды. О кей!»

Мин көтәм, хәүефләнәм, календарға  ҡарайым. Бына-бына ҡар ирей башлаясаҡ.

Ильяс Фәритович ҡала ситенән арыу ғына өй тапты, хужалар менән шарттарын һөйләште, бер генә эше ҡалды – договорға ҡул ҡуйыу ҙа аҡса түләү. Ә аҡса, Стригунков әйткәнсә, мине көтөп «ышаныслы урында ята»...

...Киске Ҡала өҫтөндә һәр ваҡыттағыса еңелсә эңер. Ҡалала  тәү ҡарауға кеше юҡ һымаҡ, хатта  ташландыҡ та күренә, әммә  был алдатҡыс тойғо. Ҡайсаҡ урамдың теге осонда бер кеше, бер нисә кешенән торған бәләкәй төркөм күренеп ҡала, тик, мин яҡынайыу менән, улар тауыш-тынһыҙ ғына юғала, әйтерһең дә, әлеге үтә күренмәле эңерҙә ирей. Ҡаланың бөтә урамдарының да  осо йылға ярына килеп терәлә. Арыраҡ, йылғаның теге ярында, һары ҡомлоҡ йәйрәп ята.

Нисектер бер ваҡыт: «Бындағы кешеләр минән ниңә ҡаса ул?» – тип һораным Хәмзәнән.

– Бындағы йән эйәләре көслө стресс  үткәргән, – тип аңлатты ул. – Улар барыһы ла фажиғәле үлгән. Хәҙер яйлап аңдарына килә, йәғни элекке хәлдәренә ҡайталар. Мин атаһы менән ике балаһы үҙҙәренең йортонда тереләй утта янып үлгән ғаиләне беләм. Уларға тамам тынысланыу өсөн бик күп ваҡыт кәрәк буласаҡ. Етмәһә, теге донъяла япа-яңғыҙ  ҡалған әсәләре өсөн хафаланалар. Шуға ла уларҙың бер кемде лә күргеләре, аралашҡылары килмәй. Һинән ҡасыуҙары ла шунандыр.

– Нишләп ерҙәге тормоштары рәтле сыҡмаған һуң уларҙың? Ни сәбәптән зарығалар?

– Әллә инде? Бында аңлатма биреү ауыр. Беҙ бит бөтәбеҙ ҙә үҙебеҙҙең, башҡаларҙың гонаһтары өсөн яуап бирәбеҙ. Мәҫәлән, улымды яҡшы кеше итеп тәрбиәләй алмағанмын икән, бында иң беренсе сиратта мин ғәйепле, унан – үҙе.

– Тимәк, бөтә ғаләмдә ғәҙеллек юҡ, – тип көрһөндөм мин,  кәйефем төшөп.

– Юҡ, бар, – тине Хәмзә, нисектер ышаныслы итеп. – Был тыныс мөхиттә беҙгә үткән тормош тураһында уйларға, баһаларға мөмкинлек бирәләр. Унан беҙҙе

икенсе донъяға күсерәләр, беҙ яңы тормошто аҡыллыраҡ, файҙалыраҡ итеп йәшәргә тырышасаҡбыҙ. Иң мөһиме, бер кемгә лә хаслыҡ ҡылырға ярамай, кирећенсә, бәләкәй булһа ла файҙа килтерергә кәрәк. Үткән тормошта мин был турала ниҙәлер бөтөнләй уйламай торғайным, бында уйланам.

– Яңы тормошта яҡшы уйҙарыңды онотоуың да бар бит, – тинем мин. – Алыуын алырҙар, ә хәтереңде юйып ҡуйһалар?

– Улай мөмкин түгел, – тип яуапланы Хәмзә. – Ғаләмдә бер нәмә лә юғалмай. Иҫке тормошомдағы тәжрибә яңы тормошомда мотлаҡ кәрәк буласаҡ, иҫәпләнәсәк, сөнки юғарыла иҫәп-хисап алып барыла бит.

... Киске Ҡалала күпме булғанымды иҫләмәйем дә. Унда ваҡыт бер урында ғына тора – Мәңгелектең сәғәте юҡ. Бөгөнгө килеүемдә лә гел генә мине әҙәрлекләгән йән эйәләренең йәнә ташланыуҙарын көтә инем. Йәнә эскелектән ярғыланып бөткән тупаҫ йөҙҙәр, буш ҡараштар. Йәнә ҡулдарын тәртипһеҙ һелтәгән, аяҡтарына пружина ҡуйғандай һикерешкән, йөҙҙәрен салышайтҡан бәндәләр миңә табан йүгерә. Тик бөгөн уларҙың юлында ҡаҡҡан бағаналай ҡаты торам, күңелем тыныс һәм тәүәккәл. Алдағылары аҙымдарын яйлата төшә. Шунан береһе, төркөмдө дәртләндерергә теләп, бар көсөнә һөрәнләй:

– Уның аҡсаһы юҡ!

– Ул аҡсаһыҙ! – тип ҡысҡыра икенсеһе, уға ҡушылып, ауыҙын ҙур асып. – Ул ярлы, меҫкен!

Төркөм ярһып миңә ҡаршы атлай.

– Бурыс соҡорона ултыртырға кәрәк ул ҡәбәхәтте! – тип һөрәнләй арттан ҡайһыһылыр.

Ҡапма-ҡаршы боролдом да ҡаты итеп әйттем:

– Мин һеҙҙән ҡурҡмайым. Үҙ йәшемдән дә ҡурҡмайым! Ярлылығымдан да, яҙмышымдан да, хатта үлемдән дә ҡурҡмайым.

Алдағылар аптырап туҡтаны, аптырауҙары ҡурҡыу менән алышынды һәм миңә текләп ҡарап ҡаттылар. Әммә арттағылар уларҙы инерция буйынса һаман алға этә ине. Ниһайәт, төркөм бер аҙҙан тамам туҡтап ҡалды.

– Ҡурҡмайым һеҙҙән! – тип йәнә ҡысҡырҙым асыҡ итеп һәм бер аҙым алға атланым.

Төркөм ҡыбырҙаны, икеләнде, ҡайһы бер йән эйәләре артҡа сигенә үк башланы, уҫал йөҙҙәргә ҡурҡыу һыҙаты ҡунды. Бер аҙҙан төркөм яй ғына боролдо ла килгән юлынан кире китте. Беренсе еңеүемде татыған был мөғжизәле донъя ҡайҙа урынлашҡан икән һуң? Аңымдың бер бәләкәй генә өлөшөндәме, әллә берәй йондоҙлоҡ мөйөшөндәме? Ғорур һәм еңеүле ҡиәфәттә урам буйлап атланым, Хәмзә ултырырға яраҡкан эскәмйә янына килдем. Ул әлеге эскәмйәлә йылмайып ултыра ине.

– Һин бөгөн еңдең, һин – еңеүсе, тик, ниңәлер, күңелһеҙ күренәһең, – тине.

– Юҡ, бындай еңеүҙән һуң нисек кәйефһеҙ булайым, ти? Бына һин үҙең, ысынлап та, бойоҡһоң.

– Оҙаҡламай бынан китәм, – тине Хәмзә.

– Нисек китәһең? Ҡасан? – Хәҙер миңә ысынлап яманһыу булып китте.

– Теүәл генә белмәйем әле, – тип яуапланы ул. – Уны бында бер кем дә белмәй.

– Үҙеңдең китәсәгеңде ҡайҙан белдең һуң? – тип һаман төпсөндөм.

– Һиҙенәм, сөнки тамам тынысландым, күңелемә һиллек, яҡтылыҡ килде. Хәҙер бер нәмәгә лә үкенмәйем, үткән тормошома ла бер ниндәй әрнеүһеҙ ҡарайым. – Хәмзә миңә ҡара күҙҙәрен төбәп хәбәрен дауам итте. – Миңә ҡуҙғалырға

ваҡыт, Рита-жан. Юлым ҡайһы тарафтарға тартылыр – әлегә белмәйем. Икенсе ҡалаға, илгә, планетаға? Бәлки, файҙа килтерерлек итеп йәшәргә форсат бирерҙәр. Иҫеңдәме, мәктәп баҡсаһына мин биш ағас ултыртҡайным, улар барыһы ла үҫеп китте бит. Бәлки, барасаҡ яңы урында ла ағас ултыртыу мөмкинлеге булыр.

Күңелем һыҡтап-һыҡтаны, китәм, тигәс.

– Минең ҡабат ергә ҡайтыуым да ихтимал бит, бәлки, һеҙҙең Рәсәйгә лә барып сығырмын әле. Берәй лесник ғаиләһендә, – тип хыялланды Хәмзә. – Һәм атай мине үҙенең кәсебенә өйрәтер... Һиңә лә китергә ваҡыт, – шунан ҡапыл ҡабаланды был. – Бында оҙаҡ ҡалырға ярамай...

– Беҙ башҡа осраша алмаҫбыҙмы? Хушлашыр алдынан берәй һүҙ әйт.

– Был урында беҙ башҡаса осраша алмайбыҙ, – тип баш һелкте Хәмзә. – Һинең атай-әсәйең яҡшы кешеләр, уларҙы тиҙерәк үҙеңә алырға тырыш. Уларға тегендә бик ҡыйын, Рита-жан...

Мин карауаттан һикереп торҙом да йөрәгемә йәбештем. Ярһып, күкрәк ситлеген йыртып сығырҙай булып ауыртып тибә ине ул. Һуңғы осорҙа үҙем менән булған бөтә хәл-ваҡиғаларға ла ышана инем. Атай-әсәйемә ҡыйын тегендә, ул ер улар өсөн ете-ятҡа әйләнде. Ә үҙҙәре, беҙгә яҡшы, борсолма, тип хаттар яҙа, телефондан тынысландыралар бит әле. Алдаҡсылар...

Ильяс Фәритович вәғәҙә иткән пистолетты алып килде. Йөҙө борсоулы. Ҡоралды ҡулыма һалдым. Үлем килтерә торған был ҡорал мине ҡурҡытһа ла, ышаныста арттыра ине. Белер-белмәҫ көйө магазинын һурып алдым. Һары пулялар ҡурҡыныс йылтырап китте. Бер туғандар ише һигеҙ бөртөк бер-береһенә һыйынышып бер пеналда яталар.

Ильяс Фәритович ҡоралды ҡулымдан кире алды, киҫкен, өйрәнелгән-күнегелгән теүәл хәрәкәт менән магазинды кире тыҡты, патронды көбәккә индерҙе лә пистолетты предохранителгә ҡуйҙы.

– Пистолет һуғышҡа әҙер! – тине шунан хәрбиҙәрсә.

– Ниңә ул ҡәҙәр төҫөгөҙ ҡасҡан? – тип һораным ярҙамсымдан.

Ильяс Фәритович өндәшмәне.

– Был ҡорал менән нисек эш итергә икәнен өйрәтермен, – тине бер аҙҙан. – Егерме метрҙан сәпкә тейҙерерлек итеп өйрәтермен. Сумочканан уны йәһәт алыу алымын да күрһәтермен. Тик, кеше үлтермәйәсәкмен, тип миңә һүҙ бирегеҙ.

– Мин уны ҡурҡытасаҡмын ғына. Үлтерергә башым икәүме ни?

– Ҡоралдың үҙ логикаһы бар. – Дуҫым һөйләшеү барышында беренсе тапҡыр йылмайҙы. – Ул мотлаҡ үлтерә, йыш ҡына бер ғәйебе булмаған кешеләрҙе һәләк итә. Хәҙер ҡарағыҙ.

Ул күҙ асып күҙ йомған ваҡыт эсендә пистолетты һүтте, һәр деталдең нимәгә хеҙмәт итеүен аңлатты, унан кире йыйҙы. Нисек ҡарарға, пуляны патронниктан нисек һурырға икәнлеген күрһәтте. Кисенә алыҫ урманда мин беренсегә әлеге ҡоралдан атып ҡараным. Насар түгел, тине Ильяс Фәритович.

– Ҡоралдан бөтөнләй ҡурҡмайһығыҙ, – тип аптыраны ул. – Әллә нәҫелегеҙҙә профессиональ хәрбиҙәр бармы?

Офиста Ильяс Фәритович сумочканан пистолетты алыу, уны хәрби әҙерлеккә килтереү хәрәкәтен автоматизмға еткергәнсе ҡабатларға мәжбүр итте. Әммә йөҙөнән борсолоу барыбер ҙә китмәне.

– Һеҙ бөтәһен дә ныҡлап уйланығыҙмы? – тип һораны ул. – Әйҙә, мин дә барайым, страховка өсөн.

– Юҡ! – тинем ҡәтғи рәүештә. – Был – минең шәхси проблема. Уны үҙем генә хәл итергә тейешмен. Бер кемде лә ҡурҡыныс аҫтына ҡуйғым килмәй, һеҙҙе – бигерәк тә.

Ильяс Фәритович оҙаҡ итеп миңә ҡарап торҙо, шунан көтмәгәндә ҡосаҡлап алды ла күкрәгенә ҡыҫты.

– Нимә булһа ла, мин һеҙҙе ғәйепләй алмайым. – Ҡоро ғына өҫтәп ҡуйҙы. – Һеҙ йә изге әүлиә, йә иблис тоҡомонан.

– Икеһе лә бергә, – тип көлдөм мин һәм пистолетты сумочкама һалдым. – Ә хәҙер, Ильяс, ҡәҙерлем, билет алығыҙ, поезд менән барам, ҡайтыр яҡҡа – самолетҡа, бизнес-класҡа.

Стригунков Константин Григорьевич минең көтмәгәндә пәйҙә булыуыма ныҡ аптыраны. Ваҡыт киске етеләр ине. Беҙ уның уңайлы офисында икәү генә. Стригунков һәр ваҡыттағыса үҙен иркен тота, ҡабаланмай ғына һөйләшә, ҙур ҡәнәғәтлек менән яратҡан сигаретын – «Мальборо» тарта. Картонға, этикетка ҡағыҙына хаҡтар артыуы, һалымдың күтәрелеүе, аренда хаҡтары үҫеүе хаҡында һөйләй генә башлағайны, тупаҫ ҡына бүлдерҙем:

– Константин Григорьевич, мин аҡса артынан килдем.

– Аҡса артынан? – Стригунков яһалма рәүештә көлдө. – Ҡәҙерлем, Маргарита Наумовна, һеҙ үҙегеҙҙең килеүегеҙ тураһында алдан хәбәр итһәгеҙ, мин ҡунаҡхана белешкән булыр инем.

– Төнгө самолет менән ҡайтып китәм, – мин уның йөҙө, ҡараштары үҙгәреүен иғтибар менән күҙәтәм. Сумочкам тубығымда ята.

Стригунковтың йөҙө һытылды.

– Сәйер, аҡса шулай тиҙ кәрәк булдымы ни?

– Кәрәк булды шул. Мин уны ярты йыл көтәм инде. Сәбәбен беләһегеҙ. Атайәсәйем тегендә сумаҙан өҫтөндә ултыра.

– Әйткәндәй, Маргарита Наумовна, минең бер проект бар ине, – Стригунков кабинетын һөҙөп ҡарап сыҡты. – Бында берәү осһоҙға ғына үҙенең картон фабрикаһын һата.

– Аҡса, тим! – Мин, түҙемһеҙләнеп, Стригунковты бүлдерҙем. – Һала барған аҡсалар ҡайҙа? Хәҙер үк бирегеҙ, юҡһа, самолетҡа һуңлауым бар.

– Рита, туҡта әле, һиңә ни булды? – тип аптыраны Стригунков. – Алыштырып ҡуйғандар кеүек үҙеңде.

– Ҡайҙа минең аҡсалар? Алла хаҡы өсөн ҡойроҡ болғама! – Мин сумочкамды эсемә ныҕыраҡ ҡыҫтым.

– Ҡайҙа, ҡайҙа... – Стригунковтың асыуы ҡабара башланы. – Атай-әсәйен килтерә, имеш, берәү. Аҙ ғына көтә алмайҙармы ни? Бында бизнес юлға һалына, ә ул аҡса таптыра. Бер һинең аҡса ғына түгел, уртаҡ... Һинеке лә, минеке лә...

Сумочкамды астым да пистолетты сығарҙым.

– Минең өлөш юҡмы ни? Ҡасандан бирле? «Опель» машинаһын минең аҡсаға алдыңмы? Дачаны ламы? Оҙаҡламай улыңды Сорбоннаға ебәрәһеңме?

Стригунков аптырап бер миңә, бер пистолетҡа ҡараны, күрәһең, хәүеф уға ый барып етә ине.

– Рита, ул уйынсығыңды ал, – тине яй ғына, үҙе йылмайырға маташты. – Уның бит атылып китеүе ихтимал. Ал, тим. Давай һөйләшәйек, берәй уртаҡ фекергә килербеҙ, моғайын.

– Аҡсаны бир! Миңә тәғәйен аҡсаны бир, хәшәрәт!– тип ҡысҡырҙым да пистолетты Стригунковҡа тоҫҡаным.

– Шизофреничка! – Стригунков, ниһайәт, екеренә башланы. – Пистолетыңды ҡулыңдан ҡайырып алам да артыңа тибәм хәҙер!

Ҡоралымды һулғараҡ алып тәтегә баҫтым. Пуля Стригунков артында торған яҡҡа осто һәм монитор экраны селпәрәмә килеп, быялалары тирә-яҡҡа сәсрәне.

Хәҙер инде Стригунков ныҡлап ҡурҡты. Йөҙө ағарынып, күҙҙәре шарҙай булды, эйәге һәленеп төштө.

– Вәт сволочь! – тип ыҫылданы ул, – шул аҡса өсөн мине үлтерергә уйланыңмы? Һин, паскуда, ата алмайһың, ҡулың күтәрелмәҫ! – Ул ҡапыл алға атланы ла ҡулымдан пистолетты һуғып төшөрҙө, унан мине креслонан, көсөктәй күреп еңел генә күтәрҙе лә иҙәнгә ташланы. Торорға маташҡайным, йоҙроғо менән йөҙөмә һуғып, кире иҙәнгә йыҡты.

Мин шыуышып стенаға барҙым, арҡамды терәп ултырҙым. Стригунков креслоны минең ҡаршыға шыуҙырып шуға ултырҙы, ҡалтыранған ҡулдары менән кеҫәһенән сигарет ҡабы сығарҙы.

– Ну стерваһың да инде! – тине, тәмәке ҡабыҙып. Яйлап тынысланды. – Аҡса кәрәк булған уға. Ә бына быны теләмәйһеңме? – Ул, ҡулдары менән ишаралап, оятһыҙ хәрәкәт күрһәтте.

– Минең аҡсаны ҡайҙа ҡуйҙың? – тинем тағы. Тамам аңға килеү өсөн, миңә нисек тә ваҡытты һуҙырға кәрәк ине. Тупаҫ ауыртыу баҫыла төштө. Күрәһең, иҙәнгә бәрелеп мейе һелкенгән. – Тотоноп бөттөңмө?

– Көт, хәҙер сығарып бирәм! – Стригунков мыҫҡыллы йылмайҙы. – «Опель»де икебеҙ эшләгән аҡсаға алдым, ә дачаны... иҫке бизнес буйынса берәүҙе ҡыҫырға тура килде. Ә һинең йәшелдәрең сейфта ята, тик уларға өмөтләнмәй тор. Әйттем бит, картон фабрикаһын алам, тип. Дивиденттарҙан өлөш сығарырмын, бәлки. Әле түгел, эште ныҡлап яйға һалғас. Теләһәң, әйҙә былай итәбеҙ: иртәгәнән башлап һин килемдең яртыһын ала башлайһың, ә өстән икене онот. Әммә Уралдан заказдар ташыуҙы өҙмәйһең. Аңланыңмы?

– Ә сейфта ятҡан мин эшләгән аҡса? – тип һораным шым ғына. Тупаҫ ауыртыу үтте, әммә ярылған ирендән һаман ҡан аға ине әле – мин уны телем менән ялап саҡ өлгөрәм.

– Онот, тип әйттем бит ул аҡсаны, – Стригунков әсе һүгенде. – Аңланыңмы?

– Аңланым, Константин Григорьевич, – тип мөгөрҙәнем. – Мине ныҡ алдағаныңды аңланым. Ярай, өлөш сығарыуыңа ла рәхмәт. Костя, Алла хаҡы өсөн, берәй йотом шарап бир әле.

– Күптән шулай тиҙәр уны, – тип ҡәнәғәт һөйләнде Стригунков. – Йәшелдәрҙе бир, имеш, уға. Ишь ты...

Стригунков өҫтәлдән шарап шешәһен алырға тип боролдо. Ә мин шул арала иҙәндәге пистолетҡа һонолдом да уны ҡулыма алдым. Усымда ҡорал һалҡынлығын тойоу мине тамам тынысландырҙы.

– Әйткәндәй, пушканы ҡайҙан таптың? – тип һораны Стригунков. – Һинең һымаҡ интеллигент ҡатын кешегә ата алмай. – Ул, ҡулына шараплы бокал тотоп, минең яҡҡа боролдо.

– Һинең һымаҡ паразитҡа икеләнеүһеҙ атам, – тинем тыныс ҡына тауыш менән. – Бына, ҡара!

Тәтегә баҫтым.

Стригунков аптырарға ла өлгөрмәне, һул ҡулы менән аяғының тубығына тотондо. Шараплы бокал иҙәнгә ҡоланы.

– Стерва, һин нимә эшләгәнеңде аңлайһыңмы? – Ул ыңғыраштьı, ҡулын тубығынан алды ла бармаҡтары араһына һарҡып сыҡҡан ҡанға ҡарап тора башланы. – Ҡоторған бүре! – Стригунков өҫтәлгә эйелде. – Хәҙер мин һине быуып үлтерәм! Инә бүре!

– Аҡса! – тип талап иттем һәм үҙемдең ҡәтғи тауышты үҙем танымайым. – Тиҙ генә ас сейфты!

– Хәҙер, – тип үсәп яуапланы Стригунков һәм ҡулдары менән йәнә оятһыҙ ишара күрһәтте.

Тағы аттым. Был юлы Стригунков, уң аяғын тотоп, гөрс итеп иҙәнгә ҡоланы.

– Юбкалы иблис! – Ул ауыртыныуҙан бөгәрләнде. – Сирле ҡатынды, малайҙы йәлләр инең, исмаһам.

– Минең аҡса! – тип ҡәтғи ҡабатланым мин һәм ауырлыҡ менән аяғыма баҫтым. Ярылған ирендән һаман ҡан аға. Телем менән ирендәремде ялайым да тоҙ тәм иткән ҡанымды йотам.

– Сейфҡа шыуышып бар ҙа ас! – тип бойорҙом Стригуновҡа, үҙем яурынына тоҫҡайым. – Йә ҡулыңа атам, һәм күп ҡан юғалтыуҙан ярты сәғәттән үләсәкһең.

Ул минең ярһыған йөҙгә ҡараны, эштең етди төҫ алғанын тулыһынса аңлап, мөйөшкә шыуышты, ҡулын йәшерен ергә тығып, асҡысты алды.

– Үҙең ас, – тине шунан күңелһеҙ генә.

– Юҡ, һин үҙең асаһың да үҙ ҡулың менән ҡулыма бирәһең. Бер, ике...

– Стерва. – Стригунков, саҡ иламай, сейфҡа ҡарай шыуыша башланы.

Минең аҡсалар үрге шүрлектә ята ине. Бәйләнгән алты төргәк. Уларҙы пакетҡа тултырҙым, пистолетты ла шунда һалдым, унан Стригунковҡа кәңәш бирҙем:

– «Тиҙ ярҙам» саҡыр. Әле һин аңыңа киләсәкһең һәм әллә күпме этлектәр эшләйәсәкһең. Дөмөктөрөп кенә китергә ине лә...

Урамға сыҡтым, бер квартал самаһы ҡабаланып атлағас, такси туҡтаттым. Аэропортҡа килеп еткәндә, минең рейсҡа ултырыу бара ине. Йәһәт кенә бәҙрәфкә инеп, пистолетты сүп йәшнигенә ташланым.

Самолет һауаға күтәрелеп, салонда эсемлектәр тарата башлағас, бер бокал коньяк һорап алдым, күршеләге ир-аттың йылмайыулы ҡараштары аҫтында уны бер тынала һемерҙем. Шунан йоҡлап киткәнмен һәм самолет Йәнтөйәктәге аэропортҡа килеп төшкәнсә уянмағанмын.

Май башының бер тыныс, айлы төнөндә Ильяс Фәритович менән Ташкент поезын ҡаршы алдыҡ. Ул поезда атай-әсәйем Тыуған иленә әйләнеп ҡайтты. Хибараларын, көнкүреш ваҡ-төйәген осһоҙ ғына хаҡҡа һатып киткәндәр.

Иң ҡәҙерле кешеләремде: тәүҙә әсәйемде, унан атайымды ҡосаҡланым. Мин уларҙы теүәл биш йыл күрмәнем. Әсәйем ҡартайған, сүккән, атайымдың ҡасандыр киң һәм көслө яурындары һәленеп төшкән.

Фатирыма еткәнсе уларға һиҙҙермәй генә күҙ йәштәремде ағыҙып барҙым. Ярайһы уҡ яҡшы зауыҡ менән йыһазландырылған ике бүлмәле фатирым тегендә

тыйнаҡ көн итергә күнеккән атай-әсәйгә үтә лә зиннәтле күренде. Ҡала ситендәге йортто алып барып күрһәтеүҙе түҙемһеҙләнеп көттөм һәм бер көндө Ильяс Фәритович менән уларҙы шунда алып киттек.

Атай менән әсәй машинанан сыҡты ла матур йортҡа ҡарап текәлеп ҡалды. Әйткәндәй, йорт һатып алыу бик уңышлы килеп сыҡҡайны. Бында миңә бөтәһе лә оҡшай. Баҡса, тилбер йылға, көнсығышта – ослo тау түбәләре, урман артында асфальт юл... Ошонан көньяҡҡараҡ, ҡырҡ саҡрымдар самаһында, Таптыҡ – атайҙың тыуған ауылы урынлашҡан. Бала саҡта мин йыш ҡына шунда була торғайным, һунарсы олатайымды әле лә бик яҡшы хәтерләйем.

Атай-әсәйем йорт алдында баҫып тора һәм аптырап бер-береһенә ҡараша.

– Был – һеҙҙең йорт, – тим уларға шым ғына.

Атайым яныма килде лә мине ҡосағына ҡыҫты. Әсәйем дә бер яғымдан ҡосаҡланы. Ул бөтә тәне менән ҡалтыранып илай ине. Йәшлегем, тәжрибәһеҙлегем арҡаһында оло кешеләргә сит-ят ергә китеү, өй һатып алыу, баҡса үҫтереү, хужалыҡ алып барыу һәм бер көн шуларҙың барыһын да юғалтыу ниндәй ауыр икәнен мин аңламай ҙа инем. Шуларҙың барыһын да кире ҡайтарыуҙан инфарктан йығылырға мөмкин. Үҙемде бик бәхетле һиҙҙем ошо минутта.

Атайым оҙаҡ итеп баҡса буйлап йөрөнө, ҡат-ҡат: «Мин бит, Рита, ауыл өйө алғанһыңдыр, тип уйлағайным, ә һин – хан һарайы...» – тине, аптырап һәм һаман ышанып етмәй.

– Өй ҙур, шулай булыуы яҡшы, – тип маҡтаны әсәйем. – Газы бар, бәҙрәф, ванна бүлмәһе... Әкиәт инде торғаны. Ейән-ейәнсәрҙәрҙе ҡарар, тәрбиәләр урын етәрлек.

Ул нисектер ҡурҡып та, өмөт менән дә миңә ҡараны. Ә мин ишетмәмешкә һалыштым. Был ваҡытта әҙәпле управляющийым беҙгә арҡаһы менән машина янында тора һәм сәскәгә күмелгән үҙәнлеккә текәлгәйне.

Бер аҙашҡан уй йөҙөнсө тапҡыр инде башҡа инә: ә ошо йортто, атай-әсәйҙең һуңғы төйәген, Стригунков сейфта күмеп ҡалдырырға ниәтләгәйне. Ниндәйҙер ғәҙел һәм ҡеүәтле көс уға был яуызлыҡты тормошҡа ашырырға ирек бирмәне бит. Аллаға шөкөр, бөтәһе лә мин уйлағанса килеп сыҡты.

Киске Ҡалаға мин йәнә төштөм (әллә күтәрелдемме?), унын урамдары буйлап йөрөнөм, таныш эскәмйәгә ултырҙым. Хәмзә күренмәне. Ул бынан мәңгелеккә киткәйне. Минең был эңерҙәге килеүем дә һуңғыһы. Шулай икәнен яҡшы беләм. Оҙаҡламай күңелемә тыныслыҡ, һиллек килде. Был тойғо врач, ауырлыһығыҙ, тип әйткән көндө килде.

– Минең ҡыҙым буласаҡ!

– Мисс... яңғыҙ инә бүре... – тине кемдер, күңелле генә итеп. – Һеҙ бәхетлеме?

– Юҡ, – тип ҡаршы төштөм шундуҡ. – Мин, бәлки, инә бүрелер ҙә, тик хәҙер яңғыҙ түгел. Беҙ хәҙер икәү. Эйе, бәхетлемен тип уйлайым.

– Ә ҡыҙҙың атаһы кем?

– Бына быныһын әйтмәйем. Атаһының исемен хатта ҡыҙыма ла әйтмәм. Шулай кәрәк. Ул минең мәңгелек серем булып ҡаласаҡ. Мин ул серҙе үҙем менән Киске Ҡалаға алып китәсәкмен. Хәйер, уныһы тиҙ булмаҫ әле, байтаҡ йылдарҙан һуң. Һәр хәлдә мин шуға өмөтләнәм...

**Тимерғәле**
**БҮЛӘКОВ**

# БАҪЫМ*

## Сиҙәм сәхифәләре

***

Бына шулай тағы ла бер йыл үтте. Баҫыу эштәре тамамланды. Крәҫтиән тағы ла тын алып ҡалды. Әнүәр ҡунаҡ көтә. «Төшкә килеп етәм», – тип Ҡаҙағстанға киткән иптәше Фазыл шылтырата. Әнүәр уға ҡунаҡ күрһәтмәксе. Рәйсә аш-һыу әҙерләргә тотондо. Ҡунаҡ өсөн ике-өс көн буйы ялан кәртәлә ашатҡан һарыҡтарын да ботарланы хужалар.

Әнүәр Ҡотлогилде менән Сафуанды ҡатындары менән парлап ҡунаҡ күрергә саҡырҙы. Кис булды. Ауылдан саҡырылған башҡа дуҫ-иш килде, ә ҡырҙан килә торған ҡунаҡ юҡ та юҡ.

– Эй эттәгенәһе, – тип сәбәләнә башланы хужа.

– Бик тә булмаһа, Әнүәр, ҡунаҡтарыңа берәрҙе ҡойоп тотторһаңсы, күңелле булып ҡалыр. – Рәйсәнең әйтеүе булды, ҡапҡа төбөнә такси килеп тә туҡтаны.

Әнүәр йәшен тиҙлегендә ҡунағын ҡаршыларға ташланды. Саҡырылған ҡунаҡтары тәҙрә тирәһенә һарылды. Ҡатын эйәртеп, таксиҙан ыҫпай ғына кейенгән ир килеп төштө. Усаҡ тирәһендә аш-һыу әҙерләгән Рәйсә лә ҡунаҡтарына эйәреп килеп инде.

– Дуҫым Фазыл менән уның хәләл ефете, – тип таныштырҙы Әнүәр ҡунаҡ күрергә саҡырылғандарҙы Ҡаҙағстандан килгән пар менән.

– Фазыл, – тип ҡул биреп күрешеп сыҡты ир, – был ҡатыным Роза. Һаман да һыуҙан ҡурҡаһыңмы, Рәйсә? – тип һораны Фазыл, күрешеп бөткәс.

– Юҡ, хәҙер ҡурҡмайым. Һаҡмар Ағиҙелдән бәләкәй ҙә инде, – тип көлдө тегеһе.

Күҙ-баш алышып бөткәс, Әнүәр Фазылға Ҡотлогилде янынан урын күрһәтте. Роза Фатима янына ултырҙы.

– Һин дә сиҙәм үҙләштереүсе булаһыңмы, һылыу? – Фатима Розаға өндәште.

– Эйе, сиҙәм күтәреүсе. Фазыл менән берлектә ата-бабаларҙан ҡалған ашлыҡты айырым рәүештә урып-йығыу технологияһын аяҡҡа баҫтырыу өҫтөндә рационализаторлыҡ эшен башҡарабыҙ.

---

**Аҙағы. Башы 8-се һанда.*

– Уңышлы килеп сыҡты. Беҙҙең проект буйынса комбайн заводтарында урғыстар һәм йыйғыстар эшләп, уларға һынау үткәрәһе генә ҡалды, – тип өҫтәне Фазыл.

– Ишеттем, Әнүәр һөйләгәйне. Бик ҙур эш башҡарғанһығыҙ. Рәхмәт. Һеҙҙең проект буйынса кустарный эшләнгән урғыслы лафетығыҙҙы беҙ ҙә эшләп, ҡуллана башланыҡ. Комбайндарына таға торған урғыстарығыҙҙы ла файҙалана башларбыҙ, Алла бирһә, комбайн заводтары эшләп сығара башлағас, – тип яурынынан тапап һөйҙө Ҡотлогилде Фазылды.

– Роза менән һине ысын күңелдән ҡотлайбыҙ, – Әнүәр тағы ла ниҙер әйтергә генә теләгәйне, уны Рәйсә бүлдерҙе:

– Ниңә ҡунаҡтарҙы ҡыҫтамайһың, Әнүәр? Ҡаҙы, ял һоғондор. Ана шулай. Әтеү хәбәр һөйләп тик ултыраһың. Рюмкаларыңды ла тоттор.

– Ғәфү итегеҙ, йәмәғәт. – Әнүәр ҡунаҡтарына берәр ҡырҡым ҡаҙы, ял тоттороп, рюмкаларҙы тултырҙы, сәкәштереп сыҡты.

– Һау булайыҡ.

– Етте! Үҙең эсмә, Әнүәр, ҡунаҡтарыңды һыйлай алмаҫһың, – тип Рәйсә әйтеп өлгөрөр-өлгөрмәҫтән, Әнүәре төп күтәргәнсе эсеп тә өлгөрҙө.

– Эсмәҫтән алда әйтәләр уны. – Рюмка артынса Әнүәр тағы ла бер ҡырҡым ҡаҙы ҡапты. – Онотма.

– Ә һин, Ҡотлогилде, Әнүәрҙән өйрән, – тип көлдөрҙө Фатима ҡунаҡтарҙы.

– Ҡуй ҡойроғоноң майы барыбер йылҡы ялына етмәй, – тине Фазыл, йылҡы ялын сәйнәй-сәйнәй.

– Ҡаҙаҡтар гел ҡуй ғына һуямы, йылҡы һуймаймы? – Ахырҙа Сафуандың да теле асылды.

– Һуя. Улар йылҡы итенән дә өҙөлмәй. Тик улар беҙҙең совхозда бик аҙ.

– Ҡаҙы ла яһай, тиҙәр. Тик күргәнем дә, ашағаным да булманы. Ә ҡуй итенә бер мәртәбә юлыҡтым. Эре, ҡалын итеп ҡырҡылған һалманы ҡул менән тоҙлоҡҡа манып ашарға тура килде. Телеңде йоторһоң, – тине Роза.

Бына шулай ашап-эсеп, һөйләшеп ултыра торғас, төн уртаһы ла етә яҙҙы. Ҡотлогилде ҡайтырға рөхсәт һораны.

– Кил, тип әйтмәк бар, ҡайт, тип әйтмәк юҡ. Рөхсәт итһәң, хуш итәйек, Әнүәр.

– Ултырайыҡ әле, – тип ҡаршы төштө тегеһе.

– Юҡ, юҡ. Әйҙә хуш ит, Ҡотлогилде, – тип ҡырҡа һуҡты Фатима.

Ҡотлогилде хуш иткәс, башҡалар ҙа ҡуҙғала башланы.

– Иртәгә Фазылды балыҡ тоторға алып барайыҡ, Ҡотлогилде ағай, – тине Әнүәр, уның пинжәген кейҙерә-кейҙерә.

– Әлбиттә, алып барырбыҙ. Тик иртәгә түгел.

– Ҡасан?

– Берһегөн. Иртәгә йоҡо һимертеп алғас, беҙгә килерһегеҙ. Ҡунаҡтар юлдан мунса төшөп, бер аҙ ял итер. Шунан мәжлес башлап ебәрербеҙ.

– Шулай, ауыл халҡының яҙғы баҫыу эштәренән бушап тын алып ҡалған ваҡыты йылына бер мәртәбә генә килә. Иртәгә ҡунаҡтарға ял бирәйек, Әнүәр, – Фатима ла иренең һүҙен ҡеүәтләне.

...Һөйләшеү буйынса, икенсе көн төштән алда мунсаға төшөү, ҡунаҡ булыу менән үтте. Төштән һуң ирҙәр кисеү аръяғындағы Борамташ, ә ҡатын-ҡыҙ Ҡаяташ аҫтында һыу инде. Фатима, Рәйсә, Фәниә ҡайтып киттеләр, ә Роза ир-ат менән бергә ауылдың көнсығышында урынлашҡан Ҡаратауға күтәрелде. Тирә-яҡ бынан ус эсендә кеүек күренә.

– Ғәжәп күренеш! – тип һоҡланды Роза.

– Уңға ҡараһаң – бер йылға, һулға ҡараһаң – икенсе йылға. Күрәһеңме, Роза?

– тип һораны Фазыл, хәлбүки, ике йылға Ҡаратау аръяғында ҡушыла тип уйлағандыр. – Әйҙәгеҙ, тауҙың түбәһенә күтәрелеп ҡарайыҡ.

Күтәрелеп ҡараһалар, бөтөнләй икенсе картина. Ике йылға тигәндәре бер йылға булып сыҡты. Ҡаратауҙы урап сыға, ә Ҡаратау Камчатка ярымутрауы һымағыраҡ ярымутрау икән. Ярымутрауҙың ҙур өлөшө – йәйелеп ятҡан дуға һымаҡ оҙон туғайлыҡ. Ҡаратауҙың, Камчатка ярымутрауының Палона ҡасабаһы урынлашҡан нәҙек урыны кеүек, тар ғына урыны бар, Элмәлек тип атала. Атаҡлы ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтов йырлаған «Элмәлек» йырының тарихы ошо ер атамаһы – Элмәлеккә бәйле булыуы ла бик ихтимал. Элмәлекте тарихи урын тип атаһаң да, хата юҡтыр. Был Элмәлек тураһында Аҡсура, Ҡайраҡлы (хәҙерге исемдәре Үрге Ғәле, Түбәнге Ғәле) ауылдары ҡарттары һөйләгән легенда ла бар. Йәнәһе, күсмә халыҡтар аслыҡ йылдарында башҡорт еренә сапҡын яһаған һәм йылҡы малын өйөр-өйөрө менән ҡыуып алып китә торған булған. Шуға күрә был ике ауыл халҡы малын ярымутрауҙың Элмәлек тип аталған был нәҙек урыны аша Ҡаратау туғайына ҡыуып төшөрөп сапҡынсыларҙан һаҡлап алып ҡала торғандар, имеш.

Ҡаратау түбәһенән күренеп ятҡан тирә-яҡты Фазыл фотоға төшөрҙө. Был урындан бигерәк тә Аҡсура ауылы йәмле күренә. Был фотоларҙың берәрен ул юлға сығарҙан алда Әнүәргә, Ҡотлогилдегә, Сафуанға бирҙе. Араһында башҡа фотолар ҙа бар ине.

– Бына, күрәһегеҙме, Ҡаҙағстанда үҙ ҡулдарыбыҙ менән төҙөгән ҡасаба. «Сиҙәм» тип атаныҡ. Тирә-яғында осо-ҡырыйы күренмәгән баҫыу... Самолеттан төшөрөп алынған. Үҙегеҙ йәшәгән урындар менән сағыштырып ҡарағыҙ.

***

Көн тымыҡ, нәҡ балыҡ тота торған көн. Әнүәр ҡунағы Фазыл менән үрге кисеүгә килгәндә, Ҡотлогилде уларҙы көтә ине инде. Опто ҡармаҡларға тип, Ҡотлогилде Фазылды эйәртеп кисеү аша Һаҡмарҙың уң яғына сыҡты ла һыу ағышына ҡаршы ятыу буйлап үрләй башланы. Ә Әнүәр сабаҡ ҡармаҡларға йылғаның был яғында тороп ҡалды. Тегеләр кисеү сыҡҡансы ике сабаҡты һирпеп тә өлгөрҙө.

– Әйҙә, Ҡотлогилде ағай, кире сығып беҙ ҙә сабаҡ ҡармаҡлайыҡ, – тине Әнүәрҙең ҡарыштай ғына балыҡтарына ымһынып Фазыл.

– Ашыҡма, Фазыл ҡусты, сабыр ит, – Ҡотлогилде әйберҙәрен ергә һалды. Яҙғы ташҡын һыу ситенә сығарып ҡалдырған сүп-сар араһынан эре ағас һыныҡтары йыйып алып килде. Ҡолас етмәҫлек йыуан тирәк күләгәһенә ут яҡты. Ә һыу ситенә баҫып, һыуға ҡарашын төбәгән Фазыл, һыу төбөнә төшкән ҡояш шәүләһен күреп булһа кәрәк, шиғыр һөйләй башланы.

*Салт-аяҙ көн. Ҡояш юъарынан*
*Сәләм бирә төҫлө йылмайып,*
*Ә шәүләһе аҫтан, һыу төбөнән,*
*Ҡаш һикертә миңә шаяртып.*

*Яр ситенә баҫып ҡарап торам*
*Ҡаш һикерткән ошо шәүләне,*
*Юъарыъа ҡалҡып ҡарап алам,*
*Ныҡ саъылһа, йомам күҙҙәрҙе.*

*Үҙ шәүләһен ҡыуып һыуъа бата*
*Һыу өҫтөндә осҡан күбәләк.*
*Күбәләкте ҡарпып балыҡ йота,*
*Һыу өҫтөндә теҙеп түңәрәк.*

– Шә-ә-әп! – тип ҡул сапты Ҡотлогилде. – Кем шиғыры?

– Үҙемдеке. Ошоноң ише Ағиҙел буйында балыҡ ҡармаҡлағанда уйға килгәйне.

– Ә ниңә электән үк яҙманың һуң?

– Донъя ҡуласа, Ҡотлогилде ағай, һуғыш ҡамасауланы, белем етеңкерәмәне.

– Белем етмәһә, рационализаторлыҡ эшенә тотоноп була тиме. Ә һеҙ тотонған эш конструктор булған кешенең генә ҡулынан килә.

– Ни эшләмәк кәрәк, белем алыуҙы һуғыш бүлде. Һуғышҡа киткән атайҙар, ағайҙар урынына станоктарға, һабанға тотондоҡ. Ун өс-ун дүрт сәғәт эш көнө. Аяҡ өҫтө йоҡоға талған саҡтар ҙа булды. Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу ҙа, һуғыш бөткәс, беҙҙең быуын өлөшөнә төштө. Көндөҙ – эш, ә кистәрен – киске мәктәптә уҡыу. Һуғыш бүлгән белем алыуҙы һаман дауам итәһең инде ул, – тине әсеһен дә, сөсөһөн дә күргән Фазыл.

Эйе, заводта токарь булып эшләне. Ситтән тороп уҡып, ауыл хужалығы институтын тамамланы. Инженер һөнәренә эйә булды. Партия саҡырыуына яуап итеп, сиҙәм күтәрә башланы. Отпускыһын йыл да Башҡортостанда үткәрҙе. Шиғырҙарын төрлө баҫмаларға тәҡдим итеп ҡарай. Сәбәп табалар ҙа бора ла сығаралар. Шиғыр яҙыу, йәнәһе, һиңә сиҙәм күтәреү түгел. «Телебеҙгә, әҙәбиәтебеҙгә бына һеҙҙең быуын кешеләре ҙур зыян килтерҙе», – тигән һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килде Фазылға. Пенсияға сыҡҡас, бер яҙыусы: «Пенсияға сығалар ҙа китап яҙа башлайҙар», – тине. Йәнәһе, конкурент, икмәген бүлешә. Былдай ҡараш өлкән быуын кешеләренә хатта матбуғат биттәрендә лә күренгеләй. Бер гәзиттә донъя күргән әҙәби байҡауҙы – зәһәрле тел менән яҙылған пасквилде уҡыған Фазылдың иҫ-аҡылы китте: «Яҙыусылар менән бер ҡаҙанда ҡайнамаған, оло көтөүлектә көтөлмәгән ижадсы, барыбер ҙә, үҙ булып китә алмай. Ижадты икенсе планға ҡуйған ир-егеттең олоғайғас, сәбәләнеп, нимәлер ҡыуып етергә тырышыуы әсенеү тыуҙыра. Йәш сағында яҙып та, һуңынан илке-һалҡыланып, донъя мәшәҡәттәренә күмелеп 70 йәшкә еткәндәр ҙә аҙ түгел. Был осраҡта былдай ҡәләм «оҫталарына» бик теләһәң дә ярҙам итеп булмай. Үндайҙар үҙҙәренә-үҙҙәре күптән үк хөкөм сығарғандарын да аңларлыҡ хәлдән сыҡҡан булалар».

– Әллә әҙәби байҡауҙың авторы ауыртҡан ереңә баҫтымы, Фазыл ҡусты?

– Юҡ, Ҡотлогилде ағай, ауыртҡан еремә баҫманы. Һуғышта ҡатнашҡан йәки тылда еңеүгә ҙур өлөш индергән, үҙен фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарған беҙҙең быуын кешеләренең яраһына тоҙ һибә, үҙе һыуын эскән ҡоҙоҡҡа төкөрә ул...

Кемдәр һуң ул Фазыл кеүек «илке-һалҡылар» быуыны һәм әҙәби байҡау авторы кеүектәр быуыны? Тәүгеләре – 1931–1935 йылдарҙа тыуған Фазыл кеүектәр быуыны, белем алыуы өҙөлгән һуғыш ветерандары. Улар үҙҙәре бер быуын кешеләре булараҡ, йәки һуғышҡа киткән атайҙары, ағайҙары урынына вахтаға баҫты, йәки ун ете йәше лә тулмаған өс йылға өлкәнерәктәре һуғышта ҡан ҡоя. Уларҙың белем алыуы өҙөлә. Ә икенселәре – әҙәби байҡау авторы кеүек 1932–1941 йылдарҙа тыуған быуын кешеләренең белем алыуы өҙөлмәне. Уларҙың өстән бер өлөшө тип әйтерлек ауыл Советтары янында махсус ойошторолған балалар йортонда тәрбиәләнде. Һуғыш тамамланғас, Фазыл кеүек өлкәнерәк быуын кешеләре лә ҡайтты. Шағир Әмир Моратов (Төхфәт Мораттың ҡустыһы, хеҙмәт һәм һуғыш ветераны ине) кеүек ижады өҙөлөп торғандары ла күп ине араларында. Бер нисә китабы донъя күреүенә ҡарамаҫтан, Яҙыусылар союзына ҡабул ителмәне. Зәңгәр экрандан күрһәтелгән әҙип, бошоноп, өлкәндәр ижадына иғтибар етмәүе тураһында асыҡтан-асыҡ әйткәйне, бөтә республика ишетте уның үпкә һүҙҙәрен. Үкенескә ҡаршы, Әмир Моратов хәҙер донъяла юҡ инде, иманын юлдаш итһен. «Күсәгилешлек принциптары тупаҫ боҙола.

Ҡиммәттәр юҡҡа сыға», – тип әйтмәксе ине бит мәрхүм, сөнки уларҙы өлкән быуын кешеләре үҙе менән ҡәбергә алып китә. Әҙәби әҫәр ижад иткән кеше тик бер яҙыусылар ҡаҙанында ғына ҡайнарға тейеш, тип күсәгилешлеккә кәртә ҡуйыу ҡарашы, – Фазылдың уйынса, үҙең ултырған ботаҡҡа балта сабыу менән бер. Сөнки ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем төрлө тармаҡта эш алып барған Королев һәм Курчатов кеүек исеме, даны донъяға таралған ғалимдар, мәҫәлән, ижад кешеләре түгелме һуң? Әйтәйек, шул уҡ Королев һәм уның уҡыусылары, Циолковский үҙенә-үҙе хөкөм сығарғанын да аңларлыҡ хәлдән сыҡҡан, тигән ҡараштә торһа, ни булыр ине. Ә ниңә китап һөйөүселәр әҙәби әҫәр уҡымай, тип зарланабыҙ. Сөнки яҙыусылар йәмәғәт ҡаҙанында түгел, тик яҙыусылар ҡаҙанында янырға тейеш, тигән идея менән һуғарылған һәм тормошто насар белә.

«Бына шулай, шиғриәт менән хушлашырға булдыңмы инде?» – тип һораны шиғырын яттан һөйләп бөткәс тәрән уйға батҡан Фазылдан Ҡотлогилде. Үҙе кистән үк юнып, Ҡаҙағстан ҡунағы өсөн әҙерләгән ҡыуалға ҡармаҡ ебе бәйләп, ысҡынырлыҡ түгелме, юҡмы тип тартҡылап ҡараны.

– Юҡ. Йәшәйешебеҙгә ҡарата изге тойғолар урғылып сыға башлаһа, ҡәләм үҙенән-үҙе ҡулға ҡуна.

– Тырышҡан – ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан. Шулай ит. Минең ҡоҙа Наил Ғатауллин – даны бөтә илгә таралған хирург, медицина фәндәре докторы, академик. Өҫтәүенә, танылған рәссам да. Бер һөнәре икенсеһенә ҡамасауламай. Ә хәҙер бына был резина итектәрҙе кей, сумканы беләгеңә эл, ҡыуалыңды тот. Ана шулай. Әйҙә, минең арттан. – Ҡотлогилде һыуға керҙе лә ятыу уртаһына ҡарай атланы.

Ятыу артыҡ тәрән түгел, түштән.

– Һин, Фазыл ҡусты, һыу ағышына ҡарай минән дүрт-биш метр самаһы алыҫлыҡҡа үрлә. Ана шулай. Хәҙер тиреҫ ҡортон ҡармағыңа ҡаптыр. Сеү, ебе тартылды, ҡыуал бөгөлдө. Тимәк, эләккән. – Ҡотлогилде, ҡыуалын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтыра һалып, ҡармаҡ ебен ике ҡуллап үҙенә тарта башланы һәм башы күренгән оптоно айғолағынан эләктереп тә алды. Килонан кәм түгел. – Күрҙеңме? Хәҙер ҡармағыңды минең кеүек ташла. Тик талға эләкмәһен.

Фазыл ҡармағын ташлағайны, таллыҡҡа етмәне, ҡырын төштө.

– Зыяны юҡ, Фазыл ҡусты. Ҡабат һелтә. Ана шулай-й-й... Ҡапты. Ашыҡма, ебеңдең һуҙылыуын көт. Ана шулай. Ә хәҙер ҡармаҡ ебен үҙеңә ике ҡуллап тарта башла.

Фазылдың оптоһо Ҡотлогилде тотҡан оптонан да ҙурыраҡ ине.

Улар ут яҡҡан урынға килгәндә, ҡуҙы төшкәйне.

– Бәй, утың янып бөткән дә, Ҡотлогилде ағай. Ни эшләйбеҙ инде?

– Ҡуҙы төшкән. Һинең менән миңә шуныһы ла етә, – Ҡотлогилде сумкаһынан сығарып ҡуҙға бер опто һалғайны, Фазыл да сумкаһына тотондо. – Тотонма, өсөбөҙгә бер опто ла етә.

***

Йән дуҫтар булған Фазыл менән Әнүәрҙе тормош, сиҙәм эпопеяһы башланыуға бәйле, икеһен ике яҡҡа ташлағайны. Һуңғыһы үҙенең тыуып-үҫкән Башҡортостанының сиҙәм үҙләштергән көньяҡ-көнсығыш райондарының береһендә төпләнһә, икенсеһе Ҡаҙағстан киңлектәрендәге осо-ҡырыйы күренмәгән, әҙәм аяғы баҫмаған далаға еректе. Айырма ҙур, әлбиттә, сөнки сиҙәм күтәреү Башҡортостанда башлыса утыҙынсы йылдарҙа уҡ тамамланғайны инде.

Роза менән Фазыл үҙ ҡулдары менән ҡасабалар, элеваторҙар төҙөнө. Фазыл – Сиҙәм ҡасабаһында ауыл хужалығы машиналары инженеры, ә Роза күрше совхозда баш агроном булып эшләй. Донъя өйрәтә, тигәндәй, икеһе берлектә

рационализаторлыҡ эше башлап ебәрҙеләр. Уларҙың ата-бабаларҙан ҡалған ысулды – ашлыҡты айырым рәүештә бүлеп урып-һуғыу технологияһын аяҡҡа баҫтырыу бөтә илгә, шул иҫәптән Башҡортостанға ла, таралды.

...Балыҡ тотҡандың икенсе көнөндә Ҡотлогилде Ҡаҙағстан ҡунаҡтарын, колхоз рәйесенең «Победа»һына ултыртып, сәсеү әйләнеше торошо менән таныштырырға алып сыҡты. Ҡунаҡтарҙы бигерәк тә Ҡәнифә юлы буйындағы сиҙәм күтәргән майҙандар ҡыҙыҡһындырғас, Ҡотлогилде уларҙы баҫыу станы ҡаршыһындағы убаға алып менде. Был урындан тирә-яҡ ус эсендә кеүек күренә. Убаның аръяғы электән һөрөлгән, ә сиҙәм күтәргән майҙан көньяҡта йәйрәй.

– Сәсеүлектәр урман ҡатыш дала зонаһында икән, – тип башлап ебәрҙе Фазыл әңгәмәне.

– Башлыса шулай, әлбиттә. Ләкин Һаҡмар йылғаһының уң яғы – тотош урман.

– Ул яҡта сәсеү майҙандары юҡмы ни?

– Бар. Унда баҫыуҙар ҙур булмаған яландарҙа урынлашҡан.

– Ә ужым культуралары менән эш нисек һуң? – Роза күҙҙәрен колхоз биләмәләре төшөрөлгән картаға төбәне.

– Ужым культураларын сәсеү әйләнешенә ярашлы, тик ана шул урман зонаһындағы ҙур булмаған яландарға сәсәбеҙ.

– Тимәк, йыл да түгел.

– Әлбиттә. Ужым культураларын ялан зонаһында башҡа хужалыҡтар ҙа сәсмәй, сөнки уңыш бирмәй.

– Әйҙәгеҙ, сиҙәм күтәргән майҙандарҙы барып урында ҡарайыҡ.

– Әйҙәгеҙ, – тип ҡеүәтләне Фазыл Розаның тәҡдимен.

Машина Ҡотлогилдене ҡунаҡтары менән ҡасандыр Әнүәр ташҡа эләктереп һабанын боҙған урынға алып килде. Ҡалҡыу урын. Ул көнбайыштан көнсығышҡа һуҙылған һәм ҡылған үләне менән ҡапланған. Күренеүенсә, сиҙәм күтәргән осорҙа һөрөлмәй ҡалған.

– Ошо буламы инде һеҙҙең сиҙәм үҙләштергән урындарығыҙ? – Роза ҡарашын өндәшмәгән Әнүәрҙән агроном Ҡотлогилдегә ҡарай борҙо.

– Эйе, Роза, тап ошо урын.

Тирә-яғына ҡарап аптырап торған Фазыл да телгә килде.

– Ә ниңә уның ике яғы ла ташландыҡ хәлгә килгән?

– Башҡа хужалыҡтарҙа төрлөсә булды. Ә бына беҙҙең колхоз биләмәләрендә сиҙәм күтәреү авантюра булып сыҡты, – тип яуап бирҙе лә Ҡотлогилде, баштан-аяҡ һөйләп бирҙе.

– Бөтә бәлә ана шунда. Был урын көтөүлек булған. Юғарынан баҫым яһап һөрҙөрҙөләр, – тип асыҡлыҡ индерҙе Әнүәр.

– Булған да бөткән, – тине Ҡотлогилде «аңлаштыҡ, нөктә ҡуйҙыҡ» тигән мәғәнәлә.

МТС-тан ҡайтышлай мотоцикл менән килеп туҡтаған Сафуан һүҙ айышына төшөнөп өлгөрҙө булһа кәрәк.

– Елгә ҡаршы төкөрөп ни ҡылдың, Ҡотлогилде ағай? – тине, уның үҙе өсөн әсенеп. Уның әсенеүе Әнүәргә лә күсте, буғай.

– Өндәшмәй генә үткәреп ебәрергә кәрәк булған һиңә, – тине.

– Хәҙер ҙә колхоз рәйесе булып эшләп йөрөгән булыр инең бит, – тип өҫтәне бойоҡҡан Сафуан.

– Аңлашылды. Күп һүҙ быҙау имеҙә, тиҙәр, нөктә ҡуяйыҡ. Ә Ҡотлогилде ағайға килгәндә иһә, яңғыҙ ҡарға ҡарҡылдап йыл килтерә алмай, тигәндәй, машинаны яңғыҙы ғына туҡтата алмаған, – тине Фазыл.

– Ә иң ҡиммәте шунда: Ҡотлогилде ағай обыватель булмаған, намыҫына

тоғро ҡалған. Ә беҙ, ҡәҙерлеләрем, унының алдында баш эйергә тейешбеҙ. Әйтегеҙ әле, Ҡотлогилде ағай, сиҙәм эпопеяһы осоронда ниндәй етди хаталар ебәрелде? – Роза һүҙгә икенсе йүнәлеш бирҙе.

– Хрущевтың белдеге буйынса сиҙәм егерме һигеҙ – утыҙ миллион гектарға барып етте. Йәнәһе, халыҡ массаларының үҙҙәренең инициативаһы. Ил етәксеһе быны менән дә сикләнмәне. Ике йыл үтеүгә утыҙ алты миллион гектарҙа сиҙәм күтәрелгәйне инде. Ә һөҙөмтә? Икмәккә туйҙыҡ, әлбиттә. Ләкин дала зонаһында тереклек тотороҡлоғо юҡҡа сыҡты. Экологияға ҙур зыян килде. Уңыштың утыҙ-ҡырҡ процентын юғалта инек. Өҫтәүенә, шул утыҙ алты миллион гектар майҙандың егерме – егерме биш проценты өс-дүрт йыл үтеүгә сәсеү әйләнешенән сығарылды, – тип әсенеп яуап бирҙе Ҡотлогилде.

– Шул уҡ ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу Ҡаҙағстанда ла булды, – тип өҫтәне Фазыл уңайлы ғына мәлдә.

– Ә ниңә беҙгә сиҙәм өсөн бүленгән сығымдың бер өлөшөн игенселекте интенсив үҫтереү маҡсатында тотонмаҫҡа ине, аграр секторы алға киткән илдәр кеүек...

– Дөрөҫ. Улар сиҙәм күтәрмәйенсә лә гектар ҡеүәтен күтәреү, йәғни игенселек тармағын интенсив үҫеш юлына баҫтырыу һөҙөмтәһендә мул уңыш алырға өлгәшә һәм, хатта, донъя баҙарына ашлыҡ сығара. Сөнки уларҙың сиҙәм күтәрерлек ерҙәре лә ҡалмаған. Ә беҙ аҙағын уйламайбыҙ. Әйтәйек, Башҡортостандың Әбйәлил, Хәйбулла райондарында «Сиҙәм» тип аталған ике совхоз ойоштороу еткәйне бит, ниңә райондарҙың башҡа хужалыҡтарына ла сиҙәм күтәреүҙе көсләп тағырға ине? Тәбиғи сабынлыҡтар һәм көтөүлектәр һөрөлөп юҡҡа сыҡты. Артыҡ мауығыу... Хатта Баймаҡ колхоз-совхоз театрын «Баймаҡ сиҙәм театры» тип йөрөтә башланыҡ. Ни Аллаға, ни муллаға. Сөнки мал аҙығы етешмәү һөҙөмтәһендә мал һаны ҡыҫҡарҙы. Ит, һөт етешмәй башланы. Хужалыҡтар сәсеү майҙандарын ҡыҫҡартыу иҫәбенә мал аҙығы өсөн бер йыллыҡ үләндәр сәсергә кереште. Диспепсия сиренән быҙау, бәрәстәр үлә, мал һаны ҡыҫҡара башланы. Ҡылған массивтарын сама белмәй һөрөп юҡҡа сығарыу Башҡортостанда экология тотороҡлолоғон боҙҙо. Һөҙөмтәлә, ҡоролоҡтар йышайҙы, гектар ҡеүәте кәмене. Ике йыл рәттән ҡоролоҡ булды. Донъяла булмаған хәл. Етмеш дүртенсе-етмеш бишенсе йылдарҙа Урал аръяғы хужалыҡтары Латвия, Литва, Эстонияла һалам әҙерләп, малын үлтермәй һаҡлап алып ҡалды. Һалам менән бергә колорадо ҡуңыҙын алып килеп таратты. Ләкин хужалыҡтарҙың үҫеше ярты быуатҡа артҡа алып ташланды. Күп инде касафаты, күп...

Ниңә «Башмедьстрой» тресы юҡҡа сыҡты? Ике йыл рәттән ҡоролоҡ булыуы һөҙөмтәһендә Урал аръяғы хужалыҡтарының кәмәһе ҡомға терәлгәс, гектар ҡеүәте лә, мал һаны ла ҡырҡа кәмене. Түҙөлөш алып барырлыҡ хәл ҡалманы: трест банкрот тип иғлан ителде. Сеймал етешмәү һөҙөмтәһендә Сибай элеваторы, Сибай ит һәм һөт комбинаттары ла ҡеүәттәрен тулыһынса файҙалана алманы. Күренеүенсә, сиҙәм эпопеяһы осоронда ебәрелгән хаталар шойҡаны еңел сәнәғәт предприятиелары бәкәленә лә ныҡ һуҡты.

– Тимәк, был хәл – экологияға кеше ҡулы килтергән зыян, – тине Фазыл.

– Әлбиттә. Ни сәсһәң – шуны урырһың, Фазыл ҡусты, – тип әсенде Ҡотлогилде.

– Ә бына бөгөнгө донъя финанс системаһы кризисы эҙемтәһе сиҙәм эпопеяһы осоронда ебәрелгән хаталар эҙемтәһенә ҡарағанда ла глобаль ҡурҡыныс булыуы ихтимал.

– Ихтимал, ваҡытында сара күрмәһәк. Әйткәндәй, СССР-ҙың бөтә етәкселәре лә иҡтисадта «ике»гә генә өлгәшеүселәр булды. Уларҙы иҡтисад бөтөнләй

ҡыҙыҡһындырманы. Улар тик идеологияны, сәйәсәтте, оборонаны ғына беренсе планға ҡуйҙы.

– Ә бөгөнгө етәкселәр ниндәй һуң, Ҡотлогилде ағай?

– Күҙ тейә күрмәһен – маҡтауға лайыҡ. Алдан күрелгән саралар бар. Һәр хәлдә әлеге лә баяғы Кремль ҡарттары түгел. Ил хәҙер Горбачев заманында алған бурыстарҙы ла халыҡ-ара валюта фондына ҡайтарып биреп бөттө. Илдең иҡтисад, оборона ҡеүәте лә ныҡ күтәрелде, – тип яуап бирҙе Ҡотлогилде, сөнки өлкән быуын кешеһе булараҡ, Кариб кризисы осорон яҡшы хәтерләй ине ул.

Әңгәмәнең сиҙәм проблемаларынан халыҡ-ара хәл проблемаларына күсеүе тәбиғи ине.

– Ә һеҙҙә, Ҡаҙағстанда, сиҙәм күтәреү ниндәй йүнәлеш алды? – Ҡотлогилде һүҙҙе кире юсыҡҡа борҙо.

– Беҙ, һеҙҙән айырмалы, урындарҙа партия номенклатураһы сәскә атып өлгөрмәгән ҡола яланға барып төштөк. Партияның район комитеттары барлыҡҡа килде килеүен, ләкин һуңыраҡ. Партия аппараттарына башлыса ауыл хужалығы белгестәре булған агрономдар, ауыл хужалығы институтын тамамлаған инженерҙар, зоотехниктар килгәйне, ә аҙаҡ яңы асылған партия мәктәптәрен тамамлаған кадрҙарға, ауыл хужалығы белгесе булмаһа, ирек бирмәнек, – тип яуап бирҙе Фазыл.

Унын әйтеүенсә, совхоздарҙың үҙәк усадьбаларын төҙөү, генераль планға ярашлы, баҫыу эштәре башланыу менән бер рәттән башлана. Һалҡын төшөүгә үҙәк усадьба ҡасабалары үҫеп сыға. Һыу башнялары, МТМ, автомобиль паркы, ашхана, мәҙәниәт һарайы, медпункт кеүек башҡа объекттар төҙөлә. Район үҙәктәре берәй совхоздың үҙәк усадьбаһында ойошторола, район һәм ауыл Советтары барлыҡҡа килә. Фазылды ла райкомдың беренсе секретары вазифаһына тартҡылап ҡарайҙар. Ул баш тарта. Сөнки Роза менән хеҙмәттәшлек итеп башлаған рационализаторлыҡ эшен тамамларға, Башҡортостан ауыл хужалығы институтына килеп, кандидатлыҡ диссертацияһын яҡларға йыйынғайны. Ә был эш уңышты юғалтыуһыҙ йыйып алыу һәм дәүләт бураларына оҙатыу проблемаһы Ҡаҙағстанда Башҡортостанға ҡарағанда ла киҫкен булыуы менән бәйле. Шуға күрә Роза менән башлаған эшен ташламаҫҡа булды.

– Бына шулай беҙҙең хәлдәр Ҡаҙағстанда, – тине Фазыл Ҡотлогилдегә.

– Аңлашыла... Ә малсылыҡ тармағы бөтөнләй юҡмы?

– Малсылыҡ үҫә. Һарыҡ үрсетеүгә лә ныҡлап тотондоҡ. Игенселеккә ҡарағанда ла отошло. Тик, башта шуны иҫәпкә алмағанбыҙ, көтөүлектәр алыҫ. Ҡасабалар тирәһен уйламайынса һөрөп бөтөргәнбеҙ.

– Үҙ файҙағыҙға.

– Нисек... үҙ файҙабыҙға?

– Англияла нисек була ун алтынсы быуаттарҙа... «Һарыҡтар кеше ашай» тигәндәр, сөнки игенселеккә ҡарағанда йөн, ә йөндән буҫтау етештереү отошло була башлаған донъя баҙарында. Хатта «Һарыҡтарҙың тояғы ҡомдо алтынға әйләндерә» тигән әйтем дә барлыҡҡа килә.

– Әлбиттә, хәтеремдә, урта быуаттар тарихы дәреслегендә шулай тип әйтелә.

– Сөнки һарыҡ саранча менән бер. Һарыҡ үрсетеү менән артыҡ мауығыу ҙа экологияға ҙур зыян килтерә. Ул ҡылған үләнен бөтөрә. Тимәк, сиҙәм күтәреү менән артыҡ мауыҡмаған кеүек үк, һарыҡ үрсетеү менән дә артыҡ мауығыу кәрәкмәй.

– Нисек мауыҡмайһың, йылдан-йыл дәүләткә йөн һатыу планы арта барҙы.

– Тимәк, беҙҙең етәкселәр ҙә ун алтынсы быуатта англичандар ебәргән хатаны ҡабатлай бөгөн. Бөгөн – отошло, ә иртәгә...

***

Ҡаҙағстан ҡунаҡтары килгәнгә дүрт-биш көн үтеп бара. Уларҙың Өфөгә китер ваҡыты етте. Фазыл да, Роза ла ауыл хужалығы институтында кандидатлыҡ диссертацияһын яҡламаҡсы. Рәйсә әхирәте Венеранан көн дә хат көтә, ләкин хәбәр юҡ. Фазылдан һорашырға ҡыймай, сөнки уңайһыҙлана: Роза Рәйсә менән Венераның әхирәттәр икәнен белә. Уның тураһында Фазыл һөйләгәйне. Венера Фазылды көтмәгән, кейәүгә сыҡҡан... Фазылға ни ҡалған? Ире ҡыҙғанып ташлағас, Розаға өйләнгән. Ә Венераның яҙмышы Рәйсәгә билдәһеҙ. Был хәлде нисектер яйлау кәрәклеген Әнүәр ҙә, Фазыл да яҡшы аңлай. Уратып ҡына һүҙҙе Фазыл башланы.

– Әхирәтең Венера менән хат алышаһығыҙмы, Рәйсә?

Ҡатындарҙы уңайһыҙ хәлдән Әнүәр ҡотҡарҙы.

– Әллә, дуҫҡайым, йөрәгең уйнай башланы инде һинең, – тип һүҙҙе уйын-көлкөгә бороп ебәргәйне, Фазыл эләктереп алды.

– Бәй, ата-бабаларыбыҙ ғүмер-ғүмергә ике ҡатын менән йәшәгән. Венераны икенсе ҡатынлыҡҡа алһам, Роза ҡаршы килмәҫ, тип уйлайым.

– Ә мин алдан өлгөрөп, Венераның иренә икенсе ҡатынлыҡҡа барһам, ни эшләрһең? – Башлап Рәйсә көлдө, шунан башҡалар ҡушылды.

– Так что, Фазыл, ҡошсоғоң осҡан, хатта, миңә лә хат яҙыуҙан туҡтаны, – тине ошо уйын-көлкө һөҙөмтәһендә Венера яҙмышын белә алған Рәйсә. – Үҙе йығылғас, иламаҫ. Ә минең Венераһыҙ ҙа әхирәтем бар.

– Кем ул һуң һинең яңы әхирәтең, сер булмаһа, Рәйсә? – тип һорай һалды Фазыл.

– Бына. – Рәйсә Розаға күрһәтте. – Мәңгегә!

Роза Рәйсәне ҡосаҡлап үпте. Ике дуҫ ҡатындарының бер-беренән уңайһыҙланыуы ана шулай ҡул менән алып ташлаған кеүек булды.

– Мосолман донъяһында ике ҡатынға өйләнеү, Ҡотлогилде ағай, диндең Башҡортостан менән Татарстанға үтеп инеүе менән аңлатыла, булһа кәрәк.

– Шулайҙыр, Фазыл ҡусты. Тик хаттинлашыу булды, әлбиттә. Бигерәк тә байҙарҙа.

– Ярлы-ябаға ла ҡалышмаған түгелме һуң байҙарҙан?

– Ярлы-ябағаның икенсе ҡатынға өйләнеүе хаттинашыуҙан түгел, – тип тарихҡа бәйләп аңлатып бирҙе Ҡотлогилде. – Баҡтиһәң, ярлы-ябағаны икенсе ҡатынға өйләндереү башҡорт халҡының яҙмышына бәйле икән. Ә уның тамыры тәрән.

...Ере менән борон башҡорт халҡы өс өлөшкә бүленә һәм Ҡазан, Себер, Ноғай урҙаһы хандары иҙеүенә дусар була. Бүлгеләнеп, ассимиляцияға эләгеү, этнос булараҡ юҡҡа сығыу ҡурҡынысы башҡорттарҙы Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылырға мәжбүр итә. Башҡорттарҙы Иван Грозный ҡушҡуллап ҡабул итә. Ғәскәрен малсылыҡ тармағының йылҡысылыҡҡа өҫтөнлөк биргән башҡорт атлылары иҫәбенә ҙур көскә әйләндерә. Ә һуғыштар йыш була һәм оҙаҡҡа һуҙыла. Бик күп башҡорт егеттәре башын һала. Бала-сағаһы етем, ә ҡатыны тол ҡала. Башҡорт ерендә ир заты ҡырҡа кәмей. Был хәл, әлбиттә, ырыу башлыҡтарын, аҡһаҡалдарҙы борсомайынса ҡала алмай. Башҡорт милләтенең генофондын һәм уны этнос булараҡ һаҡлап алып ҡалыу – рәсми рәүештә сәйәсәткә, ә ирҙәре һуғыш яланында ятып ҡалған тол ҡатындарҙың икенсе ҡатынлыҡҡа сығыуы ғәҙәти хәлгә әйләнә. Ғәҙәттә, тере ҡалған ҡустыһы тол ҡалған еңгәһенә йәки тере ҡалған ағаһы тол ҡалған килененә өйләнер булған. Аҡһаҡалдар хатта ун өс – ун биш йәшлек үҫмерҙәрҙе лә тол ҡалған еңгәләренә өйләндергән. Ауырыу

китһә лә, ғәзәт китмәй, тигәндәй, был хәл Совет власы башланған осорҙа ла күҙәтелә ине. Ә бөгөн был күренеш тарих төпкөлөндәге хәтирә генә.

***

Опто ҡармаҡлауҙың бындағыса әмәлен күптән үк Һаҡмар буйына килеп төпләнгән Әнүәр йүнләп белмәй ине. Үҙ күҙҙәре менән күргәс, был ысулды Фазылдан өйрәнеп ҡалмаҡсы булды. Ҡунаҡтары иртәгә Өфөгә китә... Көтмәгәндә:

– Әйҙә, Фазыл, һыпырттыҡ опто ҡармаҡларға. Бер юлы һыу ҙа инербеҙ, – тине.

– Әйҙә, – тип тегеһе риза булды.

Ирҙәре киткәс, Рәйсә менән Роза икәүҙән-икәү генә ҡалды.

– Беләһеңме, Рәйсә, Фазыл бит минең икенсе ирем, – тип сиселде Роза.

Баҡтиһәң, уның Фазыл менән мөнәсәбәте күрше совхоздың баш агрономы булараҡ бергәләп рационализаторлыҡ уңайы менән башланып киткән икән. Тәүге йылда яҙғы баҫыу эштәре уңышлы тамамланыуға ҡарамаҫтан, сиҙәм эпопеяһында барлыҡҡа килгән кәмселектәр тик ураҡ барышында күренә башлай. Бер юлы урып-һуғыу технологияһы буйынса  йыйып алынған ашлыҡ ырҙын табаҡтарында ҡыҙа һәм яна. Ә уны дәүләт бураларына оҙатырға транспорт етешмәй. Өҫтәүенә, булған бөтә элеваторҙар ҙа тулған. Ә яңы элеваторҙар төҙөү эштәре тик август айҙарында ғына ҡолас ала.

– Ғәрлегем килә, – тип әсенә Фазыл ике совхоз сигендә осраған күрше совхоз агрономы Розаға.

– Ниңә? – тип һорай тегеһе.

– Ә һин... техника ҡулланып, ҙур күләмдә ашлыҡ юғалтыуҙарға юл ҡуяһың.

– Элек кулак ҡул урағы ярҙамында йыйып алған ашлығының бөртөгөн дә юғалтмай йыйып алған.

– То-то. Һин нимә, Роза, комбайндарҙан көлтә бәйләтеп, ашлыҡты баҫыу майҙанында киптергәс һуҡтырмаҡсы булаһыңмы?

– Бала-саға тиерһең, ҡолаҡҡа яҡмағанды һөйләп тораһың. Беләһеңме, ашлыҡты ата-бабаларҙан ҡалған айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһын ҡулланырға, әының өсөн комбайндарҙы  игенде урып яҫмаларға һалып  сығырға, ҡамылда киптерергә, шунан һуң ғына яҫмаларҙы йыйып, һуғыуға ҡулайлаштырырға кәрәк.

– Тә-әк?

– Әйҙә, үҙ көсөңә ышанһаң, ике инвентарь конструкциялайыҡ икәүләп. Уларҙы тағылма урғыс, тағылма йыйғыс тип атарбыҙ.

Бына шулай ике-өс көн үтеп китә. Ахырҙа, Фазыл кабинетына инеп бикләнә лә тағылма урып-һуҡҡыстың төҙөлөшөн махсус яҙылған ҡулланманан өйрәнә һәм «Беларусь»  тракторына урғыс тағылған лафет конструкцияһы һыҙмаһын төҙөй. Айырым рәүештә ике эш башҡарырға комбайндар етешмәй. Ашлыҡты башта урғыслы лафет таҡҡан «Беларусь»  урып яҫмаларға һала. Ә йыйғыс таҡҡан комбайндар яҫмаларҙы ҡамылда ятып кипкәс кенә йыйып һуға. Һуңынан ике эште лә, комбайндар күбәйгәс, үҙҙәре генә башҡара. Айырым рәүештә урыпһуғыу технологияһына ярашлы йыйып алынған ҡоро ашлыҡ янып,  юҡҡа сыҡмай. Уны, өҫтөнә пленка ябып, ырҙын табағында ҡар аҫтында ла һаҡларға була.

Ләкин был эш ике рационализаторҙың шәхси тормошона зыян килтермәйенсә лә ҡалманы: ғәйбәт тигәнең Розаның ғаиләһен тарҡатыуға алып килә. Яман хәбәр Венераға ла барып етә. Йәнәһе, тәүгеһе ире Мәжит Фәйезовҡа хыянат иткән, ә икенсеһе Венераға биргән вәғәҙәһен боҙған. Араларҙың өҙөлөүен бигерәк тә Роза ауыр кисерә. Сөнки ире, уны ташлап, участка врачы Фәриҙә

Иштуғановаға барып инә. Ә Венера, Фазылды көтмәй, кейәүгә сыға. Ярай әле, уларға үҙҙәре эшләгән совхоз директорҙары Кукушкин, Лысков ярҙамға килә, юғиһә, рационализаторлыҡ пландары өҙөлә ине.

Ҡаҙағстан ССР-ы Коммунистар партияһының беренсе секретары Д.А. Ҡунаев килеп төшкән. Кукушкин менән Фазылды Роза баш агроном булып эшләгән күрше совхозға саҡырып алды. Совхоз директоры Лысков кабинетына килеп инһәләр, Ҡунаев алдында Роза илап ултыра, күрәһең, үҙен ташлап икенсе ҡатынға киткән иренә зарлана.

– Ғәрлеге ни тора! Күрше совхоздың ауыл хужалығы машиналары буйынса инженеры Фазыл Таһиров менән, рационализаторлыҡҡа һылтанып, буталам, имеш! Инженер булараҡ ул үҙе ярҙам итергә тейеш ине лә бит, ә ул мине ярҙан этә.

– Роза Манаджановна, мин һеҙҙе яҡшы аңлайым. Шулай ҙа эште ярты юлда ташлап булмай. Үҙегеҙҙе ҡулға алығыҙ һәм эште дауам итегеҙ. Ә хәҙер йыйынығыҙ: Алма-Атаға китәбеҙ, әлеге Таһиров менән һеҙҙең рационализаторлыҡ эшегеҙ буйынса. Тик шуны дөрөҫ аңлағыҙ, – Ҡунаев урыҫсаға күсте, – цены вам нет!

– Роза, беткә үсегеп тунды утҡа яғып булмай. Ҡайғырма, эшкә тотонһаҡ, онотолор. Беләһең дә инде, һиңә түгел, миңә лә яла яғалар, – тип үтенде Фазыл.

– Атты кисеүҙә туғармайҙар, – Кукушкин да ыңғай ҡараш белдерҙе.

– Алма-Атаға барғас, заводта һөйләшербеҙ, – Ҡунаев урынынан торғас, уның артынса башҡалар ҙа ҡуҙғалды.

Кустарлыҡ ысулы менән эш ике көн тигәндә тамамланды. «Беларусь» тракторына тағылған урғыслы лафетҡа һынау Фазыл эшләп йөрөгән «Сиҙәм» совхозында уңышлы үтте. Һәм Роза ҡатнашлығында башҡарған һыҙмалар комбайн заводтарына ебәрелде. Сентябрь баштарына хужалыҡтарға комбайндар өсөн урғыстар һәм йыйғыстар килә башланы. Уңышты айырым рәүештә урып-һуғыу технологияһын ҡулланыу ашлыҡтың ҙур күләмдә янып юҡҡа сығыуына сик ҡуйҙы. Ә был ҙур һәм мөһим яңылыҡ авторҙары Фазыл һәм Роза Социалистик Хеҙмәт Геройы исеменә лайыҡ булдылар.

– Бына ошо оло кампания тамамланып, технология тормошҡа ашҡас ҡына өйләнештек беҙ Фазыл менән, Рәйсә, – тип тамамланы һүҙен Роза.

***

Халыҡ ауыл клубына ҡарай ағыла. Һәр кем урын алырға ашыға. Тик тәмәкеселәр генә ашыҡмай. Колхоз идараһы янына туҡтаған еңел машинанан райкомдың беренсе секретары Яруллин төштө лә идараға инде.

– Дөйөм йыйылыш яңыраҡ ҡына үткәрелгәйне. Был йыйылыштың ни хәжәте? – тине кемдер Айса ишетерлек итеп.

– Колхоздан совхоз системаһына күсәбеҙ, – тип яуап бирҙе тәмәке төтөнөнән ҡасып ситтәрәк торған Айса бабай.

– Ә һин быны ҡайҙан беләһең? – тип төпсөндө Һибәтулла.

– Ер аҫтында йылан көйшәгәнен дә белә Айсағойроҡ, – тине Нурғәле, бабайҙың насар ишетеүенән файҙаланып.

– Һуҡыр күп күрә, һаңғырау күп ишетә... – Зиннәт көлгәйне, уға башҡалар, хатта Айса үҙе лә ҡушылды. Был юлы Айса бабайҙың үҙенән шарҡылдап көлдөләр. Меҫкен, хәҙер шулай кешеләргә ҡушылып көлөргә күнегеп киткән, ишетмәгәс.

Идара бинаһынан түрәләрҙең сыҡҡанын күргән тәмәкеселәр, төпсөктәрен ташлап, тапаштырҙылар ҙа клубҡа инеп киттеләр. Яруллин халыҡҡа баш эйәэйә алғы рәткә килеп ултырҙы, янына ауыл Советы рәйесе Әҙелмырҙа Ғәниев

урынлашты, колхоз рәйесе Трофим Поваляев тура сәхнәгә күтәрелде. Бер аҙ күҙлек аша залға ҡарап торҙо ла, клуб тулы булғанын күргәс, йыйылышты асыҡ тип иғлан итте. Президиум һайланғас, ултырышты алып барыуҙы, көн тәртибен «ойоштороу мәсьәләһе» тип тауышҡа ҡуйҙы ла һүҙҙе райкомдың беренсе секретары Яруллинға бирҙе.

– Иптәштәр! Советтар Союзы Коммунистар партияһының беренсе секретары, халыҡ-ара коммунистар һәм эшселәр хәрәкәтенең күренекле эшмәкәре, тоғро ленинсы Никита Сергеевич Хрущев етәкселегендә совет халҡы коммунистик йәмғиәт ҡороуҙа яңынан-яңы уңыштарға өлгәшә. Уға Никита Сергеевичтың ауыл хужалығы тармағында артта ҡалған колхоздарҙы дәүләт предприятиелары булған совхоздарға үҙгәртеп ҡороу идеяһы сағыу миҫал, – тип совхоз системаһы өҫтөнлөктәрен сурытты. – Беренсе сиратта – юғары эш хаҡы. Һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ кеүек йөҙәһең, совхоз системаһына күсеү – тормош талабы булараҡ өлгөрөп еткән проблема.

Ораторҙы алдан уҡ әҙерләнгән өс-дүрт кеше яҡлап сыҡты. Урындан да байтаҡ тәҡдимдәр яңғыраны.

– Етте буштан-буш колхозға эшләү!

– Эшләп – тамаҡ, йоҡлап йоҡо туймай!

– Совхоз системаһына күсергә!

– Тауышҡа ҡуй, Трофим, тауышҡа!

Фәрештәнең амин тигән сағына тура килде булһа кәрәк – Яруллиндың теләге ҡабул булды. Сөнки ул өс рентабелле колхозға дүрт рентабелһеҙ эшләгән колхозды ҡушыуға өлгәште. Ас тамағым – тыныс ҡолағым, тигәндәй, шул дүрт артта һөйрәлгән колхоз өсөн әрләнеүҙән дә ҡотолдо. Дөрөҫөрәге, үҙе баҫым яһап, кәрәккәнгә лә, кәрәкмәгәнгә лә ҡыҫылып кәмәһен ҡомға терәткән дүрт хужалыҡтан ҡотолдо. Хәҙер районда тик дүрт рентабелле хужалыҡ ҡына ҡалды: ике совхоз, леспромхоз, лесхоз. Хәйләкәр Яруллин «Урал» колхозының тәүге партия ойошмаһы секретары Баянов менән агроном Ҡотлогилденең совхозға күсергә ҡаршы сығырын да алдан һиҙеп, сараһын күргәйне. Обкомдан путевка юллап, тәүгеһен – санаторийға, ә икенсеһен бер айлыҡ квалификация күтәреү курсына ебәрҙе. Бына шулай: бүре лә туҡ, һарыҡтар ҙа теүәл.

Ләкин тормош ҡатмарлы, гел һин уйлағанса барып сыҡмай. Беренсе секретарь, алдан ҡысҡырған әтәстең башы ауырта, тигәндәй, бер нәмәне иҫәпкә алмаған. Иҫәпкә алыу мөмкин дә түгел ине, сөнки рентабелһеҙ дүрт колхоз эшселәре теге рентабелле эшләгән өс колхоз иҫәбенә хеҙмәт хаҡы аласаҡ. Ә өс колхозда түләү хаҡы кәмейәсәк. Баянов – санаторийҙан, ә Ҡотлогилде курстан ҡайтһа, халыҡ гөж килә. Элекке «Урал» бригада булып ҡалған. Бөтә бригада тик бер йөк машинаһына ғына ҡарап тора. Ҡалған туғыҙ йөк машинаһы «Победа» усадьбаһына ҡыуылған. Колхоз ваҡытында тик өс кенә шәхси хужалыҡ йорт төҙөп керергә өлгөрмәгән. Зиннәт, Һибәтулла, Ахунйән әҙерләгән ағастарын делянкаларҙан сығармаған. Хәҙер дау ҡуптаралар. Сөнки төҙөлөш материалы ташырға траспорт өсөн совхоз үҙәгенә ике-өс мәртәбә барып ҡайталар, ләкин йомоштарын хәл итә алмайҙар. Күренеүенсә, колхоз отошло булған. Коммунистарҙың «Колхоз системаһына кире ҡайтыу мәсьәләһен партия йыйылышында ҡарарға!» тигән талабына Баянов:

– Бутҡаны кем бешерҙе? Үҙебеҙ бешерҙек – үҙебеҙгә ашарға! Поезд ушел... – тип яуап бирҙе.

Иртәгәһенә уны, Ҡотлогилде менән бергә, Яруллин райкомға саҡыртып алды.

– Ниңә ҡайтып төшөр-төшмәҫтән халыҡты ҡаңғыртып ятаһығыҙ? – тип ҡаршы алды түрә уларҙы.

– Беҙ түгел, һеҙ үҙегеҙ ҡаңғыртаһығыҙ, иптәш Яруллин.
– Эйе, үҙегеҙ, – Ҡотлогилде яҡлап сыҡты Баяновты, бурҙың бүреге яна, тигән мәғәнәлә.
– Минме! – Яруллин һикереп торҙо.
– Ни өсөн агрономды – курсҡа, мине санаторийға ебәрҙегеҙ? – Баянов руссаға күсте. – За красивые глазки, да?
– Ит изгелек – көт яуызлыҡ!
– Яуызлыҡ түгел, ә ҡара эттең бәләһе – аҡ эткә.
Яруллин Ҡотлогилде менән Баяновтан ҡотолоу яғын ҡараны, ҡул һелтәне.
– Сығып китегеҙ...

***

...Ҡайһы бер йылдарҙа күк йөҙөн ҡара болот ҡаплап ала ла йәшен йәшнәй башлай. Бирҙе Аллам, тип күк йөҙөнән күҙеңде лә алмайһың. Тик өмөтөң аҡланмай. Яумай үтә лә китә ымһындырған болот. Йәки ҡойоп яуа ла ҡапыл туҡтай, хатта йырғанаҡтар ағып китә, соҡор-саҡырға һыу тула. Вағыраҡ йылғаларҙың ташҡан саҡтары ла булғылай. Йылы-йылы менән шулай. Ә оҙайлы ямғырҙар – һирәк. Һөҙөмтәлә ҡойма ямғыр ергә һеңеп өлгөрә һәм ер аҫтындағы дымлы тупраҡҡа барып тоташа алмай, парға әйләнеп оса ла бөтә. Ҡайһы бер йылдарҙа ҡоролоҡ ана шулай барлыҡҡа килә лә инде. Уны «тупраҡ ҡоролого» тип атайҙар.
Бөгөн дә күк күкрәп, йәшен йәшнәп, ҡапыл яуып үтте. Совхоздың «Урал» бүлексәһе агрономы Ҡотлогилде ярауай баҫыуына ашыҡты. Баҫыу ҡырына килеп туҡтаны ла атын ҡалдырҙы. Тарантастан тимер көрәк алып, уртағараҡ барып, соҡор ҡаҙығас, кеҫәһенән йыйылмалы метр сығарып, ямғыр дымының тәрәнлеген үлсәне лә башын сайҡаны. Ямғыр һыуы аҫтағы дымға тоташа алмаған... Тимәк, ҡойоп яуһа ла, файҙаһы булманы был ямғырҙың.
– Агроном, һаумы, ни эш бөтөрәһең? – Тауышҡа Ҡотлогилде һиҫкәнеп китте: артында – райкомдың беренсе секретары Яруллин. Машинаһын агрономдың аты янында ҡалдырған, шатлығы йөҙөнә сыҡҡан. Ҡул биреп күреште. Күк йөҙөнә күҙ йөрөтөп сыҡты. Ямғыр тағы ла булмаҫмы, йәнәһе.
– Ямғыр һыуы тупраҡҡа ниндәй тәрәнлектә үтеп ингән тип үлсәйем.
– Йә һуң?
– Аҫтағы дымға тоташмаған. Ҡоролоҡ булмаһа ярар ине.
– Паникаға бирелмәйек, агроном. Ямғырҙар йыш бит, – тине лә түрә, ҙур аҙымдар менән баҫыу киңлеген үлсәй-үлсәй, машинаһы яғына ҡарай атланы. Күрәһең, «тупраҡ ҡоролого» тураһында бер ни ҙә белмәй.
Шул йылы биш-алты колхоздан ойошҡан совхозда гектар ҡеүәте түбән булды, һөҙөмтәлә дәүләткә ашлыҡ тапшырыу планы үтәлмәй ҡалды. Шунан һуң ике йыл уңыш яҡшы булды, пландар арттырып үтәлде. Өсөнсө йылы «тупраҡ ҡоролого» булғанға оҡшай, сөнки оҙайлы ямғырҙар яуғаны юҡ, ә ҡойма ямғырҙар йыш булып тора. Был юлы бер мәртәбә ҡойма ямғырҙарға ышанып ауыҙы бешкән райкомдың беренсе секретары Яруллин баҫыу майҙандарын ҡарарға совхоз директоры Аҙнабаевты үҙе менән бергә алып сыҡты. Күрәһең, үҙенә-үҙе ышанмай. Ҡурҡа. Башта совхоздың үҙәк бүлексәһендә сәсеү майҙандарын ҡарап сыҡтылар.
– Мине «Урал» бүлексәһендәге эштәр торошо менән таныштыр, – тине Аҙнабаевҡа.
– Әйҙәгеҙ. Үҙем дә «Урал» бүлексәһенә йыйынғайным...
«Урал» бүлексәһе биләмәләренә етеүҙәре булды, бойҙай сәселгән майҙанда ат

күренде. Бүлексә агрономы Ҡотлогилде аты икән. Агроном үҙе ер соҡоп маташа.

– Йә, аҡһаҡал, был ҡойма ямғыр аҫтағы дымға тоташа алғанмы? – Совхоз директоры, тубыҡланып, соҡорҙо ҡапшап ҡараны.

– Тоташҡан, тоташҡан, Әхмәр Яҡупович.

– Тимәк, был майҙанды яһалма һуғарыуҙың кәрәге юҡ? – Аҙнабаев ҡулына йәбешкән тупраҡты һул ҡулы менән һөртөп төшөрҙө.

– Эйе, кәрәге юҡ.

Беренсе секретарь ҡыҫылмайынса түҙәме?

– Ә ниңә «Комсомол» бүлексәһендә һуғараһығыҙ, ә бында һуғармайһығыҙ?

– Унда ямғырҙың осо ғына эләкте, тупраҡҡа һеңмәне. Дым тоташа алманы. Ямғыр яумаһа ғына һуғарабыҙ, – тип аңлатты Аҙнабаев, күҙ күрер, тигәнерәк мәғәнәлә.

Биш йөҙ тонна ашлыҡтың серемтәһен йәшереү мөмкин түгел. Аҙнабаев белеп ҡалһа, дау ҡуптарасаҡ. Яруллинға ниңә Аҙнабаев менән конфликтҡа инергә? Ул бит райком эшенә тик ыңғай йоғонто яһай ала. Бына ни өсөн Яруллин Аҙнабаевты райком бюроһына ағза итеп һайлатты. Ә бөкөрөнө тик ҡәбер генә төҙәтә. Бер йылы бүҙәнә, икенсе йылы тартай һимеҙ, тигәндәй, йыл да уңыш яҡшы булмай. Ә быйылғы йыл сәсеү майҙандарын һуғарыу һөҙөмтәһендә мул уңыш бирҙе. Совхозға беркетелгән хәрби автоколонна дәүләт бураларына ашлыҡ оҙатып өлгөрә алмай. Совхоздың ырҙын табаҡтары ла, буш торған биналар ҙа, шул иҫәптән элекке заготзерно буралары ла ашлыҡ менән тулған. Яуаплылыҡтың ҙур булыуын яҡшы аңланы Яруллин. Аҙнабаевтың бошонмауы... Тимәк, ул ашлыҡты юғалтыуға юл ҡуймаҫына ныҡ ышана. Тик теге райкомдың беренсе секретарына серен асырға ашыҡмай. Сөнки Яруллиндың хужалыҡ етәкселәренең инициативаһын үҙләштерә йәки, ялағайланып, беренсе секретарь М.З. Шакиров инициативаһы итеп күрһәтә торған ғәҙәте булыуын яҡшы белә.

...«Урал» колхозы партия ойошмаһы секретары Баяновтың идеяһын үҙләштереү, совхоз системаһына күскәнсә, колхоз осоронда булған хәл. Бала сағы урман төпкөлөндә үткән «Урал» колхозы партия ойошмаһы секретары Баянов 1933 ҡоролоҡ йылын яҡшы хәтерләй. Атаһы андыҙ, ҡырлы ҡурай, ат ҡолағы, һарына, әтләк, айыу ҡурайы кеүек эре үләндәр үҫкән лапылыҡта ҡышҡылыҡҡа бесән әҙерләй. Сөнки үләндең сығышы урман араһында ла насар. Атанан күргән – уҡ юнған, тигәндәй, Баянов һыбай колхоз биләмәләрен арҡырыһынан буйына тиклем ҡарап сыға. Башына, ниңә әле лапылыҡтарҙа үҫкән эреле-ваҡлы урман үләндәренән йә ялан янындағы ваҡ йылғаларҙың буйынан-буйына үҫкән ике-өс метр бейеклектәге ҡамыштарҙан кукуруз ҡатнаштырып силос һалмаҫҡа, тигән уй килеп һуға. Был бит – мал аҙығы! Ҡайтып төшһә, колхоз рәйесе Поваляев төшөнкөлөккә бирелгән:

– Колхоз малын аслыҡтан ҡырып бөтөр ҙә хоть төрмәгә ултыр, – тип башын ыуалап ултыра колхоз идараһында.

– Брось, Трофим, паниковать, – тине уға Баянов.

– Что я, по-твоему, должен делать? Повеситься?

– Бөгөн үк мал аҙығын әҙерләү буйынса декада иғлан итәбеҙ.

– Нисек?

– Берәр тыу бейә йәки дәү һыйыр һуйырға ҡуш субботник өсөн. Әлегә ҡымыҙ һатыуҙы тый, өмәлә ҡатнашыусыларға кәрәк булыр. Конторалар ҙы ябабыҙ. Аяҡҡа баҫҡандарҙың бөтәһен дә субботникка йәлеп итәбеҙ. Шул иҫәптән – урта мәктәп уҡытыусыларын да, медработниктарҙың бер өлөшөн, – тип Трофимға уйлаған идеяһы тураһында һөйләп бирҙе.

Бала-сағалы хужабикәләрҙе лә субботникка йәлеп итеү маҡсатында, мәктәп

интернатында ясли асылды. Сөнки төп эште ҡул салғыһы менән башҡарғас, ҡул көсө етешмәй. Силос соҡорҙары янына ҡуйылған силос комбайндары ҡул менән сабып килтерелгән ҡамыштарҙы, эре үләндәрҙе ваҡлап, силос соҡорона һиптерә. Әҙме-күпме булһа ла был массаға кукуруз ҡушып һалына. Ике декада тип әйтерлек һуҙылған субботник һөҙөмтәһендә бөтә силос соҡорҙары ла тула. Йылдағы күләмдә силос һалына.

Декада иғлан итеүҙең өсөнсө көнөндә райкомдың беренсе секретары Яруллин килеп төшә, бәй, колхоз идараһы ла, ауыл Советы ла ябыҡ. Тик почта бүлексәһе башлығы ғына телефон һағалап ултыра. «Урал» колхозында Яруллин оҙаҡлап тормай, декада барышы менән таныша ла кире район үҙәгенә юллана. Кабинетына инер-инмәҫтән телефонына тотона һәм өлкә комитеттың беренсе секретары М.З. Шакировҡа шылтырата. Имеш, партияның район комитеты, ҡамыштан, лапылыҡтарҙағы эреле-ваҡлы үләндәрҙән мал аҙығы әҙерләү буйынса декада иғлан итеп, бөтә урында субботник ойоштора. Әҙерләнгән йәшел масса кукурузға ҡушып силосҡа һалына. Хатта силосҡа үткән йылдарҙан ҡалған һалам да ҡатнаштырыла.

– Был эште атҡарһаҡ, веткормаға тотонабыҙ, – тип тамамланы һөйөнөслө хәбәрен райкомдың беренсе секретары.

Иртәгәһенә ул партактив үткәрҙе. Партактив ҡабул иткән ҡарарҙа: «Партия өлкә комитеты, уның беренсе секратары М.З. Шакиров ...мал аҙығы әҙерләү буйынса айлыҡ иғлан итергә. Йылға, күл буйҙарындағы ҡамыштарҙы, лапы урындарҙа үҫкән эреле-ваҡлы үләндәрҙе, шулай уҡ үткән йылдарҙан ҡалған һаламды кукурузға ҡатнаштырып силос һалырға... Практик эш башҡарыуҙы партияның район комитеттары контроллегендә хужалыҡ етәкселәренә йөкмәтергә, обком күрһәтмәһен ...хуплап ҡаршы алырға», – тигән юлдар бар.

Йәнәһе, инициатива урындан түгел, юғарынан башлана. Ә партия ойошмаһын (Баянов етәкләгән «Урал» колхозы колхозсылары) инициативаһы тураһында ләм-мим. Күренеүенсә, Яруллин Баяновтың инициативаһын үҙләштерергә ҡурҡа. Үҙ файҙаһына шулай очко йыйырға күнеккән ялағай. Хәйләкәрлегенең сиге юҡ.

Элегерәк ашханалары булмаған урындарҙа хужалыҡ етәкселәре, ашау ваҡыты етһә, юғарынан килгән етәкселәрҙе өйөнә алып ҡайтып ашата торғайны. Баянов Яруллинды алып ҡайтҡан төшкөлөккә.

– Онотоп ултырам: һеҙгә Стәрлетамаҡтан сәләм әйткәйнеләр, – ти хужа ҡунағына.

– Кем һуң ул сәләм еткереүсе?..

Хужа, бер ни ҙә булмағандай, ҡунаҡтың һөйәркәһе исемен әйтте лә ҡуйҙы.

– Таңһылыу Ғайсина.

– Сәләм әйтергә тейеш. Ҡатыным Бикә менән әхирәт була торғайнылар. Үҙең дә яҡшы беләһең, – тип Баяновҡа күҙ ҡыҫты, йәнәһе, ҡатының алдында юҡты һөйләп ултыраһың...

Хужа ла, ҡунағын ашарға ҡыҫтаған булып, һүҙҙе икенсегә борҙо.

Барыһын да аңлап ултырған хужабикә: «Бал килтер, тип әйтһәң ни була?» – тигән булып, көлөп ебәрмәҫ өсөн, аш бүлмәһенә сығып китеү яғын ҡараны.

– Таңһылыуҙың бынан китеүенә лә дүрт-биш йыл булалыр. Хәҙер ҡайҙа йәшәй икән? – тигән булды Яруллин, һуңғы адресын белмәксе.

– Һөйләшеп тора алманыҡ. Таңһылыу автобустан төштө, мин шул автобусҡа ултырырға тора инем. «Яруллинға сәләм әйтерһегеҙ», – тип әйтеүе булды, автобус ҡуҙғалып та китте, – тип ҡотолдо Баянов.

– Ахти-и-и! – тип әйтеүҙән башҡаһы ҡалманы түрәгә.

Ул арала бал менән тултырылған һауыт тотоп хужабикә килеп инде. Сәй эскәс, хужа ҡунағын оҙатып ҡуйҙы.

Быйылғы мул уңышты, ҡар аҫтында ҡалған хәлдә лә юғалтмайынса дәүләткә пландан тыш ашлыҡ һатыу серен Аҙнабаев хәйләкәр һәм ялағай Яруллинға әлегә асмаҫҡа булды. Сөнки инициативаһы «Баяновтың инициативаһы» кеүек үк юғарынан төшкән инициатива йәки Яруллиндың үҙенең инициативаһы булып күренәсәк, Социалистик Хеҙмәт Геройының алтын йондоҙо түшенә килеп тә ҡаҙаласаҡ. Бик тә булмаһа, награда Ленин орденынан да кәм булмаясаҡ. Аҡыллы. Эшһөйәр, намыҫлы кешеләр иҫәбенә дәүләт наградаһына лайыҡ булмаҡсы хужалыҡ етәкселәре һәм белгестәре эшенә ҡыҫылыуының һөҙөмтәһендә зыян килтереүҙән башҡаны белмәгән район етәксеһе. Шуға күрә Аҙнабаев ғәҙелһеҙлеккә кәртә ҡуйыу сараһын да алдан күрергә мәжбүр булды. Сөнки тегеһе компетентһыҙлығы арҡаһында авантюраға бирелеп, тағы ла эште боҙоуы мөмкин. Ә совхоз директоры «Ашлыҡтың бер генә башағын да юғалтмаҫҡа!» тигән принципта эш итте. Әлбиттә, баҫыу майҙандарында урып-һуғыу тамамланды тип әйтерлек. Һабаҡта ашлыҡ аҙ ғына ҡалған, юғалтыу ҡурҡынысы юҡ. Ә бына ырҙын табаҡтары тулған ашлыҡтың ҡар аҫтында ҡалып, бутҡаға әйләнеү ҡурҡынысы бар. Аҙнабаев уны һаҡлап алып ҡалыу сараһын да алдан күрҙе. Был турала Яруллинға әйтеп торманы. Сөнки уның кирегә ҡайырырға яратыуын яҡшы белә. Өлкә комитеттың ауыл хужалығы мөдире Гульвановҡа алдан уҡ пленкаға заявка бирҙе. Заявка үтәлде. Япмаларҙы Өфөгә машина ебәреп алдырҙы. Ә таҡталарҙы совхоздың пилорамаһында быстырып, үҙәк усадьбаның ырҙын табағына ташытты. Урта мәктәптә уҡығанда уҡ стреометрия фәненән алған белемен файҙаланып, алты-ете йөҙ тонна ашлыҡ һыймалы ҡоролманың чертежын төҙөнө. Ырҙын табағында урын булмағас, уның эргәһендәге ҡалҡыуыраҡ урынды тигеҙләтеп тапатты ла был майҙанды таҡта менән бер метр бейеклегендә кәртәләтте. Төбөнә пленка йәйҙерҙе. Совхоздың бөтә ырҙын табаҡтарында таҙартылған игенде (Яруллиндан йәшерен) хәрби колоннанан ошо ашлыҡ һаҡлар өсөн төҙөлгән ҡоролмаға ташытты. Унса ашлыҡты ике-өс аҙна эсендә генә элеваторға ташып бөтөү мөмкин түгел, айға һуҙыласаҡ. Ә иртәгә, синоптиктар хәбәр итеүенсә, ҡар яуыуы һәм буран сығыуы көтөлә. Ярай әле, хәрбиҙәрҙе, элеваторға ашлыҡ оҙатмайынса, хужалыҡ эшендә файҙаланыу тураһында Яруллин белмәй, белгән булһа, дау ҡуптарып, совхоз директоры Аҙнабаев дәүләт бураларына ашлыҡ оҙатыу эштәрен аңлы рәүештә өҙә, тиер ине.

Прогноздар дөрөҫкә сыҡты. Иртәгәһенә көнбайышта бәләкәй генә ҡара болот күренде. Әлегә көн аяҙ. Ел юҡ. Әммә оҙаҡламай теге ҡара болот ҙурайғандан-ҙурая барҙы ла күк йөҙөн бөтөнләй ҡаплап алды. Ябалаҡлап ҡар яуа башланы. Күҙ асҡыһыҙ буран сыҡты. Икенсе көндө таңға ғына тымды. Теге көндө көйәләнеп ҡайтып киткән беренсе секретарь тағы килеп етте.

– Ниңә элекке көн военный автоколонна элеваторға иген ташыманы?

– Бәй, ҡар аҫтында ҡалдырыуҙан ҡурҡып... Хәҙер пленка ябылған ашлыҡты юғалтыу ҡурҡынысы янамай.

– Ә автоколонна хәҙер ҡайҙа?

– Ашлыҡ тейәп, элеваторға оҙаттыҡ.

– Ә-ә... ҡайҙан тейәне? – «Беренсе», күрәһең, дәүләт урында ҡабул итеп, элекке заготзерноның буш торған биналарына урынлаштырған ашлыҡты ташый башлаған, тип аңланы. – Что за чертовщина!

– Бер кем дә юҡты бушҡа ауҙармай. – «Беренсе»нең уйын шунда уҡ аңлап өлгөргән Аҙнабаев, уны эйәртеп, теге ашлыҡты ҡар аҫтында ҡалыуҙан ҡотҡарып ҡалған ҡоролманың зернопогрузчик торған башына алып килде, сөнки

Яруллиндан һаҡлаған серҙе йәшереүҙең хәҙер кәрәге юҡ. – Ашлыҡты хәрби колоннаға тейәп, бына ошо урындан элеваторға оҙаттыҡ.

Совхоз директорының серен һәм үҙенең шәрегә ултырыуын Яруллин тик хәҙер генә аңланы.

– Молодцы! – тип маҡтаған булды. – Ә был ҡоролманы ҡаплаған ҡарҙы ни эшләтмәк булаһығыҙ?

– Көн һәр ваҡыт ошолай тормаҫ. Аяҙытһа, ҡарҙы көрәп, пленкаһын асабыҙ ҙа ашлыҡты дәүләт бураларына оҙатасаҡбыҙ. Иң мөһиме, ашлыҡты юғалтыуға юл ҡуйманыҡ.

Хужалыҡ етәкселәре партноменклатура баҫымы аҫтында һәм хужалыҡ эштәренә туранан-тура ҡыҫылыуы һөҙөмтәһендә бына шулай етмеш йыл буйына интекте. Илдә кризис партияның үҙенән башланды. Миҫал итеп М.З. Шакировты беренсе секретарь вазифаһынан бушатҡан пленумды алыу ҙа етә. Шакировты яманлағандарҙың күбеһе – ялағайҙар. Улар араһында «Мине Шакиров үҙенең яратмаған райком секретарҙары категорияһына керетә торғайны», – тип сығыш яһаған Яруллин бар ине, ул да обком аппаратына үрләне һәм «партияның үлеме»нә ҙур өлөш индерҙе. Партноменклатура сәскә атты. Сөнки кадрҙар сәйәсәтендә тайпылыш бик ҙур булды. Дөрөҫөрәге, илдә кадрҙар әҙерләү ике йүнәлештә алып барылды. Үҙәк Комитет һәм урындағы комитеттар өсөн кадрҙар үҙәк һәм өлкә комитеттары янында махсус асылған юғары һәм ике йыллыҡ партия мәктәптәрендә әҙерләнде. Өлкә, район, ҡала комитеттары менән тик улар ғына етәкселек итте, ә хужалыҡтың төрлө тармаҡтары өсөн кадрҙар юғары һәм урта белем биргән уҡыу йорттарынан сыҡты. Улары, белгестәр булараҡ, сәнәғәт, аграр сектор, транспорт предприятиелары менән етәкселек итте, инженер, агроном, экономист вазифаларын башҡарҙы.

Етәкселек итеү иҡтисадты һәм хужалыҡ тармағын бөтөнләй тип әйтерлек белмәгән йәки өҫтән-мөҫтән генә төҫмөрләгән партия мәктәптәре әҙерләгән кадрҙар араһында ҡапма-ҡаршылыҡлы конфликттар тыумай ҡалыуы һис тә мөмкин түгел. Бәлки, партияның етәксе органдарына инженер, агроном кеүек белгестәр күберәк үрләтелгән булһа, бындай хәл булмаҫ та ине. СССР тарҡалғас ҡына бындай күренешкә сик ҡуйыла, район, ҡала администрациялары менән белгестәр етәкселек итә башлай.

***

Үҙе менән яҙ тормош мәшәҡәттәрен дә әйҙәп килә. Баҫыу эшсәндәре ҡарын көрәп, ҡышҡы бурандар күмгән ауыл хужалығы машиналарын баҫыу стандарына сығара, майлай, әҙерлек һыҙығына теҙә. Аҙна үтеүгә, дым ҡаплау башланды. Тупраҡ сәсеү кондицияһына еткәс, сәсеү агрегаттары ла ҡуҙғалды. Механизаторҙар, сәсеүселәр төшкө ялға туҡтаған. Ашарға ултырғандар.

– Рәхәт булып ҡалды. Ниңәлер быйыл уполномоченныйҙар күренмәй.

– Ысынлап та. Ҡырау һуҡты микән? – тип ҡеүәтләне Һибәтулла, Әнүәрҙең һүҙәрен көлкөгә һабыштырып.

– Ҡыйын икән. Әнүәр Яруллинды һағынған, – тип төрттөрҙө Рамазан Әнүәргә.

– Һағынһа, һейҙеген һарғайтыр әле. – Зиннәт шарҡылдап көлдө. Әнүәр ашайашай һүҙен дауам итте.

– Партноменклатураның һинең менән миндә ҡайғыһы юҡ, Зиннәт. Шакировты обкомдың беренсе секретары вазифаһынан Горбачев бушатҡайны, үҙенең дә аяҡ аҫтында тупраҡ һелкенә...

– Бер яҡтан, илдә власҡа талаш, икенсе яҡтан, дәүләт милке тип иғлан

ителгән, тик уның ысын мәғәнәһендә дәүләттеке булмаған хужаһыҙ милкенә талашыу ана шулай башланып китте лә инде, туғандар, – Ҡотлогилде күҙҙәрен һүҙ башлаған Әнүәргә төбәне. – Әйт әле, нимә тигәйне шул турала Рәхимов?

Әнүәр яуап бирә алмаған, һорауына Ҡотлогилде үҙе яуап бирҙе.

– Беҙ, ана шул үҙәктә власҡа талаш башланыуҙан файҙаланып, күтәреп ҡала алдыҡ республикабыҙҙы, тине Президентыбыҙ, вәт тәк! Ҡомһоҙлоҡтоң сиге юҡ. Бер мәртәбә бүленгән донъяны ҡабат нисә мәртәбә бүлергә мөмкин? Ҡомһоҙ монополистар бөгөн дә шуға ынтыла. НАТО Рәсәй сигенә килеп терәлде. Бәлки, мин алдайымдыр...

Айса бабай әңгәмәгә ҡушылды. Алдында сәйәси брошюра ята, буғай.

– Ҡотлогилде кеүек һуғышта ҡан ҡойған яугир булараҡ әйтәм. Америка хәҙер донъяны бүлеү тураһында түгел, ә донъяла үҙе хакимлыҡ итеү тураһында һүҙ алып бара.

...Шулай, Бөйөк Ватан һуғышын үткән был ике яугир хаҡлы. Икенсе Донъя һуғышынан һуң Германия Федератив Республикаһын әлеге лә баяғы Америка менән Англия ҡоралландырҙы. Японияның Нагасаки, Хиросима ҡалалары Икенсе Донъя һуғышы тамамланды тигәндә атом бомбаһына тотолдо. Һалҡын һуғыш... Илде индустриаллаштырыр өсөн заем бирмәгән кеүек үк, союзниктарыбыҙ һуғыштан һуң халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыр өсөн дә ярҙам итмәне, ярҙан этте. 1946-1947 йылдарҙа уңыш насар булды. Илдә аҙыҡ-түлек проблемаһы ҡырҡыулашты. Ырҙын табаҡтарынан кейем аҫтына йәшереп өс-дүрт килограмм ашлыҡ алғандар алты йылдан ун йылғаса хөкөм ителеп, холоҡ төҙәтеү лагерҙарына оҙатыла торҙо. Сөнки беҙгә лә тиҙерәк халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырырға, илебеҙ бойондороҡһоҙлоғон һаҡлар өсөн атом бомбаһын етештереүгә тотонорға, ҡоралланырға кәрәк ине. Хоҡуҡ һаҡлау органдарының 1947 йылдың 4 июнь Указы менән артыҡ мауығыуы ла булды, әлбиттә. Лагерҙарға оҙатылған тотҡондар срогынан алда ҡайта башланы. «Ниңә срогынан алда?» – тип һораһаң: «Әрәмтамаҡтарҙың кемгә кәрәге бар», – тип кенә яуап бирәләр. Баҡтиһәң, цемент ҡатыштырып бут ташынан нигеҙ һалыу кеүек иң ауыр эште башҡарған арзан ҡул көсөн хәҙерге заман техникаһы алмаштыра. Төҙөлөшкә элек һуғыш ҡоралдары етештергән заводтарҙан крандар, бульдозерҙар, тимербетон конструкциялар килеп тулған икән. Тотҡондарҙың арзан ҡул көсө үҙен аҡламай башлаған.

Күренеүенсә, беҙҙе УК-ның 58-се статьяһына таянып, илде индустриаллаштырыр өсөн һәм 4 июль Указына ярашлы, һуғыштан һуң халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыр өсөн арзан ҡул көс тупларға Төньяҡ Атлантика хәрби блогы, НАТО-ға ҡаршы Варшава договоры илдәренең хәрби берекмәһен ойошторорға ла Америка менән Англия баҫымы мәжбүр итте. Беҙ бит үҙебеҙҙе генә түгел, бөтә донъяны фашизм ҡоллоғонан да, колониаль ҡоллоҡтан да ана шулай мәжбүри арзан ҡул көсө ҡулланыу юлы менән һаҡлап ҡала алдыҡ. Тик үҙебеҙ ҡорбан иткән ата-бабаларыбыҙҙың илде индустриаллаштырырға фиҙакәр хеҙмәтен әле булһа ла танымайбыҙ. Әйтерһең дә, беҙ уларҙы тик ашатып-эсерер, йоҡлатыр өсөн генә ҡорбан иткәнбеҙ. Ғәмәлдә Америка тирмәненә һыу ҡоябыҙ. Американың элекке президенты Рональд Рейган шундай оятһыҙлыҡҡа барып етте – СССР-ҙы «яуызлыҡ империяһы» тип атаны. Ә ваҡыт яуызлыҡ империяһының СССР түгел, ә Америка үҙе булыуын иҫбат итте.

– Хәҙер социалистик система, уның цитаделе булған СССР ҙа, Варшава договоры илдәренең хәрби берекмәһе лә юҡ. СССР тарҡалды, ә Рәсәй, Американың үҙе кеүек үк, баҙар иҡтисады юлына баҫты. Был Америкаға тағы нимә етмәй? – тип борсола Әнүәр.

– Беләһеңме, Рәсәй халҡы донъя халҡының тик ике процентын ғына тәшкил итһә, донъя ҡаҙылма байлыҡтарының өстән бер өлөшөнә эйә. Йәнәһе, ғәҙелһеҙлек. Бына ни өсөн НАТО, быуар йылан кеүек, көнсығышҡа ынтыла, хәҙер Рәсәй сигенә килеп терәлде, – тип аңлатмаҡсы Ҡотлогилде Әнүәргә.

– Һин, беҙгә тик ҡул күтәреүҙән башҡаһы ҡалманы, тип әйтмәкһеңме?

– Был һорауыңа В. Путин былай тине: «Беҙҙә төрлө ядро ҡоралы бөтә термоядро ҡоралы булған илдәр менән һуғышыр өсөн дә етерлек». Аръяғын үҙең аңла.

***

Яҙғы баҫыу эштәре тамам. Бүлексә агрономы Ҡотлогилде ярауайҙарҙың сығышы менән ҡәнәғәт булып ҡайтып килә. Баш осонда – һабантурғай, ә Һаҡмар янындағы тирәклектә һандуғас һайрай, кәкүк саҡыра. Алдан ауылға ҡарай йәйәүле кеше китеп бара. Яурынына ниҙер аҫҡан. Атлауы таныш һымаҡ.

– Әссәләмәғәләйкүм.

– Вәғәләйкүмәссәләм. – Юлсы Ҡотлогилдегә юл бирҙе.

– Әйҙә, ултыр. – Ҡотлогилде уң яҡ ситкә күсте. – Ҡайҙа юл тотаһың?

– Аҡсура ауылына. – Мосафир тарантасҡа менеп, хужаға ҡушлап ултырҙы.

– Туҡта, туҡта... – Ҡотлогилде мосафирҙың йөҙөнә һынаулы ҡараны. – Таныш һымаҡһың.

– Буканов! – Мосафир хеҙмәттәшен беренсе булып таныны.

– Брагембетов! – Ҡотлогилде Бремжанды ҡосаҡлап алды. – Ниндәй елдәр ташланы беҙең яҡтарға?

– Ил ҡыҙырам, дуҫҡай, ил, – тип яуап бирҙе ҡаҙаҡ.

– Ҡайҙа йәшәйһең?

– Ҡаҙағстанда инде.

Баҫмасыларға ҡаршы көрәштә ҡатнашҡан хеҙмәттәштәр – Ҡотлогилде менән ҡаҙаҡ егете Бремжан – көтмәгәндә ана шулай осраштыі. Бремжан Ҡотлогилдегә Аҡсураға килеп төпләнеү ниәте тураһында һөйләп бирҙе. Хеҙмәттәштәр баҫмасыларға ҡаршы көрәштә ҡатнашҡан ауыр ваҡыттарын, яу яланында баштарын һалған иптәштәрен, шул иҫәптән эскадрон командиры Дмитрий Смирновты ла, иҫкә алдылар.

– Вера Смирнова хәҙер ҡайҙа?

– Күрше Хәйбулла районында. Низам Бохарбаевҡа тормошҡа сыҡты.

– Уларҙы ла осрата алам икән, Алла бирһә.

– Әлбиттә. Ике ул, бер ҡыҙ үҫтерәләр. Өлкәне Эдуард Смирновтан. Кесе һеңлем Йәүһәрҙең өлкән ҡыҙы Ғәлиәгә өйләнде. Айраты менән ҡыҙы – Низамдан.

– Ә Сәғитулла Дәүләтҡолов ҡайҙа?

– Аҡсурала йәшәй. Уның менән бөгөн үк күрешә алаһың. Икенсе йомаға Вера менән Низамды саҡырып ҡунаҡ күрһәтермен. Алдағы йомаға саҡырып булыр ине, ауыл көтөүен көтөргә сығам.

– Көтөүсегеҙ юҡмы әллә?

– Юҡ шул.

– Үҙем көтәйем ауыл малын, бик тә булмаһа.

– Балалар сөннәтләп йөрөйөм, тигәйнең түгелме?

– Мал кәртәгә ингәс тә өлгөрөрмөн.

– Көтөүсе тигән исемдән ғәрләнмәһәң, көт.

– Һин әллә мине ярлы-йолҡош тип беләһеңме? Байлығым етерлек минең, Ҡотлогилде. Запрысты йорт һалып керәм.

– Ғәфү ит, Бремжан. Йорт һалып, ғаиләңде күсергәнсе миндә йәшәп торорһоң.

– Ғаиләнән уңманым. Тәүгеһен һөйләгәйнем инде, беләһең. Икенсе ҡатыным менән ҡыҙым Урта Азияла ваба эпедимияһы ҡупҡан йылда үлде.

Ауыл малын көтөү проблемаһы көтмәгәндә ана шулай хәл ителде лә ҡуйҙы. Бремжан икенсе көндө үк көтөүгә сыҡты. Ауыл халҡы эше менән ҡәнәғәт. Берике көн эшләргә лә өлгөрмәне, Бремжанды участка вәкиле Байсаров ауыл Советына саҡырып та алды. Тирә-яҡта мал юғалыу йышайғайны, саҡырыу, күрәһең, шуның менән бәйле. Бремжан килгәндә, Байсаров ауыл Советы бинаһы алдында тәмәке тартып тора ине.

– Брагембетов Бремжан һеҙ булаһығыҙмы? – тип ҡаршы алды ир балаларҙы сөннәткә ултыртыусы булараҡ ил ҡыҙырып Башҡортостанға юлыҡҡан мосафирҙы.

– Эйе, мин булам.

Милиция участкаһы ауыл Советы бинаһында урынлашҡан. Байсаров мосафирҙы кабинетына алып инде. Өҫтәл артына үтеп, урынына ултырҙы. Ҡаршынан Бремжанға урын күрһәтте.

– Кем булаһығыҙ?

– Ир балаларҙы сөннәтләүсе баба булам.

– Аңлашылды. Ҡайҙа йәшәйһегеҙ?

– Ҡаҙағстанда.

– Паспортығыҙ бармы?

Бремжан түш кеҫәһенән паспортын сығарып, участка вәкиленең алдына һалды. Байсаров паспорттың прописка яҙылған битен асты.

– Прописканан төшкәнегеҙгә өс ай ваҡыт үтеп киткән. Тимәк, пропискаһыҙ йәшәйһегеҙ. Быны нисек аңларға?

– Баба булам, тип әйттем дә инде. Ауылдан-ауылға йөрөй торғас, ваҡыт үтте лә китте.

– Паспорт режимын боҙғанһығыҙ. – Паспортты вәкил түш кеҫәһенә һалды. – Тәки шулай ауылдан-ауылға йөрөмәксе булаһығыҙмы?

– Юҡ. Хеҙмәттәштәрем Ҡотлогилде Бүкәнов, Сәғитулла Дәүләтҡоловтар йәшәгән ошо ауылда төпләнергә уй. Шишәмбелә ауыл малын көтөргә Сәғитулланы ҡалдырам да паспорт өҫтәленә барырға йыйына инем.

– Ярай. Ә штрафты барыбер түләргә кәрәк булыр. Тиҙ генә пропискаға тораһың йә егерме дүрт сәғәт эсендә үксәңде бынан ялтыратаһың.

– Паспорт өҫтәленә барғанда штрафын да түләрмен.

Прописка мәшәҡәте менән Бремжан ике көн йөрөп ҡайтты. Иртәгәһенә көтөүгә үҙе сыҡты. Һалҡында малын ашата, ҡыҙҙыра башлаһа, төтөнлөк һалып, йылға буйына ҡыуып төшөрә. Һыу эскәндән һуң малдар өс-дүрт сәғәт юшай. Көтөүсе үҙе сәй ҡайнатып эсә, ял итә. Ерек, муйыл, ҡайын ағастары ҡаплап алған бәләкәй генә йылға ҡумырыҡтарына ҡул тығып, бәрҙе тота. Балыҡ һурпаһы әҙерләй. Ваҡыт үткәне һиҙелмәй ҙә ҡала. Һәр көндө шулай.

Бер йыллыҡ үләне сабылып, бесәне эҫкерткә һалынғас, йылғаның икенсе яғындағы майҙанды һөрөргә төшкәйнеләр. Көтөүсе, кем икән, тип ҡарап торһа, Сафуан икән. Туңға ер һөрә башлаған. Төш етһә, сумкаһын тота ла йылға буйына ашарға төшә. Ҡоролай ғына ашай икән дә һалҡын һыу эсә. Икенсе көндө Бремжан уны балыҡ һурпаһына саҡырҙы. Сөнки яңғыҙ кеше өсөн дөйөм туҡланыу ойошторолмай.

– Әйҙә, улым, балыҡ һурпаһы эсергә, ҡоролай ашағаныңса.

– Ниндәй балыҡ һурпаһы? – Сафуан, күрәһең, көтөүсе ала таңдан ҡара төнгә тиклем эшләй, ҡайһы арала Һаҡмарҙа балыҡ тоторға өлгөрә икән, тип уйлаған, сыраҡҡа төшмәһә (һалдау менән төндә балыҡ тотоу), сөнки был йылғаларҙа бәрҙе балығы булыуы, уны ҡул тығып тотоп булыуы тураһында бөтөнләй белмәгән.

Күктән һорағанды ерҙән бирә, тигәндәй килеп сыҡты. Сафуан менән Бремжан ана шулай күҙмә-күҙ осрашыуға өлгәште. Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, үҙ теләге менән әсәһе Алмабикәнең тыуып-үҫкән ауылына сиҙәм күтәреүсе булып килеп төшкән һәм бәхете булған Фәниәне ошонда тапҡан тракторсы ашап-эсеп байтаҡ ваҡыт һөйләшеп ултырҙы.

Ахырҙа Бремжан:

– Атаң-әсәң бармы? – тип һораған булды. Сафуандың уңайһыҙланыуы хатта йөҙөнә сыҡты. Бремжан Сафуанды ҡосаҡланы ла:

– Мөғжизәгә ышанаһыңмы?– Тегеһе өндәшмәгәс, ҡабат төпсөнмәне. – Һине ат менеп һабантуйҙа ярышта беренсе урынды яулағанһың икән тип төшөмдә күрҙем.

– Ҡана һуң, төш мөғжизә була торған булһа-а-а! – тип ауыр көрһөндө Сафуан.

– Нисек һин мине, Сафуан, бәхетле типме, әллә бәхетһеҙ тип һанайһыңмы? Уйыңдағын дөрөҫ кенә әйт.

Улы Наилдең: «Атай, ниңә һин Бремжан бабайҙы әләкләп атлайһың?» – тигәне иҫенә төшкәс, Сафуандың йөрәге жыу итеп китте. Бер аҙ ул ни тип тә яуап бирергә аптырап ултырҙы ла:

– Бәхетле... – тигәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

– Дөрөҫ, Сафуан, һине осратыуым менән бәхетлемен.

– Үҙең ҡайҙан һуң ? – Төпсөнөү Сафуанға күсте.

– Ҡаҙағстандан.

Ошонан һуң Сафуан үҙен – ул, ә Бремжанды атаһы тип тоя башланы. Сафуан көтөүсе үҙен көн дә балыҡ һурпаһы, сәй менән һыйлауы тураһында ҡатынына һөйләгәс, ҡатыны Фәниә лә, бурыслы ҡала алмай, Бремжанға һөт, ҡаймаҡ, йомортҡа бешереп ебәрә башланы. Көтөүсе менән тракторсы ана шулай дуҫлашып китте. Бремжан ғаиләнең даими ҡунағына әйләнде. Башта ҡурҡһа ла, улдары Наил дә баба менән дуҫлашып алды. Ҡунаҡҡа саҡырһалар, алдынан да төшмәй.

Көҙ етте, мал кәртәгә инде. Бремжан леспромхоздан бура һатып алды. Бынамын тигән йорт һалып инде. «Волга» машинаһы һатып алды. Ҡайһы берәүҙәр бабаға ихтирам итеп ҡараһа, икенселәрҙә ул шик тыуҙырып өлгөрҙө, сөнки тирә-яҡта мал юғала башланы. Көтөүсе оҙатып тормаймы икән, тигән шик тыуҙы бәғзе әҙәмдә.

– Ниңәлер баба бик йыш Сафуан тирәһендә ойоҡһона? – тип әйтеүселәр ҙә бар ауылда, сөнки Сафуан үҙе лә килмешәк.

Шикле һүҙ, күрәһең, Сафуан ғаиләһенә лә барып еткән.

– Бәй, мал юғалһа ни, тик беҙҙең районда ғына юғалмай, – тип кенә яуап бирә Сафуан.

– Кем әйтә? – тип төпсөндө Вәхит.

– Сибайға күсеп киткән Баянов әйтә. Урманға миндек бәйләргә барғанда баштояғына, эс-ҡарынына тап булған. Ҡайтҡас милицияға хәбәр иткән. Был турала малы юғалған Мөбәрәк Ишҡыуатовтың ауыҙынан да ишеттем.

– Бремжан, имеш. Бүренең ауыҙы ашаһа ла ҡан, ашамаһа ла ҡан, – тип Сафуанды яҡлап сыҡты ҡасандыр утыҙынсы йылдарҙа колхоз аттарын ат ҡараҡтарынан урлатҡан Айса бабай.

Бәхәс ҡуйырғандан-ҡуйыра. Кемдер көтөүсенән шикләнһә, күпселек яҡлай.

– Ауыл көтөүенән мал юғаламы? Юғалмай. – Ғибат бәләне көтөүсегә ауҙармаҡсы, йәнәһе, мал ҡарағы үҙе көткән көтөү малына теймәй, ә ситтән оҙатып тора.

– Ҡара эт бәләһе – аҡ эткә.

– Көтөүсеһеҙ интегеүебеҙ тураһында онотмайыҡ, ағай-эне.

Имеш-мимеш көтөүсенең үҙенә лә барып етә. Тегеһе:

– Йорт һалып төпләнгәнмен икән, бер ҡайҙа ла китмәм. Эшемде киләһе йылдарҙа ла ташламайым, ҡурҡмағыҙ, – тип йыуата Бремжан көтөүсеһеҙ йонсоған ауылдаштарын.

***

Яҙғы баҫыу эштәре тамам. Йәйҙең иң йәмле осоро. «Ҡырҡ йәште үткәрмәйҙәр» тиеүҙәренә Сафуан ҡарап торманы, ҡатыны Фәниәнең юбилейын үткәргәргә булды. Туған-тыумасаларын, таныш-тоношын йыйҙы. Мәжлес уйын-көлкө менән күңелле үтте. Түрҙә Бремжан, Ҡотлогилде, Сәғитулла ултырҙы. Берәүҙәр бүләк, икенселәре аҡса һалды. Ҡунаҡтар һуң таралышты. Һауыт-һабаны йыйып, йыйыштырғас, бүләктәрен ҡараштырып сыҡты ла Бремжан бүләк иткән «дубленка»ны ҡабат кейеп, көҙгө алдына баҫты Фәниә.

– Ҡара әле, Сафуан!

– Ҡойоп ҡуйған тиерһең! – Сафуандың һоҡланыуы йөҙөнә сыҡты.

– Бремжан бабай бүләге.

Ҡиммәтле бүләккә, әлбиттә, ҡатын да, ире лә ҡыуанды. Тик ҡыуаныуҙары оҙаҡҡа булманы. Көтмәгәндә Фәниәне участка вәкиле Байсаров ауыл Советына саҡыртып алды. Һорау алып, протокол төҙөргә тотондо.

– Көтөүсе Бремжан Брагембетовта ниндәйҙер шикле юлаусылар туҡтала. Башта улар һеҙҙән фатир һораған. Ә һеҙ ул ҡаҙаҡтарҙы, Бремжанға барығыҙ, тип, йортон өйрәтеп ебәргәнһегеҙ. Дөрөҫмө?

– Һеҙҙең яҡташығыҙ бит, фатир бирер, тинем шул.

– Кемдәр һуң ул үткенселәр? Ҡайҙан ҡайҙа юл тоталар?

– Уныһын һорашып торманым. Ә быға минең ни ҡыҫылышым бар әле?

– Һорауҙы бында мин алам. Яуап бирегеҙ. Нисә кеше, машиналары ниндәй ине?

– Өс кеше, урта йәштәрҙә. Береһе йәшерәк күренә. Ямғырлы көн, ҡараңғы төшкәйне. Машиналарын күрмәнем. Мотор тауышын ғына ишеттем.

– Ә Бремжанов менән һеҙ күптән танышһығыҙмы?

– Ауылға килеп төпләнгәндән беләм.

– Тыуған көнөгөҙгә тун бүләк иткән, дөрөҫмө?

– Дөрөҫ.

– Ә хәҙер бына ошонда, – вәкил протоколдың түбәнге өлөшөнә төртөп күрһәтте. – «Протокол минең күрһәтмәләремә ярашлы төҙөлдө, ялған яуап биргән өсөн яуаплылыҡ тураһында иҫкәртелдем» тип ҡулығыҙҙы ҡуйығыҙ.

– Урланған тунмы ни дубленка?

– Ҡабаттан иҫкәртәм: һорауҙы бында мин бирәм. Протоколға ҡул ҡуйығыҙ!

Участка вәкиленең Фәниәнән һорау алып, протоколға ҡул ҡуйҙырыуы ҡатынды ла, уның ире Сафуанды ла һағайтмайынса ҡала алманы.

– Бәләнән баш-аяҡ, тунын Бремжан бабайға кире алып барып бирәйем, Сафуан? – тип һораны ҡатын иренән.

– Ярай, шулай ит.

Эштең ни ҙә икәнен Бремжан Фәниәнең ҡулындағы таныш төргәкте күргәс тә аңланы.

– Һеҙҙе, өлкән кешене, расходҡа һуҡҡыбыҙ килмәй, зинһар, ғәфү итегеҙ инде, – төргәкте Фәниә урындыҡҡа һалды.

– Туҡта әле, Фәниә ҡыҙым, ашыҡма. Ултыр әле.

– Ниңә?

– Һин мине ғүмер буйы эсемдә һаҡлаған серемде һөйләп бирергә мәжбүр

итәһең, ҡыҙым. – Бремжан бабай күҙенә йәш алды. Күҙ йәштәре күкрәгендәге ордендарына, миҙалдарына тамды.

Ватанының тоғро улы Фәниәгә үҙе тураһында баштан-аяҡ һөйләп бирҙе. Өс йылға яҡын Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугир ике орден, миҙалдарға лайыҡ була. Ике мәртәбә еңел, бер мәртәбә ауыр яралана. Өлкән лейтенант Бремжан Брагембетов һуғышты Берлинды алыу менән тамамлай, Еңеүҙе шунда байрам итә. Шул өс йылға яҡын ваҡыт эсендә аттестатында ҙур күләмдә аҡса тупланыуын ул башта үҙе лә белмәй. Шул хәтлем ҙур күләмдә аҡсаның бер көндә юҡҡа сығарған нэпман улы булған Бремжан бик яҡшы аңлай. Был аҡсаны 1947 йылда үткәрелгән аҡса реформаһында ун мәртәбә кәмеүен алдан уҡ күрә, сөнки бындай хәл Граждандар һуғышы осоронда ла булған. Нэпман булған атаһы бөтә аҡсаһын күсмәй торған мөлкәткә әйләндерә. Ә алтын, бриллиант юғалмай. Атанан күргән – уҡ юнған, тигәндәй, Бремжан да, күсмәй торған мөлкәткә әйләндереп, уның ҡиммәтен һаҡлап алып ҡала. Үлгән ҡатынынан вариҫ ҡалған булһа, шуға бағышлай. Ә Бремжан вариҫының эҙенә төштө һымаҡ.

Күрәһең, хәҙерге донъя финанс кризисы Фәниәне лә ҡыҙыҡһындыра, ул:

– Байлығыңды хәҙер ҙә шул күсмәй торған мөлкәт тәшкил итәме? – тип һораны.

– Бер яҡлы ғына булмайыҡ әле, Фәниә ҡыҙым. Президентыбыҙ Медведевтың Посланиеһын телевизор аша ике мәртәбә тапшырҙылар.

– Тыңланыҡ, әлбиттә. Тик аңлаңҡырап етмәнем ҡайһы бер урындарын.

– Хәҙерге ил етәкселәре элекке кеүек ҡурҡып-өркөп тормай. Американың баҫым яһап маташыуҙарына ҡарата туп-тура күҙенә ҡарап бәрә лә әйтә: «Беҙ Кавказдан сигенмәйәсәкбеҙ. Шуға күрә донъя иҡтисади көрсөгөнән тиҙ һәм шаҡтай көслө сығасаҡбыҙ. Шул уҡ көнбайыш регионда, йәғни Калининград өлкәһендә Америка ПРО системаһының яңы объекттарын радиоэлектрон ярҙамында баҫтырасаҡбыҙ. Финанс кризисы менән көрәшеп, Рәсәй АҠШ-тың тупаҫ хаталары өсөн түләй», – ти. Әлеге лә баяғы борон-борондан Ватаныбыҙ Рәсәйгә баҫым яһаған Америка бәләһе.

– Донъя финанс көрсөгө – шул бәлә һөҙөмтәһе, тип әйтмәксеһегеҙме?

– Әлбиттә. Беҙ, россияндар, шул уҡ Америка кеүек Көнбайыш илдәр Рәсәйгә көсләп таҡҡан финанс кризистарына күнегеп бөткәнбеҙ, девальвацияларҙан ҡурҡып, бар аҡсабыҙға машиналар һатып алабыҙ. Ашыҡҡан – ашҡа бешкән. Долларҙың артыуы – бер көнлөк.

– Бөтә донъяға янаған иҡтисади көрсөктөң беҙгә лә йоғонтоһо була торғандыр бит?

– Әлбиттә, беҙҙе лә урап үтмәй. Әлегә бөгөн, ысынбарлыҡ күҙлегенән ҡарағанда, ябай халыҡ өсөн хәүефләнергә урын юҡ. Сөнки һумдар күләме дәүләт активтары менән гарантияланған. Был сара һумды нығытырға йүнәлтелгән һәм доллар менән евроларҙан ҡотолорға ярҙам итә.

– Хәҙер аңлашыла ла. Тик бына бер үҙеңә шул хәтле байлыҡтың һиңә, яңғыҙ кешегә, ни кәрәге бар?

– Сафуанды, үҙеңде, улығыҙ Наилде кем тип беләһең? – ти ҙә Бремжан Фәниәгә ғүмер буйы һаҡлаған серен аса. Хәҙер был серен үҙенән башҡа тик Фәниә һәм хеҙмәттәше Ҡотлогилде генә белә. Сөнки уның алдында ултырған кеше Бремжан түгел, бөтөнләй икенсе кеше.

Тубырҙап күҙ йәштәре сыҡҡан Фәниә Бремжан бабайҙың муйынына ташлана.

– Зинһар, ғәфү итә күр!

– Зыян юҡ, – ти ҙә Бремжан төргәкте Фәниәгә тоттора. – Тик онотма: хәҙергә Сафуандың был турала белмәүе хәйерле.

Бремжанға юҡ-барға ышанмаҫҡа һүҙ бирҙе лә, «дубленка» төргәген тотоп, Фәниә ҡайтып китте. Хәҙер унең ҡарашы Бремжанға ҡарата үҙгәрһә лә, Сафуан үҙе көтөүсенән шикләнә. Дөрөҫөрәге, унда Бремжанға ҡарата ике төрлө хис бәрелешә. Бер яҡтан – нәфрәт, икенсе яҡтан – ҡыҙғаныу. Бер ҡараһаң – тәүгеһе, икенсе ҡараһаң – икенсеһе өҫтөнлөк ала.

Төш еткән. Балыҡ һурпаһы бешкән, сәй әҙер. Бремжан сумка тотоп йылға буйына төшөп барған Сафуанды күргәс, ҡул болғаны, йәнәһе, һый көтә. Ә тегеһе күрһә лә, ыжламай, йылға буйына төшөп, һөт, һалҡын йылға һыуы эсеп ашаны ла тракторы янына китеп тә барҙы. Көтөүсе янына бөтөнләй килмәне.

Бремжан да Сафуан артынан атланы. Унең килеп етеүе, трактор алдына сығып, бураҙнаға баҫыуы булды, Сафуан газға баҫты. Бремжан саҡ тайпылып өлгөрҙө. Уға нисек булһа ла Сафуан менән һөйләшергә кәрәк ине. Аяҡтарын бураҙнаға төшөрөп ултырҙы ла тракторҙың әйләнеп килеүен көтә башланы. Сөнки майҙан һөрөлөп бөттө тигәндәй, ҡабат бында Сафуанды аулаҡта осрата алмауы мөмкин. Килеп еткәс, Сафуан тракторынан төштө. Тынысланғанға оҡшай.

– Ни йомош, Бремжан ағай?

Яуап биреү урынына Бремжан ҡул бирҙе. Көтөүсенең үҙен тыныс тотоуы тәьҫирһеҙ ҡала алманы. Ҡул биргәнен Сафуан үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

– Газға баҫҡаным өсөн ғәфү ит.

– Не то бывает. Эшеңде туҡтатҡан өсөн үҙең ғәфү ит.

Сафуан тағы ла йомшара төштө.

– Үпкәләр өсөн килмәнем, – тип дауам итте көтөүсе. – Тик һиңә бер генә үтенесем бар.

– Әйт, Бремжан ағай.

– Ҡәнифә юлы буйында участковый Байсаровты күргәнең бармы төндә?

Сафуан яуап бирмәне. Элекке разведчик-яугир аңланы: күргән.

– Байсаровтан һаҡ бул!

– Власть кешеһенәнме?

– Һаҡ бул. – Бремжан Сафуанды яурынынан тапап һөйҙө лә, ҙур аҙымдар менән баҫыу майҙанын үлсәй-үлсәй, ауыл көтөүе юшаған төтөнлөккә ҡарай атланы. Сафуан уны күҙҙән юғалғансы ҡарап торҙо.

***

Ил менән Н.С. Хрущев етәкселек иткән дәүерҙә, унан һуң баҙар иҡтисадына күсеү осоронда ла хужалыҡтың, бигерәк тә аграр секторында, үҙгәртеп ҡороуҙарҙың сиге булманы. Әйтәйек, илленсе йылдарҙа эреләтелгән колхоздар совхоз системаһына күскәс, ауыл хужалығы предприятиелары тағы ла эреләнде. Был совхоз системаһына күскән колхоздарҙа партия ойошмаһы секторҙары вазифалары ла, КПСС-тың район комитеттары штаты ла ҡыҫҡартылды. Эшһеҙ ҡалған Сабит Баянов күсеп китте һәм һөнәре буйынса ҡала мәктәбендә уҡыта башланы.

Белем алыуын һуғыш өҙгән Сабит Баянов уҡыуын һуғыштан һуң дауам итте. Педучилище, ә һуңынан ситтән тороп институт тамамланы. Уҡытыусы булып эшләй. Өсөнсө уҡыу йылы башланыр-башланмаҫтан уны райондың мәғариф бүлеге мөдире Михаил Карташов район үҙәгенә саҡыртып алды ла партия район комитетының идеология буйынса секретары Петр Алексеевҡа алып инде. Тегеһе көлөп ултыра. Саҡырҡан кадрҙарына урын күрһәтте.

– Аҡсура ете йыллыҡ мәктәбе директоры вазифаһына иптәш Баянов кандидатураһы тәҡдим ителә, – тип башланы һүҙен мәғариф бүлеге мөдире һәм райком секретарына кандидатураның тормош юлы менән ҡыҫҡаса таныштырҙы.

– Сразу быка за рога. Эш башлайыҡ, – тип телгә килде райком секретары.

– Бындай эштә эшләгәнем юҡ, көс етмәҫ ул.

– Минең дә райком секретары булып эшләгәнем булманы. Не боги горшки обжигают. – Райком секретары, урынынан тороп, Баяновтың ҡулын ҡыҫты. – Тартынып тормағыҙ, килегеҙ. Ярҙам итербеҙ.

Мәктәп директоры булып өс йыл да эшләмәне, райком Баяновты эреләтелгән «Урал» колхозына партойошма секретары итеп ебәргәйне, был вазифаны ул райком штатында торған работник булараҡ ун йылға яҡын башҡарҙы. Йылдан-йыл колхоз күтәрелә барҙы. Аҡсалата эш хаҡы түләүгә өлгәште, алдынғылар сафына сыҡты. Баянов санаторийҙан ҡайтҡанда алға сыҡҡан рентабелле «Урал» колхозы юҡ, совхоз системаһына күскәйне. Иптәше эшкә саҡырғас, Баянов ҡалаға күсеп, мәктәптә балалар уҡыта башланы. Дәрестән ҡайтып ашарға ултырыуы булды, кемдер ишек шаҡып, уйын бүлдерҙе. Ашлыҡ тейәгән машиналарҙы элеваторға оҙатып килгән Ҡотлогилде икән.

– Бер ыңғай хәлеңде белергә индем, – тине ул.

– Яңы ғына ултырҙыҡ. Әйҙә, рәхим ит түрҙән, – тип ҡаршы алды уны Баянов.

Ашап-эсеп, һөйләшеп ултырҙылар. Үткәндәрҙе хәтергә алдылар. Икеһе лә үҙҙәре етәкләгән «Урал» колхозын рентабелһеҙ колхоздарға, совхоз системаһына ҡушыуҙарына әсенде.

– Хәҙер совхозда, «Урал» бүлексәһендә эштәр нисек, Ҡотлогилде ағай?

– Ташҡа үлсәйем, – тип ҡул һелтәне «эште эш итеүгә ҡарағанда, уны боҙоу анһат» тигән мәғәнәлә. – Ас әле, Сабит, телевизорыңды, эсте бошороп ултырғансы, «Һабантуй» тигән тапшырыуҙы ҡарайыҡ. Ни тиһәң дә ата-бабаларҙан ҡалған йола.

Баяновтың телевизорҙы асыуы булды: «Һабантуй – күсмә халыҡ булған ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған йола», – тип башланы диктор тапшырыуҙы.

Ҡотлогилде телевизорҙы һүндерҙе.

– Ниңә?

– Уйҙырма!

– Һабантуймы?

– Һин мине аңламаның. Әйт әле, күсмә халыҡ иген иккәнме?

– Юҡ.

– Тимәк, ата-бабаларыбыҙ күсмә халыҡ булмаған, ултыраҡ халыҡ булған. Ә иген икмәгән халыҡтың һабаны ла, һабантуйы ла булмаған.

– Ә ниңә үҙебеҙҙе-үҙебеҙ алдайбыҙ һуң, улай булғас?

– КПСС-тың идеологияһы. Эйе, идеология. Башҡортостан тарихы «История Башкирской АССР» тигән дәреслек буйынса өйрәтелә. Ә унда бына нимә тип әйтелә: «Башкиры, по свидетельству Ибн-Фадлана, были многочисленным народом, ведущим кочевой образ жизни... Помимо кочевого скотоводства, они занимались охотой, рыболовством и бортничеством – сбором меда диких пчел... От русских башкиры переняли навыки земледелия и большинство земледельческих орудий труда...» Мин, был цитатаның мәғәнәһен боҙмаҫ өсөн, ниндәй телдә яҙылған булһа, шул телдә килтерәм. Ә һин, Сабит, тарих уҡытыусыһы булараҡ, Башҡорт АССР-ы тарихының ошо урынын уҡыусыларға нисек аңлатаһың?

– Үҙ ҡарашымды уҡыусыларға көсләп таҡмайым. П.С. Палластың: «Улар (башҡорттар) яңы ерҙә (на новчине) ике йыл арпа, ике йыл һоло, ике йыл ужым культуралары, тағы ла бер йәки ике йыл ярауай сәскән», – тигән һүҙҙәренә уларҙың иғтибарын йәлеп итәм дә «Башҡорттар борон күсмә халыҡ булғанмы?» тигән һорау бирәм. Һәр кем үҙ фекерен әйтә. Мин уларға ер әйләнеше төшөнсәһен

аңлатһам, күпселек П.С. Паллас яҡлы булыуын белдерә, боронғо башҡорттар игенселек менән шөғөлләнгән һәм күсмә халыҡ түгел, ә ултыраҡ халыҡ булған, тигән һығымтаға килә. Уларҙың һабантуйы, иртә яҙ ҡарға бутҡаһы үткәреү кеүек йолалар булыуы тураһында ла әйтә, Ибн Фаҙлан әйткәндәрҙең уйҙырма булыуын асыҡлай.

Күренеүенсә, урыҫ крәҫтиәндәренең өс йыллыҡ ер әйләнеше (трехполье) булған ваҡытта боронғо башҡорттарҙың дүрт йыллыҡ ер әйләнеше булған. Тимәк, башҡорт борон-борондан иген иккән, ултыраҡлы тормош ҡорған. Тик унан һуң Рәсәй тәхетенә ултырған ҡайһы бер батшалар, уның Пожалованная грамота тип башҡорттарға биргән вәғәҙәһен тупаҫ рәүештә боҙоп, баш күтәрергә мәжбүр иткән. Башҡортостанға ҡарата колониаль сәйәсәт үткәреү ана шулай башлана. Ә СССР етәкселәре автономия талап иткән башҡорттарға ҡарата сәйәсәтте үҙгәртә. Йәнәһе, колониаль ҡоллоҡтан башҡорттарҙы Совет власы ҡотҡара. Күсмә халыҡ булған башҡорттар иген игергә урыҫ крәҫтиәндәренән өйрәнгән, юғары мәҙәниәткә эйә булған, йәнәһе.

– Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш, тиһең, Сабит. Дөрөҫ. Шундай ҡанун да бар. Ә тарихыбыҙҙы яҙырлыҡ ғалимдарыбыҙ юҡмы ни?

– Бар. Әкрәм Бейештең «Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше» тигән очеркы һәм Нияз Мәжитовтың археологик материалдарға таянып яҙған тарих дәреслеге. Тәүгеһе, Көнбайыш Башҡортостан башҡорттары игенселеккә, ә көнсығыш башҡорттар климат шарттарына ярашлы, малсылыҡҡа өҫтөнлөк биргән. Сөнки Көнсығыш Башҡортостан ҡиммәтле мал аҙығы булған ҡылған үләне массивтарына бик бай. Ә ҡылған үләне һыуыҡҡа бирешмәй. Мал аҙығы булараҡ, туҡлыҡлылығын ҡышын ҡар аҫтында ла юғалтмай. Эш аттарын иҫәпкә алмағанда, йылҡы өйөрө ҡышҡылыҡҡа мал аҙығын әҙерләүҙе талап итмәй. Йәйен – йәйләүҙә, ә ҡышын тибенлектә үҙенә-үҙе аҙыҡ таба. Ә аҙығы – әлеге лә баяғы ҡылған үләне. Тимәк, тибенлектә туҡланған йылҡы өйөрө – тәбиғәттең түләүһеҙ бүләге. Ә бесән, һоло тик эш аттары өсөн генә әҙерләнә.

Әйткәндәй, башҡорт йылҡыһы күсмә халыҡтарҙы ла, Рәсәй батшаһын да бушҡа ғына ҡыҙыҡһындырмаған. Иген икмәгән, тик малсылыҡ үрсетеү менән генә көн күргән күсмә халыҡтар ҡоролоҡ йылдарында ла малһыҙ тороп ҡалыу һөҙөмтәһендә нисектер йән аҫрар өсөн башҡорт йылҡыһын өйөр-өйөрө менән ҡыуып алып китә торған булған. Ә Рәсәй батшаһын башҡорт йылҡыһы стратегик әһәмиәткә эйә булыуы менән ҡыҙыҡһындырған. Сөнки атлы ғәскәрҙең йылҡынан башҡа булыуы мөмкин дә түгел. Бына ни өсөн Рәсәй иленең атлы ғәскәренең шаҡтай ҙур өлөшөн үҙ иҫәбенә ҡоралланған башҡорт атлылары тәшкил иткән.

***

Ғүмеренең күп өлөшө ауылда үткән һәм ауыл мәктәбендә генә уҡытҡан Баяновҡа ҡала мәктәбендә уҡытыу эше башта еңел булмай. Институтта уҡыған осорҙа ишетмәгән «ауырҙар» тигән төшөнсәне ул тик ҡала мәктәбендә ишетә башлай. «Ауырҙар» менән бигерәк тә уртаҡ тел табып, хеҙмәттәшлек итеүе ауыр икән шул.

– Хәҙер мин бына ошо ауырҙар проблемаһын өйрәнеүгә тотондом, – тине Баянов Ҡотлогилдегә уны автовокзалға оҙата барғанда.

– Тимәк, бөйөк педагог Макаренконың эшен дауам итәһең?

– Макаренкоға тиклем йыраҡ, шулай ҙа уның тәжрибәһенә таянып эш итергә тура килә.

– Күрәһең, проблема хеҙмәт тәрбиәһе биреүгә ҡайтып ҡала.

– Үҙем дә шулайыраҡ уйлайым, – тип автобусҡа ултыртып оҙатып ҡалды Баянов фекерҙәше Ҡотлогилдене.

«Ауырҙар» проблемаһын өйрәнеүҙе Баянов ана шул хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙең ауыл һәм ҡала шарттарын сағыштырыуҙан башлап ебәрҙе. Ауылда бала мал үрсеткән, йәшелсә үҫтергән, мал аҙығы, яғыулыҡ әҙерләгән ғаилә эшендә хәленән килгәнсә ҡатнаша. Ә был хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙең мөһим шарты ҡалала юҡ тип әйтерлек, ҡала ситтәрендә үҙ йорттарында йәшәгән ҡала халҡын иҫәпкә алмағанда. Коммуналь йорттарҙа йәшәгән ҡала халҡының баҡсаһы бар, әлбиттә. Баҡсала хеҙмәт тәрбиәһе алыу ҙа мөһим шарт. Шулай ҙа күпселектең баҡсаһы юҡ. Бала йорт йыйыштырыуҙан башҡа хеҙмәт тәрбиәһе ала алмай. Хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙә ҙур роль уйнаған шарттарҙы өйрәнеү менән бер рәттән, Баянов ауырҙар тәрбиәләнгән ғаиләләр тормошон да өйрәнә һәм хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙәге кәмселектәрҙең объектив, субъектив сәбәптәрен дә аса. Ә быны өсөн бер-ике миҫал килтереү ҙә етә.

Емеш-еләк өлгөргән, йәшелсә өлгөрә башлаған ваҡыт. Педагог Баянов, сәбәп табып, «ауыр» тәрбиәләнгән ғаилә баҡсаһына килә. Ғаилә башлығы баҫҡысҡа менеп сейә, ә хужабикә ҡарағат тирә. Баҡса йорто янында ике биҙрә сейә, бер биҙрә ҡарағат күренә. «Ауыр» тигән уҡыусыһы еләк ашап ултыра. Йыймай, ә ашай.

– Ә ниңә улығыҙ емеш-еләк йыйышырға ярҙам итмәй? – тип һорай ҡулына сейә тултырылған ике метрлыҡ капрон биҙрә тотоп торған хужабикәнән Баянов.

– Беҙ күргәнде күрһәтмәһен Хоҙам балаға. Ваҡыты етһә, эшләр әле. Үҙем һау саҡта эшләтмәйем. – Хужабикәнең яуабы шул булды.

Егерме йылдан ашыу ваҡыт үтеп китер, күптән пенсияла булған Баянов әлеге «ауыр» уҡыусыһы менән дауаханала осрашыр.

– Ҡайҙа эшләйһең? – тип һорай педагог элекке уҡыусыһынан.

– Эшләмәйем.

– Ниндәй сығанаҡ иҫәбенә йәшәйһең һуң?

– Әсәйемдең пенсияһына.

– Ә әсәйең үлеп ҡалһа, ни эшләрһең?

– Бомжевать буду!

Тағы ла бер-ике йыл үткәс, Баянов урамда буш шешәләр йыйып йөрөгән «ауыр»ҙы осрата. Тағы бер йыл үтә, «ауыр» ҡабат Баяновҡа осрамай. Күренекле педагог Сухомлинскийҙың: «Кешенән ни теләһәң, шуны (шәхесте) әүмәләп була торған ваҡытты ҡулдан ысҡындырмағыҙ», – тип васыят итеп әйткән һүҙҙәре бар.

Һүҙ хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙең бер-беренән айырылғыһыҙ ике этабы булыуы тураһында бара. Беренсе этапта ун өс-ун дүрт йәшкә тиклем бала эшкә өйрәнә. Ә ун өс-ун дүрт йәштән ун ете-ун һигеҙ йәшкә тиклем икенсе этапта эш күнекмәһе ала. Шундай һығымтаға килгән педагог Баянов «Кешене кеше иткән – хеҙмәт» тигән монография яҙа һәм «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналында баҫтырып сығара. Уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһе түбәндәгегә ҡайтып ҡала.

Һәр объект – кеше йәки ғөмүмән кешелек йәмғиәте булһынмы, сәйәси партия йәки башҡа ижтимағи-сәйәси берекмәме, социализм йәки капитализммы – үҙендә ҡапма-ҡаршылыҡтар тота. Әҙәми затҡа, мәҫәлән, үҙенең тәбиғәте буйынса симпатия һәм антипатия, оптимизм һәм пессимизм, әхлаҡлылыҡ һәм әхлаҡһыҙлыҡ, изгелек һәм яуызлыҡ кеүек башҡа төр ҡапма-ҡаршылыҡлы сифаттар хас. Әгәр шәхес булараҡ формалашыу барышында яуызлыҡ өҫтөнлөк алһа, унан изгелек көтмә.

– Тағы ла бер нәмәне иҫәпкә алыу мөһим, Сабит, – тип кәңәш бирҙе монография менән танышҡас Ҡотлогилде.

– Нимәне? Конкрет әйт.

– Беләһеңме, кеше бит объект ҡына түгел, субъект та.

– Эйе, йәмғиәттең һәм дөйөм мәнфәғәттәр, тормош маҡсаттары бер булыуы менән бәйләнгән төрлө төркөмдәрҙең субъекты ла.

– Дөрөҫ аңлайһың, – тип монография менән танышыуын дауам итте йәшлегендә комвуз тамамлаған Ҡотлогилде.

Был берекмәләргә шулай уҡ кеше етәкселек итә. Уның эшенә төҫ бирә. Тарих власҡа әхлаҡһыҙ, ҡаты бәғерле кеше килгән бик күп осраҡтарҙы беләә. Ул айырыуса миллиондарҙың яҙмышы менән идара иткән ҡурҡыныс кешегә әйләнә. Гитлерҙың миллиондар яҙмышы менән уйнауының нисек барып бөтөүе билдәле. Был әҙәм үҙе лә боҙолған күңеленең ҡорбанына әйләнде. Йыртҡыс холоҡло кешене ана шундай финал көтә. Ни тиһәң дә, һәр бер йән эйәһендә инстинкт тигән бер нәмә бар. Хайуандарҙа ла, кешеләрҙә лә. Иге-сиге булмаған ҡомһоҙлоҡ бар. Ҡомһоҙлоҡтоң юлдашы булған «кеше үҙенә-үҙе дошман түгел» тигән әйтем һиҙгерлекте баҫа. Һөҙөмтәлә кеше үҙ эштәрен тәнҡит күҙлегенән сығып баһалауҙан туҡтай, эгоисҡа әйләнә. Үҙенә ҡурҡыныстың тап үҙенең күңел төпкөлөнән, эстән янауын һиҙмәй, хәүефте ҡайҙандыр ситтән, тыштан көтөп йөҙәй.

Донъяла барлыҡҡа килгән бөтә күренештәргә кеше тон биргәнлектән, уның характерының ыңғай һәм кире һыҙаттары кешелек йәмғиәте яҙмышының үҙенә ыңғай һәм кире йоғонто яһамауы мөмкин түгел. Ике ҡапма-ҡаршы сәйәси формацияның – капитализм менән социализмдың үткәне шуға миҫал. Ике ижтимағи-иҡтисади формация ла үҙҙәренең базисына ярашлы өҫҡорма тотто. Ә өҫҡорма – базис – идеология өлкәһен дә үҙ эсенә ала. Коммунистик идеология ла, буржуаз идеология ла кешеләрҙе алдай. Беренсеһе социализмға төп ҡурҡыныс капитализм янауын, ә икенсеһе, киреһенсә, капитализмға хәүеф яһау сығанағы социализм булыуын раҫланы. Капитализм менән социализм араһында үҙара ҡурҡыныс булыуын кире ҡағып булмай, ләкин төп ҡурҡыныс капитализмға – капитализм төпкөлөндә, ә социализмға – социализм төпкөлөндә ярала һәм эстән янай.

– Ә быны йәштәргә әхлаҡ нормаларын боҙоу кеүек йоғонто ҡайҙан килә һуң? – Ҡотлогилде бер аҙға монография менән танышыуҙан бүленде.

– Көнбайыштан. Хәҙер үҙебеҙ ҙә, Көнбайышҡа эйәреп, зәңгәр экрандар ҙа теләһә нимә күрһәтә башланыҡ. Ә әхлаҡ нормаларын боҙоуҙың тамыры бик тәрән, бик сетерекле.

...Борон-борондан көслөләр көсһөҙҙәрҙе баҫып килә, бәхәсле мәсьәләләр көс ҡулланыу юлы менән хәл ителә. Ә бөгөн көс ҡулланыу сәйәсәтен Америка Ҡушма Штаттары үткәрә. Йәнәһе, тыныслыҡ һәм кеше хоҡуғын һаҡлау миссияһы. Ҡарағыҙ, ниндәй хәүефле статистика: «Һуңғы илле биш мең йылдың тик ике йөҙ ҙә туҡһан ике йылы ғына һуғышһыҙ үткән. Ә биш мең ярым йыл эсендә планетала ун биш мең һуғыш теркәлгән». Ә инде АҠШ-тың Иранды баҫып алыуын быуаттар төпкөлөнән эҙләйһе юҡ.

Былар бөтәһе лә – кешелек йәмғиәте тыуҙырған һуғыштар. Термоядро һуғышы ҡурҡынысы, экология катастрофаһы, халыҡ-ара террор хәүефе беҙгә, ерҙә йәшәүселәргә, сит планеталарҙан янаймы ни? Юҡ, әлбиттә. Был глобаль масштабтағы хәүеф ерҙә, кешелек донъяһының үҙ ерлегендә, үҙ төпкөлөндә өлгөрә. Ситтән түгел, эстән килә.

Советтар Союзы бер үҙе тиерлек фашизм яуына ҡаршы тора алды. Ҡаршы торҙо ғына түгел, фашистик Германияны тар-мар итте. Донъяны фашизим ҡоллоғонан ҡотҡарҙы. Күренеүенсә, ул үҙенә ситтән, тыштан янаған ҡаршылыҡҡа бирешмәне. Беренсе булып йыһанға сыҡты. Ләкин партия номенклатураһы тәрбиәләп үҫтергән ялған демократтарға ҡаршы тора алманы, эстән емерелде.

Ҡапма-ҡаршы торған ике йәмғиәт ҡоролошон капитализм менән социализм, шулай уҡ кешенең үҙен объект булараҡ ҡарап, төп ҡурҡыныстың был объекттарҙың үҙ ерлегенән, үҙ төпкөлөнән, эстән янауына тағы бер мәртәбә инанаһың. Объекттың үҙ ерлегендә, үҙ төпкөлөндә барлыҡҡа килгән төп ҡурҡынысты баһалап еткермәүе, уның үҙен эстән һәләк итергә һәләтле. Беҙ уны СССР миҫалында күрҙек.

– Әйткәндәй, – Ҡотлогилде күҙлек аша Баяновҡа ҡараны. – Һин ҡуҙғатҡан был проблеманың юридик аспекты ла бар түгелме һуң?

– Бар, әлбиттә. Һәр енәйәттең язаһыҙ ҡалырға тейеш түгелен (неотвратимость) кешеләр күптән аңлаған. Ләкин улар икенсе бер нәмәне – төп ҡурҡыныстың һәр кемдең үҙенең күңел төпкөлөндә барлыҡҡа килеүен аңламайҙар. «Кеше үҙенә-үҙе дошман түгел» тигән урынһыҙ әйтелгән әйтем күңелгә шул тиклем ныҡ һеңгән һәм аңды томалаған, һөҙөмтәлә, хәҡиҡәтте бик һуң аңлайһың. Хәҙер, уҡытыусы булараҡ, бар хәлемсә уҡыусыларымды уларҙың күңеленә эстән янаған төп ҡурҡыныстан ҡурсаларға, коллегаларым араһынан кемеһелер уҡыусыға: «Һин үҙеңә үҙең дошман түгелһеңдер бит, ниңә тәртип боҙаһың», – тиһә, уны ла төҙәтергә тырышам, тик артыҡ тәрәнгә төшмәйем, – Баянов та оҙайлы фәлсәфәгә бирелде.

Социализмға төп ҡурҡыныс уның үҙ ерлегендә, үҙ төпкөлөндә өлгөрә, эстән янай тип әйтеү үҙеңә үҙең хөкөм сығарыу ғына булыр ине. Йәнәһе, һин үҙеңә-үҙең дошман түгел, тип әйтеү хилаф түгел. «Улай булғас, минең дошманым кем һуң?» – тигән һорауға ла яуап бирергә кәрәк була. Икенсе Донъя һуғышы бөтөүгә ярты быуаттан ашыу ваҡыт үтеп китте. Әлбиттә, кешелек донъяһының термоядро ҡоралы һуғышы сигенә барып еткән саҡтары ла булғылай. Ләкин ул Өсөнсө донъя һуғышы башланыуға юл ҡуймай. Был күренеш, бер яҡтан, тыныслыҡ яҡлы көстәрҙең өҫтөн тороуын аңлатһа, икенсе яҡтан, ҡомһоҙ монополистар Өсөнсө Донъя һуғышын башлауҙың үҙҙәре өсөн дә үлемесле булыуын яҡшы аңлай. Нисек кенә булмаһын, кешелек донъяһы термоядро һуғышы, экология катастрофаһы, халыҡ-ара терроризм ҡурҡынысы булып кешелек йәмғиәтенең үҙе тороуын аңлай.

АҠШ-тың элекке президенты Джон Кеннедиҙың (һуғыш суҡмарҙары тарафынан атып үлтерелә): «Кешелек донъяһы һуғышты бөтөрөргә тейеш, юғиһә һуғыш кешелек донъяһын бөтөрәсәк», – тип әйтеүе лә билдәле. Хәҙер инде, иманын юлдаш итһен, тип әйтәһе генә ҡала. Кешелек цивилизацияһы ни эшләргә тейеш һуң? Иң элек һуғышҡа ҡаршы ғилми-пацифистик концепция булдырыу талап ителә. Концепция буржуаз идеологияны ла, коммунистик идеологияны ла ғәйепләргә тейеш. Ә фән йәш быуынды тәрбиәләүҙең яңы юлдарын билдәләргә, кешелек йәмғиәтенә һәм кешегә эстән янаған төп хәүефтең сығанағын яңыса аңларға ярҙам итергә тейеш. Ә был иһә белем, тәрбиә биреүҙең гуманитар циклын, ғаилә һәм мәктәпкәсә тәрбиәнән башлап, урта һәм юғары уҡыу йорттарында уҡытыу һәм тәрбиәне лә индереп, тамырынан үҙгәртеүҙе талап итә.

– Тимәк, кешелек донъяһының яҙмышы уның үҙ ҡулында, – Ҡотлогилде монографияны авторҙың ҡулына тотторҙо ла, күҙлеген ысҡындырып, һауытына һалды.

– Әлбиттә. Тыныслыҡтың ҡәҙерен белгән һәм кешелек донъяһының, балаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең киләсәген ҡайғыртҡан һәр кем объектҡа төп ҡурҡыныстың төп сығанағы булып ошо объекттың үҙе тороуын белергә тейеш. Төп ҡурҡыныс һәр кемдең үҙенең күңел төпкөлөндә өлгөрә һәм эстән янай. Әгәр ҙә уның шәхес булып формалашыу процесында характерының кире сифаттары өҫтөнлөк ала икән, ул кеше һәләкәткә дусар була, – тип Баянов тәрбиә биреүгә

түбәндәгесә баһа бирә: тәрбиәүи процестың нигеҙе булып хеҙмәт тәрбиәһе тора. Кешене кеше иткән хеҙмәт.

***

Ураҡ ҡыҙа, көндәр ҡыҫҡара, таңға ҡарай хәҙер ысыҡ төшә, яҫмаларҙың өҫкө өлөшө сылана. Шуға күрә комбайндар һуғыуҙы бер аҙ һуңыраҡ башлай, төнгө сәғәт ун икеләрҙә, берҙәрҙә генә тамамлай. Ауыл эшсәндәре алдағы йыл уңышы тураһында ла хәстәрлек күрә. Ана, тракторсылар Сафуан менән Әнүәр урып-һуғылған майҙандарҙа һалам өйә, ә һаламы эҫкерттәргә һалынған майҙандарҙа туңға һөрә, ужым сәсә.

Тракторын Әнүәргә тапшырып, төнгө сменанан арып, асығып ҡайтты Сафуан. Уның Һаҡмарҙа һыу инеп, йыуынып ҡайтыуы, ашарға ултырыуы булды, ауыл Советы йомошсоһо килеп тә инде.

– Учаскауай саҡырта, тиҙ бул.

– Ашап-эсеп ял итергә лә бирмәйҙәр. – Ауыҙына яҡынайтҡан икмәген ашъяулыҡҡа кире һалды.

– Нимә тип әйтәйем?

– Ашап, сәй эсә лә килә, тиген.

Сафуан барҙы. Участка вәкиле Байсаров ишек алдында тәмәке тартып тора ине, Сафуанды эйәртеп кабинетына ингәс, өҫтәл артына үтеп, урынына ултырҙы, ҡаршынан Сафуанға урын күрһәтте. Өҫтәл тартҡыһынан ҡағыҙ, түш кеҫәһенән авторучка сығарҙы. Йотлоғоп папиросын бер нисә мәртәбә һурҙы ла, һүндереп, төпсөгөн пепельницаға һалды, уны Сафуанға тотторҙо.

– Таҫҡа ҡаҡ, – тип бойорҙо. Өҫтәлдәге туҙанды еңе менән һыпырып төшөрҙө. – Булдымы?

– Булды. – Сафуан пепельницаны урынына ҡуйҙы.

– Ултыр. «Ялған яуап биргән өсөн яуаплылыҡ тураһында иҫкәртелдем» тип бына ошо урынға ҡулыңды ҡуй. – Участковый протокол ҡағыҙына төртөп күрһәтте. – Булдымы?

– Булды. – Протокол менән авторучканы Сафуан Байсаровтың алдына шылдырҙы.

– Өсөнсө бригаданың Ҡәнифә юлы буйында ашап йөрөгән биш баш йылҡыһы зымзыя булған. Ишеткәнһеңдер?

– Ишеттем.

– Шул йылҡыларҙы күргәйнеңме, юҡмы?

– Күрмәнем.

– Мал юғалған көнө төндә бер кеше лә күренмәнеме?

– Һеҙҙән башҡа бер кем дә күренмәне. Шул биш баш йылҡы юғалыуға минең ниндәй ҡыҫылышым бар?

– Һорауҙы мин бирәм, ә һин яуап бир. Һинең янда агроном һуңғы мәртәбә ҡасан булды? – тип төпсөндө Байсаров (Сафуандан башҡа үҙен күргән шаһиттар булһа, шуны асыҡлар өсөн).

– Йылҡы юғалырҙан алда булып китте. Шунан һуң бер кем дә күренмәне, һеҙҙән башҡа...

– Ә хәҙер «Яуабымды дөрөҫләйем» тип бына ошонда ҡулыңды ҡуй, – участковый протоколдың аҫҡы өлөшөнә төртөп күрһәтте.

Һорау алыу һылтауы менән Сафуандың Ҡәнифә юлы буйында үҙен күргән берҙән-бер шаһит булыуын асыҡлаған Байсаровтың күңеле хәҙер тынысланды.

– Китергә мөмкинме? – Сафуан да тынысланды булһа кәрәк, ҡайтыу яғын ҡараны.

– Мөмкин. Ял ит. Тағы ла төнгә эшкә сыға торғанһыңдыр, яңылышмаһам.
– Яңылышмайһығыҙ. Ул-был һиҙелһә, белгертермен.
– Молодец. Шулай ит. Тик тикшереү тамамланғанса бөгөнгө һөйләшеү тураһында ләм-мим. Хатта ҡуйыныңда ятҡан ҡатыныңа ла һөйләмә.
– Минең ҡатын ауыҙынан һүҙ сыҡмай.
– Ҡабатлап әйтәм, асыҡ ауыҙ булма. Ауыҙынан һүҙ сыҡмай, имеш. Ҡатыныңды борсома. Белдеңме?
– Белдем. Һөйләмәм.
– Шулай ит. Ваҡыты еткәс, һөйләрһең.
– Эшегеҙ уң сыҡһын.
– Бына быныһы егеттәрсә! – Байсаров Сафуанды ҡулын ҡысып оҙатып ҡалды.

Төнгө сменала арыған Сафуан ауыл Советынан ҡайтҡас та ял итергә ятты. Ул уянғанда ҡояш офоҡҡа яҡынлашҡайны. Бысылған утындарҙы ярғылап өйҙө. Кискелеккә ашағас, велосипедына атланды ла тағы төнгө сменаға ашыҡты. Баҫыу майҙанына барып еткәнсә Байсаров күҙ алдынан китмәне. Власть вәкиле булған Байсаровтың юғалған мал тураһында ҡыҙыҡһыныуы тәбиғи, әлбиттә. Үҙенең әйтеүенсә, Баймаҡ районында ла булған мал юғалыу. Ғәле ауылында йәшәгән һуғыш ветераны Мөбәрәк Ишҡыуатовтың дүрт баш йылҡыһын юлдан ярты ғына саҡрым алыҫлыҡтағы урманда һуйып, ите менән тиреһен машинаға тейәп алып киткәндәр. Йәнәһе, мал тик бер Байсаров участкаһында ғына юғалмай... Бүренең ауыҙы ашаһа ла, ашамаһа ла ҡан, тигәндәй, юғалған йылҡыны ҡаҙаҡтар ҡыуып алып китәләр ҙә, һуйып алып килеп, итен үҙебеҙгә һаталар, тигән имеш-мимеш тә күп. Йәнәһе, борон-борондан шулай... Күрәһең, ҡаҙаҡтарҙың Башҡортостанда ит менән сауҙа итеүе имеш-мимеш таралыуға сәбәп була торғандыр. Бик юл боҙолған саҡтарҙа ит менән сауҙа иткән ҡаҙаҡтарҙың Бремжанда туҡтап, йоҡлап киткән саҡтары ла булғылай. Юғалған малдарҙы Бремжан оҙатып тормаймы? Участка вәкиленең Сафуандан һорау алғанда Ҡәнифә юлы буйында мал көткән көтөүсе Бремжан тураһында һорашыуы ла сәйер. Ниңә Бремжан ҡулға алынмай? Әллә ҡулға алыуҙы енәйәт эшләнгән урында тотор өсөн кисектерәләрме? Төнгө сменаға эшкә китеп барған Сафуандың башын төрлө уйҙар ана шулай бутай.

***

Бремжандың көтөүҙән ҡайтып инеүе, сәй ҡайнатып, ашарға ултырыуы булды, ауыл аҡһаҡалы Айса килеп тә инде.
– Әйҙүк! Түрҙән уҙ, Айса ағай, – тип ҡаршы алды Бремжан бабайҙы.
– Сәй ҡайғыһы юҡ әле, Бремжан, көтөүҙән һыйырыбыҙ ҡайтманы.
– Китсе. Һыу эсергәндә бар инесе. Ни арала көтөүҙән айырылды икән? – Бремжан сәй эсеп торманы, Айсаның артынса соланға сыҡты. Сөйгә эленгән эйәрен алып сығып, атын эйәрләне лә көтөүлеккә ҡарай елдерҙе. Ҡәнифә юлына килеп сығыуы булды, сауҡалыҡта ат кешнәгән тауыш ишетелде. Ҡараһа, участка вәкиле Байсаровтың аты тора. Айсаның һыйыры көтөүлектә булмай сыҡты. Ауылда көтөүсене әлеге лә баяғы Айса ҡаршы алды.
– Ғәфү итә күр, Бремжан. Һинән ҡайтһам, әбей һыйыр һауа. Иҫәүән, тип мине әрләй. Баҡтиһәң, һарыҡ-кәзәләрҙе һарайға индереп бикләгәнмен дә һиңә йүгергәнмен. Ә тоҙ яларға ингән һыйыр һарай эсендә тороп ҡалған.

Иртәгәһенә һыйыр көтөүлегенә бригаданың ат ҡараусыһы ат эҙләп килеп сыға.
– Биш баш йылҡым ғәйеп. Күрмәнеңме, Бремжан ағай?
– Күрмәнем, ҡустым, күрмәнем. Ҡасан юғалғайны?

– Үткән төндө.
– Участкауайға хәбәр иттеңме һуң?
– Хәбәр иттем. Ғариза яҙҙырып алды.
Көтөүсе участка вәкиленең атын күреүе тураһында өндәшмәне. Көтөүҙән ҡайтышлай Фәниәне осраҭҡайны, тегеһе:
– Ниңәлер Байсаров Сафуанды саҡырҭҡайны. Ҡораһам, әйтмәй, ҡул һелтәй ҙә ҡуя.
– Был турала бер кемгә лә һөйләмәнеңме?
– Юҡ, һөйләмәнем.
– Дөрөҫ эшләгәнһең. Үҙең бел дә мин бел – ләм-мим. – Бремжан бармағын ауыҙына килтерҙе.
Икенсе көн Бремжан көтөүҙән ҡайтҡанда, участка вәкиленең аты ауыл Советы янында бәйле тора ине. Эйәрле көйө, ҡараңғы төшкәнсә... Башта баҫмасыларға, ә һуңынан Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фашистарға ҡаршы көрәштә разведчик булған Бремжан да һаҡ. Атын ебәрмәй, эйәрле көйө тотто. Ҡуш көбәкле мылтығын да әҙерләп ҡуйҙы, ә Байсаровты күҙ уңынан ысҡындырмай, ситтән күҙәтеп торҙо. Баҫыуға киткән юлдан ҡараңғы төшөрҙән алда Сафуан, ә ҡараңғы төшөр-төшмәҫтән Байсаров ҡуҙғалды. Уның артынса Бремжан да юлға сыҡты. Ат тояғы тауышы ишетелмәһен өсөн тик юл ситенән, үләнле урындан елдерә. Ҡараңғыланғандан-ҡараңғылана бара. Ағаслы урындарҙы үткәндә күҙгә төртһәң дә күренмәй. Тигеҙ ергә сыҡҡас, Бремжан трактор тауышы ишетелгән яҡҡа тураға тартты, күрәһең, трактор йылға яғына барып еткәнсә, Байсаровтан алда барып өлгөрмәксе. Атын ҙур булмаған сауҡалыҡҡа индереп бәйләне. Кешнәмәһен өсөн башына һоло ҡойоп алып килгән торбаны кейҙерҙе. Яурынындағы мылтығын ҡулына алды. Сафуан ер һөргән майҙанға килеп еткәс, трактор фараһы яҡтылығына эләкмәҫ өсөн икенсе яҡ ситтән бураҙнаға килеп төштө лә йылға яғына ҡарай һыпыртты. Ә йылға яғына килеп еткәс, ҡолағын ергә ҡуйып тыңларға булды. Сүп-сарҙы һындыра баҫҡан аяҡ тауышы килә йылғаның һул яғынан. Трактор яҡынлашып, яҡтыһы йылға буйын ялмай башлағас, Бремжан дауыл йыҡҡан ағас тамыры соҡорона төшөп ятты. Шул саҡ ҡороған ерек сыбығы һынған тауыш икенсегә, яҡында ғына, ишетелде. Шәүлә Бремжандың янынан ғына үтте лә ниндәйҙер бер ҡараҫҡыға ышыҡланды. Трактор ер башына сығып борола башлаған, фараһы йылға буйын буйлап яҡтырта. Шәүлә – участковый Байсаров, ә ҡараҫҡыһы артыҡ ҙур булмаған кеше йәшенерлек ҡуйы ҡыуаҡлыҡ булып сыҡты. Байсаров трактор килгән яҡтан күренерлек түгел. Тракторсы ҡурҡынысты шәйләмәй, яҡынлашҡандан-яҡынлаша. Байсаров Бремжанды күрмәй, ә артҡы яҡта ятҡан Бремжан уны яҡшы күрә, сөнки тракторҙың ал яғында ла, арты яғында ла торған фаралары тирә-йүнде яҡшы яҡтырта. Байсаровтың мылтығы трактор кабинаһына, ә Бремжандың мылтығы саҡмаға баҫҡан Байсаровтың уң ҡулына тоҫҡала. Бер-бер артлы тип әйтерлек атылған ике мылтыҡ тауышы бөтә йылға буйын яңғырата. Мылтыҡ шартлауына Байсаров аҡырған тауыш ҡушыла. Ваҡ тумалаҡ ҡурғаш урынына тоҙ һалып яһалған заряд тейеүҙән уң ҡулын йәрәхәтләгән Байсаров тәгәрәп йөрөп аҡыра. Ҡото осҡан тракторсы тракторын мылтыҡтан атҡан тауыш яғына борорға үҙендә көс таба, йәнәһе, дошманын танымаҡсы. Ҡараһа, мылтығына таянып Бремжан баҫып тора. Ә ерҙә аҡырып участка вәкиле тәгәрәп ята.
– Был ни хәл, Бремжан ағай? – Сафуан, кабинаһын асып, ергә һикереп төштө.
– Теге биш баш йылҡы юғалған көндө үҙен Ҡәнифә юлы буйында күргән берҙән-бер шаһиттан ҡотолмаҡсы бит бынау ат ҡарағы! – Бремжан Байсаровҡа күрһәтте.

– Минәнме? – тигәнен һиҙмәй ҙә ҡалды Сафуан Байсаровтың, һорау алып, протокол төҙөүен иҫенә төшөрөп.

– Хәҙер кемдең кем икәнен белдеңме инде? – Һорауға Бремжан һорау менән яуап бирҙе.

– Ә ниңә ул миңә пистолетынан атманы икән?

– Пистолеттан атһа, үҙен-үҙе тоттора. Ярай әле, алдан атып өлгөрҙөм. Юғиһә, яҡты донъя менән хушлаша инең. – Ике мылтыҡты ла Бремжан трактор гусеницаһына һөйәне.

– Ә пистолеты ҡайҙа?

Бремжан билбауына ҡыҫтырған пистолетты Сафуанға тотторҙо ла, Байсаровтың кобураһын ысҡындырып:

– Мә, билеңә быу ҙа пистолетты һал, – тине.

– Хәҙер ни эшләйбеҙ инде?

– Ауылға алып ҡайтып, яраһын медпунктта эшкәрткәс, прокуратураға йә милицияға хәбәр итәбеҙ, – тип Бремжан эске күлдәген сисеп йыртҡыланы ла, Байсаровтың яраланған ҡулын бәйләп, беләктең үр яғына жгут һалды. Сөнки тоҙ киҫәктәре дробтан да эрерәк ине.

– Минән һорау алып, протокол төҙөгән була, ҡәһәрең...

– Ярай, аҡылға ултыра башланың. Был һүҙҙәрҙе мин һиңә атайың булараҡ әйтәм.

Баҫып торған килеш һуштан яҙған Сафуанды Бремжан тотоп өлгөрҙө һәм ергә һуҙып һалды. Ҡул тамырын тотоп ҡарағас, сикәләренә сәпәй башланы.

Сафуан башта тороп ултырҙы. Аяҡтарына баҫҡас, өнөммө-төшөммө тигәндәй, аптырап ҡалды.

– Улым! – Бремжан Сафуанды ҡосағына алды. Күҙҙәренән йәштәр бәреп сыҡты.

– Атай! – Сафуандың тамағына төйөн тығылды.

Ике ир затының ҡосаҡлашып, күҙ йәштәрен түгеүе шул ҡәҙәре ҡыҙғаныс, күреп торған кеше үҙе ҡушылып илар ине. Быға тиклем илауҙың ни икәнен дә белмәгән Бремжан, ҡулъяулығын сығарып, башта Сафуандың, һуңынан үҙенең күҙ йәштәрен һөрттө.

– Атай, мине нисек таптың?..

– Аҙаҡтан һөйләшербеҙ, улым. Ашығайыҡ. Мин Байсаровҡа үлерлек атмаһам да, күп ҡан юғалтыуы мөмкин. Уға тиҙерәк медицина ярҙамы күрһәтергә кәрәк.

– Тракторға ултыртып алып ҡайтмаһаҡ был бәндәне...

– Шулай итербеҙ. Ишетәһеңме, ат кешнәй. Байсаровтың аты һыу аръяғында. Бар, алып кил. Мин етәкләп алып ҡайтырмын.

Аталы-уллы Байсаровты алып ҡайтҡас, медпунктта шәфҡәт туташынан ҡулындағы яраларын таҙарттырып, тәү медицина ярҙамы күрһәттеләр ҙә ауыл Советына алып килделәр һәм районға хәбәр иттеләр. Таң атыуға тәфтишселәр менән район прокуроры, милиция начальнигы килеп төштө.

– Ат ҡарағын ҡулға алығыҙ. – Ыңғыраша-ыңғыраша, Байсаров һау ҡулы менән Бремжанға күрһәтте.

– Әйтегеҙ, биш баш йылҡыны ҡайҙа оҙаттығыҙ? – тине ҡарашын Бремжанға төҙәгән милиция башлығы.

– Уныһын, иптәш майор, участковый Байсаровтан һорағыҙ, – тип яуап бирҙе лә Бремжан һоло һала торған торбанан кобура тағылған ҡайыш сығарып тотторҙо.

– Ә былары ниндәй мылтыҡтар? – Прокурор стена ҡырына һөйәп ҡуйылған ике мылтыҡҡа күрһәтте.

– Был мылтыҡтан Байсаров бына ошо, – Бремжан Сафуанға күрһәтте, – тракторсыға атты, картечы трактор кабинаһы тимеренә ҡаҙалған. Ә быныһы – мин Байсаровтың ҡулына атҡан мылтыҡ.

Тәфтишселәр картечты соҡоп сығарҙылар, фотоға төшөрөп алдылар, Байсаровты медпунктҡа оҙаттылар. Ә Бремжан менән Сафуанды, мажара ҡупҡан урынды ҡарап сыҡҡас, район үҙәгенә алып киттеләр. Ауылда ҡалған ике тәфтишсе Байсаров кабинетында, Бремжан йортонда тентеү үткәрҙе. Участка вәкиленең кабинетында кәрәкле әйбер ҙә, документтар ҙа табылмай. Көтөүсе йортонда мең һумға яҡын аҡса, ҡуйын дәфтәре табыла.

Енәйәт эше күренһә лә, дело ҡуҙғатыуҙа ҡыйынлыҡ тыумайынса ҡала алманы, сөнки эш бигерәк буталсыҡ. Ике мылтыҡта ла Бремжандың бармаҡ эҙҙәре бар. Ә Байсаровтың бармаҡ эҙҙәре юҡ. Икенсенән, Бремжанға бик күп досье йыйналған. Йәнәһе, ауылға килеп төпләнер-төпләнмәҫтән бынамын тигән йорт һалып кергән. Сафуандың ҡатынына ҡиммәтле тун бүләк иткән, тентеү ваҡытында күп аҡса табылған. Өҫтәүенә, көтөүсе шикле кешеләрҙе фатирға төшөрә. Күмертау, Сибай яҡтарына Ҡаҙағстандан килгән ит һатыусылар Бремжанда ҡунып китә. Шуға күрә енәйәт эше Бремжанға ҡарата ҡуҙғатыла. Тегеһе кире ҡаға:

– Бәй! Мин бер юлы ике кешегә ике мылтыҡтан нисек атайым, ти?

– Бәй, ике мылтыҡҡа ла бармаҡтарығыҙҙың эҙе нисек йоҡҡан һуң?

– Тимәк, экспертиза өҫтән-мөҫтән генә үткәрелгән. Сөнки бармаҡтарым эҙен ҡалдырырға мин һеҙгә тәжрибәһеҙ маңҡа түгел, ә разведчик. Байсаров мылтығын мин тик көбәк тәңгәленән генә тоттом. Ә ниңә экспертиза минең бармаҡ эҙҙәрен курок тирәһенән эҙләмәгән? Ул урында минең бармаҡ эҙҙәре түгел, Байсаровтың бармаҡ эҙҙәрен дә таба алмаҫһығыҙ. Сөнки ул перчатка кейеп эш иткән.

– Ошомо? – тип һораны тәфтишсе Бремжандан, ҡанға буялған бирсәткәгә күрһәтеп, һәм көтөүсегә ҡарата табылған дәлилдәргә баҫым яһай башланы.

– Тентеү ваҡытында минең ҡуйын дәфтәрен алғанһығыҙ, – тине Бремжан, яуап биреү урынына.

– Әлбиттә, алдыҡ.

– Алғас, уҡығыҙ, юғиһә, мин яуап биреүҙән бөтөнләй баш тартам.

***

Яуап биреүҙән баш тартҡан ғәйепләнеүсе Бремжан Брагембетовҡа ҡарата район прокуратураһы ҡуҙғатҡан енәйәт эшен тикшереүҙе Башҡортостан прокуратураһы үҙ өҫтөнә алды. Өфөнән килеп төшкән тәфтишсе башта район прокуратураһы алып барған енәйәт эше һәм ғәйепләнеүсе Бремжан Брагембетовтың (ысын исем, фамилияһы – Фәруҡ Сабитов. Совет власы осоронда сирек быуат тип әйтерлек ҡасып йөрөргә мәжбүр булған) таушалып бөткән ҡуйын дәфтәре менән танышып сыҡты ла йәшәгән урынын ташлап китмәү шарты менән Бремжанды ирекккә сығарҙы. Уның һәм Сафуан ҡатнашлығында енәйәт ҡылған урынды ентекләп ҡабаттан ҡарап сыҡҡандан һуң, енәйәт эше урынын ҡарау протоколына: «Брагмбетов-Сабитовтың ике мылтыҡтан бер үк ваҡытта тип әйтерлек бер юлы ике кешегә атыуы һис мөмкин түгел. Тимәк, тоҙ ярсыҡтары һалып яһалған мылтыҡтан Байсаровҡа – Брагембетов-Сабитов, ә картечь һалып яһалған мылтыҡтан тракторсы Сафуан Сабитовҡа Байсаров атҡан. Тик ҡорбанына тейҙерә алмаған, сөнки Брагембетов-Сабитовтың атыуы ҡамасаулаған. Төнөн Ҡәнифә юлы буйында бригада аттарын ҡараған Рәхимйән раҫлауынса, ике мылтыҡтан атыу бер үк ваҡытта яңғыраған. «Ҡәнифә юлы

буйында үҙен күргән берҙән-бер шаһиттан ҡотолмаҡ булған Байсаровҡа енәйәт эшләргә Брагембетов-Сабитов юл ҡуймаған», – тигән һығымтаны теркәй.

Бремжан Брагембетовҡа ҡарата район прокуратураһы тарафынан ҡуҙғатылған енәйәт эше туҡтатыла, ә уғрылар аша ситкә йылҡы оҙатып торған ат ҡарағы Байсаровҡа ҡарата бер нисә статья сәпәлә һәм элекке район прокурорының башына еткән ҡурҡыныслы рецидивист тейешле язаһын ала. Совет власы осоронда нахаҡ хөкөм ителгән Фәруҡ Сабитовҡа ысын исем-фамилияһы, тентеү ваҡытында алынған ҡуйын дәфтәре кире ҡайтарып бирелә. Был ҡуйын дәфтәренең йөкмәткеһе түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала.

***

Утыҙынсы йылдар. Кулактарҙы синыф булараҡ юҡ итеү осоро. Көнсығыш календарының береһендә: «Королоҡ ун ике йылда бер мәртәбә ҡабатлана һәм Эт йылы тип, ә унан һуң килгән йыл Дуңғыҙ йылы тип атала». Тәүгеһе – уңдырышһыҙ, икенсеһе уңдырышлы йыл иҫәпләнә. 1921–1933 йылдар календарҙа йот йылы, ә 1922–1934 йылдар муллыҡ йылы булып күренә. Ләкин тормош был ун ике йыл әйләнешенең тик шартлы булыуын ғына иҫбат итә. Королоҡ булған йылдар ҙа, уңдырышлы йылдар ҙа был ун ике йыл рамкаһына тап килмәй, сөнки былар барыһы ла социаль күренештең сағылышы менән бәйләнгән. 1933 королоҡ йылының әҙемтәһе аҙыҡ-түлек запасы бөткән 1934 йылдың яҙ көндәренә тура килһә, иң ҡырҡыу нөктәһе халыҡ күп ҡырылған май, июнь айҙарына тап килә. Халыҡ телендә, кеше ҡарға баҫһа, асығып үлеүҙән ҡотола, тигән шартлы әйтем дә бар. Аслыҡты үҙе татымаған кеше был әйтемде үлән сыға башлауға бәйле аңлата. Йәнәһе, үлән ашап үлемдән ҡотола. Был ҡараш аслыҡ тураһында яҙған әҙәбиәт биттәренә лә килеп керә.

Алмабикәнең аслыҡ йылы һыйырһыҙ тороп ҡалған ата-әсәһенең үлеме тап ана шул үлән һәм һарына, әтлек кеүек тамырағыҡтар өлгөрә башлаған осорға тап килә. Ун ете йәше лә тулмаған Алмабикәне үлемдән әсәһенең түшелдерәгенә ҡаҙалған көмөш тәңкәләр ҡотҡара. Етем ҡалған ҡыҙ тәңкәләрҙе биш ҡаҙаҡ арыш онона алмаштырып, икмәк бешерә лә уны тоҡсайына һалып, йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә тигәндәй, башы һуҡҡан яҡҡа сығып китә.

Тыуып-үҫкән ауылын ташлап киткән Алмабикә ауылдан-ауылға хәйер һорап йөрөй торғас, аслыҡҡа артыҡ бирешмәгән бер ауылға барып юлыға. Өйҙән өйгә хәйер һорап йөрөгән был ҡыҙҙы йәшәр урыны, мал-тыуары, ашап-эсер ризығы булған Мәһиәсмә тигән тол ҡатын үҙенең үлгән ҡыҙына оҡшата ла ҡанат аҫтына ала. Ғаиләһенән япа-яңғыҙ ҡалған ҡатын менән ил ҡыҙырған ҡыҙ ана шулай бергә йәшәй башлай. Мәһиәсмә – әсә, ә Алмабикә ҡыҙ урынында. Шулай ҙа ирҙән ҡалған һәм ҡыҙын юғалтҡан тол ҡатындың йөрәге урынында түгел. Теремекләнеп аяҡҡа баҫҡан ҡыҙ ҡасандыр уны ташлап китер һымаҡ тойола. Мәһиәсмә Алмабикәгә ҡарап ултыра-ултыра ла күҙенә йәш ала.

– Ни булды, Мәһиәсмә апай?

– Былай ғына. Мине ташлап китһәң, ни эшләрмен икән?

– Мин кейәүгә сыҡһам да, һине ташламам.

– Ә кейәүең мине көтөргә риза булмаһа?

– Риза булмаһа, мин ундай абышҡаға сыҡмайым. Күңелеңде киң тот, тик миңә колхозға кереп, эшкә төшөргә рөхсәт ит, апай.

– Үҙ иркеңдә, балаҡай, үҙ иркеңдә.

Тамағы туйып, нығынып, битенә ҡыҙыллыҡ йүгерә башлаған етем ҡыҙ аслыҡтан үлеүҙән бына шулай ҡотола. Аяҡтары һыҙлаған хужабикәнең йорт эштәрен башҡара. Мал ҡарай, аш-һыу әҙерләй, кер, иҙән йыуа. Өй эсе, хатта ихата

ялт итеп тора. Кистәрен хужабикә менән шәл, ойоҡ, бейәләй бәйләй. Бөгөн дә кис ваҡыт ҡул эше менән үтте. Йоҡларға ятып, Мәһиәсмә әкиәт һөйләй генә башлауы булды, кемдер ишек шаҡыны.

– Кем? – Хужабикә ҡайыштан эшләнгән ишек бауына тотонған килеш туҡтап ҡалды.

– Мин, Фәруҡ. Ас, апай.

Ишек асылыуы булды, тирләп-бешеп, тоҡ йөкмәгән Фәруҡ килеп инде лә тоғон иҙәнгә төшөрҙө.

– Был ни эшең, балаҡай? – Мәһиәсмә ике ҡулы менән ике яҡ бурбайына шап һуҡты.

– Бойҙай алып килдем, Мәһиәсмә апай, бойҙай.

– Ниндәй бойҙай?

– Үҙебеҙҙең келәттән алдым.

– Бәй, йоҙаҡ һалып, асҡысын алып киттеләр түгелме һуң?

– Икенсе асҡысын күрмәгәндәр. Мал өйөнөң кәштәһендә ятып ҡалған.

– Ай-һай-й-й! Һаҡ бул. Хәләл көсөгөҙ менән йыйған малығыҙ тип тормаҫтар, – тип иҫкәртте Мәһиәсмә ике туған ҡустыһы Фәруҡты.

Ә ҡурсалауы нигеҙле. Фәруҡтың атаһы Ҡорманғәле – Мәһиәсмәнең ике туған ағаһы. Кулак тип һөргөнгә оҙатаһы көндө инфарктан үлеп ҡала. Уның урынына вариҫы булған өлкән улы Хәбибулланы һөргөнгә оҙаталар. Ә кесе улы, бәлиғ булып өлгөрмәгән Фәруҡ, мал өйөндә тороп ҡалды. Ҡорманғәленең бөтә мөлкәте конфискацияланды. Йәшәгән йортон район үҙәгенә күсерҙеләр, малын колхозға бирҙеләр. Мәгәзәй тип аталған ҙур келәтендәге бойҙайын да алып киттеләр. Ун – ун биш бот самаһы бойҙайы ҡалған келәтенә йоҙаҡ һалдылар. Унлап ҡаҙы, ун бишләп тауығы, өс-дүрт умарта бал ҡорто ғына тороп ҡалды.

– Ҡурҡма, Мәһиәсмә апай, ҡурҡма. Мин келәттән бойҙай алғанды бер кем дә күрмәне, – тип йыуатты уны Фәруҡ.

– Ә был бойҙайҙы мин ҡайҙа йәшерәйем? Килерҙәр ҙә мине лә, үҙеңде лә алып китерҙәр.

– Әйт әле, элекке йыл, Ҡәнзәфәр еҙнәм фарзункала эшләгәндә, хеҙмәт көнөнә күпме бойҙай алдығыҙ?

– Илле бот бойҙай тейҙе, тигәйне еҙнәң мәрхүм.

– Шул хәтле бойҙайҙы яңғыҙ үҙең ашап бөтмәгәнһеңдер бит?

– Аллаға шөкөр, егерме бот самаһы бойҙайым бар әле.

– Ана шуларҙағы бойҙайыңа бушатайыҡ та болғайыҡ. Вәссәләм.

Шулай эшләнеләр ҙә. Фәруҡ төндәрен Мәһиәсмәгә бойҙай ташый, ә тегеһе ҡул тирмәненән бойҙай үткәреп, ононан Фәруҡҡа икмәк бешерә. Икмәкте уға Алмабикә алып бара һәм, һаҡлыҡ сараһы күреү маҡсатында, Фәруҡ алып ашаһын тип, кәртә артындағы буш умартаға йәшерә. Йәштәр һуңыраҡ таныша. Фәруҡ икенсе мәртәбә бойҙай алып килгәс, Мәһиәсмә уны икенсе мәртәбә иҫкәртә:

– Тотолоп, төрмәгә эләкмәйенсә ҡуймаҫһың һин, Фәруҡ.

– Алырын алып бөттөләр бит инде ул бойҙайҙың, Мәһиәсмә апай, ҡурҡма.

– Шулай ҙа ҡабат алып килмә.

– Ә алып килгәне бөтһә?

– Үҙ бойҙайымдан икмәк ебәрермен. Килештекме?

– Ярай, улайһа. Һиңә ҡарата апай шик тыуыуы мөмкин түгел, сөнки ике ғаилә араһында, атап әйткәндә, атайым менән Ҡәнзәфәр еҙнәм араһында дошманлыҡ барын бөтә ауыл белә.

– Ҡорманғәле ағайымдың башын Ҡәнзәфәр еҙнәй ашаны, тип әйтмәксеһеңме әллә, Фәруҡ!

– Юҡ, Маһиәсмә апай, дошманлыҡ тигәнем атайымдың хәйләһе генә.

Хәйлә былай тыуа. Комсомол активисы Ҡәнзәфәр:

– Ҡурҡма, ҡайнаға, мин һине һөргөндән ҡотҡарып алып ҡалырмын, – ти Ҡорманғәлегә. – Һин бит ысын мәғәнәһендә кулак түгел, ә урта хәлле крәҫтиән.

Эйе, Ҡорманғәле – урта хәлле крәҫтиән. Ә урта хәлле крәҫтиән кулакмы, түгелме тигән мәсьәләне ауыл йыйыны юғарынан бирелгән инструкцияға ярашлы хәл итә. Ә был инструкцияла: «Тик һәр ваҡыт йыл әйләнәһенә кеше көсөнән файҙаланып йәшәгән кеше генә, кулак булараҡ, һөргөнгә оҙатыла, мөлкәте конфискациялана. Ә инде бесән, ураҡ ваҡыттарында ғына ялсы тотҡан крәҫтиән, урта хәлле крәҫтиән булараҡ, һөргөнгә ебәрелмәй», – тип әйтелә. Бына шуны аңлата Ҡәнзәфәр ҡайнағаһы Ҡорманғәлегә, һөргөндән алып ҡалмаҡ булып.

– Әйтеүеңә рәхмәт, Ҡәнзәфәр кейәү. Хәҙер мине лә тыңла. Мине барыбер һөрәсәктәр. Зинһар, утҡа май һипмә. Йөндөң ыңғайына һыйпа, үҙеңә зыян килә күрмәһен. Ә инде миңә яҡшылыҡ эшләйем тиһәң, мин әйткәнсә эшлә: Фәруғымды ҡанат аҫтыңа ал. Мине һөргөнгә ебәрергә, тигән тауышҡа ҡушыл. Шунан да ҙур бүләк кәрәкмәй миңә һинән, – тип үтенә Ҡорманғәле.

Фәруҡ Ҡорманғәле менән еҙнәһе Ҡәнзәфәр һөйләшеүе тураһында бына ошоларҙы бәйән иткәс кенә төшөндө кеүек Маһиәсмә.

– Ярай, балаҡайым, ағайым менән еҙнәң дөрөҫ эшләгән, – тине лә Маһиәсмә, Фәруҡҡа бөтөн икмәк тотторҙо. – Ә һин, Алмабикә, Фәруҡты кәртә артынан оҙатып ҡуй. Ул икмәк һалып ҡалдырырға умартаны күрһәтер.

Егет менән ҡыҙҙың бер-береһенә яҡынайыуы бына шулай башланды. Фәруҡ Алмабикәгә икмәк, башҡа төр аҙыҡ-түлек йәшереп ҡалдырырға һөйләшкән буш умарта ҡапҡасын нисек асып ябырға өйрәтте лә уны кәртә артынан бер аҙ оҙатып ҡуйҙы.

– Ҡабат был тирәлә икәү бергә кеше күҙенә күренмәҫкә тырышайыҡ, – тип иҫкәртте борсолоулы тауыш менән ҡыҙ егетте, Маһиәсмәнең, һаҡ булығыҙ, тигәне иҫенә төшкәс.

– Тимәк, һин минең менән осрашырға теләмәйһең?

Ҡыҙ яуап бирмәне.

– Ниңә өндәшмәйһең? Әллә ҡурҡаһыңмы?

– Ҡурҡмайым, һинең өсөн борсолам.

– Һин һыу алырға йылға буйындағы үҙегеҙҙең ҡоҙоҡҡа бараһың, ә мин тыҡрыҡтан йылға буйындағы үҙебеҙҙең ҡоҙоҡҡа һыу алырға төшәм. Кисен һеҙҙең ҡоҙоҡ янында күрешербеҙ.

– Ярай, улайһа.

Фәруҡ менән Алмабикә араһында ғишыҡ уты тоҡанды. Йәштәр кистәрен шул түбән остағы Алмабикә һыуға йөрөгән ҡоҙоҡ янында осраша башланы. Ахырҙа улар өйләнешергә ҡарар итте.

Йома көнө Алмабикә картуфлыҡ аша кер сайҡатырға төштө. Сайҡаған керҙәрен теҙеп элеп сыҡты. Һыу инеп сыҡҡас, тәбиғәт күренешенә һоҡланып ҡарап торҙо. Берсә ҡояшҡа, берсә һыу төбөнә төшкән шәүләһенә ҡарай. Ныҡ сағылһа, күҙен йома. Һыу төбөнә төшкән шәүләһе сайҡалһа, ҡояш йылмайған һымаҡ күренә. Күҙҙәре ҡояшҡа сағылған Алмабикә картуфлыҡ аша йылға буйына төшөп килгән Фәруҡты ла күрмәне. Хатта арттан килеп Фәруҡтың күҙҙәрен ҡаплағанын да һиҙмәй ҡалды.

– Фәруҡ, – ҡыҙ егет ҡулдарын эләктерҙе. – Бата уҡырға тейеш... бабайҙы таба алдыңмы?

– Таптым. «Килермен, тик һаңғырау күп ишетә, һуҡыр күп күрә, тигәндәй, теге һыңар күҙ Ғәйнулланан һаҡ булығыҙ. Еҫкәнә лә йөрөй. Бата уҡыһаң да, балаға

исем ҡушһаң да еткереп тора, ҡәһәрең», – тип иҫкәртте. Ә хәҙер... күҙҙәреңде йом.

– Йомдом. – Алмабикә Фәруҡтың ни менәндер алдын ҡаплағанын тойҙо.

– Күҙеңде ас!

– Күлдә-ә- әк! – тине Алмабикә, ебәк таҫмалар менән биҙәлгән йәрлесәкле сатин матур күлдәкте һыйпап.

– Әсәм мәрхүмәнең күлдәге. Үҙенә кейергә насип булманы, һиңә, күрәһең, килененә яҙған. Кей... – Фәруҡ, күҙҙәрен йомоп, Алмабикәгә арты менән боролдо.

– Кейҙем.

– Ысын хан ҡыҙы! – Фәруҡ Алмабикәне ҡосаҡлап үбеп алды.

– Йом күҙҙәреңде тиҙерәк. Сәлим бабайҙы көттөрмәйек. – Алмабикә, бүләккә алған йәрпесәкле күлдәген сисеп, үҙенең күлдәген кейеп алғас, киптергән керҙәрен йыйып алды. – Ас күҙеңде, әйҙә ҡайтайыҡ.

Ҡайтһалар, урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйелгән, түрҙә, аяҡ салып, Сәлим бабайҙары яҫтыҡ өҫтөндә ултыра. Алмабикә сымылдыҡҡа инеп, Фәруҡ бүләк иткән күлдәген кейеп сыҡҡас, ашъяулыҡ тирәһенә ултырыштылар. Бабай бата уҡыны, Маһиәсмә, риза итер өсөн, йола буйынса, уның алдына аҡса һалды, Фәруҡ алып килгән тауыҡ итенән аш ултыртты. Ашап-эскәс, бабай йәштәргә бәхет теләп, хуш итеп ҡайтып китте.

– Һарыбайың күренмәй былант (ҡура) тирәһендә. Фәруҡ, ҡайҙа икән? – тип һораны Маһиәсмә. Үрге оста йәшәгән әхирәтенә барышлай үтеп-сүтеп йөрөгәндә Фәруҡ йәшәгән ихата тирәһен байҡаштыра торғандыр, күрәһең.

– Хәбибулла ағайым менән еңгәмде һөргөнгә оҙатҡан көндө үк, ә юҡ, төндә юҡ булды.

– Ә ниңә был турала миңә әйтмәнең?

– Ул бит йөрөй-йөрөй ҙә ҡайта торғайны. Ә был юлы ниңәлер оҙаҡланы.

– Бына нимә, балаҡайҙар, аҙна-ун көн самаһы осрашмай тороғоҙ, – тип иҫкәртте йәштәрҙе ҡурсалап, Ҡорманғәле хазинаһын ҡайҙалыр йәшергән, тигән имеш-мимеш тураһында күптән үк ишеткән Маһиәсмә.

– Ярай, – тип ризалашты йәштәр һәм, бесәнгә төшкәс кенә, колхозсылар менән бергә ҡырҙа йоҡлап, эшләй башланылар. Тик бесәнде тамамлап ҡайтҡас, Алмабикә элеккесә аҙыкты Фәруҡҡа кәртә артындағы буш умартаға тик төндә генә алып килеп ҡалдыра башланы. Һуңғы мәртәбә аш бешереп алып килгәйне, ҡыштырҙаған тауышҡа һиҫкәнеп китте. Башына, Һарыбай түгелме, тигән уй төшкәс, тынысланып, ике аҙым атлауы булды, аяҡ тауышы ишетелде. Алмабикә мал өйө яғына ҡарай атланы һәм ниҙер әйтергә йыйынған Фәруҡтың ауыҙын ҡапланы.

– Һине кемдер аңдый, – тип бышылданы йәш ҡатын иренең ҡолағына.

Фәруҡ ишек асты ла, ишек келәһе шылтырарлыҡ итеп, кире ябып та ҡуйҙы. Йоҡларға йыйыналар, йәнәһе.

– Киттек. – Фәруҡ ҡатынын етәкләп урамға сыҡты.

– Ни булды? – тип ҡаршы алды уларҙы Маһиәсмә.

– Кемдер Фәруҡты аңдый, Маһиәсмә апай, – тип яуап бирҙе Алмабикә. – Икенсегә күрәм.

– Күргәс, ниңә миңә әйтмәнең?

– Һарыбай йөрөй икән, тип уйланым.

– Хәҙер ни эшләрбеҙ икән, апай? – Ҡулындағы аҙығын Фәруҡ мейес көлдөксәһенә ҡуйҙы.

– Һеҙгә, тауыш-шыу баҫылғанса, бынан китеп торорға тура килер. – Маһиәсмәнең йәштәргә кәңәше шул булды.

Берҙән-бер дөрөҫ кәңәш, әлбиттә. Фәруҡ атанан ҡалған хазинаны икенсе урынға күсерер өсөн генә юғалып торһон, йәнәһе. Риза булыуын башта Алмабикә белдерҙе:

– Ярай, улайһа, ауылда бер аҙ күренмәй торорбоҙ.

– Ә никах теркәү... – тип икеләнде Фәруҡ.

– ЗАГС бер ҡайҙа ла ҡасмаҫ, кисектереп торайыҡ бер аҙға. Ҡәнзәфәр еҙнәң менән ғүмер буйы ЗАГС-һыҙ йәшәнек, бер кемдән дә кәм йәшәмәнек. Тик шуныһы йәл: ғүмере ҡыҫҡа булды.

Ҡорманғәле көмөш кеҫә сәғәтен, ышанысլы урынға йәшер тип, тентеү ваҡытында кеҫәһенән сығарып тотторғайны улы Фәруҡҡа. Шул сәғәт иҫенә төшкәс, Фәруҡ:

– Ярай, – тип ризалашты. – Һин, Алмабикә, йыйына тор, ә мин теге кәртә артындағы умарталағы балауыҙ араһына йәшергән кеҫә сәғәтен генә алып киләйем. Аҙыҡ-түлек һатып алыр өсөн тотонорбыҙ.

– Туҡта әле, мине тыңла, – тип туҡтатты Мәһиәсмә Фәруҡты. – Һиҙмәһендәр тиһәң, умартаға хәҙер тотонмай тор. Урамдан ҡайт та йоҡла. Икенсе буш умарталағы ҡортоң бала айырмаҡсы. Ана шул бала ҡорт күсен сәғәт йәшерелгән умартаға бикләгән булып хәйләләш. Ул сәғәт икегеҙгә ярты йыл йәшәргә етер.

– Бәй, таҙартылмаған умартала ҡорт торамы ни?

– Ә һин ҡортто ситлеккә һалып бикләһәң, бер ҡайҙа ла китмәҫ... Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ.

***

Мәһиәсмәнән төн уртаһында уҡ ҡайтып киткән Фәруҡ ҡабат, яҡтырғас та, төш еткәс тә, килмәне. Ярты төн керпек тә ҡаҡмаған ике ҡатын, һыланып-һыйпанып Мәһиәсмәнең әхирәте Зәйнәпкә ҡунаҡҡа барыу һылтауы менән, күрәһең, күр-күр, өр-яңы күлдәктә оло урам буйлап үрге осҡа ҡарай юлланды. Ихата тирәһендә Фәруҡ күренмәй. Мал ишеге шар асыҡ.

– Ҡарама, – Мәһиәсмә терһәге менән Алмабикәнең ҡабырғаһына төрттө, сөнки келәттә ҡалған ашлыҡты тултырылған тоҡтарҙа арбаға тейәйҙәр ине. – Бик тә булмаһа, ҡайтышлай ҡарарбыҙ, бынау дөмөккөрҙәр киткәс.

Ҡатындар Зәйнәп янында оҙаҡ торманы, хәл белештеләр ҙә ҡайтыу яғын ҡаранылар. Улар Фәруҡ йәшәгән мал өйөнә килгәндә, арбаға бойҙай тейәгән кешеләр киткәйне инде. Күренеүенсә, келәттә бойҙай Ҡорманғәленең хазиналары эҙенә төшөү маҡсатында Фәруҡты әүрәтер өсөн ҡалдырылған. Ә атаһының сәғәтен алырға килгән Фәруҡ, күрәһең, Мәһиәсмәнең иҫкәртеүенә ҡолаҡ һалмаған. Таң атыуҙы, ҡорто бала айырыуын көтмәй, буш умартаға барып, үҙен-үҙе тотторған. Алмабикә икмәк йәшергән умарта урталай ярылған, тәгәрәп ята. Эсендәге иҫке балауыҙ тирә-яҡҡа сәсрәгән. Умартаның ярылған яртыһы өлөшөндә кирбес ҙурлығында өңөш бар. Күрәһең, хазинаһын Ҡорманғәле ошо өңөшкә йәшергән булған, ә кесе улы Фәруҡҡа был турала әйтмәгән. Мәһиәсмә тик хазина тураһында таралған имеш-мимеште генә белә. Әгәр ҙә Фәруҡ хазинаның ошо умартаға йәшерелеүе тураһында белгән булһа, кеҫә сәғәтен бөтөнләй икенсе урынға йәшергән булыр ине. Суд быны иҫәпкә алмаған булһа кәрәк, тип фараз итәһе генә ҡала. Сөнки, бүнәтәйҙәр әйтеүенсә, улар ҡатнашлығында төҙөлгән протоколда «Сабитов Фәруҡ Ҡорманғәле улы енәйәт эшләгән урында тотолдо» тип яҙылған. Фәруҡ протоколға ҡул ҡуйыуҙан баш тартҡан. Шул китеүҙән ул эҙһеҙ юғала. Йөклө ҡалған ҡатыны Алмабикә ирен ҡабат бер ваҡытта ла күрә алмай. Рухы төшкән ҡатындың донъянан өмөтөн өҙгән саҡтары ла була.

Оҙаҡламай бала донъяға килә, Сафуан тип исем ҡушалар. Бала үҫә, теле сыға, Алмабикәгә – әсәй, Маһиәсмәгә өләсәй тип өндәшә башлай. Алмабикә ҡул һыҙғанып колхозда эшләй, ә Маһиәсмә бала ҡарай.

Һылыу ғына Сафуанға ҡыҙҙарҙың да күҙе төшә, ә был хәл көнсөл егеттәрҙең сәменә тейә башлай. Ҡыҙҙар араһында ла көнсөлдәр табыла. Ауылда ғәйбәт тарала, йәнәһе, Алмабикә ирһеҙ бала тапҡан. Сөнки йәшерен уҡытылған бата ауыл халҡы өсөн һаман да сер булып ҡала. Ғәйбәтте ауыр кисергән Сафуандың башына ҙур ҡайғы төшә. Бер-бер артлы әсәһе Алмабикә һәм өләсәһе Маһиәсмә вафат була. Маһиәсмәне ерләргә бер туған ҡустыһы Хәсән ҡаланан килгәйне, Сафуан уға әсәһе Алмабикәнең: «Улым, ғәйбәт тыңлап йөрөмә, минең тыуып үҫкән ауылыма барып йәшә», – тигән васыяты тураһында һөйләне. Хәсән уны үҙе менән ҡалаға алып ҡайтып, үҙе эшләгән заводҡа эшкә урынлаштырҙы. Сиҙәм үҙләштереүгә набор иғлан ителгәс, Хәсән Алмабикәнең тыуып-үҫкән районына шылтыратҡайны: «Эйе, районды ң «Урал» колхозында ла сиҙәм күтәреү планлаштырылды», – тип яуап бирҙеләр.

– Бына хәҙер әсәйең тыуып-үҫкән ауылға сиҙәм күтәреүсе булып барып төпләнә алаһың, – тине Хәсән Сафуанға, әсәйең васыятын хәҙер үтәй алаһың, тигән мәғәнәлә.

– Нисегерәк?

– «ВЛКСМ ағзаһы, ә һөнәрем буйынса киң профилгә эйә булған механизатор булараҡ, партия саҡырыуына яуап итеп, Матрай районына сиҙәм үҙләштерергә ебәреүегеҙҙе үтенәм» тип заводтың комсомол комитетына ғариза яҙаһың. Шунан кадрҙар бүлегенә, парткомға әңгәмәгә саҡырырҙар. Шул процедураны үткәс, ҡулыңа путевка һәм юл аҡсаһы тотторорҙар. Әсәйең мәрхүмәнең тыуып-үҫкән ауылына бараһың да төшәһең. Үҙем Матрай районына шылтыратып белештем. Үҙеңә яңы ДТ-54 маркалы трактор бирәләр. Шундай тракторҙы күргәнең бармы?

– Күргәнем юҡ. Пускач ярҙамында анһат тоҡана, тиҙәр.

– Күрмәһәң, күрерһең.

***

Атаһының хазинаһын йәшереүҙә ғәйепһеҙҙән ғәйепләнеп ун йылға холоҡ төҙәтеү хеҙмәт лагерына ябырға хөкөм ителгән Фәруҡ, төрмәгә киткәс, буйында булып ҡалған Алмабикә һәм уны ҡанат аҫтына алған Маһиәсмә яҙмышы тураһында сирек быуат белмәй. Ул ил ҡыҙырып ир балаларға баба булараҡ сөннәткә ултыртып йөрөй торғас, үҙенең тыуып үҫкән ауылына ҡаҙаҡ кешеһе Бремжан Брагембетов исеме аҫтында килеп сыға. Ҡаланан тыуып-үҫкән ауылына бер туған апаһы Маһиәсмә мәрхүмәгә аят уҡытырға килгән Хәсән Фәруҡ-Бремжанды аят бағышлауын үтенә. Тегеһе аятын Маһиәсмә менән бер рәттән ҡатыны Алмабикәгә бағышлай. Аятта ҡатнашҡан туған-тыумаса оҙаҡ һөйләшеп ултыра, мәрхүмдәрҙе иҫкә ала. Һүҙ Сафуан яҙмышына барып тоташа һәм Фәруҡҡа улы Сафуандың эҙенә төшөргә ярҙам итә. Шулай итеп Фәруҡ ғүмерҙә күрмәгән улын ҡатыны Алмабикә тыуып-үҫкән ауылда таба. Фәруҡ-Бремжан ошо ауылда төпләнә. Баҫмасыларға ҡаршы һуғышҡан хеҙмәттәше Ҡотлогилде менән ҡатнашып йәшәй башлай.

Күренеүенсә, Бремжандың ҡуйын дәфтәрендә ваҡиғаларҙың үҫеше хронологик тәртиптә бирелмәгән. Бирелә лә алмай, сөнки Фәруҡ-Бремжан ҡатыны Алмабикә яҙмышы, уның ул табыуы тураһында тик сирек быуаттан ашыу ваҡыт үткәс кенә белә алды. Артабан ҡуйын дәфтәре түбәндәгесә дауам итә.

***

Тотҡондар тейәлгән тауар поезы көнсығышҡа ҡарай юл тота. Себергәме, Ҡаҙағстанғамы – билдәһеҙ. Башта станцияларҙа Мәскәү – Новосибирск, Мәскәү – Петропавловск, Мәскәү – Владивосток пассажирҙар поездары осрай торғайны, һуңыраҡ тик Мәскәү – Петропавловск, Петропавловск – Күксәтау поездары ғына осраштырҙы. Тимәк, тотҡондар Ҡаҙағстанға оҙатыла.

– Ҡара әле, Фәруҡ, бына был өсәү, – күршеһе үҙ-ара бәхәсләшкән бер төркөм тотҡонға күрһәтте, – ниңә поезд маршруттары менән ҡыҙыҡһыналар?

– Һөйләнмә, аяҡтарың һонолоуын теләмәһәң! Инер урыныңды белһәң, сығыр урыныңды ла бел, – тип бышылданы Фәруҡ, күршеһенең ҡолағына ауыҙын ҡаплап.

– Тимәк, ҡасырға йәпләйҙәр, – күршеһе лә Фәруҡҡа бышылдап өндәшә башланы.

– Әлбиттә, ҡасырға.

– Нисек?

– Улар ҙа ана шул һин биргән һорауға яуап эҙләй. Ҡасан, ҡайһы урында, нисек ҡасырға?

– Аңлашылды. Тотолмайым тиһәң, уйлап эш итергә кәрәк.

– Бына хәҙер аңлай башланың. Ҡара әле, – Фәруҡ тимер рәшәткә менән кәртәләнгән асыҡ вагон ишегенә ҡарап күрше юлда торған поезға күрһәтте, – вагонға нимә тип яҙылған?

– «Петропавловск – Кокчетав» тип яҙылған.

– Тимәк, беҙҙең ултырған тауар поезы Себер магистраленән Ҡаҙағстанға боролған.

– Ҡасырға ваҡыт, тип әйтмәксеһеңме?

– Әлбиттә. Ҡасаһы урындарға поезд килеп еткән. Ҡасыр өсөн Ҡаҙағстан да, Себер ҙә ҡулай. Ищи ветра в поле!

– Шулай булғас, давай, беҙ ҙә ҡасайыҡ.

– Йәшәгең килһә, тауышланма. Һиңә нисә йыл бирҙеләр?

– Дүрт йыл.

– Ауыҙыңды ла асма. Башың төрмәнән сыҡмаҫ.

– Ә һиңә ҡасһаң да яраймы?

– Миңә барыбер. Колыма кеүек урынға барып эләктеңме, бөттөң.

– Ә ниңә был ҡасырға шәйләгән өсәү, ярау итә торған һауытты бер кемгә лә сығарырға бирмәй, гел үҙҙәре генә сығарып түгә...

– Тағы әйтәм: аяҡтарыңды һонғоң килмәһә – төпсөнмә, – тине был юлы Фәруҡ башҡалар ҙа ишетерлек итеп һәм ҡасырға шәйләгән теге өс тотҡон янына килде. Тегеләрҙең береһе уның яңағына ҡундырҙы.

– Барыбер миңә көнөгөҙ төшәсәк! – тине ауыҙынан ҡан килгән Фәруҡ һәм урынына килеп ултырҙы.

Ҡасырға йыйынғандарҙың береһе ярау итеү һауытынан тимер сығарҙы ла тимер киҫәге менән бер итегенең олтанын ҡайыра башланы, тик булдыра алманы. Фәруҡ, фуфайкаһының бер ҡалын йөйөн һүтеп, биш-алты сантиметр оҙонлоғондағы ҡасау осо һынығын сығарҙы. Тегенеһенең итеген тартып алды ла, ҡасау осо менән итек олтанын айырғайны, егерме-егерме биш сантиметр оҙонлоғондағы ножовка осо килеп сыҡты. Шунан ул ҡасау осона теге тимер киҫәге менән һуғып иҙәндә ножовка осо һыйырлыҡ тишек соҡоно ла ножовка остоғон теге яңағына ҡундырған тотҡонға тотторҙо.

– Мә, герой!

Ике сәғәт маташҡандан һуң вагон иҙәнендә кеше һыйырлыҡ ҙур тишек барлыҡҡа килде. Поездың, боролмаға етеп, яйлауын көтәһе генә ҡалды. Металл шығырҙауы ишетелгәс, башта һары сәсле оҙон тотҡон, уның артынса бер-бер артлы ике иптәше, Фәруҡ төшөп ҡалды.

...Таң һыҙыла. Фәруҡтың шпалға бәрелгән һул яурыны ут кеүек яна. Ул тимер юлы күпере аҫтынан көньяҡҡа ҡарай һуҙылған йырын буйлап түгел, тимер юлы буйлап йүгерҙе. Сөнки шул саҡ мылтыҡтан атҡан тауыш ишетелде. Ҡыуыусылар иғтибарын ана шул күпер аҫтынан үткән йырын йәлеп итәсәк. Артта ат тояғы тауышы ишетелгәс, Фәруҡ тимер юлы эргәһендәге ҡамғаҡ тулған соҡорға һикереп боҫто. Шул арала килеп еткән һыбайлыларҙың икеһе тимер юлы күпере аҫтына инеп юғалды. Ҡалған икеһе йырын буйлап көньяҡҡа ҡарай сыҡты, ләкин оҙаҡламай, кире әйләнеп килеп, тимер юлының икенсе яғына күпер аҫтынан сығып, иптәштәре артынан китте. Күрәһең, мылтыҡтан атҡан тауышты сигнал тип ҡабул иткәндәр. Шунан тынлыҡ урынлашты. Фәруҡ йүгереп килеп йырынға төштө лә көньяҡҡа ҡарай эҙ йәшереп ҡасты. Дүрт-биш йөҙ метр ара үтеүгә йырын бөттө. Осо-ҡырыйы күренмәгән дала башлана. Хәҙер Фәруҡҡа дала киңлегенә китеп юғалыуҙан сара ҡалманы. Түҙҙертмәй һыҙлаған ҡул башын уң ҡулы менән тотҡан Фәруҡ яҡтырыуҙан алда мөмкин тиклем көньяҡҡа ҡарай алыҫыраҡ китергә тырышты. Ул артына боролоп ҡарағанда, офоҡ һыҙығынан башҡа бер ни ҙә күренмәй ине. Тимәк, эҙәрләүселәрҙән Хоҙай араланы. Ҡояш ҡыҙҙыра. Күләгә йәки ауыҙ сылатырлыҡ һыу осраһасы. Фәруҡ бик оҙаҡ атланы. Тамам хәлдән тайып, сырмалып үҫкән ҡаулан үләненә әләгеп йығылды.

Фәруҡ аңына килгәндә тирмәлә ята ине. Кемдер ауыҙына ҡымыҙ тамыҙа. Терһәгенә таянып тороп ултырырға уйлаған Фәруҡ, ҡапыл ҡысҡырып, кире урынына ауҙы.

– Ай, ширағым! Ят, ят, – тирмә хужаһы, башын ҡалҡытып, Фәруҡҡа тағы ҡымыҙ эсерҙе.

Ҡаҙаҡ һаҡлыҡ менән генә ҡасҡындың һул яурынына тотоноуы булды, тегеһе ҡабат аҡырҙы.

– Бына ул ҡайҙа икән-н-н! Ҡулың сыҡҡан, – тине лә хужа, һул ҡулы менән сыҡҡан ҡулды тотто, ә уң ҡулы менән терһәктән түбән этәрҙе лә ҡапыл үҙенә тартты.

– А-а-а-а! – Фәруҡ дала яңғыратып ҡысҡырҙы. Хужа ҡымыҙ эсергәс, тағы йоҡоға талды.

Фәруҡ уянғанда ҡояш офоҡҡа яҡынлаша ине. Көткән йылҡыһын үҙенең алмашсыһына тапшырҙы ла ҡаҙаҡ уны, атына меңгәштереп, үҙе йәшәгән ҡышлаҡҡа алып китте.

– Исемең кем?

– Фәруҡ.

– Ә мин Амангилде.

Фәруҡтың ҡотҡарыусыһы, уның үҙе кеүек үк, кулак балаһы булып сыҡты. Черемховоға һөрөлгән атаһы биләмәһендә ойошторолған «РККА» исемле йылҡы заводында көтөүсе икән, йәй йәйләүҙә, ә ҡышын тибенлектә йылҡы көтә. Фәруҡты Амангилде ҡышлаҡта бер генә тәүлек тотмаҡсы. Иҫке-моҫҡо кейем биреп, ҡаҙаҡса кейендерҙе. Ҡулына «Предъявитель сего Бремжан Брагембетов в 1932-1933 года работал в конном заводе имени РККА табунщиком. Уволен согласно поданного им заявления» тип яҙылған һәм мөһөр баҫылған танытма тотторҙо. Аҙаҡтан билдәле булыуынса, милиция ҡасҡындарҙы эҙләп тирә-яҡты

тетеп ҡарап сыҡҡан. Өс ҡасҡын тотола. Ҡалған ике тотҡон, шул иҫәптән Фәруҡ, ҡасып ҡотола. Репрессия осорондағы ғәҙәти хәл. Себер ҙә, Ҡаҙағстан да иркен. Күптәр үҙәктән ситкә ҡасып ҡотола. Ҡасҡындарҙы эҙәрләүселәрҙең Амангилде йәшәгән ҡышлаҡты тетеп эҙләүе Фәруҡтың ҡылған араһында иҫһеҙ ятҡан ваҡытына тап килә. Амангилденең эте шул яҡҡа ҡарай ҙа өрә, һис тә туҡтамай икән. Теге атлыларҙы ла өрөп ҡаршы ала.  Хатта Амангилдегә улар менән һөйләшергә ирек бирмәй. Тегеләр тиҙ-тиҙ генә тирмәне инеп ҡарайҙар ҙа ҡайтыу  яғын ҡарайҙар. Муйынсаһынан Амангилде тотҡан эт уларҙы өрөп оҙатып ҡала. Ләкин эт аҙаҡтан да өрөүҙән туҡтамай. Ҡабат Фәруҡ ятҡан яҡҡа ҡарап өрә башлай. Фәруҡты Амангилде ана шулай эҙләп таба. Уға артабан ҡасҡынды йәшереп тотоу ҡурҡыныс була. Амангилде Фәруҡ-Бремжанды алтмыш саҡрым алыҫлыҡта йәшәгән иптәшенә алып барып ҡалдыра. Бремжан урындағы совхозға эшкә инә һәм көтөүсе булып  эш башлай.

– Тау тауға яҡынлашмай, кеше кешегә яҡынлаша, бәлки, тағы  осрашырбыҙ, – тип ҡосаҡлап хушлашып ҡалды Бремжан Амангилде менән.

– Эйе, осрашырбыҙ. Тик бында оҙаҡ туҡтама. Ҡаҙаҡ иле иркен һәм ҡунаҡсыл. Мөмкин тиклем тимер юлдан алыҫыраҡ китергә тырыш.

– Бәләнән баш аяҡ, шулай итермен. – Фәруҡ күҙенә йәш алды. – Хуш, Амангилде.

– Хуш, Бремжан, хуш. Теге мин биргән ҡағыҙҙы күҙ ҡараһы кеүек һаҡла. Ҡайҙа ғына эшләмә, китергә тура килһә, справка алырға онотма.

Бремжан доға ҡылды. Уның уҡымышлы зыялы булыуына хайран ҡалған самандан эшләнгән йорт хужаһы:

– Белемле күренәһең, ғой, – тине.

– Зәйнулла ишан асҡан мәҙрәсәлә уҡыу бәхетенә эйә булдым, ғой, – тине Фәруҡ та ҡаҙаҡсараҡ ләғәттә.

Оҙаҡламай зыялы Бремжанды ҡышлаҡ халҡы уҡытыусы булырға өгөтләй. Бер йыл уҡытыусы булып эшләп, Бремжан Ҡыҙыл Армия сафында баҫмасыларға ҡаршы һуғышҡан башҡорт егеттәре Ҡотлогилде, Низам, Сәғитулла менән осраша. Ләкин башҡорт егете булыуын белгертмәй. Башҡортса һөйләшмәй. Милләттәштәренең башҡортса һөйләшеүен кинәнеп тыңлай. Күҙ йәштәре килеп сыҡһа, ситкә борола. Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Ҡаҙағстанда ойошторолған 316-сы уҡсылар дивизияһының командиры Панфиловҡа килә, ил һаҡларға теләүе тураһында белдерә.

– Кем булып һуғышырға теләйһең? – тип ҡаршы ала тегенеһе.

– Разведчик булып, – тип яуап бирә Бремжан.

– Ә дошман танкыларын стройҙан сығарырға теләк юҡмы ни?

– Артеллирист булыпмы, әллә танкист булыпмы?

– Пехота һалдаты булып.

– Юҡ.

– Ниңә дошмандың һөжүме тәүлегенә уртаса төньяҡ-көнбайыш йүнәлештә – 26, көнбайыш йүнәлештә – 30, көньяҡ-көнбайыш йүнәлештә 20 километр тиҙлектә.  Шул турала уйлағаның бармы?

– Юҡ.

– Илдең патриоты булырға теләйһең икән, уйларға кәрәк, егет. Хәҙер илдең көнбайыш өлөшөндә урынлашҡан сәнәғәт предприятиеларын, беренсе сиратта ҡорал етештергән предприятиеларҙы, тәрән тылға күсерәбеҙ. Бына ни өсөн ҡорал, бигерәк тә танкылар эшләп сығарыу ныҡ кәмене. Шуға күрә сигенәбеҙ.

Ваҡытлыса! Ана шул күсерелгән предприятиеларға ҡорал етештереүҙе аяҡка баҫтырғанса, әлбиттә, бик ауыр буласаҡ, – тигәйне алдан уҡ сараһын күрә белгән генерал Панфилов Бремжанға.

Хәҙергә дошман танкыларына ҡаршы бергә бәйләнгән биш ҡул гранатаһы (РГД), танктарҙы яндырыр өсөн шыйыҡса тултырылған шешә һәм танкыларға ата торған (ПТР) менән ҡоралланған пехота төп көс булырға һәм танкынан ҡурҡмаҫҡа тейеш, тигән тактика ҡуллана генерал Панфилов һәм, һуғышҡа кергәс, еңеүгә өлгәшә. Сөнки был тактикаға учениелар ваҡытында күнеккән яугир позицияһын хатта дошман танкыһы окоп һәм траншея аша өҫтөнән үтеп киткән хәлдә лә ташламай. Дошман танкыларын граната уларҙы үтеп киткәс тә, ҡыйрата һәм яндыра ала. Был тактиканы Алма-Ата янында полигонда уҙғарылған учениеларҙа яҡшы үҙләштергәйне Бремжан, ә хәҙер, һуғышҡа кергәс, яңғыҙы өс дошман танкыһының башына етте, ә үҙе тере ҡалды. Тик ул икенсе бер тактиканың серенә төшөнмәй әле. Ә был икенсе тактика юғарынан төшкән приказды тормошҡа ашырыу менән бәйле.

– Бөгөн беҙҙең батальон, иптәш майор, ун бишәр – егермешәр танк алдан килгән ете дошман атакаһын кире ҡаҡты. Ә беҙҙең засадала торған дүрт Т-34, ҡурҡып-боҫоп, дүрт-биш дошман танкыһын юҡ итеп өлгөрһә өлгөрә, өлгөрмәһә юҡ. Һөҙөмтәлә пехота ҡырыла. Батальондан икәү генә тороп ҡалдыҡ. Ниңә шул дүрт танкыға беҙҙе ташлап ҡасырға ирек бирәһегеҙ? – асыуы ҡабарған Бремжан тик сәсен генә йолҡмай.

– Ташлап ҡасмай, старшина. Минең сигнал буйынса засада урынын ташлап китә. Юғарынан төшкән приказ шулай ҡуша. Сөнки әҙме-күпме ҡалған танкыларыбыҙҙы тик засадаларҙа рациональ рәүештә файҙаланыу ғына отошло. Өҫтәүенә, Ҡыҙыл Армия подразделениеларында танк корпустары юҡҡа сыҡты. Сөнки корпус төҙөрлөк танкылар ҡалманы. Эвакуацияланған заводтар бер-ике айҙан бөтә ҡеүәтенә эшләй башлаһа, танк корпустары түгел, фашистар кеүек үк, танк армиялары ла төҙөй башларбыҙ, – тип аңлатып яуап бирә батальон командиры майор Сергеев Бремжандың һорауына.

– Батальондан икәү генә ҡалдыҡ. Ни эшләйбеҙ инде, иптәш майор? – тип төпсөндө Бремжан.

– Яңы көс килерен көтөргә, старшина. Яңы көс!

– Әгәр килмәһә?

– Һуңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғанса торабыҙ. Һуңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғанса, старшина. Бәлки, беребеҙ тере ҡалыр. Әйт әле, Брагембетов, һин ҡайҙан?

Ҡасҡын Фәруҡ тура яуап биреүҙән баш тартты:

– Алыҫтан, иптәш майор. Баҫмасыларға ҡаршы һуғышҡан ваҡыттарығыҙҙы иҫкә алығыҙ әле.

– Постой, постой, – майор старшинаға бер аҙ ҡарап торҙо ла Фәруҡты ҡосаҡлап алды. – Бремжан!

– Үҙе, иптәш майор. Үҙе. – Фәруҡ та урыҫсаға күсте. – Собственной персоной. Күпме ваҡыт үткәс, ҡабат осраштыҡ. Батальондан икәүҙән-икәү генә тороп ҡалдыҡ.

– Шулай, һуғыш ҡорбанһыҙ булмай, – ысын күңелдән һөйләшеүҙе майор ялғап ебәрҙе. Башта ул блокнотын сығарып ниҙер яҙҙы ла, битен йыртып, старшинаға тотторҙо. – Әгәр ҙә минең менән берәй хәл була ҡалһа, ғаиләмде бына ошо адрес буйынса эҙләп табырһың. Яҡшы беләһең минең турала, һөйләрһең, – тип үҙенең етем үҫеүе, ҙур ауырлыҡтар кисереүе тураһында һөйләп бирҙе.

Күңеле тулған Фәруҡ та сиселде, баштан-аяҡ үҙе тураһында һөйләп бирҙе.

– Әйткәндәй, мөлкәте туҙҙырылған кулак балаһына ниңә әле Совет власынан үс алмаҫҡа? Етмәһә, нахаҡтан ултырғанһың...

– Нисек, үс...

– Немецтар яғына сыҡтың да киттең. Ә улар һинең кеүектәрҙе ҡуш ҡуллап ҡабул итә. Минең арҡаға бер пуля ла етә, эйеме?

– Арҡаға тик ҡурҡаҡтар ғына ата. Ә мин яҡты донъяға килгәндән ҡурҡаҡ булманым. Башҡортостаныма, Рәсәйгә хыянат итмәнем һәм итмәм дә.

– Ярай, старшина, артыҡ хистәргә бирелә торған ваҡыт түгел. Һинең менән минең ғүмер бер-ике дошман танкыһына торошло.

– Бәлки, өҫтәлмә көс килеүе лә ихтимал.

– Шайтан ғына өмөтһөҙ, килеүе бик мөмкин. Шулай ҙа ҡул ҡаушарып ултыра алмайбыҙ, старшина.

– Ниҙән башлайбыҙ?

– Үлгәндәрҙән ҡалған ҡоралдарҙы, беренсе сиратта гранаталарҙы, танкылар яндыра торған шыйыҡса тултырылған шешәләрҙе йыйып алайыҡ. Башта бына был станлы пулеметты ҡара. – Майор гашеткаһына үле һалдат ике ҡуллап тотоноп йән биргән пулеметҡа күрһәтте. – Патрондар һауытында тулы лента ҡалған булһа, буш лентаһын алыштыр.

– Бөтөнләй буш, иптәш майор. Ә пулеметтағы лента башланмаған. – Фәруҡ үлгән пулеметсының ҡулдарын гашеттан ысҡындырҙы ла, кәүҙәһен һуҙып һалғас, асыҡ күҙҙәрен йомдорҙо.

Старшина ҡул ҡоралдары һаҡлай торған траншея өңөшөн тупраҡтан таҙартып, уларҙы брустверға сығарып һалмаҡсы булғайны, майор урынында ҡалдырырға ҡушты. Флангтарҙы тотош ҡарап сыҡтылар. Тағы ла бер аҙ ҡорал табылды. Тағы бер станоклы «Максим» пулеметын шартлаған снаряд траншеяға алып ташлаған икән, брустверға сығарып урынлаштырҙылар. Зыян күрмәгән, ике лентаһы ла ҡалған. Пулеметтағы буш лентаны алыштырҙылар.

– Ҡара әле, иптәш майор, – тип ҡысҡырҙы аяҡтарын кирә баҫып торған Фәруҡ.

– Ура-а-а-! – тип һөрән һалған майор старшинаны ҡосаҡлап алды.

Өҫтәлмә көс булған уҡсылар подразделениеһы бөтә фронт һыҙығын иңләп килә. Оборона тотҡан позицияға алып килгән майҙанды ҙур аҙымдар менән үлсәй-үлсәй алдан полковник килә.

– Иптәш полковник, мин ошо позицияны тотҡан батальон командиры майор Сергеев, – тип рапорт бирҙе комбат.

– Ә мин өҫтәмә көс булған уҡсылар полкы командиры Лобанов булам, – тип таныштырҙы үҙе менән полковник.

Алдында әле генә мәхшәр булған урын. Әле булһа ла дошман танкылары төтәй. Полковник: «Ә был майорҙың батальоны ҡайҙа һуң?» – тигән тауыш яғына боролоп асыулы ҡараш ташланы ла, баш кейемен һалып, һәләк булған ватандаштарының алдында баш эйҙе. Уға бөтә яугирҙар ҡушылды. Күрәһең, танкыларға ҡаршы ҡоро ҡул менән тип әйтерлек ҡаршы торорға һәм мылтыҡ дарыһын еҫкәргә өлгөргән яугирҙар батальондан тик ике генә кеше тороп ҡалыуын яҡшы аңлай.

– Командиры батальонов и рот, ко мне! – тигән тауыштың яңғырауы булды, офицерҙар полк командирын уратып та алды. – Майор Сергеев.

– Тыңлайым, иптәш полковник.

– Һеҙ үҙегеҙҙең полк батальондары биләгән урындарҙы беләһегеҙме?

– Әлбиттә, беләм.

– Күрһәтегеҙ, – тине лә Лобанов офицерҙарына команда бирҙе. – За мной!

Һәр батальон һәм рота командиры үҙе ҡабул иткән позицияға взвод һәм отделениеларын урынлаштырып өлгөрөр-өлгөрмәҫтән, башта дошман артиллерияһы ут асты. Дошман танкылары яҡынлашыуға артәҙерлек туҡтатылды. Юғалтыуҙар күренгеләне. Өсөнсө батальон командиры һуғышҡа кереп өлгөрөр-өлгөрмәҫтән һәләк булды. Полковник уның урынына майор Сергеевты тәғәйенләне. Яҡынлашҡандан-яҡынлаша барған дошман танкыларын засадала торған дүрт Т-34 танкылары ут асып ҡаршы алды. Шунда уҡ алда килгән өс дошман танкыһын ут ялмап алды. Стройҙары боҙолған дошман танкыларына был өс танкынан башҡа алда ҡыйратылған ете танк  нык ҡамасауланы. Уларҙы урап үткәнсә, байтаҡ ваҡыт үтте. Урап үткән дошман танкылары башта теге дүрт Т-34 танкы торған буш засада урынына ут асты. Тик шунан һуң ғына уҡсылар позицияһына ташланды һәм тағы ла дүрт танкыһын юғалтты. Ҡалған ун өс дошман танкы пехотаны ҡаплап сигенергә мәжбүр булды.

Яңы  килеп урынлашҡан был уҡсы полк та дошман танкыларын Мәскәү йүнәлешенә үткәрмәне. Баш ҡалаға дошман һөжүме туҡтатылды. Эвакуацияланған заводтар танк, самолеттар сығарыуҙы декабрь аҙаҡтарында аяҡҡа баҫтырып өлгөргәйне. Танк корпустарын аяҡҡа баҫтырыу ғына түгел, танк армиялары төҙә башлаған Ҡыҙыл Армия контрһөжүмгә күсте һәм тәү мәртәбә Мәскәү янында ҙур еңеүгә  өлгәште. Фашистарҙың «Тайфун» операцияһы селпәрәмә килде. Ошо һуғыштарҙа ауыр яраланған полковник Лобанов тылға оҙатылды. Подполковник званиеһына лайыҡ булған Сергеев уның урынына полк командиры итеп үрләтелде. Уның адъютанты булған өлкән лейтенант Бремжан Брагембетов Бөйөк Еңеү байрамын – 9 майҙы Берлинда ҡаршыланы. Тәүгеһе – Советтар Союзы Геройы исеменә, ә икенсеһе Ҡыҙыл Йондоҙ, Бөйөк Ватан һуғышы орденына, унлап миҙалға лайыҡ булды.

Хаҡлы ялға сыҡҡанса Бремжан Ҡаҙағстанда уҡытыусы эшен дауам итә. СССР тарҡалғас, үҙенең тыуып-үҫкән Башҡортостанына ҡайтып, ғаиләһе эҙенә төшөү хыялын тормошҡа ашыра. Ә Ҡаҙағстандан ул Башҡортостанға ауылдан ауылға ир балаларҙы сөннәтләп йөрөй торғас ҡына килеп сыға. Мәһиәсмә апаһы, хәләл ефете Алмабикә яҙмышын, уның малай табыуы тураһында белә. Хәҙер уға тик улы Сафуанды эҙләп табаһы ғына ҡала. Күрмәгән улын ул Алмабикәнең тыуыпүҫкән ауылында эҙләп таба. Ошо ауылда хеҙмәттәштәре Ҡотлогилде менән Сәғитулланы ла осрата. Серен ул башта Ҡотлогилдегә, шунан килене Фәниәгә генә аса. Сөнки СССР тарҡалһа ла, ошаҡ, бола бөтмәгән.

Тентеү ваҡытында район прокуратураһы тәфтишсеһе ҡулына эләккән Бремжандың ҡуйын дәфтәренең ҡыҫҡаса йөкмәткеһе ана шулай тамамлана.

***

...Байсаров дауаханаға  эләгә, ә енәйәт эше Бремжан Брагембетовҡа ҡарата ҡуҙғатыла. Район  прокуратураһы тәфтишсеһе шаһит сифатында башта баҫыуҙа йыш булған бүлексә агрономы Ҡотлогилденән һорау ала. Ат ҡараҡтарының эҙенә баҫырға тик ул ғына ярҙам итәсәк, йәнәһе. Ҡотлогилде: «Бремжан Брагембетовты мин баҫмасыларға ҡаршы көрәштә ҡатнашҡан хеҙмәттәшем булараҡ яҡшы беләм. Уға ҡарата шик тотоу нигеҙһеҙ», – тип кенә яуап биргәс, тәфтишсе Фәниәне саҡыртты. Ә ауылға морон терәр-терәмәҫтән бынамын

тигән йорт һалып кергән, Сафуандың ҡатыны Фәниәгә ҡимммәтле тун бүләк иткән Бремжан тәфтишселә, тәбиғи, шик тыуҙыра.

– Дубленканы ҡайҙан алдың? – тип допрос башлай ул Фәниәнән.

– Тундың бында ниндәй ҡыҫылышы бар? – Фәниәне һорауҙың Бремжан исеменә бәйле бирелмәүе һағайтты.

– Һорауҙы әлегә мин бирәм. Яуап бирегеҙ.

– Ҡайным бүләк итте.

– Ә ҡайнығыҙ кем?

– Бремжан Брагембетов. – Ҡайныһының исемен әйтеүҙән Фәниә ҡурҡманы, сөнки уның хәләл байыуын яҡшы белә.

– Ҡайны кеше бүләк иткән әйберҙе кире ҡайтарып бирәләр тиме ни?

– Башта Брагембетовтың ҡайным икәнен белмәнем. Сөнки ирем дә уның ҡан атаһы булыуын белмәй ине. Ҡайным үҙе тураһында түкмәй-сәсмәй һөйләп биргәс кенә, бүләген кире алып ҡайттым.

– Яңғыҙ башына бынамын тигән йорт һалып кереүен нисек аңларға?

– Улай булһа, кулак мөһөрө тағып, ҡайнымды ла һөрөгөҙ, атаһы кеүек. Уның миңә биргән тунын да конфискациялағыҙ. – Битен ҡаплаған ҡулдарын Фәниә юғары һондо. – Йә-ә-ә, Раббым, тағы ла айыраһыңмы ни, зар-интизар булып, тик сирек быуат үткәс, бер-берен эҙләп табышҡан ата менән улды. Зинһар, Саҡ менән Суҡ итә күрмә, Хоҙайым, шуларҙы!

Прокуратура тәфтишсеһе Фәниәнән һорау алып та өлгөрмәне, Өфөнән Республика прокуратураһы вәкиле килеп төштө һәм уның һорау алыуын аҙағына тиклем тыңлап ултырҙы ла, Фәниә ҡайтып киткәс, Бремжан Брагембетовҡа ҡарата ҡуҙғатылған енәйәт эшен артабан тикшереүҙе үҙ өҫтөнә алды. Сөнки тикшереү оҙаҡҡа һуҙылды. Етмәһә, ғәйепләнеүсе Бремжан район прокуратураһы тәфтишсеһенә ышанмау белдерҙе, енәйәт эшен алып барыуҙы икенсе кешегә тапшырыуҙы талап итте. Әйберләтә булған дәлилдәр менән танышып сыҡҡас, Өфөнән килгән тәфтишсе, енәйәт мажараһы урынын ҡарап сыҡҡандан һуң:

– Бремжан Брагембетовтың ҡуйын дәфтәре ниңә енәйәт эшенә теркәлмәгән, ҡайҙа ул дәфтәр? – тип белеште район прокуратураһы тәфтишсеһенән.

Тегеһе сейфтан таушалып бөткән дәфтәр сығарҙы:

– Бына...

Өфө тәфтишсеһе ҡуйын дәфтәре менән танышып сыҡҡас, ҡуҙғатылған эште туҡтатып, Бремжанды һаҡ аҫтынан сығарҙы. Енәйәт эшен Байсаровҡа ҡарата ҡуҙғатты. Ат ҡарағы тейешле яҙаһын алды. Ғәҙеллек еңде! Бремжан-Фәруҡҡа ҡарата шик бөтөнләй нигеҙһеҙ, сөнки ул – нэпман улы. Бөтә булған аҡсаһының билдәле бер өлөшөн һуғыштан һуң, 1947 йылда, үткәрелгән аҡса реформаһы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән инфляциянан ҡусмәй торған милеккә (алтын, көмөш балдаҡ, кеҫә сәғәте, бриллиант, антиквар һәм башҡалар) әйләндереү, ә ҡалғанын төрлө район банктарына биш-алты книжкаға бүлеп һалыу юлы менән һаҡлап алып ҡалған. Кенәгәләге аҡса мең һумға тиклем кәмемәй һәм үҙ ҡиммәтен һаҡлай. Тик мең һумдан артһа ғына унан бер өлөшө ҡала иҫәптә. Ә унан туғыҙ өлөшө дәүләт файҙаһына ҡала. Хәҙер төрлө урында һаҡлыҡ кассаларында һаҡланған аҡсалары, ҡиммәтле әйберҙәрен Бремжан-Фәруҡ башланма капитал сифатында туплап, улы Сафуан менән берлектә эшҡыуарлыҡта файҙаланмаҡсы. Һуңынан күренеүенсә, ниәте тормошҡа аша. Эшҡыуар Фәруҡ Сабитовтың даны алыҫтарға тарала.

***

Донъяны яңғыратҡан сиҙәм эпопеяһы башланыуға ярты быуат ваҡыт уҙҙы. Уның илле йыллығы дәүләт кимәлендә үткәрелмәһә лә, прессаның күҙ уңынан ысҡынманы: илдә бөртөклө ашлыҡ етештереү, халыҡты аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү проблемаһы нисектер хәл ителде. Матбуғатта сығыш яһаған һәр кем сиҙәм эпопеяһына бөгөнгө бейеклектән ҡарап, үҙенсә баһа бирә. Башлыса был баһа ауырлыҡтарға, экология проблемаһына ҡайтып ҡала. Объектив һәм субъектив ҡараштар ҙа осрай. Билдәле булыуынса, КПСС Үҙәк Комитетының февраль-март (1954) Пленумы Ҡаҙағстан, Себер, Төньяҡ Кавказ, Волга буйы киңлектәрендә ун өс миллион гектар майҙанда сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү тураһында ҡарар ҡабул иткәйне. 1956 йылда ил буйынса утыҙ алты миллион гектар майҙанда сиҙәм күтәрелде. Ә сиҙәм үҙләштереүҙең Пленум ҡарарына ҡарағанда өс мәртәбә тип әйтерлек артыуы – халыҡ массаларының инициативаһы һәм активлығы, тип аңлатылғайны үҙ ваҡытында. Ярты быуат үтеүгә экология тотороҡлолоғон иҫәпкә алмау асыҡланды. Сөнки республика буйынса гектар ҡеүәтен сиҙәм эпопеяһы осоро менән сағыштырып ҡараһаң, осо-осо менән хәҙерге көндә тап килмәй. Агроном булараҡ Ҡотлогилденең фекере ана шулай.

Сиҙәм эпопеяһы осоронда сиҙәм күтәргән көньяҡ-көнсығыш райондарының даны бөртөклө ашлыҡ етештереүҙә бөтә республикаға таралғайны. Әйткәндәй, Хәйбулла районы шул осорҙа ысын мәғәнәһендә Геройҙар биргән республика төбәгенә әйләнгәйне. Төрлө йылдарҙа Хеҙмәт Геройы исеменә КПСС-тың Хәйбулла райкомы беренсе секретары F.F. Яҡупов, Ленин орденлы «Матрай» совхозы директоры Борис Петров, шул уҡ совхоздың механизаторы Абдулла Фәйзуллин, райондың күренекле малсыһы Килдебай Сөләймәновтар лайыҡ булды. Төрлө ордендарға лайыҡ булған район хеҙмәтсәндәрен исемләп яҙып бөтөү мөмкин түгел. Хеҙмәт батырҙары Баймаҡ, Әбйәлил кеүек башҡа Урал арьяғы райондарында ла аҙ булманы. Ҡасандыр 1968 йылда Марий-Эл, Сыуаш республикалары дәүләткә күпме ашлыҡ һатһа, шул хәтле бер үҙе һатҡан Хәйбулла районының даны һүнеүе үкенесле бөгөн. Сөнки был дан, ярты быуат ваҡыт үткәс, республиканың көнбайыш райондарына күсте. Тимәк, беҙ ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарғанбыҙ. Дала зонаһында тереклекте һаҡлаған ҡылған үләне массивтарын аяуһыҙ күпләп юҡҡа сығарғанбыҙ. Экологияға ҙур зыян килтергәнбеҙ. Башҡаса аңлатыу мөмкин түгел.

***

– Ни эшләмәк кәрәк, берәй проблемаға тотонһа партноменклатура ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығармай ҡуймаҫ ине, – тине Әнүәр, әсенеп.

– Ә экологияға күпме зыян килде, – Сафуан да Әнүәргә ҡушылды.

– Дөрөҫ, егеттәр, дөрөҫ. Һуңғы осорҙа партноменклатура арбаның бишенсе тәгәрмәсенә әйләнеп бара. Йәшәйешебеҙгә, көнкүрешебеҙгә халыҡ-ара хәлдең йоғонтоһон күрә белмәйбеҙ. Насар йәшәйбеҙ икән, тик ил етәкселәре генә ғәйепле кеүек. Тимәк, бер яҡлы ғына фекер йөрөтәбеҙ. Ғәйепте тик үҙ өҫтөбөҙгә генә ауҙарабыҙ. Америка, Англия кеүек Көнбайыш илдәренең Ватаныбыҙға баҫым яһауын бөтөнләй онотабыҙ, – тип дауам итте Ҡотлогилде.

...Уның фекере түбәндәгегә ҡайтып ҡала. Илде экстенсив үҫеш юлынан интенсив үҫеш юлына баҫтырыу һуғыштан һуң башланғайны – тормошҡа ашманы, сөнки был маҡсатҡа ярашлы бүленгән капиталды ҡоралланыр өсөн

тотоноуға «һалҡын һуғыш» башлап ебәргән һәм атом бомбаһына тотонған Америка мәжбүр итте беҙҙе. Интенсив үҫеш юлын сиҙәм үҙләштереү юлы менән дауам итергә лә беҙҙе әлеге баҫым мәжбүр итте. Экология хәүефһеҙлеге килтергән 1974-1975 ҡоролоҡ йылдарын да беҙгә шул уҡ Америка көсләп таҡҡан. Тарих белмәгән ике йыл бер рәттән килгән ҡоролоҡ – ана шул сиҙәм күтәреү менән саманан тыш артыҡ мауығыу һөҙөмтәһе. Әйткәндәй, Америка, Англия, Франция, Германия кеүек Көнбайыш илдәрҙең Рәсәйгә баҫымы бер бөгөн генә түгел. Егерменсе йылдарҙа аслыҡтан ҡотҡарған Америка яҡшы, йәнәһе, ә Урал алтынының аслыҡтан ҡотҡарыуы тураһында ләм-мим. Ниңә беҙ, россияндар, үҙебеҙгә һәм илебеҙ етәкселәренә ҡарата шулай мәрхәмәтһеҙбеҙ? Николай II-не «кровавый» тип етмеш-һикһән йыл сәйнәнек. Әйтерһең дә, Америка телекомпанияһы күҙәтеүе аҫтында Рәсәй парламентын утҡа тотҡан Борис Ельцин – изге етәксе? Ә хәҙер йөҙ ҙә һикһән градусҡа боролдоҡ та етмеш йыл буйы ҡул сабып алҡышлаған Ленин, Сталин һәм Брежневтарҙы бөтә килештәрҙә үҙгәртәбеҙ. Америка, Англия тирмәненә һыу ҡоябыҙ. Үҙебеҙ өлгәшкән ҡаҙаныштарҙы үҙләштерһәләр ҙә ярай, йәнәһе. Петр I, Екатерина II, Николай II, Ленин, Сталин, Брежнев, Ельцин, Путин – барыһы ла беҙҙең тарих. Тарих иһә объектив баһа биреүҙе талап итә.

Минеңсә, донъяла ҡулы ҡанға батмаған ил етәксеһе бик аҙ. Ил етәксеһе ҡулы ҡанға законға таянып бата. Күп кенә ил етәкселәренең ҡулын ҡанға батырырға ситтән мәжбүр итәләр. Николай II менән дә шулай булмағанмы ни? Финанс кризисы 1901–1903 йылдарҙа ла була. Америка, Англия, Германия, Франция монополистары был кризистан ҡотолоу юлын бер мәртәбә бүленгән донъяны ҡабат бүлеүҙә күрҙе. Феодаль ҡоролоштағы Ҡытай ҙа, шулай уҡ ярлы, артта ҡалған, ләкин ҡаҙылма байлыҡтарға бай булған Рәсәй ҙә уларҙың күҙенә майлы ҡалъя булып күренә. Германия менән Францияның провокацион ҡотҡоһона бирелгән Рәсәй XIX быуат аҙағында уларҙың баҫымы һөҙөмтәһендә Япония баш тартырға мәжбүр булған Лаодун ярымутрауын Ҡытайҙан арендаға ала ла унда Порт-Артур крепосы төҙөй башлай. Икенсе яҡтан, Америка менән Англия Японияға Рәсәй Тымыҡ океаны флотынан да көслө океан флоты төҙөүгә кредит бирә. 1904-1905 йылдарҙағы Рәсәй-Япония һуғышы ана шулай тоҡана. Көнбайыш илдәренең революцион хәрәкәт үҙәген Көнбайыш Европанан Рәсәйгә күсереү сәйәсәте тормошҡа аша. Рәсәй һуғышта еңелә. Халыҡтың көнкүреше насарая. Революцион ситуация тыуа. 1905–1907 йылдарҙа Рәсәйҙә башланған революцион процесс үҙенең кульминацион нөктәһенә 1917 йылда етә. Хәлбүки, Рәсәйҙә большевиктарҙы властка килтереүҙә, Николай II ғаиләһен аттырыуҙа Америка, Англия, Германия, Франция ғәйепле.

– Бәлки, мин алдай торғанмындыр? – тип һорай, ошо фекерҙәрен әйткәс, Ҡотлогилде элекке хеҙмәттәше Бремжан-Фәруҡтан.

– Юҡ. Дөп-дөрөҫ, сөнки Америка, Англия кеүек Көнбайыш илдәрҙең провокациялары униң менән генә сикләнмәй, – тип тегеһе ҡайһы бер фекерен Советтар Союзы маршалы Г.К. Жуковтың хәтирәләренә таянып нигеҙләй. – «Америка, Англия һәм Францияла Германияның ауыр сәнәғәтен аяҡҡа баҫтырыр өсөн ҙур күләмдә капитал һалды. Шул капиталдың етмеш проценты Америка Ҡушма Штаттары өлөшөнә төшә», – тип иҫкә ала. Күренеүенсә, Икенсе Донъя һуғышын башлауҙы ла шул уҡ Америка, Англия, Франция финанслаған. Әйткәндәй, фашистик Германия Францияны униң үҙе биргән аҡсаһы иҫәбенә ҡоралланып, баҫып ала. Ғәрлеге ни тора!

Беҙ ҙә заем һораныҡ Америка менән Англиянан, Гитлер илебеҙгә баҫып ингәнсе, илде индустриаллаштырып, ҡоралланып өлгөрөр өсөн. Бирҙеләрме? Юҡ, бирмәнеләр.

– Кем еңергә тейеш һуң, ҡорҙаш? Аҡсалымы, әллә аҡсаһыҙмы? – Һорауына Ҡотлогилде үҙе үк яуап бирҙе. – Әлбиттә, аҡсалы еңә...

– Тимәк, Гитлер еңеп сығырға тейеш булған?

– Америка, Англия, Франция ана шул Гитлерҙың еңеүен маҡсат итеп, аҡса йәлләмәгән дә инде. Ләкин киреһе килде лә сыҡты.

– Ниңә?

– Ҡасандыр аҡсаға мохтаж булған Петр I Швеция короле Карл XII ҡарата ҡулланылған алымды беҙ ҙә Гитлерға ҡаршы ҡулландыҡ.

– Ә ниңә Рәсәй күҙгә төшкән сүп булып күренә Көнбайыш илдәргә, бигерәк тә Америкаға? – тип ҡыҙыҡһынды, арзан ҡул көсө туплап, ҡулланыу тураһында ишеткәс, Фәруҡ.

– Ярлы, ә шулай ҙа ҡаҙылма байлыҡтарға бай Рәсәй. Донъя халҡының тик ике процентын ғына тәшкил иткән россияндар донъя ҡаҙылма байлыҡтарының өстән бер өлөшөнә, йәғни утыҙ өс процентына хужа. Бына нимә тынғы бирмәй Америкаға. Күрегеҙ, ярым феодаль Рәсәй әле булһа ла бүленмәгән! Һәм был ғәҙелһеҙлеккә сик ҡуйырға ваҡыт, йәнәһе. Көнбайыш илдәр ҡоралланыуҙы ярлы Рәсәйгә борон-борондан ана шулай көсләп таға ла инде. Заем һораһаҡ, беҙгә бирмәй. Ә Германия менән Японияны беҙгә ҡаршы, кредит бүлеп, үҙҙәре ҡораллandыра. Бәлки, мин алдайымдыр? Әйҙәгеҙ, улай булһа, үткәндәргә экскурсия яһайыҡ, – тип Ҡотлогилде кире ҡаға алмаҫлыҡ дәлилдәр килтерҙе артабан. Яйлап һөйләне. – Беренсе мәртәбә арзан ҡул көсө туплауҙы Нарва янында Петр I-гә уның армияһын ҡыйратҡан һәм, Рәсәй тамам теҙләнеп баш эйҙе, тигән һығымтаға килеп, Польшаға ташланған Швеция короле Карл XII көсләп таға түгелме? Нарва янында һуғыштың Карл XII армияһы файҙаһына пушкалар хәл итеүен үҙ күҙҙәре менән күргән Петр I сиркәү ҡыңғырауҙарынан пушкалар ҡойоп ҡоралланғандан һуң ғына Полтава янында дошманды ҡыйрата. Аҙаҡ Рәсәйҙең Көнбайыш илдәрҙән бойондороҡһоҙ булыуы тик көслө флот төҙөп, Европаға «тәҙрә уйыу» ғына хәл итә алыуын аңлай. Ләкин аҡса юҡ. Рәсәй ҡаҙнаһы буш. Ә ҙур сығымды тик Рәсәй крәҫтиәндәренең арзан ҡул көсөн ҡулланыу ғына хәл итә ала. Нева йылғаһы тамағындағы порт булған баш ҡала, көслө диңгеҙ флоты төҙөп, Европаға тәҙрә асыу ана шулай крәҫтиәндәр һөйәге өҫтөндә хәл ителә лә инде.

Рәсәй тарихында тәү башлап түләүһеҙ бушлай арзан ҡул көсө ҡулланыуҙы беҙгә Швеция көсләп таҡҡан булһа, икенсе мәртәбә Америка, Англия, Франция көсләп таҡты. Закон төҫө бирелгән дәһшәтле 58-се статьяға таянып атҡарыла был икенсе мәртәбә. Әйткәндәй, был статьяны Сталин енәйәтсел маҡсатта ла киң ҡуллана. Үҙенең сәйәси дошмандарынан ул уларҙы физик яҡтан юҡ итеү юлы менән ҡотола. Ә был хәҡиҡәтте беҙ әле булһа ла күрмәмешкә һалышабыҙ, Көнбайышта, фашистик Германияны еңеүҙә союзниктар булған Америка менән Англия төп көс булды, тигән ҡараш йәйелеүгә үҙебеҙ булышлыҡ итәбеҙ. Ниңә беҙ шулай үҙебеҙгә үҙебеҙ мәрхәмәтһеҙбеҙ, сәйәси репрессия ҡорбандары булған ата-бабаларыбыҙҙың илде индустриаллаштырыуҙы, донъяны фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарыр өсөн түккән фиҙакәр хеҙмәтен дәүләт кимәлендә бөгөнгө көндә лә танырға теләмәйбеҙ, һаман күрмәмешкә һалышабыҙ? Ниңә тик уларҙы реабилитациялау, хәтер китабына теркәү, ғаиләләренә бер мәртәбә пособиелар биреү менән генә сикләнәбеҙ?

– Һуғышты әҙерлекһеҙ ҡаршы алдыҡ, тигән ҡараш та таралып өлгөрҙө түгелме һуң, Ҡотлогилде?

– Шулай булды шул, Фәруҡ. Әлеге лә баяғы үҙебеҙ ғәйепле, сөнки ҡул ҡаушарып ятҡанбыҙ, йәнәһе. Шулай ҙа, ғәйеп юҡ, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ ине.

Запастағы хәрбиҙәрҙе мобилизациялау башланһа ла, хәрби көстәрҙе ил сигенә туплауҙы бер аҙ һуҙҙыҡ. Сталин артыҡ һаҡһыҙлыҡ күрһәтте.

– Беҙ күргәнде бала-сағаға күрһәтмәһен Хоҙай. Тимәк, беҙгә, һыуға батмаған, утта янмаған яугирҙарға, хәҡиҡәтте аяҡҡа баҫтырыу, йәш быуынға васыят итеп ҡалдырыу йөкмәтелә, сөнки беҙ бик әҙ ҡалғанбыҙ.

...Союздаш булған СССР, АҠШ, Англия илдәре етәкселәре Потсдам конференцияһына йыйналған. Һуғыштан һуң тыныслыҡ урынлаштырыу тураһында проект ҡарала. Тәнәфес ваҡыты. Америка президенты Гарри Трумэн: «Беҙҙең ғәйәт ҙур көскә эйә булған бомбабыҙ бар», – ти Сталинға сер итеп, йәнәһе, атом бомбаһы тип исемләмәйенсә. Бер ҡолағынан инеп, икенсе ҡолағынан сыҡҡан Сталиндың иҫе лә китмәй. Японияның капитуляция иғлан итеүенә һанаулы ғына көндәр ҡалған. Хәжәте булмаһа ла, уның Нагасаки, Хиросима ҡалаларын Америка атом бомбаһына тота. Һуғыштан һуң йоҙроҡ менән һелтәнә. Әйткәндәй, был хәл нәҡ союзниктарыбыҙ булған Америка менән Англия һуғыштан һуң халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн икенсе мәртәбә заем һораған ваҡытҡа тап килә. Һорауға яуап шул – нәүбәттәге баҫым. Һуғыш ваҡытында тик үҙҙәрен фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарыусы итеп күрһәтмәксе булған Америка менән Англия беҙгә. Ил, Юғары Советы Президиумының 1947 йылғы 4 июнь Указына таянып, хәҙер инде өсөнсө мәртәбә, түләүһеҙ арзан ҡул көсө тупларға мәжбүр була.

– Түләүһеҙ арзан ҡул көсө туплап ҡулланыу тураһында архивта ҡалған документтар юҡ та инде, Ҡотлогилде.

– Әлбиттә, юҡ, Фәруҡ. Кемдең үҙ өҫтөнә сүп өйгәне бар? Ә документтар ҡалмаһа, шаһиттар бар. Шаһиттар күп. Үҙе ГУЛАГ тотҡоно булған тарих фәндәре докторы В.Ф. Некрасов, мәҫәлән, ситтән яһалған баҫым эҙемтәһенең ҡот осҡос булыуы тураһында, яза биреү органдары ғәйәт ҙур репрессия аппараты ғына түгел, сәйәси тотҡондарҙың буштан килгән түләүһеҙ арзан ҡул көсө файҙаланған гигант сәнәғәт төҙөлөшө менән етәкселек иткән идара органы ла булды, тип яҙған. Әйткәндәй, был идара ла туранан-тура Берияға буйһонған.

– Американың элекке президенты Рональд Рейгандың «СССР – яуызлыҡ империяһы» тип бөтә донъяға яр һалыуын һәр кем белә. Ә хәҙер социалистик система юҡ. Хәҙер был Америкаға тағы нимә етмәй? – тип нәфрәт уҡый ветеран Ҡотлогилде.

– Быума йылан кеүек һаман көнсығышҡа табан шыуыша торғас, ул Ватаныбыҙ Рәсәй сигенә килеп терәлде, – тип тешен ҡыҫа уның хеҙмәттәше Фәруҡ.

– Рәсәйҙең оборона ҡеүәте хәҙер Аллаға шөкөр, – тип тынысландыра Ҡотлогилде ватандаштарын.

***

Бөтә донъяны яңғыратҡан сиҙәм эпопеяһы башланыуға ярты быуат тулыу айҡанлы Башҡортостан сиҙәмселәре, алдан һөйләшеп, республиканың сиҙәм үҙләштереү тарихы бай булған көнсығыш райондарының береһендә үткәрелгән һабантуйында осрашты. Сөнки сиҙәм эпопеяһының илле йыллыҡ юбилейы рәсми рәүештә үткәрелмәне. Күпме ваҡыт үткән, күпме һыуҙар аҡҡан. Рәсәй тарихында ҙур үҙгәрештәр булған. Ил баҙар иҡтисады юлына баҫҡан. Көрсөктән сығып, тарҡалған СССР халыҡ-ара валюта фондынан алған бурыс менән иҫәпләшеп бөткән. Быға тиклем Рәсәйҙең динамик үҫеш юлына баҫҡаны булманы. Ҡотлогилде, Әнүәр, Фазыл, Роза, Сафуан кеүек сиҙәм батырҙарына алмашҡа икенсе быуын кешеләре килде. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш

районДарының береһендә үткәрелгән һабантуйына сиҙәм эпопеяһы тамамланыуҙың илле йыллығы тулыу айҡанлы тере ҡалған сиҙәм күтәреүселәр килгән. Уларҙы палаткалар йәйелгән бер урында урынлаштырғандар. Һүҙҙе сиҙәм күтәреү осоронда ВЛКСМ-дың район комитеты беренсе секретары һәм партияның район комитеты секретары булып эшләгән, Халыҡтар дуҫлығы, Почет Билдәһе ордендары кавалеры, районДың атҡаҙанған сиҙәмсеһе Роберт Арыҫлановҡа бирҙеләр.

– Ҡәҙерле дуҫтар! Сиҙәм күтәреүҙең бөртөклө ашлыҡ етештереүҙә һәм аҙыҡ-түлек проблемаһын хәл итеүҙәге роле баһалап бөткөһөҙ. Сиҙәм эпопеяһының кульминацион нөктәһе 1956 йылға тап килә. Ил буйынса утыҙ алты миллион гектарҙа сиҙәм күтәрелде. Был һан КПСС ҡарарҙарында билдәләнгән ун өс миллион гектарға ҡарағанда өс мәртәбә тип әйтерлек артыҡ. Йәшермәйем, ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыу ҙа булды, – тип башланы ветеран һүҙен.

Уның фекеренсә, сиҙәм күтәрер өсөн бирелгән аҡсаның билдәле бер өлөшөн аграр секторҙа, алға киткән илдәр кеүек, гектар ҡеүәтен күтәреү өсөн файҙаланыу дөрөҫ булған, сөнки сиҙәм үҙләштереү менән бигерәк тә Башҡортостанда артыҡ мауығыу һөҙөмтәһендә экологияға ҙур зыян килде. Ҡоролоҡтоң йышайыуы Башҡортостандың  сиҙәм күтәргән көньяҡ-көнсығыш районДарында йыш осрай.

Артабан  оратор сиҙәм күтәреүселәрҙең һорауҙарына яуап бирҙе, үҙе сиҙәм күтәреүҙә ҡатнашҡан районда һәм, дөйөм алғанда, Башҡортостан биләмәләрендә, сиҙәм күтәреүҙең нисек тормошҡа ашырылыуы тураһында бәйән итте. Республика биләмәләрендә биш йөҙ ҡырҡ һигеҙ, шул иҫәптән үҙе эшләгән районда етмеш өс мең гектар яңы ер сәсеү әйләнешенә индерелгән.

– Үкенескә ҡаршы, был етмеш өс мең майҙандың егерме – егерме биш проценты сәсеү әйләнешенән сығарылды, – тип сиҙәм күтәреү процесында ебәрелгән ҙур хаталарға ла туҡтаны.

– Беҙҙә лә шул хәл булды, – тиеште сиҙәмселәр урындан.

Палаткаларҙа йәшәү сиҙәм күтәреүселәргә еңел булмаған, әлбиттә. Туҡланыу насар ойошторолған. Ауыл хужалығы машиналары,  бигерәк тә комбайндар, етешмәгән.

– «Һөрөргә, юғары темпта һөрөргә!» тигән команда яуып ҡына торҙо. Шул юғарынан төшкән команданы мин дә ҡабатлайым, – тип иҫкә ала Арыҫланов. – Бер ваҡыт татырлы ерҙе һөргән саҡта ДТ-54 тракторы батты. Ярҙамға килгән трактор ҙа батты. Батҡан ике тракторҙы сығарғанса ярты көн үтеп тә китте. Хәлдең айышын аңламайынса биргән «һуҡыр» команданы үтәү өсөн күҙ йомоп эшкә тотоноу йыш ҡына шулай ҙур зыян килтерә торғайны.

Ораторҙың рәсми доклад булмаған сығышы әңгәмәгә әйләнде. Урындан төрлө фекерҙәр яңғыраны:

– Америка, Англия, Канада, Германия кеүек Көнбайыш илдәре сиҙәм күтәрмәйенсә лә  мул уңыш йыйып ала, хатта, донъя баҙарына ашлыҡ сығара.

– Техника етешмәй.

– Һөҙөмтәлә беҙҙең баҫыу майҙандарын ҡый үләндәре баҫып ала.

– Хәҙер бигерәк тә ҡара һоло, аҡтамырҙан ҡотолоуы ауыр.

Төрлө фекерҙе дөйөмләштергәндә бөтә етешһеҙлектәр агротехник саралар күреү проблемаһына ҡайтып ҡала. Гектар ҡеүәте йылдан-йыл кәмей. Ауыр климат шарттарында урынлашҡан, дәүләт дотацияһына мохтаж аграр сектор үҫешенә бүленгән сығым халыҡ-ара хәлдең ҡырҡыулашыуы һөҙөмтәһендә бик

йыш ҡайтарып алына һәм ҡорал етештереүгә ҡулланыла. Ә ҡоралланыуҙы әлеге лә баяғы Америка беҙгә көсләп таға. Әйткәндәй, сиҙәм эпопеяһы осоронда булған ыңғай һәм кире күренештәргә Ҡаҙағстан сиҙәмсеһе Фазыл да бөгөнгө көн бейеклегенән ҡарап баһа бирҙе. Уның сығышын Башҡортостан сиҙәмселәре ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы.

– Беҙгә, Ҡаҙағстан киңлектәрендәге ҡола яланға килеп төшкән сиҙәмселәргә, һеҙгә ҡарағанда ла ауыр булды, ләкин төшөнкөлөккә бирелмәнек. Осо-ҡырыйы күренмәгән дала киңлеге. Тирә-яҡта горизонт һыҙығынан башҡа бер ни ҙә күренмәй. Беҙ ҙә палаткаларҙа йәшәнек. Совхоздың үҙәк һәм бүлексә ҡасабаларын үҙ ҡулдарыбыҙ менән төҙөнөк. Йәшәү шарттары яйлап юлға һалына барҙы. Бигерәк тә төҙөлөш материалдары, урып-һуғыу техникаһы, транспорт етешмәү бәкәлгә ныҡ һуҡты. Ә инде һеҙгә килгәндә иһә, Башҡортостанда сиҙәм үҙләштереүҙең кәрәге булмаған, сөнки сиҙәм үҙләштереү утыҙынсы йылдарҙа уҡ үҙләштерелеп бөткән. Ҡаулан үҫкән сиҙәм тик экология тотороҡлоғо өсөн генә ҡалған.

– Тимәк, беҙ, Башҡортостан сиҙәмселәре, бушты бушҡа бушатҡанбыҙ, – тигән реплика ишетелде.

– Бер яҡлы ғына булмайыҡ, ағай-эне. Һүҙ экологияға килтерелгән зыян тураһында бара. Ниңә Башҡортостанда сиҙәм үҙләштерер өсөн бүленгән аҡсаны агротехник саралар күреү өсөн файҙаланмаҫҡа ине? Гектар ҡеүәтен күтәреү маҡсатында файҙаланмаҫҡа, тип әйтмәксемен. Ул саҡта сиҙәм үҙләштергән майҙандың егерме проценты ер әйләнешенән сыҡмаған булыр ине. Бында бурысын намыҫ менән үтәгән сиҙәмселәрҙең бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ.

Фазылды үҙе сиҙәм эпопеяһы осоронда партноменклатура ҡорбаны булған Ҡотлогилде яҡлап сыҡты. Сөнки, үкенескә ҡаршы, беҙ халыҡ-ара хәлдең тормошобоҙға, йәшәйешебеҙгә ҙур кире йоғонто яһауын күрмәйенсә бәләне үҙ өҫтөбөҙгә алырға, бик тә булмаһа тик ил етәкселәренә ауҙарырға күнегеп киткәнбеҙ. Ватаныбыҙға борон-борондан баҫым яһаған Көнбайыш илдәр, бигерәк тә Америка Ҡушма Штаттары әүҙемлек күрһәтә. Ә был турала ләм-мим.

Ваҡыт та, йылдар ағышы ла туҡтамай. Ә ғүмер уҙа ла китә, сөнки ул бик ҡыҫҡа. Бер быуын кешеләренә алмашҡа икенсе быуын кешеләре килә.

Тәбиғәт законы шулай. Донъяны дер һелкеткән революциялар тик тарих төпкөлөндә тороп ҡалды. Тарихҡа улар бөгөнгө көн бейеклегенән күҙ һалып, оптимист булараҡ, дөрөҫ баһа бирергә тырыша. Үҙҙәренә алмашҡа килгән быуын кешеләре яҙмышының өмөтлө булыуына ныҡ ышана. Сәйәси репрессия ҡорбандарының түләүһеҙ, арзан, мәжбүри ҡул көсө булараҡ илде индустриаллаштырып, донъяны фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарыуға һалған фиҙакәр хеҙмәтен таныуҙы ла талап итә был ветерандар, сөнки уларҙы реабилитациялау, хәтер китабына теркәү, ғаиләләренә бер мәртәбә пособие биреү генә етмәй. Ҡотлогилде, Фәруҡ, Әнүәр, Сафуан, Фазыл, Роза кеүектәр – ҙур тарихи боролош булған социализмдан ҡабат кире баҙар иҡтисадына күсеү осороның шаһиттары ла. Ә бер ижтимағи-иҡтисади формациянан икенсеһенә күсеү еңел, хатта тетрәнеүһеҙ ҙә булмай. Күсеүҙән мородерҙарҙың файҙаланыуы халыҡтың көнкүрешенә лә һуҡты. Боролош Варшава договоры илдәренең, социалистик системаның, ахырҙа уның цитаделе булған СССР-ҙың тарҡалыуы менән тамамланды.



**Фәниә ЧАНЫШЕВА**

# ЙЫЛДАР АҒЫШЫ – КҮҢЕЛ ҺАҒЫШЫ

## *Ғүмер миҙгелдәре*

*Күк йөҙөндә тулы айҙы күреп,*
*Өләсәйем алды уҡынып.*
*Мунса инеп, арып ҡайтып киләм*
*Уның итәгенә тотоноп.*

*Доғаһына ҡушып бышылдай ул:*
*— Ни ҡылһаң да һинең иректә,*
*Яҡты донъя, һиндә йәшәп түгел,*
*Туйып булмай икән күреп тә.*

*... Киң донъяға хәҙер үҙем бағам,*
*Тирә-яғым тоташ сер генә:*
*Ниңә үлән йәшел, һауа зәңгәр,*
*Йондоҙҙар күп, ә ай бер генә?*

*Ниңә, беҙ атлаһаҡ, ул да бара,*
*Беҙ туҡталһаҡ, тора түбәлә?*
*Өләсәйҙең бөтә яуабы ла*
*Хоҙай ҡөҙрәтенә терәлә.*

---

*Фәниә Чанышева 1926 йылдың 1 сентябрендә Бүздәк районы Күҙәй ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. Мәктәптә, «Китап» нәшриәтендә, «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы редакцияһында эшләй. Тиҫтәләп проза, шиғырҙар китабы авторы.*

*Өлкән ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

*...Иртәләрҙең хәйерлеһен теләп,*
*Шөкөр итеп айлы кисенә,*
*Сабыр өләсәйем мин сабыйҙы*
*Алып керә донъя эсенә:*

*— Рәхим-шәфҡәтле бул кескәйҙәргә,*
*Йомшаҡ һүҙле — ҡартҡа, олоға.*
*Төшөндөрә ерҙә һәр нәмәнең*
*Ҡапма-ҡаршы ише булыуға.*

*Ерҙә йәшәүеңә рәхмәтле бул,*
*Йәм өҫтәргә тырыш иң элек,*
*Яҡшылыҡты яманлыҡтан айыр,*
*Яуызлыҡты еңһен изгелек.*

*Рәхмәт, өләсәйем, һабаҡтарың*
*Сабый йөрәгемә уйылған,*
*Рухың, төҫөң, оло мөхәббәтең*
*Оҙата бара ғүмерем буйына.*

## *Үткәндәргә баҡһаң...*

*Үткәндәргә һағыш менән бағыу*
*Сәйер булыр, бәлки, кемгәлер.*
*Тәүгеһенән һуңғыһына тиклем*
*Барлап үтәм ауылым өйҙәрен.*

*Һәр береһе тере тарих уның:*
*Шатлыҡ күргән, ҡайғы кисергән;*
*Заманына күрә түйҙар яһап,*
*Ҡыҙҙар биргән, килен төшөргән.*

*Сана-сана ҡышҡы ҡунаҡтармы,*
*Яҙғы сәсеү, һабан туйымы, —*
*Сабый мәлдәремдә күргәнемсә*
*Күңелемә ҡалған уйылып.*

*...Шатлыҡ ҡына түгел, баштан үтте*
*Юғалтыуҙар, хәүеф, бәләләр.*
*Йылдар үтте. Ҡайғы-һағыштар ҙа*
*Беҙҙең менән үҫте бәрәбәр.*

*Бер-бер артлы йорттар етем ҡалды,*
*Әрнеүҙәрҙән көйҙө ирендәр.*
*Бар таяныс — изге теләк, өмөт:*
*Имен ҡалһын илем, ил генәм!*

*Ошо йылдар беҙҙе сыныҡтырҙы,*
*Сабый килеш итте бай хисле.*
*Үткәндәргә баҡһаң — бөгөнөмдә*
*Аҙым һайын бәхет бар төҫлө!*

* * *

*Диңгеҙ буйындағы тар һуҡмаҡҡа*
*Көлтә-көлтә нурҙар түгелә,*
*Бар хәүефен онотоп, тауҙан түбән*
*Миңә ҡаршы улым йүгерә.*

*Борғолана һуҡмаҡ. Туҡта, сабыр!*
*Өлгөрмәйем — улым йығыла.*
*Мөлдөрәмә йәше — бите буйлап*
*Ал юл булып ҡаны һыҙыла.*

*Күкрәгемә ҡыҫып йыуатҡанда*
*(Был түгелдер ябай ҡыҙғаныу!)*
*Балам әрнеүҙәре миңә күсте,*
*Йөрәгемә төштө һыҙланыу.*

*...Егет ҡорон үтеп, инде хәҙер*
*Ил ағаһы булып бараһың.*
*Тик һаман да миңә — әсәйеңә*
*Тау һуҡмағындағы бала һин!*

## Онотмайбыҙ һеҙҙе...

*Үткәндәрҙең шат минуттарын да,*
*Фажиғәләрен дә барлайым.*
*Был юлдарҙы, замандаштар, һеҙгә —*
*Һабаҡташтарыма арнайым.*

*Әлегәсә йәшәй күңелдәрҙә*
*Үҙәк өҙгөс заман йырҙары.*
*Ҡара көндәрҙә лә, өмөт өҙмәй,*
*Һөйә белгән йәшлек йылдары.*

*Ярһыу, елкенеүле студент саҡ,*
*Буламы ни һине онотоп?*
*Һалҡындарҙа тыуған ҡайнар дуҫлыҡ*
*Һаман йәшәй беҙҙе йылытып.*

*Йәшлек бит ул — ғүмер таңы ғына,*
*Йәшен булып йәшнәр, күкрәр саҡ.*
*Оло фажиғәләр аша уҙҙы*
*Һис вайымһыҙ уйнар, көлөр саҡ.*

*Күңел ҡошо һаман урап ҡайта*
*Ҡанлы-йәшле хәтәр көндәргә.*
*Беҙ бит яраланған һалдаттарҙың*
*Яҙмыштарын һалдыҡ иңдәргә.*

*Тоғро юлдаш булдыҡ мөхәббәттә,*
*Яҙмыш юлы буйлап атланыҡ.*
*Уртаҡ ине яныу, ашҡыныуҙар...*
*Шөкөр, ышаныстарын да аҡланыҡ.*

*Һағынһаҡ та, улар юҡтар инде,*
*Иртә ҡайырылды ҡанаттар.*
*Онотмайбыҙ, һағынабыҙ һеҙҙе, —*
*Еңеү яулап ҡайтҡан һалдаттар!*

* * *

*Теләй инең: атлаһаҡсы бергә*
*Ғүмер юлдарында еткәнсе,*
*Һуңғы сәфәремә генә бер аҙ*
*Һинән алданыраҡ китһәмсе...*

*Фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күстең*
*Йәйҙең иң сәскәле миҙгелендә,*
*Эштә янып үтте ғүмерең дә,*
*Теләгәнең килде үлемдең дә.*

*Минең хәлдәр бына башҡасараҡ,*
*Эҙләһәм дә, юҡтыр башҡа сара:*
*Көндәремә төндәр ялғана ла*
*Яҙмыш яҙған эҙе менән бара.*

*Яҙмыш яҙған эҙе менән бара...*
*Дәүә итеп булмай артығына.*

*Ҡайғыларым икеләтә ауыр,*
*Шатлыҡтарым ярым-ярты ғына.*

*«Бына ҡайтыр!» тип һис көтәһем юҡ,*
*Сер йомғағын бергә һүтәһем юҡ.*
*Был «юҡ»тарҙың һаны, нормаһы юҡ,*
*Йәндең әрнеүҙәрҙән туҡтайһы юҡ.*

*Һыңар ҡанат ғүмер итәһем бар,*
*Һуңғы һулышыма етәһем бар,*
*Һин ҡалдырған ҡайғы-һағыштарҙы*
*Үҙем менән алып китәһем бар.*
*Китәһем бар...*

* * *

*Гел иҫемдә минең алыҫтағы*
*Икәү атлап киткән юл башы,*
*Тулҡынланған иген баҫыуҙары,*
*Янып торған июль ҡояшы.*

*Шундай уҡ йәй, шундай уҡ көн бөгөн,*
*Үҙгәргәнбеҙ инде беҙ генә...*
*Маңлайға һыр, күҙҙәргә моң һалған*
*Елдәй елеп үткән миҙгелдәр.*

*Һыуҙар кистек бергә. Текәләрен,*
*Һөҙәктәрен мендек ярҙарҙың.*
*Дәррәү килгәндәре, һүлпәндәре,*
*Ярһыуҙары булды яҙҙарҙың.*

*Йомарт йәйҙәр, көҙҙәребеҙ булды —*
*Алтын тауҙарына тиңләрлек.*
*Тәҙрәләргә һүрәт яһап уҙған*
*Ҡыштарыбыҙ һағынып һөйләрлек.*

*Йәйҙең һуңын — көҙҙөң башын һөйәм,*
*Мөхәббәткә сиктәр юҡ таһа,*
*Саған — ялҡын, ҡайын алтын төҫлө*
*Булмаҫ ине, ҡырау һуҡмаһа.*

*Атлайыҡсы көҙгө һуҡмаҡтарҙан,*
*Серҙәрем бар әле, моңом бар.*

*Яландарҙы иңләп ужым шыткан,*
*Тағы ҡурпылаған болондар.*

*Ниңә күҙәтергә япраҡтарҙың*
*Бөтөрөлөп ергә төшкәнен?*
*Урмандарҙа бөрлөгәндәр бөтһә,*
*Миләш менән балан бешкәндер.*

*Был ғүмерҙең һәр миҙгеле ҡиммәт:*
*Ҡар төшәме, ямғыр яуамы...*
*Беҙҙән һуң да ергә яҙҙар килер,*
*Ғүмерҙәрҙең ҡала дауамы.*

* * *

*Йәшәү — байрам,*
*шатлыҡтарҙан*
*Өмөттө өҙмәйем.*
*Урамдарҙа таныш йөҙҙәр,*
*Дуҫтарҙы эҙләйем.*

*Юҡһыныуҙан ҡара болот*
*Ҡаплай күңел күҙен.*
*Һабаҡташтар, замандаштар,*
*Һеҙ ҡайҙарҙа бөгөн?*

*Исемдәрегеҙ иҫемдә*
*Өндә, хатта, төштә...*
*Иртә киткәндәрегеҙҙе*
*Онота алмайым һис тә.*

*Һаман әле һеҙҙең менән*
*Уҙам йәшлек илен.*
*Шул саҡ тоям иңдәремдә*
*Йылдарымдың йөгөн.*

*Йәшәү — байрам.*
*Шатлыҡтарҙан*
*Өмөт өҙмәйем мин...*



**Зөһрә**
**ҠОТЛОГИЛДИНА**

## *Башҡорт йыры*

*Ташҡа соҡоп тарих яҙған*
*Халҡым үҙ ҡаны менән.*
*Ҡурайын да ҡалдырмаған*
*Яуға уҡ, яны менән.*

*Был йырҙарҙа әрмеләге*
*Һалдат һағыштары бар.*
*Тотҡондарҙың быҡау сыңы,*
*Халыҡ ҡарғыштары бар.*

*Ҡайҙа ғына йөрөһә лә,*
*Башҡорт йырһыҙ булмаған.*
*Һағышлы, дәртле моңдары*
*Донъяларҙы ураған.*

*Байрамдарҙа сәхнәләрҙә*
*Башҡорт йыры яңғырай.*
*Халыҡ аманаты булып*
*Йәшәр ул мәңге шулай.*

---

*Зөһрә Ҡотлогилдина (1951) Көйөргәҙе районының Ялсыкай ауылында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлағандан бирле «Йәншишмә» (элекке «Башҡортостан пионеры») гәзите редакцияһында эшләй. Яҙыусылар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

*Йырҙарға бай, моңдарға бай,*
*Ҡурайлы ил — башҡорт ере.*
*Уйландыра, һыҙландыра,*
*Һоҡландыра башҡорт йыры.*

## Донъялар буталғанда

*Иманлылар артҡан һайын*
*Әҙәйә бара иман.*
*Алла  һүҙен ҡалҡан итеп*
*Иманға  килә яман.*

*Донъялар тағы буталды,*
*Иманһыҙ битлек кейҙе.*
*Көндөҙ хәйер алған хәҙрәт*
*Кисен хәмер һемерҙе.*

*Ил алдында вәғәз һөйләп,*
*Аҡыл бирә йәштәргә.*
*Ә өйөндә яҡындары*
*Күмелә күҙ йәштәргә.*

*Кемегеҙгә ышанырға,*
*Эй, Алланың  ҡолдары?*
*Изгелектәр юраймы һүң*
*Доға ҡылған ҡулдары?*

*Шуға аралашсыларһыҙ*
*Өндәшәм мин Хоҙайға.*
*Кисер, һүҙем хаҡ булмаһа, —*
*Түҙмәй әйттем шулай ҙа.*

## Рәхмәт һеҙгә, үткәндәр

*Рәхмәт, бер ҙә ваҡланманың,*
*Ваҡламаның мине лә.*
*Икебеҙгә тигән йөктө*
*Һалып алдың иңеңә.*

*Яман һүҙҙән, түбәнлектән*
*Араланың, һаҡланың,*
*Барҙы — юҡ, юҡты бар тигән*
*Әҙәмдәрҙән яҡланың.*

*Ә барыбер табылдылар*
*Инеүселәр араға.*

*Хөкөм сығарыу хоҡуғын*
*Кемдәр биргән уларға?*

*Беҙгә хөкөмдар кәрәкмәй,*
*Кәрәкмәй яҙаһы ла.*
*Ғүмеребеҙ етеп килә*
*Һуңына, аҙағына.*

*Рәхмәт һеҙгә, үткәндәрем,*
*Рәхмәт булғандарына.*
*Һатмай һәм һатылмай йәшәп,*
*Ғәмәл ҡылғандарыма.*

*Ләззәт менән, байлыҡ менән*
*Үтмәһә лә ғүмерҙәр,*
*Ваҡлыҡтарҙан, харамдарҙан*
*Азат булды күңелдәр.*

*Ҡараштарҙың ireклеге*
*Һаҡланы үҙебеҙҙе.*
*Шуға йән тыныслығында*
*Ҡаршы алабыҙ көҙҙө.*

### *Дуҫ хыянаты*

*Ҡасан ғына дуҫтар инек,*
*Бөгөн әйләндек ятҡа.*
*Донъяға ҡараш айырҙы*
*Араны ике яҡҡа.*

*Мин илағанда — һин көлдөң,*
*Йығылғас — ҡул һуҙманың,*
*Ауыр саҡта — янда юҡһың,*
*Кәрәккәндә — һуңланың.*

*Ә һин болотло көндә лә*
*Тик ҡояш талап иттең.*
*Күккә турғай осорҙоң да*
*Торна төшкәнен көттөң.*

*Яҡты донъяларҙа инде*
*Йәшәһәм дә күп ғүмер,*
*Яҡын дуҫ хыянатынан*
*Күңелем — ҡара күмер.*

*Һүнгән усаҡты яңынан*
*Булыр ҙа ул яндырып,*
*Дуҫлыҡ ҡына кире ҡайтмаҫ,*
*Йәндә бушлыҡ ҡалдырып.*

## Ярым-ярты йәшәгәндә

*Түшәк уртаҡ булмағанда,*
*Күҫәк күтәреләләр.*
*Уйҙар уртаҡлығы юҡта,*
*Тормош түңкәреләләр.*

*Ҡосаҡ ҡайнар булмағанда,*
*Усаҡ та һүреләләр.*
*Һин булмаған бүтән ерҙә*
*Яҡшыраҡ күренәләр.*

*Табын түңәрәк булмаһа,*
*Ҡабымдарҙың таты юҡ.*
*Ярым-ярты йәшәгәндә*
*Донъяларҙың ҡото юҡ.*

## Яҙылмаған шиғырҙар

*Тыумаған бала шикелле —*
*Яҙылмаған шиғырҙар.*
*Ҡалды... ҡалды... ҡалды инде*
*Йөрәккә һауып ҡандар.*

*Атмаған бөрөгә оҡшап,*
*Ҡырауҙан ҡурылдылар.*
*Тик аҙаҡ, беҙ — һинеке, тип*
*Йәнемә һырындылар.*

*Аҡмаған йылғалар бармы?*
*Атмаған таң буламы?*
*Һайрамаҫ ҡош, килмәгән көҙ,*
*Ҡайтмаған шаң буламы?*

*Һеҙ ҙә бер саҡ ҡайтырһығыҙ,*
*Яҙылмаған шиғырҙар.*
*Улар, мәле етеү менән,*
*Өр-яңынан тыуырҙар.*

## Йылдар аша осрашыу

*Һин — олатай, мин — өләсәй*
*Йәшендә осраштыҡ.*
*Күҙҙәрҙә — шул уҡ ялҡындар,*
*Әллә нисә хушлаштыҡ.*

*Телдәр юҡ-барҙы һораша,*
*Күҙҙә — мөлдөрәмә хис.*
*Аралар айырған йылдар,*
*Әйтерһең, булмаған һис.*

*Ошо ғына мәл эсендә*
*Ҡойон, дауыл кисерҙек.*
*Йәшлек таңдарына ҡайтып,*
*Үткәндәрҙән иҫерҙек.*

*...Ә бер аҙҙан һаубуллаштыҡ.*
*Беҙ — һөйөүгә йыназа.*
*Тик хистәр һыҙлар йөрәктә*
*Ғүмер аҙағынаса.*

## ***Тыуған көн***

*Бала саҡтың көнө оҙон,*
*Ваҡыттар бик яй үтә.*
*Тиҙерәк үҫәһе килеп,*
*Тыуған көндәрҙе көтә.*

*Эй тыуған көн, тыуған көн,*
*Ҡыуанысҡа тулған көн.*
*Шатлыҡ уртаҡлашырға тип,*
*Дуҫтар йыйылышҡан көн.*

*Йәшлегеңдә йыл, айҙарың*
*Көн, сәғәттәй үтәләр.*
*Елеп уҙған ғүмерҙәрең*
*Хыялдарға илтәләр.*

*Эй тыуған көн, тыуған көн,*
*Тағы бер йәш тулған көн.*
*Алдарыңа аҡ юл йәйеп,*
*Усҡа бәхет һонған көн.*

*Олоғайғас олпат йәшең*
*Дан-хөрмәткә тулған көн.*
*Үткән ғүмер хәтирәһе*
*Һағыштарға һалған көн.*

*Эй тыуған көн, тыуған көн,*
*Йыл да көтөп алған көн.*
*Киләсәктән ниҙер көтөп,*
*Өмөт менән тулған көн.*

---



Гөлназ
ҠОТОЕВА

# ЙӘШӘҮ ҠӘҘЕРЕ

## Быйыл

*Урмандарға яйлап шәре үтә,*
*Ҡуйыра бара шырлыҡ төҫтәре.*
*Арбалыуҙан күктәр балҡышына*
*Көтмәйһең дә нимә өҫтәрен,*
*Ҡамиллыҡҡа китә иҫтәрем.*

*Был яҙ тағы, тағы ауылыма*
*Нисек яҙ килгәнен иҫләрмен.*
*Үткәндәрҙе хәтер яңыртыуҙан*
*Осҡон сәсрәтер бер иҫәрмен.*

*Мин иҫләрмен ҡарҙың шығырлауын,*
*Йәшен түгеп ҡыштың салғыйына.*
*Елдәр йөрөр наҙлы ипкен ташлап*
*Яҙ бәпләгән талдар сабыйына.*

*Күңел көҫәр сыйырсыҡтар йырын,*
*Иртәләрҙә илап уяныуҙы.*
*Тау-тау ятҡан ҡар тауҙары иреп,*
*Күҙ алдынан тиҙерәк юғалыуҙы.*

*Йыр, йыр көҫәр был яҙҙарҙа күңел,*
*Нурҙан ғына иҙрәр был солғаныш.*

---

*Гөлназ Ҡотоева (1974) Әбйәлил районы Ишҡол ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Филология фәндәре кандидаты. Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты. "Ағиҙел" журналының яуаплы сәркәтибе.*

*Яҙ — ул йәндә йырҙың уяныуы,*
*Йырлы йәндә генә бар йыуаныс.*

*Урмандарға яйлап шәре ұтә,*
*Ҡуйыра бара шырлыҡ төҫтәре.*
*Сыйырсыҡтар оя ҡорған мәлдә*
*Мин яҙҙарҙан наҙҙар көҫәрмен.*

*Яңыртамын йәндә яҙ балҡышын,*
*Бөгөнгө көн нурын өҫтәрмен дә:*
*Ос, ос, әйҙә, тиеп талпындыра,—*
*Күгем минең йәйғор төҫтәрендә.*

## ***Төңөлөү***

*Үткәнемдән төңөлгәнмен.*
*Юҡ үкенес. Юҡ һағыш;*
*Таң нурында тәңкә элдем,*
*Сылтырап ҡуйҙы яңылыш.*

*Сылтыр-сылтыр шул тауышҡа*
*Кем боролоп ҡараны?*
*Тормоштоң бит һыҙаттары*
*Үҙе аҡлы-ҡаралы.*

*Үткәнемдән төңөлһәм дә,*
*Үкенеү, үпкә лә юҡ.*
*Үткәнем мине үҫтергән,*
*Үҫендергән шулай уҡ.*

*Үткәнемдән төңөлмәйем,*
*Тик онотам ҡараһын.*
*Сыңлатып элдем тәңкәне,*
*Берәү өҙөлөп ҡараһын.*

*Был — бөгөнгөм,*
*Минең менән*
*Минән төңөлмәгәндәр,*
*Мине ҡараламағандар,*
*Юлы өҙөлмәгәндәр.*
*Һәр хәлдә лә онотолған,*
*Онотолған яманы;*
*Үкенмәйем үткәнемә,*
*Мине шул килеш таны.*

## *Сатнау*

*Сатнама һыуыкта*
*Сатнай боҙ,*
*Туңа ла шыҡрайып,*
*Шылт итә.*
*Боҙ түгел күңелем туңырға,*
*Тик уны йылы һүҙ иретә.*

*Төшөрһәң, ярыла сынаяҡ,*
*Сатнай ул һаҡһыҙҙан селт итеп,*
*Бер күҙ һирп уйыңдан һин балҡып,*
*Күңелем нурҙарын иретеп.*

## *Иманлы йорт*

*Өйөң түрендә иң затлы*
*Балҡып тора Ҡөрьән;*
*Мин был өйгә шатлыҡ менән,*
*Эстән балҡып инәм.*

*Затлы йыһаз да юҡ бында,*
*Юҡ көмөш ҡалаҡ.*
*Сәләм биреп түргә үтһәм,*
*Мин хайран ҡаламын.*

*Ҡолас йәйә миңә киңлек,*
*Асһам ишегеңде.*
*Күңел наҙлар һиллектәрҙән*
*Аҙан ишетелде.*

*Доға ҡылабыҙ ултырып.*
*Шөкөр, иҫән-һаубыҙ;*
*Иманлыға беҙ кәрәкбеҙ,*
*Иманһыҙға даубыҙ.*

*Тәүфиҡлы булһын балалар,*
*Иман бирһен Хоҙай.*
*Илдә именлек булһын да*
*Уңып торһон бойҙай.*

*Өҫтәлеңдәге ниғмәттән*
*Йәшәүгә көс арта;*
*Бәрәкәтле ризығың да*
*Ихласлығың тарта, –*

*Ашҡынып киләм был өйгә,*
*Тулам бәхет менән;*
*Нурҙар һибеп балҡый тирҙә*
*Терәк булып Ҡөрьән.*

## Минең айым

*Алданып, арбалып баҡҡайным,*
*Нурыңдан ҡамашты күҙҙәрем.*
*Ҡул һуҙҙым: «Ал мине үҙеңә»,*
*Йәнеңә еттеме һүҙҙәрем?*

*Беҙ бөтөн булырға тыуғанбыҙ,*
*Тартылыу ғилләһе шунандыр;*
*Юҡ, алдаҡ түгел был, ысын, тип,*
*Эй, йәнем,*
*Һин мине инандыр.*

*Инандыр һин мине бәхеткә,*
*Хаҡтыр был сикһеҙ ынтылыш.*
*Балабыҙ бәүелһен бишектә,*
*Ҡып-ҡыҫҡа тойолһон оҙон ҡыш.*

*Мин һине эшеңдән көтәйем,*
*Бер байрам көткәндәй көн һайын.*
*Бер бөтөн булырға ынтылыш,—*
*Күңелдә туп-тулы бер айһың.*

## Ҡисер, атай!

*Һаҡланғанмы атайымда*
*Ҡан хәтере?*
*Танкыларға ҡаршы барған*
*Аттар тере*
*Булып күҙ алдына баҫалар ҙа*
*Илай атам.*
*Үпкәләргә ни хаҡым бар?*
*Минең хатам —*
*Атайҙар иламай, тиеп*
*Бүлтәйгәндә,*
*Танкыларға ҡылыс менән*
*Һелтәнгәндәй.*
*Эй, атаҡай,*
*Иртә киткәс әсәкәйем,*
*Үпкәмде мин эстем ҡуша*
*Йәшем менән.*
*Беҙҙең өсөн ҡәҙерлене һаҡлай алмай,*

Үҙең дә һин юҡ булдыңмы
Йәшен менән?
Илағанда атаҡайым
Һулҡып-һулҡып,
Йөрәккәйем өшөнө лә ҡалды
Ҡурҡып.
Уны ла шулай юғалтһам
Ер йөҙөнән?
Мин үҙемдең тамырымдан
Шырт өҙөләм.
Һулҡылдап та илағанда
Атаҡайым,
Йәштәремде эскә йотоп,
Йыуатмайым.
Яҙмыштарға төшкән өлөш
Тигеҙ тартмай.
Шул килеш һин ҡәҙерлеһең,
Ҡисер, атай!
...Балаларың, күрәм, тиеп
Осоп ҡайтмай.
Ата йорто тиһең мәллә
Беҙҙе тартмай?
...Яҙмыш шулай,
Үпкәләмә,
Ҡисер, атай!

## Бәхеткә еләм

„Йөрөгәндән арыҫландың
Тәпәйҙәре ҡанамай“.
Көтөп ятырға килгәнде
Ярамай шул, ярамай.

Маҡсатыңа ярты юлда
Туҡтап ҡалыу — ярамай.
Тик алға ғына барырға
Бер нәмәгә ҡарамай!

Маҡсаттарға етеп булмай
Ауыҙ-морон ҡанамай;
Алға, алға ғына барсы,
Айҙар, көндәр һанамай.

Мин бит сүлдән китеп барам,
Бер инеш тә табалмай;
Ҡомдар осор был сүллектән,
Әгәр китһәм ҡабалмай, —

*Миңә өлгөргән емеште,*
*Мин уртлар һыуҙы,*
*Беләм;*
*Шуға,*
*Үрҙәрҙе артылып.*
*Бәхеткә табан еләм.*

## *Йәшәү көҙере*

*Ҡараңғыла баҙлай бер ут,*
*Кем яҡҡандыр усағын?*
*Баҙлап янған утты алып*
*Уста баҫырыр сағым.*

*Ҡуя торғас бер-бер артлы*
*Алға ҡараһын, ағын;*
*Ҡурҡыныс юҡ, тип дарғяға*
*Инеп барыуым тағын.*

*Сәсәтмәҫ кеүек тулҡындар,*
*Буйһондоралмаҫ ағым;*
*Инде һүнгән күмерҙәргә*
*Минең йән өрөр сағым.*

*Тормош һаман ҡуйған һайын*
*Алға ҡараһын, ағын —*
*Йәшәүҙәре ҡәҙерлерәк*
*Була икән ул тағын.*

## *Көнсөллөк*

*Болдор аҫтарына инеп*
*Шыңшый көсөк.*
*Ҡара бөркәнсек ябынып*
*Йөрөй хөсөт.*
*Туҡылдата ишектәрҙе*
*Шаҡ-шоҡ килеп.*
*Һаҡ әҙәмдәр ҡаршы тора*
*Келә элеп;*
*Шыңшып ятһаң көсөк кеүек,*
*Ялап яраң,*
*Эй шатлана,*
*Хөсөткә лә*
*Ярап ҡалаң;*
*Күҙен соҡоп бирергә лә*
*Риза булыр.*
*Һинең уңыш — тик хөсөткә*
*Ыҙа булыр.*

*Ҡара бөркәнсек ябынып*
*Йөрөй хөсөт —*
*Бер бөртөктән ҡабына ла*
*Китә ҡсеп.*
*Юлынан кит, ҡас күҙенән —*
*Яндыра ул.*
*Ҡандар эсеп үҙ танһығын*
*Ҡандыра ул.*
*Ғәйептәрен ғәйепһеҙгә*
*Ҡалдыра ул:*
*„Аҡ күнләшең“*
*Тигән һүҙҙән һалдыра ул;*
*Килә элеп ҡаршы торсо,*
*Йөрөй хөсөт, —*
*Төрлө сурәттәргә инеп,*
*Үрсеп-үрсеп...*

## Сағылыш

*Сағыламын мин йылғала,*
*Башҡа яҫылыҡҡа инеп.*
*Тулҡындарҙа йөҙә йөҙөм,*
*Сайпылдырам һыуҙы үҙем.*
*Һыуҙа йәйғор хасил итеп,*
*Үҙ һыныма һирпәм һыуҙы.*
*Үҙемдән аша ҡарайым,*
*Йылға төбө тулы ынйы.*
*Селбәрәләр донъяһына*
*Ҡарап тороп уйыламын.*
*Мин үҙемде онотам да*
*Хәс бер туйға юлығамын.*
*Никах туйы микән ни был,*
*Ғүмер туйҙарымы шулай?*
*Йөҙөүенән ләззәт табып,*
*Балыҡ өйөрөндә уйнай.*
*Кем ырғытҡан тәңкә ята,*
*Һыу түҙҙырған бер тут булып?*
*Һыуҙар аша күренәме*
*Ике сикәм дә ут булып?*
*Аяғымды тығып һыуға,*
*Ҡалам тынып балыҡсылай.*
*Һыуҙарҙа мин сағылам да,*
*Йөҙә ситтә ҡыйырсыҡ Ай.*

## ТОРМОШТАН ИЛҺАМЛАНЫП

*(Ҡәҙим Аралбайға 70 йәш )*

Ижади шәхестең тормош юлына күҙ һалһаң, иң тәүҙә уның тыуған яғы, кендек киҫкән ере, аҡ донъяға бағып хайран ҡалған ерҙәре, һыулаған шишмәләре, әллә күпме башҡа картиналар хасил була. Шағир ижадында – икеләтә. Һүҙ мәрйендәре менән тыуған ерҙең һулышын, һәр үҙгәрешен тойоп, ожмахтарға тиң күренештәренә дан ғына йырлап ҡалмай, ә мәңгелек һәйкәл ҡоя.

*“Ул әкиәт донъяһымы?*
*Шағир хыялбай була…” –*
*Тиһәләр ҙә, беҙгә ожмах –*
*Йән төйәгем Хәйбулла!...*

(“Хәйбулла”)

Был ябай ғорурланыу ҙа, һүҙ уйнатыу ҙа түгел. Сөнки Ҡ. Аралбай ижадында тыуған ер мотивы төп урындарҙың береһен алып тора.

*Ҡанымдан да, йәнем-тәнемдән дә*
*Заман юшҡындарын йыуған яҡ,*
*Мин бит һине ҡалдырғаным да юҡ –*
*Йөрәгемдә йөрөй тыуған яҡ!*

(“Тыуған яғыма”)

Шағирҙың кендектәрен киҫкән тыуған ере менән яҙмышында уртаҡ яҡтар байтаҡ. Ул ни кисерһә лә, ни күрһә лә унан таяныс таба, йәшәүгә рух ала, үҙ иңдәре менән ныҡлы терәк булырға әҙер. Шағир яҙмышына зарланмай. Уның һүҙ сәйләндәрендә һыктаныу ҙа, үкенеү ҙә тапмаҫһың. Хатта ул замандаштары һәм үҙе тыуған йыл хаҡында ла:

*Ҡайнайбыҙ ут-ялҡын эсендә,*
*Ятмайбыҙ йөрәкте һыуытып,*
*Ышан, ил,*
*Таян, дуҫ,*
*Һынатмаҫ*
*41-ҙә тыуғандар быуыны!*

– тип өндәшә.

Эйе, беҙҙең тарихыбыҙҙа 1941 йыл иң ғәрәсәтле, фажиғәле дата булып теркәлгән. Тап ошо осорҙа тыуғандар, шағир кеүек үк, бер тапҡыр ҙа атай һынын күрмәй, бер тапҡыр ҙа “атай” тип өндәшмәй, тормоштоң бар ауырлыҡтарын үҙ иңендә татыған. Ләкин ул быуын билдәрен биртендермәй, үҙ иңдәренә атайҙар йөкмәр йөктө алып, тормош юлына аяҡ баҫа. Һыҡраныу ҙа, йәлләтеү ҙә, бөлә һалыу ҙа, зар ҙа ишетмәҫһең уларҙан. Ә бары тик:

*Ғүмереңде, атай, дауам итәм,*
*Бер һыҡтаныу минән ысҡынмаҫ! –*
*Ут эсенә мин инергә әҙер,*
*Ут эсенән тик бер ҡысҡырһаң!..*

(“Атай йәшен йәшәгәндә”)

Шуға ла Ҡ. Аралбай шиғриәтендә атай, әсәй образдары үтә ҙур һәм тәрән мәғәнәгә эйә. Ил тыныслығын яҡлап яуға сапҡан Әбделғәлимде 5 балаһы һәм йөклө ҡатыны оҙатып ҡала. Хушлашҡандан һуң ике ай үткәс тыуған сабыйға “Ҡәҙим” тигән исемде атаһы хатҡа яҙып һала. Үкенескә күрә, ҡәҙерле, аманатлы был хат һуңғыһы була. Итәк тулы бала менән тол ҡалған Фәхриямал яҙмышы, ай-һай, еңелдән булмағандыр. Бер нисә көнлөк сабыйҙы сәңгелдәккә һалып, башҡалар менән типә-тиң ураҡ урыу, ирҙәр рәтенә баҫып донъя көтөү – яҙмыштың һынауымы, әллә?..

*Ер тәъәмен ейһен, тиеп әсәм*
*Сәйнәп бойҙай һуты ҡаптырған.*
*Үҙ ризығым –*
*Көлтә бойҙай менән*
*Яҙған миңә өйгә ҡайтырға.*

Ләкин шуныһы билдәле: ил инәләре, билдәре биртенмәй тормош йөгөн үҙ иңдәренә алып, еңеү яҙын көнләп, сәғәтләп яҡынайтҡандар. Ә кескенә Ҡәҙимдең булмышына дала моңо, арыш икмәге тәме, тормоштоң аяуһыҙ көрәш икәнлеге һеңгән дә инде. Һәм ошо илһам сығанағы булып бөрөләнеп, заман һулышынан түл йыйып, һүҙ мәрйендәре булып теҙелгән. Ябай ҙа, ғәҙәти ҙә күренештәр, мөнәсәбәттәр Ҡ. Аралбай шиғриәтендә урын ала ла, күңел көмбәҙҙәрен асып, оло бер донъяны хасил итә. Тап ошо баласаҡ моңонан туҡылған әсә хаҡында ғына тиҫтәнән артыҡ шиғыры бар. Уларҙың һәр береһе – үҙе бер күренеш, үҙе бер донъя.

*Әсәйҙәр шул һаман нигеҙ һаҡлай,*
*Туҙҙырмаҫҡа тыуған ояны.*
*Ә беҙгә һуң – шул оянан башҡа*
*Матурлығы бармы донъяның?!*

(“Тыуған оя”)

“Әсәйҙең сәй япраҡтары”, “Юшан”, “Муйыл көйәнтә”, “Әсәйем шишмәләре”, “Кисер, әсәй”, “Ҡулъяулыҡтағы яҙыуҙар” һәм башҡа шиғырҙарҙа әсә образы бар тулылығында асыла. Шуныһы ҡыҙыҡлы: бындай төр шиғырҙарҙа Ҡ. Аралбайҙың хис-тойғолары сиктән ашып түгелеп кенә ҡалмай, ә йәнле тормош картиналары, драматик күренештәр булып күҙ алдына баҫа. Шуға ла автор төрлө стилистик алымдарҙы оҫта ҡуллана. Бигерәк тә диалогтар (“Муйыл көйәнтә”) – үҙ-үҙен аҡлаусы сара.

Шағир ижадында тыуған ер, сал дала – илһам сығанағы ла, хистәр даръяһының инеше лә. Ҡ. Аралбай ата-олатайҙарҙың юлынан тайпылмай, бар традицияларҙы һаҡлай һәм байыта.

*Дағә – атай,*
*Ураҡ – әсәй тамғаһы,*
*Улар аша тормош киткән ялғанып,*

– тигән юлдар тормош принцибы булып яңғырай. Йәки:

*... Әйҙүк, юлсы,*
*Өйгә юл һуғып үт,*
*Һыуһындарың бер аҙ баҫып кит.*
*Ашыҡһаң да алға – яңы таңға, –*
*Тарих тәғәменән ауыҙ ит тә*
*Быуаттарҙың битен асып кит.*

("Көршәктәр")

Шағирҙың замандашы XX быуаттың хәтәр йылдарын үҙ яҙмышы аша үткәргән. Шуға ла уның "Апайҙарым" шиғырындағы драматик күренештәр хәтер сылбырын тағата:

*... Аҡ ҡайындар*
*Билдән ҡарға батҡан! –*
*Йөк ташыған шул ҡыҙ-ҡырҡындай...*
*Апайҙарым!*
*Уттай йәшлегегеҙ*
*Ҡыйылғанға йөрәк һулҡылдай.*

Ҡәҙим Аралбай ижады илаһи тәбиғәт ҡосағы, шанлы һәм данлы йылдар ауаҙы, уны уратып алған ҡабатланмаҫ мөхит һәм замандаштары ярҙамында моронлап, иркен дала иңдәрен иңләрлек тулы һыулы йылғаға әүерелә. Шуға ла уның һәр һүҙ-тулҡынында дала моңо йәнде иңрәтер көскә эйә.

*Аҡлығыңды алам, далам,*
*Күңелемә,*
*Ҡарайһың да*
*Тик юҡ самам*
*Төңөлөргә...*

Йәки:

*Шул моңдан күңелем талпына, ярһына,*
*Ҡанатым ҡанатып осорға дауылда*
*Аҡ дала яғына – алыҫ бер ауылға –*
*Балаһын һағынған ҡарт аҡҡош янына.*

("Болоттар ағыла")

Тап ошондай башланғыс шағир ижадында эске бер моң булып үрелеп бара ла башҡорт шиғриәтенә хас халыҡсан граждандлыҡ лирикаһына әүерелә. Лирик геройҙың булмышын тәбиғәттән, тыуған еренән, халҡынан айырып ҡарап булмай. Ул уларҙың бер һулышы, өлөшсәһе йәки бер бөтөн образ булып күҙ алдына баҫа. Шулай булмаһа шағир:

*Һары талды һыйпап, йәлләп торҙом.*
*Тал шыбырлай миңә ҡайғыһын:*
*"Мине ҡырҡып, зинһар, Уралыма*
*Атығыҙҙы ҡыуып ҡайтығыҙ..."*

("Һағыныу")

Йәки:

*Шыбырланы миңә шиғырҙарҙы*
*Әсе әрем, талдар, ҡамыштар...*

– тип өндәшер инеме?

Эйе, шағирҙың граждандлыҡ лирикаһы тәрән мәғәнәле, артыҡ сөсөләнеү юҡ, ә оло мөхәббәт менән һуғарылған. Ул берсә йырлап, берсә наҙлап, бер аҙ күҙ

йәштәренә тулышып күңел донъяһын яулай ҙа йәшәүгә ғәм, дәрт биреүсе милли рухты күтәрә.

Шағир ижадын мөхәббәт лирикаһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай.

Тап ошо йүнәлеш поэзияның йәйғор төҫтәренә типә-тиң. Ә һәр ижадсының тылсымлы был донъяһында үҙенә генә хас асыштар ҙа, күңелде иретер балҡыштар ҙа була. Шуға ла Ҡәҙим Аралбай шиғриәтен күҙ уңынан үткәргәндә мин ошо юҫыҡҡа күберәк иғтибар иттем. Заман һынауҙарын үткән, ил ағаһы йәшенә еткән шағир тәжрибә менән уртаҡлашамы, үткән үкенестәр менән янып-көйәме, әллә?.. Миңә ҡалһа, нәҡ шул өсөнсөһө, буғай. Шағирҙың мөхәббәт лирикаһындағы образдарҙы ҡарап, тематик даирәһен барламаным, ә бары тик һөйөп баҡҡан ҡараштарҙың нурҙарындағы һүҙ-тылсымдарҙы үҙемсә аса барҙым.

*Яралы моң!*
*Керһеҙ мөхәббәтем*
*Буламаймы дауа йәнеңә,*
*Аҡ ҡылъяндар ныҙын*
*Дала таңын*
*Минән алһаң, бәғрем, йә нимә?..*

("Яралы моң")

Шағир күкрәктәрен ярып үткән ҡайнар хис ябай түгел. Уға йәшәргә лә, йәшнәргә лә мөмкинлек бирә. Автор "шундай яҡты һине тапҡан төнөм" тиеп ҡыуаныуҙарынан сарсаһа, "нисек барһың, шулай ҡабул ҡылам" тиеп йән һөйгәнен йыуата. Шағир гүзәллеккә ғашиҡ, Мәжнүн хәлдәрендәге зат булып та күҙ алдына баҫа.

*Ҡара күҙҙәр өтә керпек үтә…*
*Керпек ҡамыштарға ҡағылам.*
*Ҡара күҙҙәр тамам әсер итә…*
*Ҡара ҡамыштарҙа юғалам.*

("Ҡара күҙҙәр")

Һөйөү уны күктәргә илтер көс бирә, донъяла яҡтылыҡ пәрҙәләрен һуҙа.

*Ай ҡыҙы!*
*Тулҡын сәсеңә*
*Хәсрәтемде күмермен,*
*Һағыштарымдан үлермен,*
*Баҙлап һүнер күмермен.*

("Ай ҡыҙына")

Ә бит ғашиҡ кеше тормошто илаһи төҫтәрҙә күрә. Ҡәҙим Аралбайҙың лирик геройы ла:

*Мин иҫерҙем серле ҡарашыңдан,*
*Мин иҫерҙем ҡайнар тыныңдан,*
*Мин иҫерҙем һутлы иренеңдән,*
*Мин иҫерҙем сихри моңоңдан,*

– тип юҡҡа ғына әйтмәйҙер. Ҡатын-ҡыҙға ирҙәрсә һоҡлана ла, матурлыҡты күрә лә белә.

*Эй гүзәлдәр!*
*Һағыш моңоғоҙҙан*
*Көн уяна, йыһан тын ҡала…*

("Ҡыҙҙар һағышы")

Йәки:

*Эҙҙәрем бит ҡара ергә түгел,*
*Йөрәгеңә генә уйыла,*

– тиеп лирик герой һөйгәненең хис тойғоларын саҡрымдар аша ла тоя. Ҡ. Аралбайҙың ”Сәфәр сығам”, “Татлы ғазап”, “Килеп инсе”, “Ҡош телендәй генә яҙыу ебәр”, “Апрель ҡыҙы”, “Алтынсәс” һәм башҡа тиҫтәләгән шиғырҙарында йөрәк һулышы мәңгелек моң илендә тирбәлеп, лирик геройҙың ҡайнар һөйөүен сағылдыра. Тиңдәрҙән тиң күреп, йәнен фиҙа ҡылырлыҡ саҡтар йыш ҡабатлана:

*Илайһың һин,*
*Яуған шым ямъырҙай.*
*Күҙ йәшеңде һөртә иренем.*
*Күшеккәндә усаҡ тапҡан кеүек,*
*Ҡайнар ҡосағыңда иренем…*

Лирик геройҙың  үтә лә бер ҡатлы, малайҙарса ихлас шуҡлығын ташламаған осраҡтары ла юҡ түгел.

*Инде аҡыл да бар кеүек,*
*Аҡты-ҡараны һиҙәм…*
*Әммә, Алтынсәсте ҡыуып,*
*Даръяла тағын йөҙәм.*

(“Алтынсәс”)

Шағирҙың мөхәббәт лирикаһында “аҡ томан”, “тулҡын”, “ай һәм ҡояш” образдары ҙур урынды биләй. Мөхәббәттә бер ваҡытта ла таҡыр һуҡмаҡ, аныҡ ҡанундар булмай. Ул һәр кем өсөн – өр-яңы донъя, өр-яңы тарафтар. Шуға ла шағир:

*Аҡ томан аша атылам*
*Хыялым тарафына, –*
*Кем көтәлер мине унда*
*Хистәрҙән яратылған?..*

– тип әйтә икән, ул ихластан нимәлер көтә. Яҙмыш уға нимә килтерһә лә, ҡабул итергә әҙер:

*Татлы ғазап…*
*Көтөү…*
*Ҡауышыуҙар –*
*Мөхәббәттең ҡанмаҫ һыуһындары.*

(“Оҙатыу”)

Шулай уҡ шағирҙың мөхәббәт лирикаһында ниндәйҙер һығымта яһаған шиғри шәлкемдәр ҙә байтаҡ. Тик уларҙы автор аҡыл һатмай, үҙ йөрәгенән үткәндәрен бәйән итә.

*Бөтөргәнсе эсеп булмай икән,*
*Эсеп булмай икән һөйөүҙе,*
*Тамсы ғына барыбер тороп ҡала*
*Утҡа ҡала әрнеү-көйөүгә.*

(“Тамсы”)

Йәки:

*Һөйөү һине генә ялмаманы,*
*Ялҡынында мине көйрәтте.*

*Тормош бер кемде лә аяманы,*
*Йүгәнләргә хисте өйрәтте,*

– тип әйтһә лә, шағирҙың рухы һәр саҡ азатлыҡҡа ынтыла, хис-тойғоларын юҡ-ҡа-барға сарыфламай. Улар барыһы ла бер бөтөн булып һөйөү тауына, мөхәббәт бейеклегенә күтәрелә.

*Аһ, йөрәгем, зинһар, ярһыма,*
*Тотҡон йәне генә тарһына,*
*Ситлектәге ҡош бит – һин түгел,*
*Һинеке – бар донъя, киң күгең…*

(“Мин йәш инем”)

Һәм ошо шағир ижад иткән бейеклектән, бөйөклөктән мөхәббәттең иң саф, изге теләктәре генә урғыла. Тик ғашиҡ кеше генә йондоҙҙарҙан шиғыр тирә. Шағир һөйә икән, шағир йәшәй!

Ҡәҙим Аралбай шиғриәтендә уйҙар тантанаһы һыу буйы. Улар ябай ғына түгел, ә фани донъя, мәңгелек кеүек мәсьәләләргә ҡағылышлы шағир фекере. Автор үҙенә тиклем быуын-быуын шағирҙар эҙләгән тормош, йәшәйеш һорауҙарына һүҙ-мәрйендәр аша ҡараштарын дәлилләй. Уйылып китер уйҙар тулҡындары ҡайҙа ғына урамай ҙа ниҙәр генә кисермәй. Тәбиғәт һәм кеше берлеге, тирә-йүнгә оло иғтибар, һәр күренешкә шағир күҙлеге менән бағыу – барыһы ла тәрән фәлсәфәле шиғриәтте тыуҙыра.

*Тирәктәрҙән, ана, үрнәк ал һин –*
*Йәшәү өсөн нисек талпына:*
*Мамыҡ-орлоҡ ҡайһы ергә ҡунһа,*
*Шунда йәшел ҡыяҡ ҡалҡына!*

(“Тирәктәр”)

Ғәҙәти донъяуи картиналарҙы үҙәккә ҡуйып һығымталар яһау, уҡыусыны тәрән кисерештәр өйөрмәһендә тотоу йыш осрай Ҡ. Аралбай поэзияһында. Мәҫәлән, “Тейендәр бейеүе”, “Ат менән ҡарт” шиғырҙарында поэтик образдарҙы бик оҫта уйната ла, йәнәшәлек алымы ҡулланып, уҡыусыны уйға һала. Ҡаты тормош ҡанундары менән килешмәй ҙә булмай, ләкин ҡайһы саҡ үҙгәрешһеҙ тип уйлаған кәртәләрҙе лә кеше үҙенә файҙаға әйләндерә. Бында иһә аҡыл да, тәжрибә лә, оҫталыҡ та артыҡ түгел. Шуға ла шағирҙың фәлсәфәүи шиғырҙарында был йүнәлеш айырым урынды биләй.

*Ҡыуана бел,*
*Был донъяның йәмен*
*Күрә,*
*ишетә,*
*тоя алғанға.*
*Үкенерһең юҡһа,*
*Бер мәл килеп,*
*Бөтәһе лә тороп ҡалғанға.*

(“Үкенерһең”)

Лирик герой образы үҙенең итәғәтлелеге, миһырбанлылығы, башҡаларға үтә лә һаҡсыл ҡарашы менән үҙенә йәлеп итә. Тәү ҡарамаҡҡа бар йыһанды күңеленә һыйҙырған шағирҙың ябай күренешкә лә урыны етерлек.

*Бер эҫеле, бер һыуыҡлы булам,*
*Кителеп осһа ҡая таштары…*

*Тәгәрәгән сак̣та һуңғы тапк̣ыр*
*Рәнйетмәһәм ине яттарҙы.*

Фани донъяларҙа кешеләр араһындағы к̣атмарлы мөнәсәбәттәр ҙә мәңгелек һорау булып к̣ала. Ә шағир:

*Кешеләрҙең башын әйләндергән*
*Мак̣тау ҙа ул – шул ук̣ яуызлык̣!*

– тип буш күперенеүҙәрҙең үтә лә к̣ыҫк̣а икәнлеген раҫлай.

*Томош берсә – баш бирмәҫлек толпар,*
*Берсә – илгәҙәктәй еткән к̣ыҙ,*

– тип лирик герой мәңгелек хак̣ында йыш уйлана.

*Шундай танһык̣ йәшәү!*
*Йөҙ йәштә лә*
*Был донъянан китеү – иртәрәк!*

Йәки:

*Был донъянан китһә бер йән,*
*Тонок̣лана микән бар йәм?*
*Тына микән к̣алъан бер йән?..*

Ғүмерҙәрҙең үлсәүҙәре, донъялыктың сиктәре лә хафаландыра лирик геройҙы.

*Яр емереп, яңы үрҙәр ярып,*
*Ярһып-ташып ак̣к̣ан йылъалай,*
*Һыуҙар түгел –*
*Бары Вак̣ыт аъа,*
*Үҙәнендә бер ни аямай.*

К̣. Аралбайҙың фәлсәфәүи шиғырҙарында "тау", "таш", "тулк̣ын", "ут", "даръя", "асман", "юл", "елкән" кеүек поэтик образдарының күркәм сағылышын күрергә мөмкин. Шуныһы к̣ыҙык̣лы: ошо мәңгелек хәрәкәт, мәңгелек донъя ағышында шағир үҙ урынын, үҙ асылын дөрөҫ билдәләгән.

*Асыр өсөн донъя асылдарын,*
*Ашыр өсөн тормош алк̣ынын,*
*Шаулы, даулы ъүмер даръяһының*
*К̣аъып торор мин бер тулк̣ыны…*

Ысынлап та, К̣. Аралбайҙың фәлсәфәүи лирикаһы – тотош поэзияһының хистәр даръяһындағы иң хәрәкәтсән, иң тылсымлы тулк̣ындарҙың береһе.

Башк̣орт шиғриәте үҙенең быуаттар төпкөлөнән килгән традициялары менән дан тота. Был байлык̣ – образдар системаһында, һүрәтләү сараларында, жанр үҙенсәлектәрендә. Шуныһы к̣ыуаныслы: унда һәр быуын шағирҙары үҙ өлөшөн индереп, тағы ла байыта ғына. К̣әҙим Аралбай шиғриәтендә лә фольклорҙан әҙәбиәткә күсеп, һүҙ сәнғәтендә ныклы үҙ урынын биләгән к̣обайыр жанры йыш осрай. "Таңатар", "Ак̣мулла", "Сәхнәһендә замандың", "Урал батырға өндәшеү" к̣обайырҙарында жанр традициялары тулы һак̣ланып, авторға тарихи ысынбарлык̣к̣а тәрәнерәк к̣арарға мөмкинлек биргән. Тап ошо әҫәрҙәрҙән һуң жанрҙың яҙма әҙәбиәттә лә ныклы урын алыуына шик к̣алмай. Шулай ук̣ "Рәсәй тотк̣оно" бәйете, "Имән" мәҫәле башк̣орт әҙәбиәтенең даирәһен киңәйтә төшә.

Ә шағир ижадында шиғри шәлкемдәр үтә лә күп төрлө. "Ғүмер ярҙары", "Бөрйән дәфтәренән", "Алмағастың туй күлдәге", "Муса Мортазин", "Ак̣лык̣ алдында уйланыу", "Көҙгө төҫтәр, көҙгө һағыштар", "Йылғаларым", "Руми", "М.Кәримгә бағышлауҙар", "Алаша һөйөнөсө", "Фәһемдәр", "Хәк̣ик̣әттәр"

исемле шиғри шәлкемдәрҙе замандың актуаль проблемалары, тарихи ҡараш һәм поэтик образдарҙың бөтөнлөгө биләп тора. Шағирҙың “Сыңрау торна” балладаһы драматик сюжеты, традицион образды яңы төҫтәрҙә балҡыта алыуы менән алдыра. Ҡ.Аралбай ижадында классик Көнсығыш әҙәбиәтенең робағиҙары үҙе бер биҙәк. “Фани донъя” баш аҫтында бирелгән робағиҙар – алты бүлектән тороп, фекер ептәрен донъяуи мәсьәләләр йәһәтенән һүтә. Робағиҙарҙа тәрән фәлсәфә, халыҡ яҙмышы, ил ғәме, тормош йәме, тарих аша киләсәккә бағыу өҫтөнлөк ала. Авторҙың тура һәм тапҡыр һүҙҙәре тос фекер емеше булып жанрҙың таждарын тәшкил итә.

*Урал батыр тоҡомдары ят ҡунаҡты алыр ҡаршы,*
*Сабыр ғына хәл һорашыр, һонор ҡымыҙ, ҡуйыр ашын…*
*Кәрәк булһа, ерен һаҡлап алышыр ул, нәфрәт ташып,*
*Уралымда ҡалғанғаса ҡылыс ҡайрар һуңғы ташы.*

Тап ошо юлдарҙа башҡорт халҡының менталитеты ла, тарихы ла, тормошҡа ҡарашы ла сағылыш тапҡан.

Ҡ. Аралбай халыҡ тарихына, тарихи шәхестәргә үтә лә һаҡсыл һәм иғтибарлы. Ҡол Ғәли, Аҡмулла, Зәйнулла ишан, Мөжәүир хәҙрәт, Салауат батыр, Әхмәт ибн Фаҙлан, Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мотазин, Назар Нәжми, Нәжиб Асанбаев, Мостай Кәрим, Иҫәнбикә менән Сүбидәй Туғандар һәм башҡа бик күп шәхестәр образдарының галереяһы бар. Автор уларҙың характер үҙенсәлектәрен образһынланышта дөрөҫ бирә. Шуға ла был әҫәрҙәр хәтерҙә уйылып ҡала.

Ҡәҙим Аралбай,– ата-бабайҙар шикелле, сәйәхәтте үҙ күргән һүҙ оҫтаһы. Ниндәй тарафтарҙа ғына булһа ла, уның ҡәләмендә шул ерҙәрҙең хозур тәбиғәте, һулышы һәм аһ-зары ла урын ала. Шағир бер нәмәгә лә битараф түгел. Уның “Кәмәлек”, “Һамар башҡорттарына”, “Һамар ауылдары”, “Һамарҙа әйтелгән өгөт”, “Һарытау башҡорттары”, “Һуңлаған аҙан”, “Ҡыпсаҡ ҡыҙы”, “Ырымбур”, “Силәбегә” кеүек әҫәрҙәрендә милләттәштәребеҙҙең яҙмышына янып-көйөүҙәр урын алған. Шулай уҡ айырым төбәктәргә сәфәр ҡылып, шул тәьҫораттарҙан тыуған “Дрезден ҡайыны”, “Казан дәфтәренән”, “Палдиски дәфтәренән”, “Себер дәфтәренән”, “Алтай моңдары”, “Алатау шаңдауы” (Ҡаҙағстан дәфтәре) шиғырҙар циклы башҡорт шиғриәтенең географик киңлектәрен генә үҙгәртмәй, ә милли поэзияны халыҡ-ара кимәлгә күтәрә. “Хиросима-Нагасаки”, “Коспас-Сарсат” исемле шиғырҙарында ла халыҡ-ара проблемалар үҙәктә тора.

Һәр бер шағир ижадында поэма жанры уның өлгөргәнлеген, ижади эҙләнеүҙәренең юғары нөктәһен билдәләй. Сөнки тап ошо жанр поэтик һүҙ ҡеүәһенең бар мөмкинселектәрен асып бирә, заман проблемаларын художестволы йәһәттән тулайым яҡтыртыуға өлгәшә. Ҡәҙим Аралбай поэзияһында поэмалар байтаҡ – ике тиҫтәнән артыҡ. Уларҙың тәүгеләре XX быуаттың 60-сы йылдар аҙағында ижад ителһә, һуңғылары бөгөнгө көн проблемаларын яҡтырта. Поэмаларҙың композицион эшләнеше, алынған геройҙар образдарының характеры, проблемалар ҡуйылышы ла төрлө кимәлдә, төрлө йүнәлештә. “Беҙ – кеше”, “Ҡыҙғатау”, “Сапҡын”, “Ауыл төтөнө” поэмаларында лирик башланғыс өҫтөнлөк итеп, геройҙың күңел кисерештәре заман проблемаларын ҡуҙғата. “Сапҡын”да замандарҙы йәнәш ҡуйып һүрәтләй. “Ауыл төтөнө”ндә бөгөнгө ауылдың хәле, йәшәйеше үҙәктә.

*Ауыл тере! –*
*Ана ҡаршыбыҙҙа*
*Һыҙылып сыҡты күкһел төтөнө.*

*Ут алырға ҡайттым йөрәгемә,*
*Яҡташтарым, һеҙҙән үтенеп…*

("Ауыл төтөнө")

Ҡ.Аралбайҙың "Аҡ тирмә" лиро-эпик поэмаһы үҙенең дөйөмләштереү ҡеүәһе, тарихи ракурсты оҫта ҡулланып эҙләнеүҙәре менән башҡорт поэзияһында бер күренеш булды. Уның "Башҡортостан – аҡ тирмәләр иле" тигән тәүге юлдары, ҡанатлы һүҙҙәр һымаҡ, күп урындарҙа ҡулланыла. Поэмала автор "аҡ тирмәләр иленең" үткәненә экскурс яһай, төрлө осорҙарын барлай. Артабан ошо дөйөмлөлөктән яйлап үҙен борсоған мәсьәләләргә күсә:

*Башҡортостан – аҡ тирмәләр иле.*
*Бер тирмәһе уның – ауылым.*
*Күҙ алдыма килһә Таңатарым,*
*Сорнап ала хистәр дауылы.*

Автор тыуған ауылы Таңатар яҙмышы аша тетрәндергес драматик күренештәрҙе, ғөмүмән, перспективаһыҙ тип "бөтөрөлгән ауылдарҙы" барлап ҡына ҡалмай, ә уҡыусыны уйландыра, хәсрәттәргә һала. Поэмалағы зыярат, ҡоҙоҡ, ундағы ояларан турғай, һуңғы күскенсе Ғәҙелмырҙа һәм әсә образдары – лиро-эпик жанрҙың сюжет һыҙыҡтарын төйнәүсе лә, йыйнаҡлыҡ биреүсе лә. "Аҡ тирмә"лә лирик герой һәм йәмғиәт араһындағы ҡаршылыҡ юғары көсөргәнештә һүрәтләнә. Шуға ла әҫәр бер тынала уҡыла.

"Саҙаҡа" поэмаһында шағир ретроспективаны төп сюжет һыҙығы итеп үҫтерә. Бала саҡ хәтирәләренән башланған ваҡиғалар киңерәк даирәне яулай, лирик геройҙың тормош ҡараштарын биләй. Тик поэма һуңындағы публицистик өгөтләүҙәр лирик герой образын бер аҙ һүрәнләндерә.

"Сапҡын" поэмаһы лирик башланғыслы. Сюжет һыҙыҡтары үҫтерелмәй, ә бары геройҙың уйҙарын ғына сағылдыра. "Батыр яраһы", "Тарас менән Ҡарас" поэмаларында автор тарихи осорҙарға сәйәхәт ҡыла. Тәүгеһендә Салауат образы үҙәктә тора. Шағир тарихи фактик материалдарҙы шиғри текстар араһында бик урынлы бирә. Әҫәрҙә диалогтар, монологтар образ характерын тулыһынса асырға ярҙам итә. Киң эпик ҡоласлы "Тарас менән Ҡарас" поэмаһында XIX быуат ваҡиғалары, башҡорт һәм украин һалдаттарының дуҫлығы, бергә көрәше төп урынды алып тора. "Күк бүре"ләге поэтик образ, ваҡиғалар – беҙҙең ерлек өсөн типик күренеш. Алтай егетенә кейәүгә сыҡҡан Миңлеямалдың һағышы:

*Шундай мәлдәр була:*
*Тыуған моңдар*
*Йөрәгемде була йолорҙай.*
*Мин дә шунда…*
*Һыҙып һағышымдан,*
*Күк бүреләй булам олорға,*

– тип хәсрәтләнә.

"Ҡойондар", "Өмөт" поэмаларында лирик герой аша дәүер мәсьәләләре күҙаллана. "Һағышнамә" поэмаһында автор мифологик башланғысты сюжет һыҙығына ала ла үҙенсәлекле һығымта яһай. Урал батыр ете улы менән лирик герой алдында тора. Тап ошо осрашыу поэманы ҡыҙыҡлы композицияға ойоштора.

“Рух яҙыуы”, “Һуңғы туй” поэмаларында әсә образы, халыҡ яҙмышы үҙенсәлекле сағылыш тапҡан. “Ҡаратау тотҡоно” композицион яҡтан ҡатмарлы ғына. Төп герой – халыҡ шағиры Рәмиҙең, уны уратып алған тәбиғәт күренештәренең диалогтары драматик картиналарҙы тыуҙыра, образ характерын тулыһынса аса. “Таналыҡ тауышы”ның инеше Ҡөрьән-Кәрим һүҙҙәренән башлана ла тыуған ер тарихын иңләй. Лирик герой заман етәксеһе менән бәхәсләшә, бәйет жанрының ҡанундарын оҫта ҡуллана. Геройҙың әруахтар менән аралашыуы трагик ваҡиғаларҙы күҙ алдына баҫтыра. “Буран ҡояшы” поэмаһында шағир лирик геройҙың хәтирәләре аша бөгөнгөгә баға. Буранда туңып үлгән Мәһәҙей образы әҫәрҙең төйөнләнеүе булһа, артабан ошо башланғыс шәхес һәм йәмғиәт бейеклегенә күтәрелә.

“Торатау” поэмаһы 14 бүлектән тора. Шағир тарихҡа мөрәжәғәт итә, Тәтегәс бей аманатын индереп, бөгөнгө проблемаларға әйләнеп ҡайта.

*Башҡорт рухын раҫлап,*
*Ғорур баҫҡан*
*Офоҡтарға бағып Торатау,*
*Замандарҙың үтеп дауылдарын,*
*Торҙо, тора, мәңге торасаҡ!*

Ҡ.Аралбай “Йыраусы” поэмаһының төп геройы итеп сәсән Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаевты алған. Ун бүлексәнән торған был әҫәрҙә Йыраусы образы төрлө яҡлап асылған.

*Шөкөр, Аллаһ!*
*Башҡорт бәхетенә*
*Йыраусыһын ерҙә һаҡлаған.*
*Моңо менән илгә таныттырып,*
*Хаҡ-ғәҙеллек иткән тантана,*

– тип йомғаҡлап та ҡуя.

Ҡәҙим Аралбайҙың һәр поэмаһында лирик герой образы аша халыҡ яҙмышы, тарихи ваҡиғалар үҙенсәлекле сюжет булып үрелә. Шуға ла улар һәр береһе композицион яҡтан бөтөн, драматик конфликтҡа нигеҙләнгән. Әйтерһең дә, тормош үҙе үк уның әҫәрҙәренә күсеп, моңло бер йыр булып ағыла.

Шағир донъяһы. Һүҙ-мәрйендәрҙән, поэтик образдарҙан тыуған ҡабатланғыһыҙ хазина. Ул донъя мең төрлө моңдан, иҫәпһеҙ нағыш-һағыштарҙан туҡылып, ваҡыт һынауҙарын аша үтеп, рухи күперҙәрҙе хасил итә. Уның тауыштары ҡоро асмандарға ашмай, беҙгә һәм киләсәк быуындарға йүнәлтелгән. Шуға ла шағир:

*Йәйәүләп бер сәфәр сығам әле,*
*Атлағанда талмаҫ аяҡтар,*
*Ҡаҡҡан саҡта илһам ҡанаттары,*
*Саҡырғанда алыҫ маяҡтар…*

(“Йәйәүле”)

– тип юҡҡа ғына өндәшмәй.

**Зәки ӘЛИБАЕВ,**
**БДУ доценты.**

# АҪЫЛ ИКӘН ЗАТЫҢ – ҺҮҘЕҢ БУЛҺЫН АЛТЫН*

*(Шағирәләребеҙҙең быуат башында “Ағиҙел“ биттәрендәге ижадына бер ҡараш)*

4

Яңы быуатты **Тамара Ғәниева** «Мәрйен-мәрйен тиҫбе фани ғүмерем» тигән шиғри шәлкем менән асып ебәрҙе («Ағиҙел»,2001, 6-сы һан). Был шәлкем шағирәнең тәүге матур юбилейына арналғайны. Шәлкемдән һуң «Дәүер менән дәүер араһында» тигән баш аҫтында шағирәнең ижадын тикшергән мәҡәләләрҙән өҙөктәр килтерелгәйне. Шунда Рәшит Шәкүрҙән алынған бынау юлдарҙың иғтибарымды йәлеп иткәнлеге лә хәтеремдә: «Тамарала ҡыйыулыҡ та, саялыҡ та етерлек. Ир-уҙамандарға биргеһеҙ көс-ғәйрәт тә, тәүәкәллек тә бар унда. Фекерҙәр тос, үткер, һүрәтләү саралары сағыу. Дөйөмләштереберәк әйткәндә, киң тарихи һәм рухи-мәҙәни контекста ижад итә ул». Артабан мәҡәләнең авторы Тамараны «көслө шәхес һәм көслө талант» тип атаған һәм һүҙен дауам итеп: «Быға иң яҡшы дәлил – хәҡиҡәттең әсеһенә лә, сөсөһөнә лә тигәндәй тура ҡарай белеүендә. Бары тик көслө кешеләр үҙҙәре хаҡында уның һымаҡ итеп тураһын әйтеп бирә ала торғандарҙыр», – тип өҫтәй.

Рәшит Шәкүр, ғалим булараҡ та, шағир булараҡ та, ҡәләмдәшенең ижадына ла, шәхесенә лә хас айырым үҙенсәлектәрҙе сос тотоп алған. Ысынлап та Тамара Ғәниеваның был үҙенсәлектәрен уның һуңғы ун йылда «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән яңы әҫәрҙәрендә лә (иллегә яҡын шиғыр, бер тәкбир, бер поэма һәм бер мистерия) шәйләргә мөмкин. Буш һүҙ булмаһын өсөн, шуларҙың ҡайһы берҙәренә туҡталып китергә кәрәктер.

«Әнейемә тәҡбир» – жанры буйынса ҡыҙыҡлы ғына бәхәс ҡуҙғатып алырҙай әҫәр. Унда һүҙ конкрет әсә хаҡында, уның характерына һәм бөтә булмышына хас айырым һыҙаттар тирәһендә барһа ла, был персонажды типик образ юғарылығына күтәрерҙәй күренештәр ҙә юҡ түгел.

«Ҡатын» исемле яңы поэмаһында («Ағиҙел», 2006, 1-се һан) автор уҡыусыны бөгөнгө мәшәҡәттәрҙән арындырған да бынан дүрт-биш йөҙ элек булған хәл-ваҡиғалар эсенә илтеп сумдырған. Ҡыҫҡа ғына, аныҡ ҡына итеп әйткәндә, поэмала һүҙ башҡорт ырыуҙарының үҙ ихтыяры менән Рус дәүләтенә ҡушылыуы хаҡында бара.

Поэманың күҙгә бәрелеп торған үҙенсәлеге – тарихи факттың мифик сюжетҡа төрөп биреүҙәлер. Әҫәрҙең тәүге юлында уҡ беҙ Шаһит исемле персонаж менән осрашабыҙ. Башта ул яңғыҙлыҡ исемен йөрөткән ғәҙәти бер кеше шикелле генә ҡабул ителә: Шаһиттың уртаҡ исемдән яралған мифологик образ икәнлеге тураһында уҡыусы әлегә бер ни ҙә белмәй. Ошонда уҡ Ҙур Аҡыл тигән персонаж

---

* *Аҙағы. Башы 8-се һанда.*

телгә алына. Уныһы инде Аллаһы Тәғәлә тигәнде аңлата торғандыр, ләкин беҙ уға ла артыҡ иғтибар итмәйбеҙ. Күп тә үтмәй, тирмәлә тиҫбе тартып ултырған Өлкән Ҡатын һәм уның һыҡыр ейәне пәйҙә була. Шунда уҡ Өлкән Ҡатындың улын һәм киленен (һыҡыр сабыйҙың атаһын һәм әсәһен) «сырхау ҡоршап бөккән йот» алыуы хаҡында хәбәр һалына. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, поэманың экспозицияһында беҙ миф һәм ысынбарлыҡтың аралашыуына шаһит булабыҙ. Сюжеттың артабанғы үҫешендә иһә мифик Шаһиттың, Ҙур Аҡылдан килгән фарман-карарҙарҙы үтәп, Ғаләм Ҡотоғонда хөкөм һөргән тәртиптәрҙе, ундағы ыңғай һәм тиҫкәре күренештәрҙе, ғөмүмән алғанда, бөтә хәл-ваҡиғаларҙы «Тарих хәтере» тип аталған китапҡа теркәп барыусы икәнлегенә төшөнәбеҙ.

Ләкин әҫәрҙең елек майы, минеңсә, Ҙур Аҡылда ла, уға башкөллө буйһонған мифик Шаһитта ла, донъяла ниндәй хәүеф-хафалар, көтөлмәгән һәләкәттәр булырын күңел күҙе менән алдан күргән һуҡыр малайҙа ла (поэманың аҙағына табан ул сәсән шәйенә индерелә) түгел, ә реаль тормошто ышандырырлыҡ итеп һүрәтләгән күренештәрҙә. Тик был һис кенә лә Тамара уйлап тапҡан форманы инҡар итеү тигән һүҙ түгел. Киреһенсә, поэманың баштағы киҫәктәре ауырыраҡ уҡылһа ла, ысынында иһә ул ифрат мауыҡтырғыс әҫәр.

Тамара Ғәниева – рус һәм донъя әҙәбиәте менән яҡшы хәбәрҙар шағирә. Был уның әҫәрҙәрендә лә, көндәлек матбуғат биттәрендәге сығыштарында ла һиҙелеп тора. Шуларҙы иҫкә алғанда, шағирәнең ижад офоҡтары башҡорт поэзияһында күптән тамырланған традицион жанрҙар һәм темалар менән генә сикләнмәй, тиергә була. 2007 йылда уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән («Ағиҙел», 9-сы һан) «Уралым» тигән күләмле генә әҫәр ҙә – быға асыҡ дәлил. Әҫәрҙең жанрын автор «мистерия» тип атаған.

«Мистерия» һүҙе ябай ғына итеп аңлатыла: серле, тылсымлы көс. Тамара Ғәниеваның «Уралым»ында шундай көстәр икәү: исемен атамайынса ғына (Инкогнито), Лондондан тороп, Интернет аша Гөлдәр менән бәйләнешкә ингән бер Ир-егет һәм көтмәгәндә компьютер экранында пәйҙә булған билдәһеҙ Ҡатын. Әҫәр Гөлдәрҙең алмаш-тилмәш ошо ике көс менән алып барған диалогы формаһында төҙөлгән. Сюжет ағышында был икәүҙең ике төрлө маҡсат көҫәүе асыҡлана. Инкогнитоның уйында – бары тик аҡса, байлыҡ, бизнес, шау-шыуға ҡоролған күңелле тормош, тәмле аш-һыу.

«Уралым»дағы серле, тылсымлы көстәрҙең икенсеһе – күпкә ҡатмарлыраҡ күренеш. Әҫәрҙең жанр баһаламаһы ла башлыса шунан киләләр. Сөнки был көс автор хыялында ғына йәшәй. Ярай әле, уның героиняһы Гөлдәр, таныш-өнһөҙ ымды үҙенең «эске тойғоһо» менән аңлап, фараз ҡылырға һәләтле. Юғиһә, монитор экранында, уйсан йөҙөндә нур һарҡытып, намаҙлыҡһыҙ аҡ мәрмәр ташҡа теҙләнгән был серле Ҡатындың Йыһан илсеһе икәнлеген дә белмәй ҡалыр инек.

Т. Ғәниеваның әле һүҙ барған күләмле поэтик әҫәрҙәрендәге ҡайһы бер мотивтар уның һуңғы осорға ҡараған шиғырҙарында ла яңғырап киткеләй. Шундайҙар иҫәбенә «Талҡаҫ», «Мираҫ», «Ҡырҡ ҡатын», «Был ауылда...», «Һылыу, килендәр...», «Башҡортостан» тигәндәрен индерер инем. Әгәр «Талҡаҫ»та лирик героиня, «Төйәккенәм, һәр урының – сәнғәт» тип, хозурланһа, «Башҡортостан»да иһә ул үҙ төйәген «һөйгәненә тоғро йәр шикелле» яратыуы хаҡында бәйән итә. Ләкин, был шиғырҙар күтәренке пафос менән генә һуғарылғандар икән тип уйлаһаҡ, дөрөҫ булмаҫ ине. Сөнки уларҙың икеһендә лә лирик героиняның эске һыҡрауы һиҙелеп тора. Тәүгеһендә ул үҙен «аҫыл батшалыҡта

ҡибла тапмаҫ дәрүиш» итеп тойһа, икенсеһендә иһә «Үлгәс түгел, бөгөн ярат, Башҡортостаным!» тигән үтенесен ярып һалған. Шиғырҙарҙың икеһенә лә кинәйәле фекер төрөп бирелгәнлеген шәйләмәү мөмкин түгел, минеңсә.

Т. Ғәниеваның быуат башында ижад иткән һәм баҫылып сыҡҡан шиғырҙарында лирик героиня йыш ҡына үҙенең үткәне һәм киләсәге хаҡында уйлана, донъялыҡта биләгән урынын асыҡларға тырыша, бигүк ябай булмаған заманыбыҙ тураһындағы ҡайһы бер уй-фекерҙәре менән уртаҡлашырға ла онотмай. Шунһы ҡыҙыҡлы: ҡарап тороуға юмор һымағыраҡ яңғыраған шиғырҙа ла ярайһы ғына тәрән фекергә тап булаһың. Һәм, киреһенсә, йөкмәткенән тормош фәлсәфәһе аңҡып торһа ла, унда емелдәгән юмор саткыларын да шәйләмәй ҡалмайһың. Ошондай шиғырҙар иҫәбенә тәү сиратта «Ана ғына», «Мөнбәрҙәргә баҫып ағай-эне...», «Мәкер», «Иҫке бишмәт», «Бар әле...», «Һандал», «Мөгәрәп», «Беҙ – еңеүсе балалары», «Һары төштө инде тәбиғәткә...», «Шәхси шиғыр», «Мейесен һүтеп алған өй шикелле...», «Әхирәтем», «Мистер Икс», «Донъяларға шундай күҙем төштө...», «Ресторанда», «Йән», «–Арттараҡ бул...», «Әүерелмәләр», «Ҡартлыҡ» тигәндәрен индерер инем.

Ерҙә йәшәү дәүерендә әҙәм балаһына кисерергә тура килгән ғәҙелһеҙлектәр, кәмһетелеүҙәр, мыҫҡыллауҙар, нахаҡҡа рәнйетеүҙәр хаҡында күп уйлана Тамара Ғәниеваның лирик героиняһы. Айырыуса – һуңғы йылдарҙа. «Өйрә» темаһы, мәҫәлән, «Ана ғына» тигән шиғырҙа ла сағылып китә:

*Өлөш самалымы,*
*Даланмы юҡ,*
*Ҡойто булды яҙмыш яҙъаны.*
*Нисә һапырһам да, шыйыҡ өйрә*
*Һондо миңә Ғаләм ҡаҙаны.*

Әммә йылдар үткән һайын, шағирәнең гражданлыҡ позицияһы, донъяға ҡараштары асыҡланғандан-асыҡлана, нығынғандан-нығына бара. Әгәр «Әүерелмәләр» тигән шиғырында ул аҡты – ҡара, ҡараны – аҡ тип үҙенекен тылҡыған («Ҡара йөрәк бирәү, //Мин аҡтин-аҡ, //Эскерһеҙмен, ти ҙә заң ҡаға») ике йөҙлөләрҙең күҙҙе быуыуҙарын яйлап төшөнә башлауы хаҡында хәбәр һалһа, «Мистер Икс»та иһә, хыял донъяһында йөҙөүсе кеше булып ҡыланып, «битлек кейеп алған» йән эйәләренән әсе көлә. («Ниндәй генә сүрәт, ҡиәфәткә //Инергә һуң миңә// Бөгөн кис?»). Әгәр «Мейесен һүтеп алған өй шикелле...»лә шағирә «илдең иманы кем иңендә» икәнлеге хаҡында («Иманымы? //Аһ, ул ғәҙәт-әҙәп// Иҫтәлеккә күскән, тарихҡа») бер ауыл миҫалында ғына фекер йөрөтһә, «Беҙ – еңеүсе балалары»нда инде ул ошо уҡ һорауға яуапты бөтә ил күләмендә эҙләп таба: «Беҙ – еңеүсе балалары инек... //Шөкөр, тинек, ҡында булат ҡылыс. //Һәм...// Яуландыҡ... //Утҡа тотмай ғына// Теҙләндерҙе беҙҙе «Һалҡын һуғыш».

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тиәйем микән, Т. Ғәниеваның ижад практикаһында ара-тирә авторҙың ни әйтергә теләгәне бигүк асыҡланып бөтмәгән шиғырҙар ҙа осрап ҡуйғылай. Миҫал итеп «Таң алдынан баллы ысыҡ тамды...», «Ҡурҡам», «Көтөү» тигәндәрен күрһәтеп үтер инем. Әлбиттә, мин уларҙы рифмаға һалынған матур һүҙҙәр теҙмәһе генә тип баһаларға йыйынмайым. Уларҙың төбөндә, бәлки, авторҙың үҙенә генә билдәле һәм аллегорияға ҡоролған фекер яталыр. Шағирәнең ижады фәнни нигеҙҙә өйрәнелгәндә был һорауҙарҙың бөтәһенә лә аныҡ яуап бирелер, тип уйлайым.

Тормоштоң аяуһыҙ ҡанундарын, тирә-йүндә атлаған һайын осрап торған ғәҙелһеҙлектәрҙе ҡыйыу фашлаусы шағирә Ғәниева ерҙә йәшәүҙең күберәк яҡты яҡтарын күрергә һәм шатлыҡлы мәлдәрен тотоп алырға тырыша. Әгәр бер шиғырында ул:

*Донъяларъа шундай күҙем төштө:*
*Үҙе яҡты, үҙе туңәрәк.*
*Торъан һайын ҡыҙыҡ кеүегерәк,*
*Ғүмер кисеп аяҡ талдырһам да,*
*Күңелдәрем булды бигерәк,* –

тип яҙһа, икенсеһендә иһә, үҙен әҙгә генә булһа ла йылы яҡтарға осоп барыусы торналар өйөрөндә хис итеп, «... Намыҫсанды беҙҙә ситләтеү бар, //Теш-тырнаҡлы ғына үҙәктә» тигән фекерен дә йәшермәй.

Йыйып ҡына әйткәндә, Тамара Ғәниеваның быуат башындағы ун йыллыҡ ижады – шағирәнең поэзия үрҙәрен яулағанда яһаған сираттағы аҙымы ул. Был аҙым, өҫтә телгә алынған әҫәрҙәрҙән күренеүенсә, тағы ла ырамлыраҡ, тағы ла күркәмерәк булды, тиергә мөмкин. Алда уны яңы поэтик асыштар көткәнлегенә шик юҡ.

Бөгөнгө шиғриәтебеҙ майҙанында уңышлы һәм һөҙөмтәле ижад итеүселәр араһында Гөлнур Яҡупова, Нәжибә Әминева, Таңһылыу Ҡарамышевалар ҙа бар. Өсөһө лә «Ағиҙел» журналының даими авторҙары. Т. Ҡарамышеваның «Эй, донъя» (2002), «Өмөттәр сәсәмен донъяға...» (2004), «Килде тауҙар ораны...»(2008), «Шағир»(2009), «Яҙҙар килде тағы наҙҙар килде!» (2010) тигән баш аҫтында баҫылып сыҡҡан шиғырҙары уҡыусы күңеленә хуш килгән булһа, Н. Әминеваның да «Татлы яза» (2001), «Уйлат, донъя» (2002), «Ышанам» (2003), «Йән йылыһы һаҡлана әле бында» (2004), «Арала, яҙмыш» (2005), «Килешер ине» (2006), «Китмәйбеҙ» (2007), «Бәхет ҡанатланыуҙа...» (2008), «Ҡарап ҡалайымсы» тигән исем аҫтында донъя күргән шиғырҙары иғтибарҙан ситтә ҡалмағандыр. Г. Яҡупова иһә яңы быуатта шиғри шәлкемдәр менән генә сикләнеп ҡалманы «Мираҫ» (2007) һәм «Әҙәм вә Һауа» (2008) тигән поэмаларын да тәҡдим итте уҡыусы иғтибарына.

Ижад өлкәһендә шаҡтай бай тәжрибә туплаған был өсәүҙә хәҙер инде башҡорт поэзияһына тоғро хеҙмәт итеүсе һәм уны әленән-әле үҙенсәлекле әҫәрҙәре менән байытып тороусы әҙибәләр тиергә тулы хоҡуҡ бар. Ҙур тәжрибә туплаһалар ҙа, һиҙемләүемсә, уларҙың өсөһө лә, өлкән ҡәләмдәштәре Кәтибә Кинйәбулатова менән Фәниә Чанышева һымаҡ, тыйнаҡтар, инабатлылар, итәғәтлеләр, терһәкте алдан йөрөтмәйсә, тәбиғәттән бирелгәнде тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ятҡан уҡыусылары менән уртаҡлашалар. Т. Ҡарамышева, Н. Әминева, Г. Яҡупова ижады хаҡында элегерәк ҡайһы бер фекерҙәремде әйткәйнем инде. Артабанғы йылдарҙа уларға яңынан әйләнеп ҡайтырға ниәтем юҡ түгел. Бөгөнгө күҙәтеүҙәремдә иһә шиғырҙары ла, китаптары ла баҫылып торған, ләкин исемдәре тәнҡит мәҡәләләрендә һирәгерәк осраған Миңлегөл Хисамова, Гүзәл Ситдиҡова, Тәнзилә Дәүләтбирҙинаға туҡталып китһәм, маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр төҫлө.

Ижад менән эштән һуң ғына шөғөлләнергә тура килһә лә, яңы быуаттың тәүге ун йылында **Миңлегөл Хисамова** поэзия өлкәһендә ярайһы ғына әүҙемлек күрһәтте. Ошо дәүер эсендә ул «Ағиҙел» биттәрендә биш тапҡыр сығыш яһаны һәм уҡыусы иғтибарына алтмышлап шиғыр тәҡдим итте. Был шиғырҙар менән яҡынданыраҡ танышҡанда уларҙың тышҡы йыйнаҡлығы, строфаларҙың традиционлығы, рифмаларҙың теүәллеге күҙгә ташлана. (Дөрөҫ, рифмаларҙы артабан да теүәлерәк яңғыратырға тырышыуҙандыр, бәлки, шиғри юлдар араһындағы логик бәйләнешкә көс килгән саҡтар ҙа осрап ҡуйғылай, ҡыҙғаныҫҡа күрә.)

Дөйөм алғанда, М. Хисамованың лирикаһын хистәр лирикаһы тип атарға була. Хистәр иһә, билдәле булыуынса, күңел торошоноң төрлө мәлен сағылдыра. Шуға күрә йөкмәткеһе менән дә, тышҡы буяуҙары менән дә хистәрҙең шатлыҡлы-ғазаплы ла, күтәренке-төшөнкө лә булыуы һис тә ғәжәп түгел.

«Шыбырлаған ямғыр шауы...»нда, әйтәйек, ижад процесы тәбиғәт күренеше менән йәнәш ҡуйып тасуирланһа, «Аҡ төҫтәргә ҡарап...»та инде лирик героиня ерҙә күпме йәшәйһе ҡалғанлығы хаҡында уйлана. «Минең өлөш» менән «Кәрәк» тигән шиғырҙар өгөт-нәсихәт шикеллерәк ҡабул ителһә «Ырымдарың һинең гел дә дөрөҫ...» менән «Үҙҙемә ғәжәпләнәм...»дә хистәргә бирелгән лирик героиня үҙенең ҡайһы бер ҡылыҡтары менән уртаҡлаша.

М. Хисамованың хистәргә бай лирикаһында үтә лә нескә, үтә лә шәхсән тойғолар менән һуғарылған шиғырҙар ҙа йыш осрай. Шундайҙар иҫәбенә «Үҙемде сәм еңә», «Сабырлығым һынды, йырым тынды...», «Ғазаптарҙы ғазаптарға ялғауҙарым...», «Был шаулауҙар – тына белмәҫ урман...», «Устарыңда таш һаҡланың...», «Аҡ ерлектә генә ҡара таптар...», «Ер тетрәнеме ни, күк күкрәне...», «Ҡыҙынаһың әле йәйҙәреңдә...», «Ҡара төн бағыуы – күңел төшөү...», «Һүрелдең...», «Яҙмышым», «Йәшлегеңә ҡарап һоҡланғанда...», «Серем бар ине...», «Ғашиҡтар теләге», «Өс ҡатлы алҡа», «Һине хәстерләтте...» тигәндәрен индерер инем. (Шиғырҙар исемен былай күпләп килтереү бәғзеләргә, бәлки, бик оҡшап та бөтмәйҙер. Ләкин уларҙы тема, идея, һүрәтләү саралары, тел-стиль үҙенсәлектәре һәм башҡа шуның кеүек компоненттар йәһәтенән ҡарағанда, ниндәйҙер төркөмдәргә бүлмәй ҙә булмай шул.)

Әйтергә кәрәк, һанап кителгән шиғырҙар үҙҙәренең художество камиллыҡтары яғынан төрлө кимәлдә. «Устарыңда таш һаҡланың...» менән «Аҡ ерлектә генә ҡара таптар...»ҙа, мәҫәлән, лирик героиня кемгәлер төбәп, үҙенең йөрәк түренән сыҡҡан үпкәһен, һыҙланыуын, уфтаныуын белдерһә, «Ғазаптарҙы ғазаптарға ялғауҙарым...» менән «Был шаулауҙар – тына белмәҫ урман...»да иһә авторҙың нимә әйтергә теләгәне бик асыҡланып бөтмәгән кеүек. «Ҡыҙынаһың әле йәйҙәреңдә...» лә шулайыраҡ. «Ер тетрәнеме ни, күк күкрәне...», яҙылышы – төҙөлөшө буйынса матур ғына яңғыраһа ла, лирик героиняның кемдән һәм ни өсөн алыҫыраҡ китергә тырышыуы ла йомаҡ булып ҡала. Ә бына «Серем бар ине...» менән «Ғашиҡтар теләге»нә, минеңсә, һүҙ тейҙерерлек түгел.

Формаһы һәм йөкмәткеһе менән «Нимә күрҙең?» тигән шиғыр ҙа оригиналь яңғырай. Лирик героиня үҙ алдына биш һорау ҡуя: был донъяла нимә күрҙең, нимә белдең, нимә ҡалдыраһың, ниндәй васыятҡа тоғроһоң, үкенесең бармы. Бөтә һорауҙарға ла ҡыҫҡа ғына, әммә ифрат төплө яуап ҡайтарыла.

Анафора тип аталған стилистик алымға М. Хисамова йыш ҡына мөрәжәғәт итә. Шуға бер миҫал: «Ҡара көндәремдең аҡ ынйыһы». Ул традицион (дүртәр юллы) дүрт строфанан тора. Строфаларҙың дүртеһе лә «ҡара» һүҙе менән башлана. Автор әйтергә теләгән фекер шиғырҙың һуңғы строфаһында бик матур һәм аңлайышлы итеп асып һалынған:

*Ҡара көндәремдең аҡ ынйыһы...*
*Тамсы нур ҙа етә кешегә.*
*Шул тамсыны яҡынынан тапмай,*
*Күпме йәндәр ерҙә күшегә...*

Ошо шиғырҙан һуң, Миңлегөл Хисамованың күп кенә әҫәрҙәрендә лирик героиняның характер үҙенсәлектәре, уның күңел торошо, уй-кисерештәре сағылдырылған, тиһәм, әллә ни яңылыҡ булмаҫ. Сөнки лирик поэзияла башҡаса булыуы мөмкин түгел. Шулай ҙа был әҫәрҙәрҙең ҡайһы берҙәренә туҡталып китмәй ярамаҫ.

«Йырым ҡалды»ның тәүге өс строфаһында автор әйтергә теләгән фекер бигүк аңлашылып бөтмәһә лә, дүртенсеһенә һүҙ тейҙерерлек түгел:

*Күңелемдең көҙгө һағышына*
*Серҙәш булып атлап килгәндә,*
*Мин ҡәҙерһеҙ минуттарҙы ҡыуҙым,*
*Тоғро йырым ҡалды эргәмдә...*

Ә инде «Үҙ самам бар»ҙа лирик героиняның образы уғата сағыу итеп

һүрәтләнгән. Ул ярамһаҡ кеше түгел, алтын ҡашыҡ тотмаған; яңғыҙ башы ҡалғанда ла түрәләр алдында бөгөлмәгән.

Миңлегөл Хисамованың хистәргә бирелеүсән, тыйнаҡ, ғәҙелһеҙлектәрҙе, рәнйетеүҙәрҙе ауыр кисерһә лә, уларҙы гәфү итергә һәләтле, шул уҡ ваҡытта ғорур тәбиғәтле, кәрәк саҡта үҙ һүҙле һәм еңмеш холоҡло лирик героиняһы менән беҙ уның «Йәш үлән эҙенән...», «Күрәһең, күнәһең бар...», «Тик үҙемсә...», «Зарланмайым», «Етмәне...», «Йыр ҡала», «Даръяларҙа йөҙәм», «Донъя хәлен уйлап...», «Юғалтыуҙар көс һәм ныҡлыҡ бирҙе...», «Ишетмәһә ишетмәҫтәр...», «Тынысланыр йәнең...» тигән шиғырҙарында ла осрашабыҙ.

Әгәр «Йәш үлән эҙенән...»дә лирик героиня, үҙ-үҙе менән һөйләшкәндәй итеп һәм үҙенең һыҙланыуҙарын еңеп:

*Үрһәләнмә, йәнем, ау эсендә,*
*Йырылып сыҡ яҙғы ташҡындай.*
*Йәшмә төҫлө йәш үләндәй ҡалҡын,*
*Юғалырға үҙең ашҡынма... –*

тиһә, «Күрәһең, күнәһең бар...»ҙа иһә ул, халыҡ телендәге «күрәһеңде күрмәй, гүргә инеп булмай» тигән әйтемде күҙ уңында тотоптор, бәлки, ниндәй генә ауырлыҡтарға осраһаң да, «Ерең бар бит имләргә,//Ашыҡмасы иңрәргә...» тип кәңәш итә.

Әгәр йәшертенерәк мәғәнәле «Уҙғандарҙа...» исемле шиғырҙың лирик героиняһы «Донъя бик шәп булмаһа ла, // Көсөм юҡ та, рухым ныҡ» тиһә һәм ошо фекерен түбәндәге юлдар менән йөпләп ҡуйһа:

*Ниәтемә етермен бер,*
*Йәйәүләп йөрөһәм дә.*
*Йөрәгемдә йырым шыта*
*Уйҙарым бөрөһөндә,*

икешәр юллы ете строфанан торған «Тик үҙемсә...»лә иһә, тормоштоң асылы тураһында уйланғанда, уның тағы бер характер үҙенсәлеге асылып киткәндәй:

*Атлата ул ерҙең өҫтәренән,*
*Арып йығылғансы көстәреңдән.*
*Ә мин риза ошо йәннәтемә,*
*Ҡаршымын тик бары йәлләтеүгә.*

Анафора алымына таянып яҙылған «Зарланмайым» һәм «Етмәне...» тигән шиғырҙар ҙа мотивтары менән бербереһенән алыҫ түгелдәр. Тәүгеһенең лирик героиняһы барына ҡәнәғәт, риза булып йәшәүсе зат һымағыраҡ килеп баҫһа, икенсеһенеке иһә башта үҙенең кәйеф-сафаһы менән уртаҡлаша ла, һуңғараҡ «Һүрәнләнде инде көн йөҙө,//Шымсы һымаҡ баҡты төн күҙе...» тигәнерәк һығымта яһап ҡуя. Һәм шунда уҡ, йәнәш кенә торған «Йыр ҡала» исемле шиғырҙа, лирик героиня үҙүҙен тынысландырырға ашыға:

*Тәҙрәләрҙән ҡояш яҡты төшә,*
*Аҡ таң ата йәнә ҡурсалап.*
*Моң ағылыр ҡалам иртәһенә,*
*Һөйөү һүҙе булып йыр ҡала.*

«Зарланмайым» менән «Етмәне...»гә «Донъя хәлен уйлап...» тигән шиғыр килеп ялғана. Сал ҡышына яҡынайғанын һиҙеп-тойоп йәшәүсе лирик героиняның күңел торошо бында бик матур итеп һүрәтләнгән. Берсә яманһыуыраҡ, берсә үкенеслерәк хис-тойғо уятҡан «Йырланаһы йырҙар ымһындыра» тигән һүҙбәйләнеш тә хәтерҙә эҙ ҡалдырмаҫлыҡ түгел. Бер-береһенә һылашып торған рифмалар иһә шағирәлекте күрһәтеүсе фактор.

«Даръяларҙа йөҙәм», «Юғалтыуҙар көс һәм ныҡлыҡ бирҙе...», «Ишетмәһә ишетмәҫтәр...» тигән шиғырҙарҙа лирик героиняның характер үҙенсәлегенә яңы һыҙаттар өҫтәлә. «Даръяларҙа йөҙәм»дә, әйтәйек, ул үҙен «Дауылдарҙы еңер кеше мин!» тип танытһа, «Юғалтыуҙар көс һәм ныҡлыҡ бирҙе...»лә уның ысынлап та көслө рухлы, юғалтыуҙар кисергәндә лә бирешмәгән, киреһенсә, йәшәү дәрте менән янған кеше икәнлеге күренеп тора. «Ишетмәһә ишетмәҫтәр...»ҙә иһә лирик героиня көтөлмәгәнсәрәк асылып китә: ул бер кемде лә күңеленә яҡын юллатмаған, уның бөтә йыуанысы, илһам сығанағы – тәбиғәт булған. «...Тыңлап

ятам йылға шауын,//Йылғаларҙан йырҙар отам», ти ул. Шиғырҙың һуңғы строфаһында лирик героиняның бөтә булмышы, хәл-әхүәле сағылыш тапҡан шикелле:

*Тик күңелем барыбер яңғыҙ,*
*Яңғыҙлығым яңғыҙ һүнә,*
*Шәмсыраҡтай янып бөтәм,*
*Сабыр итәм, йәнем түҙә.*

Ниһайәт, «Тынысланыр йәнең...». Уны М.Хисамованың быуат башындағы тәүге ун йыллыҡты ослап ҡуйған шиғыры тиергә булалыр. («Ағиҙел», 2010, 5-се һан). Дүрт кенә строфанан торған (Миңлегөлдөң шиғриәтенә хас сифаттарҙың береһе – тап бына ошо ҡыҫҡалыҡта ла инде!) һәм тыштан ябай ғына күренгән был шиғыр ерҙә йәшәүҙең асылы тураһында уйланыуҙарға ҡоролған. Лирик героиня үҙ алдына бик күп һорауҙар ҡуя. Ни өсөн шатлыҡ-һөйөнөстәр, мәҫәлән, көйөнөстәр менән йәнәш йөрөй? Ни өсөн донъя айышы үҙе бер сер? Ни өсөн тормош өйөрмәһенә эйәреп, сәсәрҙәй булып йүгерәбеҙ, янабыҙ-көйәбеҙ ҙә, «Һуңғы төйәгебеҙ – тыуған ергә //Күҙ йәштәре булып тамабыҙ?..». Минеңсә, риторика ла, фәлсәфә лә етерлек был һорауҙарҙа. Ҡайһы яҡтан киләһең бит уларға! Бөтә ғиллә лә – шунда.

Ғәжәп, ошоға тартым һорауҙар **Гүзәл Ситдиҡовала** ла яңғырап киткеләй. «Ҡанундар» тигән шиғырҙың лирик героиняһы, мәҫәлән, ерҙә йәшәү тәртибенең ҡасан һәм ҡайҙан килеп сығыуы, ул тәртиптең кем тарафынан уйлап табылыуы һәм урынлаштырылыуы хаҡында баш вата:

*Мәңгелекте теҙгә бөгөр төҫлө,*
*Ҡанун уйлап бәндә үртәлә,*
*Ә ҡануны бөгөн таман булһа,*
*Өр-яңыһы кәрәк иртәгә.*

«Кеммен?..» тигән шиғырҙың лирик героиняһы иһә уғата ла ҡатмарлыраҡ һорауҙарға яуап эҙләй. Нимә ул йән? Йән нимәнән яратылған? Нимә ул тән? Йәнде йөрөтөүсе һауытмы? Әллә йән үҙе бер һауытмы?

Был шиғырҙарҙың икеһе лә Г. Ситдиҡованың яңы быуатты асып ебәргән «Һәр кешенең – үҙ ҡояшы» тигән шәлкеменән («Ағиҙел», 2001, 3-сө һан). Шәлкемгә ун алты шиғыр тупланған. Уларҙың күбеһе («Һыуыҡҡояш сабынында», «Ямғыр булып...», «Ғүмер шәме», «Сағым», «Айһыҙҙарға», «Ай һәм Ҡояш», «Ҡанат», «Аҡ юл – юлаҡ», «Шағир йыры – Миңеште», «Аҡ күлдәк», «Бирнә») иғтибарҙы йәлеп итерлек. Йөкмәткеләре менән дә, һүрәтләү саралары йәһәтенән дә.

Дөрөҫ, Гүзәлдең строфаларға бүлмәйсә, тотош юлдар теҙмәһенән торған шиғырҙары уҡыусыға тәьҫир итеү көсөн, бәлки, бер аҙ юғалта ла төшәләр. «Ямғыр булып...» исемле шиғырҙа, әйтәйек, дүрт тапҡыр ҡабатланған һәм әҫәрҙе мәғәнәүи яҡтан дүрт киҫәккә бүлгән «Һыуҙан ҡурҡам, ҡурҡам уттан...» тигән рефрен булмаһа, лирик героиняның «Ямғыр булып яуырмын бер//Үҙем ятыр гүрҙәргә» тигән һығымтаһын уҡыусы нисегерәк ҡабул итер ине икән? Ижад практикаһында, төрлөлөккә ынтылған хәлдә лә, күнегелгән, күптән һыналған формаларға тоғролоҡ һаҡларға тырышыу хәйерлерәктер, моғайын. Дүртәр юллы өс строфанан торған «Ай һәм Ҡояш» тигән шиғыр ана нисек матур яңғырай! Үҙе ыҡсым, үҙе фәһемле: бала кешегә һәр ауылдың үҙ ҡояшы, үҙ айы булғандай тойолһа, мәктәптә уҡый башлағас, ул Ҡояштың да, Айҙың да берәр генә икәнлегенә төшөнә; ә бына тормошҡа ҡарашы киңәйгән лирик героиня өсөн «Һәр кешенең – үҙ ҡояшы,//Һәр кешенең – үҙ айы». Һәм уның менән килешмәү мөмкин түгел.

Әлбиттә, строфаларға бүленмәгән өсөн генә Г. Ситдиҡованың шиғырҙарына ҡырын ҡараһаҡ, ғәҙелһеҙлек булыр ине. Улар, өҫтә әйтелгәнсә, ысынлап та иғтибарҙы тарта. Ҡоро һүҙ булып яңғырамаһын өсөн, тағы бер шиғырға туҡталайыҡ. «Ғүмер шәме» тип атала ул. Кеше ғүмере тураһында ла, яҡтылыҡ өләшкән шәм хаҡында ла

шиғырҙар юҡ түгелдер, эҙләй китһәң. Ә бына Г. Ситдиҡова был ике һүҙҙе йәнәш ҡуйып, бәйләнешкә индергән дә, үтеп барған ғүмерҙе ике остан янған шәм менән сағыштырған һәм шул рәүешле өр-яңы образ тыуҙырған. Артабан, быҫҡып ҡына янған шәмде быҫҡып ҡына үткән ғүмергә тиңләп, был образдың йөкмәткеһен уғата ла тәрәнәйтеүгә ирешкән: лирик героиняның һис кенә лә быҫҡып янғыһы килмәй. Һәм ул «Тик ыҫланып, күрер-күрмәҫ кенә //Йәшәүҙәрҙән бармы икән йәмдәр?!» тигән риторик һорау ҡуя. Һорауға аныҡ ҡына яуап талап ителмәһә лә, лирик героиня ахыр сиктә үҙенең ҡарашын һәм теләген уҡыусынан йәшермәй:

*Күмер түгел, көлдәр генә ҡалһын,*
*Янып бөтмәй ҡалмаһын тик һүнеп.*

Егерме дүрт юлдан торған «Ҡанат» исемле шиғыр ҙа фәһемле күренә. Был әҫәрендә автор лирик героиняның фекерләү ҡеүәһен эшкә егеп, әсәләрҙең дөйөмләштерелгән портретына яңы бер һыҙат өҫтәгән. Тәүге дүрт юлда (шартлы рәүештә, әлбиттә, сөнки шиғыр әүәлгесә строфаларға бүленмәгән) ул «Ҡанаттарым минең – әсәйемдән, //Хаталарым иһә – үҙемдән» тип танһа, һуңғы ике юлда инде бөтә хаталарҙы, етешһеҙлектәрҙе үҙ өҫтөнә ала:

*...Ҙурлар ерем булһа – әсәйемдән,*
*Хурлар ерем булһа – үҙемдән.*

Район гәзитендә эшләгәндә байтаҡ йылдар, көн дә тип әйтерлек ябай хеҙмәт кешеләре менән аралашып йәшәгәнгә күрәлерме, Гүзәл Ситдиҡова шиғриәтендә йыш ҡына халыҡ аңынан, халыҡ аҡылынан, халыҡ йолаларынан үҫеп сыҡҡан мотивтар яңғырап китә. Сәс толомона бәйле юрауға таянып яҙылған «Аҡ юл – юлаҡ» тигән шиғырҙа, мәҫәлән, автор, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә итеп, тыуған ерҙән дә ҡәҙерлерәк һәм яҡынылраҡ урын юҡлығын иҫкәртә:

*Уралыма өҙөлөп ҡайтам*
*Ете диңгеҙ, ил урап.*
*Сәс ҡалдырам юлаҡ - юлаҡ*
*Үткәндәргә юл һорап,*
*Киләсәккә юл юрап.*

Ә «Бирнә» тигән шиғырҙың тамырҙары бөтөнләйе менән ауыҙ-тел ижадына барып тоташҡан. Әҫәрҙең һуңғы дүрт юлы (шиғыр строфаларға бүленмәгән) быға асыҡ дәлил:

*Ҡыҙыл башлы һөлгө сиктем,*
*Наҕыштары – Һомай ҡош,*
*Һомай ҡошло өйҙә генә*
*Йәшәрҙәргә, Хоҙай, ҡуш.*

«Бирнә»нең дауамы булып «Яҙмыш – таш» («Ағиҙел», 2005, 12-се һан) тора, тиергә мөмкин. Уға ҡыҙын кейәүгә оҙатҡанда әсәнең «Барған ереңә таштай бат» тигән теләге эпиграф итеп алынған. Боронғонан килгән был халыҡ әйтеменең беҙҙең заманда, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, кире мәғәнәлә йышыраҡ осрауы хаҡында көрһөнөп тә, әсенеп тә яҙа шағирә:

*Һирәгерәк әммә хәҙер*
*Әүерелеүсе ташҡа.*
*Диңгеҙҙәре һайыҕамы –*
*Заман башҡа, заң башҡа.*

Беҙҙең һәммәбеҙҙе лә атлаған һайын тиерлек өйкәп торған «бәхет» төшөнсәһе тураһында ла Г.Ситдиҡова үҙенсәлекле генә фекер йөрөтә. Иҫ киткес тормошсан яңғыраған һәм халыҡсан тел менән яҙылған «Айһыҙҙарға» тигән шиғырҙың лирик героиняһы биргән өгөт-нәсихәт менән килешмәүсе табылыр-табылыуын, әммә ундайҙар күп булмаҫ:

*Тулҕан ай ул – түҙгәнгә,*
*Бәхет – көтә белгәнгә.*
*Айҙан да ҙур сабырлыҡ бир*
*Айһыҙ төндәр килгәндә.*

Туранан-тура «Бәхет» тип аталған икенсе бер шиғырында («Ағиҙел», 2002, 6-сы һан) автор, әхлаҡ принциптары юғарылығынан ҡарап, был төшөнсәнең нигеҙҙәрен нисек аңлауы менән уртаҡлаша: әгәр бәхетеңде күрмәй уҙһаң, уны дуҫың табышһын һәм һинең менән бергә шатланһын;

әгәр дуҫың менән аймылышһаң, уны бәхет эҙләшһен. Дүртәр юллы ике генә строфанан торған «Өмөт» тигән шиғырҙы ла(«Ағиҙел», 2005, 12-се һан) ошо юҫыҡта ҡарарға мөмкин. Уның лирик героиняһы, күкте болот ҡаплағанда ла, «Бар ул ҡояш, ҡояш бар ул!» тигән ышаныс менән йәшәргә саҡыра уҡыусыны.

Теге быуаттың ахырында – быныһының башында сәйәсмәндәр донъяһында ҡайнаған шағирә Гүзәл Ситдиҡова, һирәк-мирәк кенә булһа ла, үҙенең ижадында был өлкәне лә ситләтеп үтмәй. Дөрөҫ, башҡалар һымаҡ артыҡ сиселеп китмәй: шәхсән ҡараштарын ҙур һаҡлыҡ менән генә белдерә. Ошо йәһәттән «Сағым» тигән шиғыр – ғәйәт ғибрәтле әҫәр. Ул мәҫәлгә лә тартым, ләкин мәҫәл түгел. Дөрөҫөрәге – аллегория алымына ҡоролған шиғыр. Унда һүҙ үҙ ашын екһенмәй, ят мөхиткә ҡыҙыҡҡан «колорадо ҡуңыҙы» хаҡында бара. Һәм ошо образ аша автор ярайһы уҡ тәрән фекер әйтеүгә өлгәшкән: «...Ялған алтын сағымынан // Алдырғап ҡалған халҡым». Ҡыйырҡыймаҫ ҡына булһа ла, «Аҡ күлдәк»тә лә сәйәси мотив яңғырап киткән:

*Өҫтәремә кейер инем,*
*Аҡ күлдәгем – йәл генә.*
*...Кергә ҡатҡан илде баҫты*
*Кер күтәрер йәнлеләр.*

Был мотивты «Каруанһарай», «Диңгеҙ кистерһәләр...», («Ағиҙел», 2002, 6-сы һан), «Башҡорт иле», «Система» («Ағиҙел», 2005, 12-се һан) тигән шиғырҙарҙа ла шәйләргә мөмкин. «Диңгеҙ кистерһәләр...» – строфаларға бүленгән шиғыр. Уның «Димсе диңгеҙ кистерә» тигән тәрән йөкмәткеле һәм бик урынлы яңғыраған эпиграфы ла бар. Тағы ла шул аллегория алымына таянып, автор баҙарҙағы алдау-йолдауҙарҙы һиҙҙермәйсә генә сәйәсәт юҫығына күсерә лә, реаль тормошобоҙҙа һәр төрлө димләү-маҡтауҙарҙан һаҡ булырға өндәй.

«Башҡорт иле» тигән шиғырҙа Г. Ситдиҡова тыуған халҡына хас дөйөм сифаттарҙы, уның ҡайһы бер характер үҙенсәлектәрен оҫта ғына асып һалған. Шиғырҙы ослап ҡуйған «Иман сәсһен, дуҫ күбәйтһен, //Торған ерен ожмах итһен //Башҡорт иле!» тигән теләк тә күңелгә хуш килерлек. Тик бына шиғырҙың башындараҡ яңғыраған «Иманым, тип, ил-ғәмем, тип //Ҡанын ҡойған, йәнен ҡыйған...» тигән юлдар тулыһы менән ысынбарлыҡты сағылдыра микән? Әйе, һүҙ юҡ, башҡорт ҡанын да ҡойған, йәнен дә ҡыйған, ләкин ҡанын ҡойған саҡта алғы планда нимә торҙо икән: иманмы, әллә иҡтисади һәм сәйәси азатлыҡ мәсьәләләреме? Ә бына «Система» шиғырына һүҙ тейҙерерлек түгел, минеңсә. Дауаханала тамырға дарыу ебәрә торған система унда, әгәр мин дөрөҫ аңлаған булһам, йәмғиәт ҡоролошо менән йәнәш ҡуйылған. Әгәр шулай була ҡалһа, был – шағирәнең поэтик табышы, тимәксемен.

Иман тураһында һүҙ сыҡҡас, Г.Ситдиҡованың «Сабыр доғаһы» һәм «„Йәшен" сүрәһенән» тигән шиғырҙарына ла («Ағиҙел», 2007, 12-се һан) туҡталып китеү урынлы булыр. «Сабыр доғаһы» – ҡаршылыҡлыраҡ фекер уята торған шиғыр. Ул ҡаршылыҡ эпиграф урынына ҡулланылған «Үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы, эсеп уҙғандарҙы халҡыбыҙ егермense быуаттың 80-се йылдарына тиклем зыярат тышына ҡуя ине» тигән һүҙҙәрҙән үк башлана кеүек. Шиғырҙың тәүге юлдарында автор беҙҙең заманда зыяраттарҙың киңәйеүен фажиғәле үлемдәрҙең артыуына бәйләй. Ләкин, күп тә үтмәй, «Тик заманға һылтанмайыҡ әле – //Ҡай заманда еңел йәшәлгән?!» тип аҡлана башлай. Бер аҙҙан Изге Китапҡа һылтана: «Ер йөҙөндә күргән бар ауырлыҡ // Ожмах кеүек кенә тойолор!» Тимәк, баҡыйлыҡта кешене уғата ла зәһәрерәк ҡыйынлыҡтар һәм ауырлыҡтар көтә? Ахыр сиктә зыяраттарҙың киңәйеүе (икенсе төрлө әйткәндә – үҙ-

үҙҙәренә ҡул һалыусыларҙың, эсеп үлеүселәрҙең күҙгә күренеп ишәйеүе) баҡыйлыҡҡа күскән ҡанбабаларбыҙға япһарыла: йәнәһе, улар баҡыйлыҡҡа сабыр доғаһын тапшыралмай күскәндәр, уларҙың «Доғаларын белмәй йәшәгәнгә//Ҡыйралып та бара донъяһы». Әлбиттә, бында байтаҡ дәлилдәр, тере факттар килтереп, автор менән йәнле бәхәс ҡороп ебәрергә булыр ине. Ләкин уны кәрәк тип тапмайым. Сөнки шағирә үҙе лә, зирәк аҡыллы уҡыусы ла донъялар ҡыйратылыуҙың төп сәбәбе доғаларҙа түгеллеген бик яҡшы аңлайҙар, тип уйлайым.

«Йәшен» сүрәһенән» исемле бәләкәй генә шиғырҙы «Сабыр доғаһы»ның игеҙәге тиергә була. «Ҡайғы-хәсрәт – ул күк күкрәү генә» тип ебәрелә бында хатта. Шиғыр «Бәхет орлоҡтары шытһын өсөн //Түккән тирең, түккән йәшең кәрәк» тип тамамлана. Тир түгеү – аңлашыла, тәбиғи хәл. Ә бына йәш түгеү?! Шулай ҙа йәш түкмәйсә генә бәхеткә ирешеп булмай микән ни? Ниндәй аяныс!

Гүзәл Ситдиҡованың быуат башындағы поэзияһында автор менән лирик героиня араһындағы сиктәрҙең юйылып бөтә яҙған саҡтары ла булғылай, минеңсә. Метафораға ҡоролған «Һыуыҡҡояш сабынында» исемле шиғырҙағы «Мең балҡышлы сәскә түгел //Күрән генә гөлләмәм» тигән юлдар, әгәр минең фаразым дөрөҫкә сыҡһа, авторҙың үҙ ижадына биргән баһаламаһы түгелме һуң? Шулай була ҡалһа, «Күбәләргә һалам инде, //Үләнем сейле-бешле» тигән юлдар бер аҙ аптырауға һала ла баһа: сейле-бешле үлән тора-бара күгәреп серемәҫме? Тыйнаҡ булыу – һәйбәт сифат. Ләкин тыйнаҡ булып күренергә тырышҡанда ла һаҡлыҡ күрһәтергә кәрәктер ул.

Ә бына «Тау ҡыҙы», «Ғәмәл дәфтәре», «Зәңгәр толпар» тигән шиғырҙар («Ағиҙел», 1995, 9-сы һан) уҡыусыла икеле-микеле фекер уятмаҫ. Уларҙың тәүгеһендә лирик героиня үҙен тау ҡыҙы тип атай, уға табына. Шиғырҙағы алты строфаның һәр ҡайһыһы героиняның тормош юлына, характерына хас ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе һүрәтләүсе юлдар менән тамамлана: «Тау артырға тауҙар өйрәтте», «Йығылмаҫҡа тауҙар өйрәтте», «Юл табырға тауҙар өйрәтте», «Сер һаҡларға тауҙар өйрәтте» һ.б.

«Ғәмәл дәфтәре» яҙылышы-яңғырашы йәһәтенән бер аҙ ризаһыҙлыҡ уятып ҡуйғылай-ҡуйғылауын, әммә барыбер һәйбәт шиғыр ул. Формаһы үҙенсәлекле: лирик героиняның донъялыҡта ҡылған хаталары ла, күрһәткән изгелектәре лә йәнәһе уның ғәмәл дәфтәренә яҙып барыла. Әҫәрҙең дөйөм йөкмәткеһенән күренеүенсә, лирик героиняның бөтә ҡурҡҡаны – нахаҡлыҡ. Үҙен «Ҙур Ғаләмдең кескәй йән эйәһе» тип атауы ла бер яңылыҡ. «Уттан алыр, һыуға һалмаҫ, тиеп // Өмөт тотҡан булам дуҫтарыма» ла хәтерҙә ҡалырлыҡ.

«Зәңгәр толпар» тигән шиғырҙы «Һыуыҡҡояш сабынында»ның көҙгөләге кире сағылышы тиергә була. Сөнки быныһында автор, үҙенең шиғриәттәге урыны һәм яҙмышы хаҡында уйланғанда, һағыраҡ фекер йөрөтә, «сейле-бешле» үләнгә урын юҡ. Шиғриәтте йүгәнһеҙ ат менән сағыштырыуы ла ҡыҙыҡлы. Әлбиттә, был сағыштырыу менән бәхәсләшеп тә алырға мөмкин. Әммә дөрөҫлөк Гүзәл яғында кеүек тойола миңә. Шулай ҙа киләсәктә, тормош мәшәҡәттәренән бер аҙ арына төшкәс, шиғриәткә яуаплыҡты уғата ла арттырып, кәрәк саҡта уны ауыҙлыҡлап та тотоуын теләр инем уға.

Бынан ун алты йыл элек «Шиғриәттә заман һулышы» тигән мәҡәләмдә мин былай тип яҙғайным: «Хатта йәш шағирәләребеҙҙең береһе **Тәнзилә Дәүләтбирҙина** ла «үҙгәртеп ҡороу» алып килгән бәлә-ҡазаларға битараф ҡалмаған. «Беҙҙең тормош – хәҙер шайтан ҡуласаһы», «Сиктәр аша, ситән аша хәйер бирә күршеләр, был ахмаҡтар илен маҡтап, йылмайып күрешәләр» ти ул. Һәм ошо ҡыҫҡа ғына шиғри юлдарҙа ла беҙҙең

бөгөнгө иҡтисади хәлебеҙҙе ифрат үтемле, образлы итеп күрһәтә алған» («Ағиҙел», 2002, 6 - сы һан, 101- се бит).

Егерменсе быуатты Тәнзилә Дәүләтбирҙина ҡулына өс китабын тотоп оҙатты. Егерме беренсеһен ун өс шиғырҙы эсенә алған «Ҡош юлында һынау кисеп...» тигән шәлкем менән ҡаршыланы («Ағиҙел», 2001, 5-се һан). Яңы быуаттың тәүге ун йылында уның «Ағиҙел» биттәрендә донъя күргән алтмышлап шиғыры шулай уйларға форсат бирә. Өҫтә телгә алынған мәҡәләнән һуң үткән дәүерҙә ул үҙе лә, уның шиғриәте лә олпатлана төштө.

Т. Дәүләтбирҙинаның быуат башында ижад иткән әлеге алтмышҡа яҡын шиғырын бергә туплап күҙ уңынан уҙғарһаҡ, уларҙың үҙәгендә яңғыҙлыҡ исеменә тартҡан һәм шунлыҡтан баш хәрефтәр менән яҙылырға хаҡлы лирик героиня образы торғанлығын шәйләрбеҙ. Был героиня әҫәрҙән – әҫәргә күсә, шул рәүешле уның бөтә булмышы – холоҡ-фиғеле, характер үҙенсәлектәре, эске кисерештәре асыҡланғандан-асыҡлана бара, образ да тәрәнәйгәндән-тәрәнәйә. Лирик героиня менән автор араһында ҡайһы бер уртаҡлыҡтар һәм оҡшашлыҡтар ҙа осраштыралыр, бәлки. Ҡабатлауҙар ҙа күҙгә салынып киткеләй, ҡыҙғанысҡа күрә.

Әйткәндәр бушҡа яңғырамаһын өсөн, шиғырҙарҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт итеү хәйерлерәк булыр. «Бесәндән ҡайтҡанда», мәҫәлән, бала саҡ хәтирәләренә таянып яҙылған. Унда лирик героиняның атаһы образы ла ялтлап китә, йәйге тәбиғәт күренештәре лә бик матур итеп һүрәтләнгән. Метафораға ҡоролған «Ҡарағайҙар күктән нур имә», «Һөттәй күперек болот» һымаҡ сағыштырыуҙар ҙа шиғырға айырым бер йәм өҫтәп тора.

«Йәш сағымда миңә „болан" тиеп…» исемле шиғырға ла ойотҡоно бала саҡ хәтирәләре һалған. Шулай ҙа лирик героиняның булмышы, эске донъяһы, кисерештәре нескә хистәр, уй-тойғолар менән һуғарылған әҫәрҙәрҙә сағыуыраҡ асыла һымаҡ. Ошо йәһәттән үҙенең төҙөлөшө менән дә, йөкмәткеһе яғынан да «Хәҙер миңә бер ни кәрәк түгел...» тигән шиғыр иғтибарҙы йәлеп итерлек. Алтышар юлдан торған өс строфаның һәр ҡайһыһы тарҡау анафораға тап килгән «Хәҙер миңә бер ни кәрәк түгел...» тигән юл менән башлана ла, ике юлдан торған һуңғы строфалағы «Хәҙер миңә бөтә нәмә кәрәк!» тигән һүҙбәйләнеш әҫәрҙең мәғәнәһен йөҙ ҙә һикһән градусҡа бора ла ебәрә. Ниңә шулай? Сөнки тәүге строфала лирик героиняға донъяның ҡыҙығы киткәндәй, икенсе строфала – дуҫиштәре ситләшкәндәй, өсөнсө строфала уның йөрәге талғандай, күңеле арығандай тойола. Әгәр шиғырҙа һүҙ гел ошо тирәлә генә барһа, бик күңелһеҙ булыр ине. Бәхеткә күрә, өсөнсө строфаны ябып ҡуйған «Мине тапты һинең ышаныс!» тигән юл ярҙамға килә. Был юл шиғырҙың һуңғы строфаһына асҡыс хеҙмәтен үтәй, тиһәк тә, хата булмаҫ: ышаныс тыуғас, лирик героиняның кәйефе көтмәгәндә ыңғай яҡҡа үҙгәрә лә китә:

*Хәҙер миңә бөтә нәмә кәрәк!*
*Был донъялар – баллы алтын кәрәҙ!*

Ҡайһы берҙә лирик героиняһының эске кисерештәрен, күңел торошон тулыраҡ итеп асыу өсөн Т. Дәүләтбирҙина тәбиғәт күренештәренә лә мөрәжәғәт итә. «Хыялый төн», «Көҙ», «Көҙгө һағыш» тигән шиғырҙарҙа был айырыуса күҙгә ташлана. Билдәле булыуынса, йылдың көҙгө миҙгелен беҙ күберәк яҡты, матур буяуҙарҙа күрергә күнеккәнбеҙ. Халыҡ телендәге «көҙгө байлыҡ» тигән төшөнсә лә, бәлки, шуға бәйлелер. Ләкин хәҡиҡәткә тоғро ҡалһаҡ, көҙҙөң йыш ҡына Т. Дәүләтбирҙина шиғырындағыса саҡтарына ла шаһит булырға тура килгеләй бит: «Тышта моңһоу, шомло, ҡараңғы». Шуға күрә автор тәүге строфалағы:

*Көҙ ҙә килде. Килмәҫ кеүек ине.*
*Тышта моңһоу, шомло, ҡараңғы, –*

тигән юлдарҙың бер генә һүҙен үҙгәртеп һуңғы строфала ҡабатлай ҙа ашыға-ашыға:

*Ҡыш килһен дә, тиҙерәк*
*шыҡһыҙ донъя*
*Йәшеренһен ҡарға,*
*күмелһен!* –

тигән юлдар менән тамамлап ҡуя. Шиғыр тасуирлау сараларының муллығы менән дә күңелде үҙенә тартып тора. Яңысараҡ яңғыраған метафоралар, сағыштырыуҙар ҙа әҫәргә йәм өҫтәй. Ергә ҡойолған япраҡ, мәҫәлән, лирик героиня өсөн – сыбар түшәк тә, бер үк ваҡытта – һағыш та; шул «һағыш аша һулҡый ерҙең йөрәк ҡағышы...» (иғтибар итегеҙ: «йөрәк тибеше» урынына – «йөрәк ҡағышы»); ер өҫтөн япҡан япраҡ – ауыр уй, уны «күтәралмай ер ҙә ауырый» һәм «шуға донъя еүеш, эс бошорғос...».

Т. Дәүләтбирҙинаның быуат башындағы шиғриәтендә байтаҡ урынды мөхәббәт лирикаһы биләй. Был мәңгелек тема «Ҡаурыйын ҡойған ҡәләмгә...», «Китәм», «Һин юғалһаң», «Мөлдөрәмә тулы һыулы күлдәй...», «Ватыҡ сәйнүк», «Һинең кеүек мине кем яратыр...», «Һүҙ ҡушырға ҡурҡам һиңә...», «Мәғәнәһеҙ булып ҡалды донъя...», «Ҡаса торған мәл түгел был...», «Ғүмер тәртәһенән ырғып...», «Моңло йыр», «Икебеҙ» тигән шиғырҙарҙа төрлө яҡлап яҡтыртылған. Мөхәббәт утында яныусылар кисерә торған бөтә хис-тойғолар ҙа: һөйөнөстәр-көйөнөстәр ҙә, үкенестәр-һыҡтауҙар ҙа, юҡһыныуҙар-һыҙланыуҙар ҙа етерлек бында. Әлбиттә, уларҙың һәр ҡайһыһы хаҡында бер юлы һүҙ йөрөтөү мөмкин түгел. Шулай ҙа, уҡыусының иғтибарын йәлеп итеү ниәтенән, бер нисәһенә генә булһа ла (был шиғырҙарҙы «Ағиҙел»дең 2005 йылғы 10-сы һәм 2007 йылғы 4-се һандарында табырға мөмкин) туҡталып китһәк, зыян итмәҫ.

«Ҡаурыйын ҡойған ҡәләмгә...» тигән шиғыр тәүгә уҡығанда мәҙәгерәк күренһә лә, тора-бара уның үтә лә нескә, үтә лә саф тойғолар менән һуғарылғанлығына төшөнәһең: «Ынйы булып тамған» йыры «йөҙ йәшәрен» белһә лә, лирик героиня «Болотһоҙ бәхет ул – һөйөү, // Ә яңғыҙлығым – бәлә» тип танырға мәжбүр.

Яңғыраштары буйынса «Моңло йыр» менән «Икебеҙ» тигән шиғырҙар ҙа күңелгә йәтешле. Тик йөкмәткеләренә аныҡлыҡ индерелмәүе генә бер аҙ уйға һала һәм символистар стилен хәтергә төшөрөп ҡуя.

«Ғашиҡ ҡына ғүмер ҡәҙерен белмәй...» – мөхәббәт темаһына арналған бик матур шиғир. Уның айырыуса һуңғы строфаһы уйландырырлыҡ:

*Ғашиҡ саҡтар үткәс, хәҙер бына*
*Ғүмер үтеүҙәре аптыраҡ!*
*Әллә йәшәү татлы була бара,*
*Ер тиҙлеген әллә арттыра...*

Ләкин Т. Дәүләтбирҙинаның лирик героиняһын мөхәббәт утында янып, гел шунан ғына ғазап сигеүсе итеп күҙ алдына баҫтырһаҡ, дөрөҫлөккә тап килеп бөтмәҫ. Уның күңел тыныслығын боҙоп тороусы башҡа сәбәптәр ҙә етерлек. Шуларҙың иң әшәкеһе – мәкерлек. Әгәр «Уйҙар – мәке...» тигән шиғырҙың лирик героиняһы мәкерҙәрҙән ҡасып, уйҙары менән мәкеләргә батыуҙан да сирҡанмай икән, һис тә ғәжәп түгел. «Был көн – бөркөү...»ҙең дә лирик героиняһы ярлыҡауға мохтаж. Поэтик әҫәр буларaҡ, был шиғыр, минеңсә, бөтә яҡтан да килгән. Героиняның һыҙланыуҙары, эске кисерештәре метафорик сағыштырыуҙар ярҙамында үтемле, ышандырырлыҡ итеп асып һалынған. Хистәр бәрелеше бында тәбиғәт күренештәре аша бик оҫта һүрәтләнгән. «Нахаҡ» тигән шиғыр хаҡында һүҙ ҡуйыртыуҙың кәрәге юҡтыр, сөнки уның исеме үк әйтеп тора: үҙе тураһында атлаған һайын нахаҡ һүҙ ишетеп йөрөгән лирик героиня «Алсаҡ күңелемде һәр кем // Тапарға ғына тора» тип бошона. Йөкмәткеһе менән ифрат үҙенсәлекле «Дошманыма үлем түгел...» тигән шиғыр – лирик героиняның даирәһе гел дуҫ-иштәрҙән генә тормағанлығына үҙе бер ишара. Күләме яғынан бәләкәй генә ошо әҫәрҙә кешеләргә яла яғып, хәсрәт өләшеп

йәшәргә яратыусыларҙың типик портреты төҫмөрләнгән:

*Таңъа тиклем йөрөп сыъа,*
*Ҡаңъырып боҙоҡ уйҙан –*
*Йоҡо – йәннәт баҡсаһына*
*Хоҙай ҙур йоҙаҡ ҡуйъан!*

Бәхеткә күрә, Т. Дәүләтбирҙинаның лирик героинялары, күпме генә ҡыйырһытылмаһындар, улар барыбер ҙә көслө рухлы, тормош мәшәҡәттәре алдында иреп төшмәҫ, үҙҙәрен юғарыраҡ тотоусылырға баш бирмәҫ шәхестәр булып ҡалалар. Быны дәлилләү өсөн миҫалдарҙы күпләп килтерергә мөмкин.

Авторҙың көслө рухлы героинялары, менән беҙ «Ни һан Йыһан!..», «Уйым арта», «Ләззәтле һағыныу, йәнем...» тигән шиғырҙарҙа ла осрашабыҙ. «Уйым арта»лағы йәше олоғая башлаған лирик героиня ерҙә йәшәү мәғәнәһе, тормош асылы хаҡында уйлана. Юлында осраған кәртәләргә артыҡ иҫе китмәйенсә, оптимист булып ҡала:

*Бошонмайым үҙем бер нигә лә.*
*Рух – терәгем, аяъүрә киләм.*
*Үҙем үрләп менеп еткән тауъа*
*Үҙ ҡулдарым менән байраҡ әләм.*

Ҡарамаҡҡа «Ләззәтле һағыныу, йәнем...» – мөхәббәттә бер-береңә тоғролоҡ һаҡлауҙы бик матур һүрәтләгән ғәҙәти лирик шиғыр. Ләкин, һүҙ ошондай нәзәкәтле тема хаҡында барһа ла, әҫәрҙең үҙәгендә үҙ баһаһын үҙе яҡшы аңлаған, ғорур йәнле, шул уҡ ваҡытта хистәр донъяһынан арына алмаған лирик героиня образы торғанлығын шәйләмәү мөмкин түгел:

*Ваҡытлыса был айырылыу,*
*Танһыҡ ҡына юҡһыныу.*
*Мин бит беләм: һине арбар,*
*Күңелең яулар юҡ һылыу.*

*Мин үҙем дә ҡалъа кеүек,*
*Буй етмәҫлек бейекмен.*
*Һинең яндарыңда ъына*
*Башын әйгән кейекмен.*

Т. Дәүләтбирҙинаның быуат башындағы ижадында һирәк-мирәк кенә булһа ла фәлсәфәүи, ижтимағи-сәйәси, ғаилә, әхлаҡ темаларына арналған шиғырҙар күренгеләп киткеләй. «Көрәш» тигән шиғырҙың нигеҙендә, мәҫәлән, философия фәнендәге «йәшәйеш – ул ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың көрәше» тигән закон ята. Һүҙ бында «Эйе һәм Юҡ», «Аҡ һәм Ҡара», «Яҡшы менән Яман»,«Иблис менән Фәрештә», «Тыуым – Үлем», «Яуыз – Изге», «Йомарт – Һаран» төшөнсәләре тирәһендә бара. Шиғырҙың тәүге строфаһында автор «Был донъяға ниҙәр булған? // Был донъялар ҡайҙа бара?» тигән һорау ҡуя. Ләкин яуап таба алмай. «Ғүмер буйы көрәшергә көстө» ҡайҙан алырға, тип ҡул һелтәйһе генә ҡала.

«Ҡылысһыҙ биҙрә» лә – уйландырырлыҡ шиғыр. «Ҡолаҡһыҙ иҫке һауыт» миҫалында автор, тормош ул алдын да, артын да күрһәтергә мөмкин, шуға күрә унаң менән бик һаҡ булырға кәрәк, тигән фекерҙе ябай ғына, әммә образлы итеп асып һалған.

Тик беҙҙең заманға ғына хас хәлваҡиғаларҙы яҡтыртҡан шиғырҙар ҙа бар Тәнзиләнең поэтик арсеналында. Шуларҙың береһе – «Ҡурсаулыҡ». Унда һүҙ, тәбиғи әжәлдә көтмәйенсә, төрлө сәбәптәр арҡаһында донъялыҡтан ваҡытынан алда китеү хаҡында бара. Шуныһы мөһим: башҡаларҙан айырмалы буларак, Т. Дәүләтбирҙина был күренештең тамырҙарын барларға һәм асыҡларға тырыша:

*Мәлһеҙ үлем тора аңдып ҡына*
*Көрәшеүҙән ҡурҡып, бирешкәнде.*
*Аяп тормай*
*көслө рухы менән*
*Был донъяла күпкә ирешкәнде.*

*Ахрызаман етер мәлдә шундай*
*Аңһыҙ үлем булыр, тигән ҡарттар.*
*Аҙъын нәфсе итәгенә таъылып*
*Гел ҡыйралыш килер булъан арттан...*

«Күккә ашҡан байҙар»ҙа йыһан киңлегенә осоусы ҡалын кеҫәлеләр фашланған:

*Яҡынаям, тиҙер ул бахырҙар,*
*Күккә һыйынып, Аллаһ Тәғәләгә.*
*Бисмиллаһыҙ йыйған мал туҙҙырып,*
*Хаҡлыҡ эҙләүҙәрҙән ни мәғәнә?*

«Яһалма» тигән шиғыр тәү ҡарамаҡҡа юмор һымағыраҡ тойолһа ла, һис тә юмор түгел. Һүҙ бында – беҙҙең тормошта, көнкүрешебеҙҙә бөтә нәмәнең дә әкренләп яһалмаға әйләнә барыуы хаҡында. Был күренешкә авторҙың ҡарашы түбәндәге юлдарҙа белдерелгән:

*Яһалмаға өйрәнәбеҙ,*
*Организм күнегә.*
*Тик беребеҙ ҙә өйрәнмәй*
*Яһалма йән, күңелгә.*

Символик йәнәшәлеккә ҡоролған «Төрткөләшеп, кемуҙарҙан... » тигән шиғыр Назар Нәжмиҙең «Япраҡ» исемле шиғырын хәтерләтеп ҡуя. Япраҡтарға йән индереп, уларҙы тере кеше һымаҡ итеп күҙ алдына баҫтырыу аша шағирә ғәжәп үҙенсәлекле дөйөмләштереүгә ирешкән:

*...Нәфсе, көнсөллөк япраҡты*
*Һуңғы юлға оҙата:*
*Барыһын ел бергә өйөрә,*
*Барыһына ла боҙ ята.*

Т. Дәүләтбирҙинаның ҡайһы бер шиғырҙарында, бәлки, автобиографик һыҙаттар өҫтөнлөк итәлер. Ә бына «Иркәмен», «Таяныс», «Әсәйемдең күҙҙәрендә...», «Ағайыма» тигән шиғырҙар хаҡында фараз ҡылып тораһы юҡ – улар шағирәнең иң яҡын, иң ҡәҙерле кешеләренә бағышланған. Әйтергә кәрәк, был әҫәрҙәрҙә, минеңсә, бер ниндәй арттырыу, урынһыҙға маҡтау-маҡтаныу юҡ. Бөтәһе лә Тәнзиләсә: ябай ҙа, ихлас та, эскерһеҙ ҙә.

Быуат башында ижад иткән байтаҡ ҡына шиғырҙарын күҙ уңынан уҙғарғандан һуң, шуны әйтке килә: Тәнзилә Дәүләтбирҙина – бөгөнгө башҡорт поэзияһының күренекле, тотанаҡлы һәм тотороҡло вәкиле. Тәбиғәт уға үҙ байлығын мул биргән. Ләкин рустарҙа шундай бер әйтем бар – уны үҙебеҙсәгә былайыраҡ тәржемә итергә булалыр: кемгә күп бирелгән – уға талап та ҙурыраҡ. Тәнзилә талаптың юғарылығын яҡшы аңлай. Юғиһә, ул үҙенең бер шиғырында былай тип яҙмаҫ ине:

*Кемдер, менеп ваҡыт толпарына,*
*Йыһандарға ҡарай юл ала.*
*Ә кемдеңдер тәтәй шиғырҙары*
*Үҙе менән бергә юғала.*

(«Сағыштырыу»)

Тәнзилә Дәүләтбирҙина киләсәктә, үҙенең потенциаль мөмкинлектәрен тағы ла тулыраҡ файҙаланып, алдына ҡуйылған юғары талаптарға артабан да тоғролоҡ һаҡлауын дауам итер тигән өмөт бағлаһаҡ, яңылышмабыҙ кеүек. Шағирәнең шаулар-гөрләр саҡтары алдараҡ әле. Шуға ышанып йәшәйек.

* * *

Был күҙәтеүҙәрҙә башҡорт поэзияһында үҙ аллы һәм шактай ҡеүәтле күренешкә әүерелгән ҡатын-ҡыҙҙар (шартлы рәүештә, әлбиттә) шиғриәтенең барлыҡҡа килеү һәм үҫеш юлдарын төҫмөрләп, уның XXI быуат башындағы емештәрен тәмләп ҡарау маҡсаты ҡуйылғайны. Маҡсаттың тәүге яртыһы тормошҡа ашты һымаҡ, ә бына икенсеһе – өлөшсә генә. Сөнки бер мәҡәлә сиктәрендә был ҙур майҙанды бер юлы һәм бөтә киңлегендә күҙаллау мөмкин түгел. Әлегә шуны ғына әйтә алам: ижадтары хаҡында бөгөн үк ауыҙ тултырып һөйләрлек шағирәләребеҙ бар, ҡанаттары нығынып килгәндәре лә байтаҡ. Улар ҙа иғтибар үҙәгенән ситтә ҡалмаҫҡа тейештәр. Әҫәр (уңышлымы ул, әллә бигүк түгелме) ташҡа баҫылған икән, мотлаҡ үҙ баһаһын көтә.

**Әнғәм ХӘБИРОВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# КИТАПҺЫҘ ӨЙ – ҠОШҺОҘ УРМАН



Башҡортостандың ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни, мәғариф, сәнғәти тормошон Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтенең баҫма продукцияһынан башҡа күҙ алдына килтереү ҡыйын. Ҡаҙаныштары ярайһы: бына туҡһан йылдан ашыу халыҡтың рухи ҡиммәттәрен арттырыуға, милләт-ара татыулыҡты нығытыуға тос өлөш индерә. Республикабыҙҙа берҙән-бер дәүләт нәшриәтендә ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр, нәфис әҙәбиәт, дәреслектәр һәм уҡыу ҡулланмалары, һүҙлектәр һәм белешмәләр, календарҙар, плакаттар һ. б. төрлө баҫма продукция сығарыла. Өҫтәүенә, 2006 йылдан алып унитар предприятие етештереү күләмен арттыра бара... Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин һәм Зәйнәб Биишева исемендәге премиялар лауреаты, философия фәндәре кандидаты З. М. Тимербулатов етәкләгән «Китап» нәшриәте – Рәсәй Федерацияһында иң яҡшы 100 нәшриәт, ә милли нәшриәттәр араһында – алдынғылар иҫәбендә. Түбәндә «Нәшриәт һәм хәҙерге әҙәби процесс» тигән темаға әңгәмә тәҡдим итмәксебеҙ.

**– Зөфәр Мөхтәр улы, ишетеүебеҙсә, һуңғы осор «Китап»та байтаҡ үҙгәрештәр, яңырыштар тоҫмаллана, раҫ икән – улар ниндәйерәк юҫыҡта?**

– Эш шарттары һиҙелерлек яҡшырҙы, сөнки адресыбыҙ үҙгәрҙе. Октябрь проспектындағы 2-се бинала – Өфө полиграф комбинаты менән өйҙәшбеҙ – ныҡлап төйәкләндек. Күсенеү мәшәҡәттәренә ҡарамаҫтан, ҡайһы бер проекттарыбыҙ республика, федерация, хатта халыҡ-ара күргәҙмә һәм йәрминкәләрҙә юғары баһаларға лайыҡ булды. Баҫмаларҙың полиграфик сифатына дәғүәләр кәмей, дизайн, реклама, маркетинг һ.б. йәһәттән алға китеш ҙур. Яңы технологиялар, яңы сериялар үҙләштерелә. Беҙҙең китаптар, – гүйә, Башҡортостаныбыҙҙың визит карточкаһы, дуҫлыҡ илсеһе, уларҙы Ер шарының һәммә тарафтарында осратырға мөмкин. Был, берҙән, ҡыуандыра, икенсенән, оло яуаплылыҡ өҫтәй, заман менән аҙымдаш атлауҙы, тимәк профессионализмды туҡтауһыҙ камиллаштырыуҙы талап итә. Тәбиғи, һөҙөмтәлә һөйөнөстәргә һәм көйөнөстәргә юлығабыҙ, проблемаларға тарыйбыҙ...

“Ағиҙел” ҡунағы

**– Һуңғы фекерегеҙгә ентеклерәк туҡталырға мөмкиндер бит?**

– Әлбиттә, мөмкин.

...Күптән түгел миңә күрше регионларҙың береһендә үҙемдеке ише вазифа биләгән иптәш менән әңгәмәләшергә насип итте. Уртаҡ, оҡшаш мәшәҡәттәрҙе уртаға һалдыҡ. «Беҙ Яҙыусылар союзы менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ», – тиеүем дуҫты ныҡ ҡына ғәжәпләндерҙе, улар быңдай эшмәкәрлекте күптән «тоҙлаған» икән. Эйе, һуңғы биш

йыл эсендә генә лә нәшриәттең художество советы һәм Союз идараһы баҫмаларҙы планлаштырыу, прогнозлау йәһәтенән эшлекле тәҡдимдәр индергәйне, уларҙың байтағы ғәмәлгә ашты. Үкенескә күрә, үҙ-ара ижади бәйләнештең кире яҡтары ла ҡайсаҡ үҙен һиҙҙертеп ҡуя, бәкәлгә һуға.

Хикмәт шунда: ҡулъяҙмаларҙы, бигерәк тә теге йәки был әҙиптең һайланма әҫәрҙәрен, бер, ике, өс... йә иһә күп томлығын нәшриәткә тәҡдим иткәндә идара тарафынан, әйтергә яраһа, ҡарарҙар, юлланмалар һ.б. корпоратив солидарлыҡ, йәғни, төртмәсле йырҙағыса, «ағай-эне аҡ мыйыҡ, бер-беребеҙҙе ҡаҡмайыҡ» тигәнерәк принциптан сығып тултырыла. Мәҫәлән, һуңғы ике йыл эсендә генә лә беҙгә шундай утыҙға яҡын протокол күсермәһе килеп ятты. Иҫәпләп ҡараниһәң, иҫең китер: Союздан йәмғеһе етмеш томдан ашыуыраҡ ҡулъяҙмаға рекомендация алынған. Уларҙы китап итеп нәшерләү өсөн... өс йыл ваҡыт һәм илле миллион һум самаһы финанс кәрәгәсәк. Иҡтисади көрсөк бәкәлгә һуҡҡан осорҙа бит әле! Ниңә был хаҡта һүҙ ҡуйыртабыҙ һуң? Сөнки 2001 йылдағы дөйөм йыйылышта яҙыусылар үҙҙәре үк «әҙиптәргә 60 йә 70 йәш тулғанда,.. юбилей тип һанарға, поэзия китаптарын – 1 томда, прозаны 2 томда сығарырға» тип ҡул күтәргәйне. Бер нәмә һөйләп, икенсене эшләүҙең өлгөһө был, тип әйтке килә.

Шул уҡ йыйында күпселек тауыш менән «бер үк авторҙың... киләһе китабын биш йылдан һуң нәшер итергә» тигән тәҡдим дә хупланғайны. Беҙ ошо ҡағиҙәнән киләсәктә лә тайпылмаҫҡа теләр инек, әммә ҡайһы ваҡытта, баҙар иҡтисадына ярашлы, айырым авторҙарҙың уҡымлы һәм үтемле китаптарын өс йә дүрт йыл эсендә лә сығарыу яғындабыҙ. Дөрөҫ, бик һирәк кенә баҫмаларҙан аҙмы-күпме табыш алабыҙ, һәм ул сумма производствоны киңәйтеүгә, йәғни былай ҙа ҡыҫынҡы планға бер нисә яңы авторҙы өҫтәргә мөмкинлек аса.

Быларына күҙ йоморға ла мөмкин кеүек. Иң аяныслыһы: идара ултырыштары раҫлаған «фәлән йылда фәлән ҡәләмдәштең китабын шунса күләмдә... шунса томда сығарырға» тигән фатиха ҡағыҙын бәғзе әҙәбиәтселәр мотлаҡ үтәлергә тейешле директив күрһәтмә һымаҡ ҡабул итә. Нисек тә тематик пландан позиция яуларға тырышып, шуны һелкә-һелкә дәғүәләшергә, бәхәсләшергә тотона, кемелер хатта янарға ла булдыра.

Юбилей китаптары тәңгәлендә ҡәтғи тәртип урынлаштырырға күптән ваҡыт, минеңсә. Хөкүмәтебеҙҙең юбилейҙарҙы билдәләү буйынса махсус ҡарары булып тороп – ә унда 50, 75, 100 йыл аныҡ теркәлгән – хәтһеҙ авторҙар 55-дә лә, 60-нда ла, 70-дә лә, 80-дә лә йүгерекләп йөрөй, төрлө инстанцияларҙы мөрәжәғәт менән күмә. Фәрит Ғәбдрәхимов исемле өлкән йәштәге авторыбыҙҙы ғына миҫалға килтерәйек. Хөрмәтле әҙип бынан егерме йыл самаһы элек үк, ағзалыҡ билетынан ваз кисеп, республика яҙыусылары сафы менән хушлашыуын асыҡтан-асыҡ белдергәйне. Мәгәр ошо фактты белә күрә, Союздың махсус берләшмәһе ниңәлер уның ҡулъяҙмаһын тикшерә, хуплай һәм «Китап»та нәшер итеүҙе юллай. Аптырағас, секцияла әлеге ҡәләмдәштең республикабыҙға яла яҡҡан яҙмаларын уҡыған кеше юҡтыр, тип уйлап ҡуяһың. Хәҙер килеп был иптәш Кремлгә ялыуҙар осора, ҡасандыр үҙе «бөтөрөү»ҙе талап иткән дәүләт нәшриәтендә кимәле һиҫкәндерерлек йыйынтығын баҫтырырға тырмашып йөрөй. Бер киҙәнгәс, өҫтәйек: бәғзе авторҙар, юғары даирәләге чиновниктар менән таныш-тоношлоғона, хатта ки әшнәлегенә арҡаланып, әрһеҙләнергә, йөҙ һыуын түгергә әҙер, хатта нәшриәт хеҙмәткәрҙәрен битәрләүҙән дә тартынмай. Ошондай яман күренештәр хаҡында мин яҙыусыларҙың бынан биш йыл элекке съезы трибунаһынан әсенеп сығыш яһағайным. Тәнҡиттең файҙаһы тейгәндерме, һуңғы ике-өс йылда бындай низағтар һирәгәйә төшкәйне, әммә, республика етәкселеге алмашыныу менән, үрҙә телгә алынған йәмһеҙ факттар ҡабат йышая башланы. Хатта бәғзе һүҙ оҫталары үҙҙәре үк чиновниктарға «аҡыл» өйрәтә. Йәнәһе, нәшриәткә «минең ҡулъяҙмамды сығарырға күрһәтмә бирегеҙ...» Ә

бит нәҡ шундай «аҡыл» менән графоман китаптар ҙа сыҡҡылай, ләкин уларҙы хәтһеҙ йылдар дауамында һатып булмай, байтаҡ китапханалар ҡайһы бер яҙыусының китабын хатта бушлай бирһәң дә алмай. «Таяҡ ике осло була» тигән әйтемдең дөрөҫлөгө бына ошо миҫалдан бик асыҡ күренә.

Теге йәки был әҙиптең юбилейы уның тыуған яғында уҙғарылһа, шул төбәктә машина ҡыуып, сауҙа ойошторабыҙ. Мәгәр йән көйөп тә ҡуйғылай: юбилярҙың китаптарын яҡташтары ала һалып бармай. Сәбәбе – ул әҫәрҙәр ҡат-ҡат сыҡҡан, иҫкергән...

**– Китап, рухиәт емеше булған хәлдә лә, иҡтисад күҙлегенән ҡарағанда, тауар ҙа бит әле. Тауар икән, уның хаҡы-бәҫе өсөн ниндәй саралар ҡулланаһығыҙ һуң?**

– Авторҙарға өҙләкһеҙ консультация бирәбеҙ, түләүле һәм аноним рецензенттарҙы йәлеп итәбеҙ, төбәк яҙыусылар ойошмаларынан сейле-бешле протокол менән килгән (бигерәк тә кемдеңдер тәүге китабын) хәтһеҙ ҡулъяҙмаларҙы Союз идараһы эргәһендәге секцияларҙың да раҫлауын талап итәбеҙ; авторҙың мөмкинлегенә һәм теләгенә ҡарап, йыш ҡына ҡайһы бер йыйынтыҡтар «доработка»ға ҡайтарыла. Һанай китһәң, эш алымдары байтаҡ инде ул.

Үрҙә мин бәғзе авторҙарҙың, бифәйбә, үҙҙәрен әллә кемгә һанап, юғары органдарға мөрәжәғәт итеүҙәрен өнәп бөтмәүебеҙҙе белдергәйнем. Аптырағандың көнөнән Президентыбыҙ Рөстәм Хәмитовҡа махсус хат яҙырға мәжбүр булдым. Ысынлап та, теге йәки был китапты нәшерләү бурысын йөкмәтергә Президенттан бүтән вазифауи түрәләрҙең хаҡы юҡ, һәм был ҡағиҙәне боҙорға ярамай бит. Боҙҙониһәң, пландарға төҙәтмәләр, өҫтәлмәләр индерергә тура килә, ә кемдәрҙеңдер ҡулъяҙмаһы тематик пландан һыҙылдымы, ығы-зығы ҡубыуын көт тә тор. Теге-был әҙиптең юбилейы уның китабына «йәшел ут» ҡабыҙыуҙы аңлатмай, был мәсьәлә «Китап» менән Союздың бер төптән эшләүенә бәйле икәнен үрҙә әйткәйнем инде. Күп сығымдар талап иткән фотоальбомдар сығарыуҙа ла коллектив фекергә – проект авторҙарының, нәширҙәрҙең, экономистарҙың, сауҙа хеҙмәткәрҙәренең, ведомстволар вәкилдәренең теләктәренә, замечаниеларына ҡолаҡ һалабыҙ. Иң мөһиме, социология, медицина, хоҡуҡиәт һ.б. юҫыҡтағы китаптарға, брошюраларға иғтибар көсәйә.

Әйткәндәй, быйылдан алып тематик пландарҙы асыҡ-шаран төҙөргә ниәтләйбеҙ. Нисекме? Төрлө «иләктән иләнгән», беҙҙең продукция менән ҡыҙыҡһынған ойошмаларҙың хуплауына ирешкән темпландың төп параметрҙарын «Китап» сайтына урынлаштырасаҡбыҙ. Әлбиттә, киң йәмәғәтселек иғтибарына, әҙәбиәт һөйөүселәр күҙәмәһенә... Шәхсән фаразлауымса, бындай аҙымдың файҙаһы ла, фәһеме лә һәлмәк буласаҡ.

**– Баяғы «графоманик» тема күңелгә тынғы бирмәй... Уҡыусыһы юҡ икән – яҙыусыһы ла юҡ! Китаптары үтмәгән көйө һаман-һаман яңы баҫмаларын даулаған ағай-энегә иҫкәртеү хаттары ебәрһәгеҙ, авторҙан башҡа берәү ҙә үпкәләмәҫ, моғайын. Әйтәйек, «Мөхтәрәм туған, фәлән китабығыҙ... төгән йылдан бирле шунса данала һатылмай ята. Реализацияларға ярҙамлашһағыҙ ине, юғиһә яңы китабығыҙҙы нәшерләү ҡыйынһындыра», тиеберәк.**

– Мөмкин, әлбиттә, ләкин... ауырһындыра. Әлеге лә баяғы кеше хаҡын – авторҙың абруйын уйлайбыҙ шул. Нәширҙәр ҙә әҙәм балаһы бит. Шуны ғына өҫтәр инем: Союз идараһы ултырыштарында нәшриәт вәкилдәре йышыраҡ ҡатнашырға тейеш. Бигерәк тә буласаҡ китаптар хаҡында һөйләшеүҙәр барғанда. Рекомендацияларға таяныу фарыз. Бигерәк тә тәүге романдарға, повестар, пьесалар тупланмаһына. Төбәк ойошмаларҙың протоколдарын секциялар раҫларға, иң һуңынан уға Яҙыусылар союзының идара рәйесе (консультант-фәлән түгел!) фатиха бирергә бурыслы, тип иҫәпләйем.

**– Элек, совет заманында, «китап... биш йыл дауамында реализацияланырға тейеш» тигән стандарт бар ине түгелме?**

– Был һорауға ниндәйҙер кимәлдә яуап бирҙем кеүек. Ә бит бөгөнгө йүгәнһеҙ баҙар мөхитендә биш йыл – ярайһы оҙаҡ ваҡыт. Хәҙер ике, уҙа китһә өс йыл тип шарт ҡуйыу урынлыраҡ. Сөнки үтемле китаптар йыл эсендә үк ҡулланыусыларға барып етә.

**– Яҡын киләсәкте нәшриәт нисегерәк күҙаллай?**

– Уйлауымса, балалар һәм үсмерҙәргә тәғәйен баҫмаларҙы ишәйтеү фарыз. Йәғни, «Киләһе йылдарҙа беҙ сығарған китаптарҙы кемдәр уҡыясаҡ?» тигән һорау беҙҙе бөгөн үк борсой. Шуға күрә лә тиҙҙән үҙаллы «балалар әҙәбиәте редакцияһы» төҙөү күҙ уңында тотола, унда балалар психологияһын яҡшы белгән, әүҙем эҙләнеүсән, юғары зауыҡлы нәширҙәр эшләйәсәк. Һуңғы йылдарҙа рус теләндәге баҫмаларға ҡарағанда башҡорт телендәге китаптар йылдамыраҡ һатыла. Социологтар был хәлде нисек аңлатыр – уныһы әлегә ҡараңғы. Бәлки, милләттәштәребеҙ күберәк йәшәгән ауыл ерenә өр-яңы мәғлүмәт технологиялары яйыраҡ инеүе сәбәпселер. Улай тиһәк тә, беҙҙең электрон китаптар менән файҙаланырға теләүселәр һаны йылдың-йылы ишәйә бара.

Электрон китаптарҙың ыңғай һәм кире яҡтары хаҡында авторҙар менән – улар меңдән ашыу – махсус йыйылыш уҙғарыу зыян итмәҫ ине. Дөйөмләштеререк шуны билдәләү хәйерле: «ҡағыҙ китап» менән «электрон китап» сығарыу (тимәк, шул сүрәттә ҡулъяҙмалау ҡабул итеү ҙә) параллель рәүештә оҙон-оҙаҡ ваҡыт дауам итәсәк әле.

**– Тик уҡыусылар ғына кәмемәһен ине. Юғиһә, һуңғы осорҙа китапһыҙ өйҙәр күбәйә. Ә бит китапһыҙ өй – ҡотһоҙ өй, уны һайрар ҡошо булмаған, йәне-йәме кителгән урманға оҡшатырға мөмкин.**

– Эйе, мөмкин. Һуңғы егерме – утыҙ йыл эсендә Рәсәйҙә китап етештереү өсдүрт тапҡырға, нәфис әҙәбиәтте уҡыу дүрт-биш тапҡырға кәмене. Ошондай уҡ күрһәткестәр беҙҙең республикаға ла хас. Тимәк, әҙәби процеҫҡа заманса һулыш өрөү – көнүҙәк бурыс.

Мәғлүм ки, хәҙер Башҡортостан тарихы, мәҙәниәте, теле тураһында баҫмалар нәшерләүгә заявкалар бихисап. Бик хуп. Тик мәсьәләнең бер яғы борсой: ошондай проекттарҙы, йәнә теге йәки был тармаҡтың әсбап һымағыраҡ техник хеҙмәттәрен дәүләт заказы – тематик пландарға индереп, йәғни әҙәби-нәфис томдар һымаҡ, бюджет иҫәбенә сығарырға ынтылыш көсәйә. Яҙыусылар ижадына тәғәйен финансҡа тығылыу иһә бер кемде лә биҙәмәй, һәм ундай проекттар өҫтәлмә финанс бүлеү тәртибендә бойомға ашырылырға тейеш. Был хаҡта матбуғат аша ла йыш әйткеләйем, ләкин ыңғай үҙгәреш һаман юҡ. Ә бит милли әҙәбиәттән бығаса табыш алғаныбыҙ булманы, киләсәккә лә өмөт юҡ.

Татыу коллективыбыҙҙа бөгөн йөҙ егерме һөнәрмән эшләй. Бынан утыҙ-ҡырҡ йыл элек тә ошо сама кеше эшләне. Шул уҡ ваҡытта, баҫып сығарылған китаптар һаны кәмегән бер хәлдә, редакциялар «портфеле» бүҫкәрмәй, киреһенсә, яңы ҡулъяҙмалар иҫәбенә ҡабарыуын ғына белә. Хәҙер төп кенәгәлә иҫәпкә 500-ҙән ашыу папка теркәлгән. Был һандарҙы мин зарланыуҙан түгел, ә нәшриәт эшмәкәрлегенә ҡағылышлы үрҙәге фекерҙәремде ҡеүәтләр өсөн генә килтерәм. Нисек кенә булмаһын, күҙ нурҙарын түгеп сығарған бәғзе китаптарҙың районҡала хакимиәттәренең, хөкүмәтебеҙҙең әҙәби премияларын яулауы, уларҙың авторҙары менән бер ҡатарҙан, беҙҙе лә һөйөндөрә. Мостай Кәрим әйтмешләй, бүлешкәндән шатлыҡ арта ғына...

**– Зөфәр Мөхтәр улы, Һеҙ әбейҙәр сыуағында тыуғанһығыҙ һәм тиҙҙән ғүмер тауығыҙҙың алтмышынсы миҙгеленә аяҡ баҫаһығыҙ. Биографияғыҙҙың иң сағыу мәлдәрен барлаһаҡ...**

– Сағыу мәлдәр күп инде ул... Журналист ғаиләһендә үҫтем. Атайым Мөхтәр Мөхәммәт улы – яу ҡайтарған фронтовик, һуғыштан һуңғы яҙмышын матбуғатҡа арнаған абруйлы уҙаман ине. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең Октябрьский ҡалаһындағы үҙ хәбәрсеһе пунктында 15 йыл эшләгәс, уны бер нисә ҡала, район ингән тағы ла ҙурыраҡ зонаға – Стәрлетамаҡҡа күсерҙеләр. Бынан, әлбиттә, ата-әсәмдең тыуған ауылы Аҙнайға (Ишембай районы) ла алыҫ түгел.

Үҙемде белгәне бирле мин китаплы мөхиттә йәшәнем, әле лә йәшәйем. Бала саҡтан уҡ командировкаларында беҙгә һуғылған йә фатирға төшкән байтаҡ әҙиптәр менән танышырға, аралашырға насип итте. Мәҫәлән, Тимер Арыҫлан, Әмир Гәрәев, Рәшит Солтангәрәев, йәшерәк быуындан Ғәлим Хисамов һ.б. менән. Ҡағиҙә буларак, атайым менән ай һайын магазиндан үҙебеҙгә оҡшаған яңы китаптарҙы ала инек, әсәйем Нәбирә Ялалетдин ҡыҙы менән ауыл лавкаһынан да байтаҡ яҡшы китаптар алып ҡайтҡыланыҡ, тора-бара бәғзе баҫмалар дефицитҡа әйләнә торғайны.

Китап яратыуым үҙенән-үҙе ҡәләмгә үрелдергәндер, тим. Тәүҙә ябай мәҡәләләр менән – урындағы матбуғатта, һуңыраҡ һүрәтләмәләр, очерктар, интервьюлар менән республика, үҙәк гәзиттәрҙә сығыш яһаным. Шуға Стәрлетамаҡ педагогия институтының филология факультетын тамамлап, армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас, иртәгәһенә үк «Стерлитамакский рабочий» гәзитенең баш мөхәррире Ғ. М. Арыҫланов ағай редакцияһына әҙәби хеҙмәткәр вазифаһына саҡырҙы. Тәүге айҙарҙа эшкә һалдат күлдәгендә һәм салбарында йөрөгәнемде әле лә һағынып иҫкә алам.

**– Һеҙ ике тапҡыр матбуғат министры ҡамытын кейҙегеҙ...**

– Хәйер, партия-совет органдарында эшләгәндә үк яҙмышымдың матбуғат менән тығыҙ бәйләнәсәген һиҙенә инем. Туҡһанынсы йылдар башында БР Матбуғат һәм киң информация министрлығына ике оло бурысты үтәргә тура килде. Тәүгеһе – республикала элекке киң мәғлүмәт сараларын һаҡлау, икенсеһе иһә яңы баҫмалар булдырып, шул селтәргә өр-яңы импульс өҫтәү ине. Тырыштыҡ. Һөҙөмтәлә әле һүҙ алып барған «Китап» нәшриәте һаҡланып ҡалды, «Йәшлек», «Өмөт» гәзиттәре үҙаллылыҡ алды, «Аҡбуҙат», «Шоңҡар» журналдары ҡанат ҡаҡты. Онотмаһағыҙ, шуғаса әлеге ике баҫма «Ағиҙел» журналы эсендә ҡушымта рәүешендәрәк донъя күрә ине.

Милли әҙәбиәт үҙенә айырым, етди һәм һаҡсыл ҡараш талап итә. Коммерсия юлындағы нәшриәттәр генә уңға-һулға ҡарамай, осһоҙло зауҡына, зыянлы эстәлеккә ҡоролған «ширпотреб» китаптар сығарыуын дауам итә. Ундай нәшриәттәрҙе бер генә маҡсат – табыш алыу ымһындыра. Ә беҙгә, милли-дәүләт нәширҙәренә, иң мөһиме – әҙәби процесты камиллаштырыуға туранан-тура йоғонто яһау, тип уйлайым. Табыш артынан ҡыуыу түгел, ә күп милләтле Башҡортостан уҡыусыларының рухиәтен үҫтереү – «Китап»сыларҙың төп ҡиблаһы.

**– Форсаттан файҙаланып, юбилейығыҙ айҡанлы иң матур теләктәр күндерергә рөхсәт итегеҙ. Әҙәби процесҡа йоғонто яһарҙай әңгәмәгеҙ өсөн барса әҙәбиәт һөйөүселәр исеменән рәхмәт. «Китап» нәшриәтенә лә рәхмәтлебеҙ. Сөнки уның сауаплы эшмәкәрлеге мең-мең замандашҡа: «Беҙ – китаплы халыҡ!» – тип ғорурланырға ирек бирә, күңелдәргә илһам, зиһенгә зауыҡ өҫтәй.**

**Әңгәмәне Сабир ШӘРИПОВ**
**яҙып алды.**

*Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына – 100 йыл*

## МӘШҺҮР ЛИНГВИСТ ҺӘМ ЯҘЫУСЫ

Жәлил **ҒИНИӘТ улы КЕЙЕКБАЕВ** – башҡорт тел ғилеменең олуғ белгесе, халҡыбыҙ тарихын, фольклорын, этнографияһын, әҙәбиәтен тәрәндән белгән ғалим, талантлы яҙыусы, күренекле педагог, йәмәғәт эшмәкәре, публицист һәм полиглот... Ғилми эҙләнеүҙәре һәм табыштары менән, башҡорт мөхитенән сығып, заманында СССР халыҡтары телдәрен өйрәнеү буйынса иң абруйлы лингвистарҙың береһе булды, бөгөн дә уның тәғлиматтәре тюркология фәнендә әһәмиәтле һүҙ булып ҡала килә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, эшмәкәрлегенең иң сәскә атҡан осоронда, 56 йәшендә генә, арабыҙҙан китеп барҙы. Күпме тамамланмаған фәнни эше, яҙылмаған художестволы әҫәрҙәре ҡалды...

Октябрь айында уның тыуыуына 100 йыл тула. Халыҡ үҙенең арҙаҡлы улын онотмай – атаҡлы ғалим, талантлы яҙыусы иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса байтаҡ эштәр башҡарылған һәм киләһе көндәрҙә лә башҡарылыр. Ғалим исемен йөрөткән Сәйетбаба урта мәктәбендә, тыуған ауылы Ҡаранйылғала байтаҡ йылдарҙан бирле музейҙар, БДУ-ла мемориаль кабинет эшләп килә, баш ҡалабыҙҙа, Ғафури районы үҙәге Красноусолда Жәлил Кейекбаев урамдары бар, шәхесен пропагандалау һәм мәңгеләштереү буйынса ла хеҙмәт күрһәткән ғалимдарға уның исемендәге премиялар бирелә. Ләкин эшләнәһе эштәр ҙә байтаҡ. Мәҫәлән, уның ғилми һәм фәнни хеҙмәттәренең, әҫәрҙәренең тулы йыйынтығын сығарыу, уның тураһында иҫтәлектәр китабын туплау һ.б. фарыз.

Был һанда беҙ БДУ профессоры Ғ. Ҡунафин мәҡәләһен, шулай уҡ йәш Жәлил Кейекбаев менән уның буласаҡ тормош иптәше Нәфисә Халиҡованың бер-береһенә хаттарын тәҡдим итәбеҙ. Был хаттар хаҡында беҙ Ж. Ғ. Кейекбаевтың ҡыҙы З. Ж. Кейекбаеванан юбилей айҡанлы атаһы тураһында иҫтәлектәр яҙыуын үтенгән саҡта белдек. Редакция Зөһрә ханыма журнал өсөн ата-әсәһенең хатлашыуын әҙерләгәне һәм хаттарға үҙе баш һүҙ, комментарийҙар, шулай уҡ аҙаҡҡы һүҙ яҙып биргәне өсөн рәхмәт белдерә. Иҫтәлекле юбилейға арналған башҡа материалдар, шул иҫәптән хатлашыуҙың дауамы, журналыбыҙҙың киләһе һанында ла буласаҡ.

**РЕДАКЦИЯ.**

# ҒАЛИМ – ӘҘӘБИӘТ МАЙҘАНЫНДА

Башҡорт халҡының үҙенең генә түгел, башҡа халыҡтарҙың да зиһен-күңел донъяһын байытышырлыҡ, уға илһам, фекер, зауыҡ нурҙары һиберлек һүҙ сәнғәте гәүһәрҙәре, шөһрәтле фән әһелдәре һәм әҙиптәре байтаҡ. Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев – шуларҙың береһе һәм берәгәйлеһе. Ғалим-әҙиптең үҙендә халҡыбыҙҙың фәлсәфәүи, сәйәси, этик һәм, әлбиттә, эстетик фекер ҡеүәһен дә, ауыр, ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы һәм ҡыуаныслы тормошон да, намыҫ-выжданын, өмөт-хыялын, киләсәккә ынтылышын да сағылдырған ижад емештәренең үҙ осорондағы башҡорт һүҙ сәнғәтенең үҫеш тенденциялары, үҙенсәлектәре, законсалыҡтары һәм уңыштары хаҡында фекер йөрөтөргә, тарихи-теоретик күҙәтеүҙәр яһарға ныҡлы нигеҙ булмауы мөмкин түгел ине, ул шулай булды ла.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың илаһи һүҙ сәнғәте майҙанындағы юлы шиғриәт һуҡмағынан башлана. Уның поэтик әҫәрҙәре ваҡытлы матбуғат биттәрендә 30-сы йылдар башында күренә башлай. Артабан альманахтарҙа ла урын ала улар. Әҫәрҙәрен йәш шағир «Табын» тигән тахаллус-псевдоним аҫтында баҫтыра. Бында уның халыҡ тарихын яҡшы белеүе, милли, илһөйәрлек тойғоһо үҫешкән булыуы, традицияларға тоғролоғо асыҡ күренә. Төрки халыҡтар әҙәбиәтендә, шул иҫәптән башҡорт һүҙ сәнғәтендә лә, йорт-ил, халыҡ йә иһә ырыу-ҡәбилә атамаһын псевдоним итеп алыу (мәҫәлән, Ғилметдин Сәнжар әл-Башҡорди, Яҡуп ибн Ноғман әл-Болғари, Мәхмүт бине Ғәли-Болғари, Тажетдин Ялсығол әл-Башҡорди, Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡи, Шафиҡ Әминев-Тамъяни һ.б.) – ҡәҙимдән йәшәп килгән күренеш. Ж. Кейекбаев та ошо традицияны яңы шарттарҙа аяҡҡа баҫтырыуҙы, үҙенең башҡорт иленә М. Биксурин, М. Өмөтбаев, Ғ. Соҡорой, М. Ғафури, Ш. Бабич, Д. Юлтый, М. Буранғолов һымаҡ атаҡлы әҙиптәрҙе биргән һәм бер үҙе ун өс ырыу-араны берләштергән табын ҡәбиләһе вәкиле булыуын белдереп, нығытып ҡуйыуҙы хуп күрә.

30-40-сы йылдар шиғриәтенә хас булғанса, Жәлил Табын (Кейекбаев) әҫәрҙәренә мәдех стиле, публицистик пафос характерлы. Шиғри бағышлау, шиғри хат, мәдхиә-ода, ҡобайыр – ул йыш мөрәжәғәт иткән жанрҙар. Уның поэзияһында көнсығыш һәм көнбайыш халыҡтарының әҙәби-эстетик ҡараштарын, образлы фекерләү традицияларын синтезлаштырырға, уларға туған халҡының ауыҙ-тел ижады һулышын өрөргә тырышыу ярылып ята. Төрлө телдәрҙе белергә ынтылған йәш шағир айырыуса Көнбайыш әҙәбиәте философияһы һәм мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһына. Шул уҡ ваҡытта ул бер генә мәлгә лә туған әҙәбиәте һәм фольклоры, Көнсығыш шиғриәте стихияһынан айырылмай. Хатта уның Анри Барбюс, Фридрих Вольф, Эрнст Тельман кеүек шәхестәргә бәйле тыуған поэтик бағышлауҙарында һәм мәдхиәләрендә лә башҡорт йыр стихияһының эҙе һиҙелә. Шағир нигеҙҙә халыҡтар дуҫлығы, хеҙмәт, тыуған ил, батырлыҡ,

тәбиғәт һәм, әлбиттә, мөхәббәт темаларына мөрәжәғәт итә («Рәсәй», «Дуҫлыҡ хаҡында ҡобайырҙар», «Егеттең ҡыҙға әйткәне», «Һәләүек», «Ҡыш килә», «Германия», «Батыр Матросов», «Ҡорос ҡанаттар» һ.б.).

Бөтә йәне, тәне күҙәнәктәренә тәбиғәт стихияһы, тәбиғәт хозурлығы, тәбиғәт булмышы һеңешкән башҡорт шағиры өсөн тәбиғәт темаһы бигерәк тә яҡын. Тыуған еренең уйландырырлыҡ та, хисләндерерлек тә, шатландырырлыҡ та, иләҫләндерерлек тә бихисап күренештәрен, йыл миҙгелдәрен тәфсилләп, берәмтекләп ихлас һүрәтләүҙе үҙ күрә ул. Миҫал өсөн «Ҡыш килә» шиғырын алып ҡарайыҡ. Унда шағир башҡорт фольклорына һәм әҙәбиәтенә Көнсығыш поэзияһынан килеп ингән шиғыр формаларының береһе – робағиға мөрәжәғәт итә. Был жанрҙың художестволы эшләнеш ҡанундары авторға сағыштырмаса талғын ағышлы шиғри ритм аша ҡыш миҙгеленең нисегерәк килеүе күренештәренең бер төрлө өшәндергес тә, моңһоу ҙа картиналарын йәнле, асыҡ итеп күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек биреү менән бер рәттән, кеше тормошо менән тәбиғәт араһындағы ҡапылда күҙгә салынып бармаҫ бәйләнеш ептәре хаҡында уй-фекер йөрөтөргә, тәбиғәт лирикаһын фәлсәфәүи мотивтар менән һуғарырға мөмкинлек бирә. Миҫал өсөн әҫәрҙән ҙур ғына өҙөк биреп үтергә мөмкин:

*Көҙ тора емереп ҡаштарын;*
*Йәй түгә күҙенең йәштәрен;*
*Ҡыш килә, ҡылысын һөйрәтеп,*
*Юъары күтәреп баштарын.*

*Көҙ ҡыра аъастың сәстәрен;*
*Ҡыш күрә үҙенең хәстәрен;*
*Ҡыш килә – Ҡыш бабай – туңдырып*
*Тумалаҡ ерҙәрҙең кәҫтәрен…*

*Болоттар күсәләр ел менән;*
*Аҡ ҡарҙар осалар иң менән;*
*Ә күктә ирәйеп ай йөрөй,*
*Маһайып кистәрен һил менән…*[1]

Күреүебеҙсә, әҫәрендә шағир йәнле картина тыуҙырыуҙың, образлылыҡтың төп алымы булған йәнләндереү сараһын киң ҡуллана. Ул кешеләргә, тере заттарға хас булған сифатты, эш-хәрәкәтте, уй-тойғоларҙы тәбиғәт күренештәренә, йәнһеҙ әйберҙәргә бик урынлы, тапҡыр күсерә: көҙ ҡаштарын *емереп тора,* ағастың сәстәрен *ҡыра*, йәй күҙ йәштәрен *түгә,* ҡыш ҡылысын *һөйрәтеп килә*, баштарын *юъары күтәрә* һ.б. Шул рәүешле шиғырҙа тәбиғәттәге төрлө күренештәр, миҙгелдәр менән кешенең төрлө ҡиәфәте, эш-ҡылығы араһында образлы бәйләнеш – ассоциация хасил була. Түбәндәге шиғыр юлдарында ул айырыуса асыҡ күренә:

Ай йөҙә йыһанда *шатланып*,
*Йылмайып*, юлдашҡа *яҡланып*,
Йыһанға ***туп*** сөйгән кешенең
Ғаҡлына, фәһ(е)менә *маҡтанып…*

Был строфала йәнләндереү сараһы ассоциативлыҡтың йәнә бер сараһы

[1]*Башҡортостан пионеры. 1959, 18 июль.*

булған метафора иҫәбенә лә байый төшә. Бындағы кеше йыһанға сөйгән ***туп*** артында беҙ Ер юлдашын төҫмөрләйбеҙ. Улар араһындағы образлы ассоциация бик нескә, оҡшатыу ғәләмәте бик үк ярылып ятмай. «Ҡыш килә» әҫәрендә шағирҙың, башҡа шиғырҙарындағы кеүек үк, рифма, ритм ҡанундарын еренә еткереп үтәргә, ритмик аһәң тыуҙырырға ынтылыуы ла асыҡ күренә. Шиғыр юлдары аҙағында рифмалашып килгән һүҙҙәрҙең һәммәһе лә бик тә ауаздаш булыуҙары, оҡшаш яңғырауҙары менән айырылып тора (ҡаштарын – йәштәрен – баштарын; сәстәрен – хәстәрен – кәҫтәрен һ.б.). Теүәл рифманы хасил иткән строфаларҙа робағи жанры ҡалыбына ярашлы а – а – б – а рәүешендә рифмалашып килгән был һүҙҙәрҙең һәммәһе лә тартынҡы өндәргә генә тамамланып, бер төрлө генә ябыҡ рифманы барлыҡҡа килтереүҙәре, бер үк ваҡытта үҙҙәрендә рифманың ассонанс – һуҙынҡы өндәрҙең ауаздаш булыуы һәм ҡабатланыуы һәм диссонанс – тартынҡы өндәрҙең ярашып килеүе (ҡ**а***шт***а***р***ы***н* – й*ә***шт***ә***р***е***н* – б**а***шт***а***р***ы***н*; һ**ү***рә***н***дә***р** – **ү***лә***н***дә***р** – к**ү***рә***н***дә***р** һ.б.) ише үҙенсәлекле формаларын берләштереүҙәре менән шиғри гармонияны, эҙмә-эҙлекле ритмлылыҡты, поэтик бер бөтөнлөлөктө барлыҡҡа килтерә.

Ғөмүмән, әҫәрҙәрендә Ж. Ғ. Кейекбаев шиғыр төҙөлөшө ҡағиҙәләрен еренә еткереп үтәүгә, образлылыҡҡа өлгәшеүгә ныҡ иғтибар итә. Шиғриәттең төп идея-эстетик функцияһын яҡшы аңлай. Тел ғилеме өлкәһендә киң танылыу алмаған осраҡта ла, ул шиғриәт майҙанында тәрән эҙ ҡалдырған шағир булған булыр ине. Фән донъяһына мөкиббән ауышыуы уға бындай мөмкинлекте бирмәй. Серле ғилем донъяһы йота барған шағирға фән менән шиғриәт араһында, уларға мөнәсәбәттә әллә ни ҙур айырма булмаған кеүек тойола бара. Был хаҡта ул үҙе лә: «Әҙәбиәткә мин шиғыр менән килдем дә, туҡталып булманы, телде өйрәнергә йәбештем. Һәйбәт әҫәр яҙыр өсөн барыбер телде һәйбәт белергә кәрәк. Шулай итеп фән юлына ауыштым. Әҙәби китабым да, фәнни асыштарым да – минең һөнәр емештәрем»,– тип әйтер, аңлатыр булған.

Шиғриәт донъяһына Ж. Ғ. Кейекбаев асылда фольклор аша килә, уның шиңмәҫ шишмәһенән һут алып ижад итә. Автор бигерәк тә ҡобайыр формаһын үҙ итә, ижадында сәсәнлек традицияларын дауам иттерә һәм үҫтерә. Был ижади эшмәкәрлектең үҙ заманы өсөн дә, хәҙер ҙә ижтимағи-эстетик әһәмиәте бик ҙур.

Мәғлүм булыуынса, башҡорт халҡының ижтимағи-тарихи һәм эстетик аңында йырау һәм сәсәндәр «ил күрке», «яманлыҡты яҡламаҫ, дошман хәтерен һаҡламаҫ, яҡшылыҡты һөйәр.., илдең зарын һөйләр.., яуға саҡырып өндәр» ғәҙеллек, выждан һәм намыҫ көрәшселәре, әүҙем йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ижад емештәрендә халыҡ аҡылын, уның уй-тойғоларын, өмөт-хыялдарын, теләк-ынтылыштарын, тарихи ихтыяждарын сағылдырыр оло талант эйәләре, күренекле шәхестәр булып кәүҙәләнә. Күп быуаттар һуҙымындағы кеүек үк, XX быуатта ла улар шундай бәҫле сифаттар менән алға баҫа – әле лә фольклор традицияларын уңышлы дауам иттереүсе, халыҡсан-демократик һүҙ сәнғәтен заман рухына ярашлы үҫтереүсе ижади шәхестәр булып ҡала.

Ж.Ғ. Кейекбаев – тап шундай сәсән шағирҙарҙың береһе. Уның ижад емештәрендә импровизаторлыҡ һәләте көслө. Ул үткән быуаттың 30 – 60-сы йылдарында сәсәнлек сәнғәте донъяһында ярайһы танылыу алған, төрлө поэтик жанрҙағы әҫәрҙәр тыуҙырған Хәйрулла Ишмурзин, Фәррәх Дәүләтшин, Ғиндулла Усманов, Вәлиулла Ҡоломбәтов, Сәйет Исмәғилев, Мөхәмәтша Буранғолов, Сәһәрйәр Муллабаевтар тибындағы ижадсы.

Әйтергә кәрәк, яңы социалистик йәмғиәт төҙөү, яңы типтағы мәҙәниәт һәм әҙәбиәт булдырыу өсөн барған көрәш дәүеренең тәүге мәлдәрендә сәсәнлек

сәнғәтенә әллә ни иғтибар булмай. Әммә 1934 йылда совет яҙыусыларының беренсе Бөтә Союз съезында А.М. Горький фольклорға, Сөләймән Стальский кеүек халыҡ таланттарына иғтибарҙы көсәйтергә саҡырып, әҙәбиәттең башы, нигеҙе фольклорҙа булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып сығыш яһағандан һуң, халыҡтың ауыҙтел ижадына, уның традицияларына таянып ижад итеүселәргә ҡарата иғтибар бермә-бер арта. Был мәҙәни-рухи атмосфера фольклорға бай башҡорт илендә үҙен ныҡ һиҙҙертә: йырсы, ҡобайырсы, бәйетсе шағирҙар, әкиәтселәр күтәрелеп сыға, уларҙың әҫәрҙәре ваҡытлы матбуғат биттәрендә донъя күрә, айырым китап итеп сығарыла башлай. Хатта Башҡортостан Юғары Советы Президиумы 1944 йылда, сәсәнлек сәнғәтенең ижтимағи-сәйәси һәм әҙәби әһәмиәтен иҫәпкә алып, «Башҡортостандың халыҡ сәсәне» тигән маҡтаулы исем булдыра. Шул уҡ йылда был исем айырыуса киң танылыу алған Мөхәмәтша Буранғолов, Фәррәх Дәүләтшин, Сәйет Исмәғилев кеүек сәсәндәргә бирелә.

Ж.Ғ. Кейекбаев һүҙ сәнғәте донъяһында бөтә ил буйынса бына ошондай ижади атмосфера хөкөм һөргән, милли фольклор традицияларына, уларҙы ижади файҙаланыуға иғтибар бермә-бер көсәйгән осорҙа аяҡ баҫа. Уның тап халыҡтың ижад тәжрибәһен өйрәнергә, фольклор поэтикаһын үҙләштерергә бер туҡтауһыҙ ынтылыуы әҫәрҙәренең милли ерлекле, милли рухлы булыуын, уҡыусы күңеленә яҡын булыуын тәьмин итә лә инде. Милли ерлек, милли фольклор поэтикаһы уның әкиәттәрендә, шиғырҙарында, тәржемә әҫәрҙәрендә генә түгел, хатта хикәйәләре, повесы һәм романы структураһында ла сағылыш тапты. Ә инде уларҙың ифрат фольклорса, ифрат халыҡсан тел-стиль үҙенсәлектәре тураһында әйтеп тораһы ла түгел.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың халыҡ әҙәбиәте традицияларын, фольклор поэтикаһын ни тиклем яҡшы үҙләштереүенең, уларға тоғролоҡ һаҡлауының иң сағыу күрһәткесе булып ҡобайырҙары тора. Дуҫлыҡ-туғанлыҡты, халыҡ бәхете, ил үҫеше өсөн фиҙакәр хеҙмәтте, патриотизмды, Ватаныбыҙҙағы иҡтисади, фәнни-техник һәм мәҙәни ҡаҙаныштарҙы данлауға арналған, тәрән фәлсәфәүи йөкмәткеле «Ленин хаҡында», «Бөйөк Ватан һуғышы тураһында», «Рәсәй», «Дуҫлыҡ хаҡында ҡобайырҙар», «Дуҫ тигәнең шул булыр» ише ҡобайырҙары уның был жанрҙың поэтикаһын төплө аңлауын күрһәтә. Бына бер миҫал:

*Дуҫ тигәнең шул булыр –*
*Теләр теләктең һәйбәтен,*
*Дуҫ тигәнең шул булыр –*
*Һөйләмәҫ дуҫының ғәйбәтен,*
*Һөйләмәҫ дуҫының ғәйбәтен…*

*Дуҫ тигәндең эсендә*
*Эйәрле-йүгәнле ат ятыр,*
*Дуҫ тигәндең хисендә*
*Изге ниәт, хаҡ ятыр.*
*Дошмандарҙың эсендә*
*Бысраҡ, ҡара тап ятыр,*
*Бысраҡ, ҡара тап ятыр*[2].

Кешеләр дуҫлығы, халыҡтар туғанлығы хаҡында фольклорҙа ла, әҙәбиәттә лә бихисап шиғри әҫәрҙәр бар. Ж.Ғ. Кейекбаев ошо теманы – М. Аҡмулла, М. Буранғоловтарса – милли ерлекле традицияларға таянып яҡтырта. Әммә уның

[2]Ж.Кейекбаев. Дуҫлыҡ хаҡында ҡобайырҙар // Совет Башҡортостаны. 1963, 10 ғинуар.

ҡобайырсылығында бер үҙенсәлек күҙгә ташлана: ул сәсәнлек традицияларын заман рухына, яңы эстетик ихтыяждарға бәйләргә ынтыла. Был инде – новаторлыҡтың бер күрһәткесе. Был новаторлыҡтың идея-эстетик кимәле, дөйөм ижтимағи әһәмиәтлелеге, әлбиттә, ижадсының зиһене байлығына, күңеле һиҙгерлегенә һәм поэтик талантына бәйле. Ошо йәһәттән Ж.Ғ. Кейекбаевтың ысын ижади шәхес булыуын күрмәү мөмкин түгел. Ул – күңел-зиһене менән тарихты байҡаусы ла, «йөрәгенә шатлыҡ тулғанда» әйтергә теләгән «Тыуған илде данлаған, Кешеләрҙе һанлаған Бөйөк дуҫлыҡ хаҡында"ғы һүҙҙәрен «Рәсәй уландарына, Башҡорт туғандарына Пак күңелдән – йөрәктән, Аҡ һәм изге теләктән» еткереү ниәте менән киң илде гиҙеүсе лә, дуҫлыҡ төшөнсәһенең асылын, уның бөйөк көсөн аңлатып биреүсе лә. Үҙенең «Дуҫлыҡ хаҡында ҡобайырҙар» тигән әҫәрендә шағир-сәсән ысын мәғәнәһендә фекер, шатлыҡ йырсыһы, кешеләрҙе, халыҡтарҙы һәм илдәрҙе бер-береһенә яҡынайтырға өндәүсе агитатор булып сығыш яһай. Әгәр ҙә:

*Алтындар, ҡоростар табылъан*
*Тауҙарҙа тыуъан ул дуҫлыҡ;*
*Ялҡындар, уттар ҡабынъан*
*Яуҙарҙа тыуъан ул дуҫлыҡ,*
*Арыштар ыуылйып ултыръан*
*Ҡырҙарҙа тыуъан ул дуҫлыҡ;*
*Ярышта сәсәндәр йырлаъан*
*Йырҙарҙа тыуъан ул дуҫлыҡ,*
*Йырҙарҙа тыуъан ул дуҫлыҡ... –*

тигән юлдарҙа ул быуаттар буйына тау-урмандар араһында, дала-ҡырҙар, баҫыуҙар киңлегендә ҡайнаған тормош эсендә, яу яланында, рухиәт донъяһында хеҙмәт, ижад, ҡара тир, ҡан-ҡорбан, ауыр көрәш менән табылған дуҫлыҡтың ниндәй ҡиммәтле һәм һиммәтле рухи, әхлаҡи, сәйәси хазина, изге төшөнсә булыуын фәлсәфәүи планда тәрән һәм масштаблы асып, аңлатып бирһә, түбәндәге юлдарҙа фекер-ҡараш тонын, поэтик форманы кинәт үҙгәртеп ебәрә, тантаналы, поэтик тондан өгөт-нәсихәт уҡыу, өндәү-саҡырыу стиленә төшөп китә, традицион әхлаҡ һәм эстетик ҡараш нормаларына ярашлы рәүештә кешеләрҙе рухи ғәриплектән ҡурсаларға ынтыла:

*Дуҫ кеше ни кейһә лә,*
*Арҡаһы көнгә көймәһен;*
*Дуҫ кеше ни ейһә лә,*
*Теше ташҡа теймәһен;*
*Дуҫ кеше ни менһә лә,*
*Аяъы ергә теймәһен;*
*Дуҫ дуҫының артынан*
*Йәшереп таш сөймәһен,*
*Дуҫмын тигән дуҫ кеше*
*Дошманъа баш эймәһен,*
*Дуҫмын тигән дуҫ кеше*
*Дуҫына сүп-сар өймәһен,*
*Дуҫына сүп-сар өймәһен.*

Шатлыҡ, ғорурлыҡ тойғолары – Ж.Ғ. Кейекбаев ҡобайырҙарында, ғөмүмән шиғриәтендә төп мотив. Мәҫәлән, уның «Бөйөк закон хаҡында ҡобайыры»

(1946) башынан алып аҙағынаса тантаналы тон, ғорурлыҡ тойғоһо, шатлыҡ ауаздары менән һуғарылған. Унда киң, бай илде – социалистик Рәсәйҙе мәдехләү, уның хозур тәбиғәтен, бөтмәҫ-төкәнмәҫ ниғмәттәрен, илһөйәр улдарын, шанлы тарихын йырлау, Ленинға һәм партияға рәхмәт һүҙе «Алтын хәрефтән ҡойолған, Тирәһе буталдан ҡайылған, Илемә ирек нуры сәскән Закондарҙың законы» Конституцияға дан һүҙе менән ҡушыла. Шуға ла әҫәр композицион ҡоролошо менән һәр береһе тамамланған бер бөтөн фекерҙәр шәлкемен үҙ эсенә алған ҡобайыр теҙмәләре циклын тәшкил итә. Һәр теҙем «Һай, Рәсәй, дан илем! Һай, Рәсәй, дан илем!» тигән шиғри клише менән башланып китә лә ил тормошоноң, тәбиғәтенең, рухи-мәҙәни, иҡтисади, сәйәси донъяһының ниндәйҙер гүзәл яҡтарын илһамланып китеп теҙеп яҡтыртыу менән тамамлана[3].

Ғөмүмән, Ж.Ғ. Кейекбаев шиғриәтендә мәдех стиле, публицистик сатҡы, лирик аһәң йыш ҡына бергә үрелеп килә. Уның әҫәрҙәре заман проблемаларына һәм хәл-ваҡиғаларына, тормошҡа ҡарата әүҙем мөнәсәбәттә булған шағир-гражданин, шағир-көрәшсе, шағир-лирик уй-ҡараштарының һәм тойғоларының тәрән кисерешле лә, көсөргәнешле лә, шатлыҡлы ла донъяһын күҙ алдына баҫтыра. «Батыр Матросов» тигән мәдхиә – шуның бер сағыу миҫалы. 1944 йылда ижад ителгән был әҫәрҙә совет һалдатының Тыуған ил алдындағы изге бурысын нисек үтәүе хаҡында ғына түгел, ә намыҫ һәм выжданының шул бурысҡа ҡушылыуы нигеҙендә дошманды еңеүгә индергән ҙур ҡаһарманлығы тураһында һүҙ бара. Әҫәр

*«Ҡараъай ҙа үҫә, һай, дан өсөн,*
*Бал ҡорттары оса бал өсөн.*
*Ир-егеттәр ҙә генә йәшәй икән*
*Тыуъан илкәйенең даны өсөн» –*

тигән эпиграф менә башланып китә. Тыуған илен һаҡлау һуғыштарында әллә күпме быуаттар һуҙымында йәнен аямаған башҡорт халҡының классик тарихи йырҙарынан килгән бындай мотив айбарлы егеттәрҙең Бөйөк Ватан һуғышы яланындағы намыҫ һәм выждан һүҙе булып күңелгә һеңә, Александр Матросов яһаған ҡыйыу аҙымдың тарихи ерлеген аңларға һәм аңлатырға булышлыҡ итә. Совет яугирының был ғәййәр аҙымын һүрәтләү аша шағир халыҡтың ихтыяр көсөн, Тыуған иленең еңелмәҫлеген, көс-ҡеүәтен символлаштыра, был ҡеүәттең рухи-психологик сығанағын күҙ алдына баҫтыра. Ул – тыуған ерҙе, тормошто яратыу, Тыуған илдең данлы тарихи үткәне менән ғорурланыу, уға яу менән килгән дошманға ҡаршы тәрән нәфрәт хисе һәм киләсәккә ҙур өмөт тойғоһо. Әҫәрҙә түбәндәге шиғри юлдар үҙҙәренә күпме мөхәббәт һәм нәфрәт, ғәйрәт һәм өмөт һыйҙыра алған:

*Ул ташланы ъүмерен*
*Еңеү өсөн*
*Дөрләп янып торъан усаҡҡа.*
*Геройҙарса үлде,*
*Даһиҙың һәм*
*Тыуъан илдең данын ҡосаҡлап…*
*Дошман сыъалманы*
*аша баҫып*

[3]Октябрь. 1946. №1. — 94 — 96-сы биттәр.

*Арыҫландай батыр кәүҙәне.*
*Һәм сығалмаҫ дошман!*
*Уның тәне –*
*Шаулап ташты бейек ҡаялай…*

Артабан мәдхиәһендә автор Тыуған иле өсөн ғүмерен биргән батырҙарҙың үлемһеҙлегенә дан йырлай, был ҡаһарманлыҡтың матур киләсәгебеҙҙең бер мөһим сығанағы булыуын раҫлай:

*Быуаттарҙан-быуатҡа ялғаныр*
*Батырлыҡҡа ярған бураҙнаң.*
*Еңеү булыр мотлаҡ*
*беҙҙең яҡта,*
*Еңеү килер, бына,*
*бер аҙҙан…*
*Беҙ күрербеҙ тағы*
*Һәм татырбыҙ*
*Гөлдәр үҫкән шатлыҡ быуатын…*[4]

Ж.Ғ. Кейекбаев дәһшәтле яу йылдарында ижад иткән әҫәре менән тормошто һәм еңеүҙе раҫлаусы башҡорт һуғыш шиғриәтенә үҙ өлөшөн индерҙе.

Ж.Ғ. Кейекбаев – ҙур педагог-әҙип. Быны уның балалар әҙәбиәте өлкәһендәге эҙләнеүҙәре лә асыҡ һөйләй. Башҡорт һүҙ сәнғәте тарихында ул балалар әҙәбиәтен үҫтереүгә тос ҡына өлөш индергән яҙыусы булараҡ мәғлүм бер эҙ ҡалдырҙы. Оло ғалим булып танылғас та әле, ул, тел ғилеме буйынса төрлө яҡлы, ҡатмарлы тикшеренеүҙәр алып барыу, фундаменталь хеҙмәттәр яҙыу менән бер рәттән, тәү ҡарашҡа еңел, ваҡ-төйәк күренгән эш менән шөғөлләнергә лә ваҡыт тапты. Фольклорға тәрән ихтирам менән ҡарап, уның йөҙөндә халыҡтың тормош һабаҡтарын, тарихын, этнографияһын, педагогик, этик, эстетик, фәлсәфәүи ҡараштарын күреп, бөйөк Ушинский, Пушкин, Толстойҙар кеүек, уны йәш быуынды тәрбиәләү маҡсаттарында ижади файҙаланырға тырышты. Шул ерлектә иҫ киткес халыҡсан тел менән яҙылған, балаларға әхлаҡи тәрбиә, эстетик зауыҡ ҡына түгел, күп яҡлы белем дә бирерҙәй ғәжәп бай йөкмәткеле тиҫтәләгән әкиәттәрен барлыҡҡа килтерҙе, хикәйәләр, повестар яҙҙы. Уларҙы, айырыуса уның әкиәттәрен, үҙ ваҡытында уҡ бер башҡорт уҡыусыһы ғына түгел, бәлки, шул осорҙағы уртаҡ Ватаныбыҙ – бөтә СССР уҡыусыһы ла яратып ҡабул итте. Тиҙ арала улар бер нисә тапҡыр башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күреп, балалар әҙәбиәтенең алтын фондына әүерелде. «Урман әкиәттәре» (1954), «Әкиәттәр» (1960), «Терпе тураһында әкиәт» (1970) тигән баш аҫтында тупланған был әҫәрҙәр Ж.Ғ. Кейекбаевтың әҙәбиәт майҙанына тыуған халҡының ауыҙ-тел ижадынан, быуаттар буйына тупланған тормош тәжрибәһенән һут, илһам алып килгән, барлыҡ ижады буйынса фольклор поэтикаһына тоғролоҡ һаҡлаған әҙип булыуын йәнә бер тапҡыр асыҡ күрһәтте. Уларҙа балалар тәбиғәттең серле лә, йәнле лә тормошо, хайуандар, ҡош-ҡорттар донъяһы хаҡында ғәжәп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр, яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, матурлыҡ һәм шөкәтһеҙлек, егәрлелек һәм ялҡаулыҡ кеүек күренештәр менән күҙмә-күҙ осраша, мажаралар илендә гиҙә, уларҙан фәһем ала, тейешле һығымталар яһай.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың халыҡ ижадының иң боронғо һәм иң киң таралған

---

[4] *Ж. Кейекбаев. Батыр Матросов // Александр Матросов. Йыйынтыҡ-брошюра/ Төҙөүселәре Ҡ. Даян, Ж. Кейекбаев. — Өфө, 1944. — 11-12-се биттәр.*

жанрының идея-тематик йөкмәткеһе, формаһы, художестволы эшләнеше үҙенсәлектәрен һаҡлап ижад иткән әҫәрҙәре конфликттары, персонаждары характеры, художестволы шартлылыҡтары кимәле буйынса башлыса хайуандар тураһындағы әкиәттәр төркөмөнә ҡарай.

Әммә әҙип-ғалимдың хайуандар тураһындағы әкиәттәре тематик яҡтан күп төрлө түгел. Улар, нигеҙҙә, теге йәки был хайуанға, ҡош-ҡортҡа хас биологик үҙенсәлектәрҙең, ҡылыҡтарҙың ҡайҙан һәм нисек килеп сығыуын мауыҡтырғыс итеп аңлатыуға ҡоролған. Мәҫәлән, «Айыуҙың ниңә ҡойроғо юҡ?» әкиәтендә «бик оҙон, өрпәйеп, тулҡынланып торған һорғолт ҡойроғо» менән башҡа йәнлектәр араһында һауаланып, шундай уҡ ҡойроғо булған төлкө менән дуҫлашып йәшәгән айыуҙың, хәйләкәр дуҫының «аҡыллы» кәңәшенә, ҡотҡоһона бирелеп, сонтоҡ ҡойроҡло ҡалыуына бик йәтеш «аңлатма» бирелә. Аңралыҡ, ҡомһоҙлоҡ насар һөҙөмтәгә килтерә: ғүмерендә бал ашағаны булмаған, уны тәмләп ҡарарға бик теләгән төлкөнөң солоҡ ҡорттарын ярһытып, үҙенә һыртып, аҙаҡ ерҙә тәгәрәй-тәгәрәй үлтереп бөтөрөү хаҡындағы кәңәшен күп уйлап тормайынса үтәгән айыу ҡорт сағыуҙан ҡурҡып, үлән араһында боҫоп, «күҙен мөлдөрәтеп,.. бал өмөт итеп, ауыҙының һыуы ҡойолоп ятҡан» дуҫын бөтөнләй онота, «солоҡтоң балын кәрәҙе-кәрәҙе менән һоғонорға» тотона, хатта, ҡыҙып китеп, «солоҡтоң эсенә, ағас ҡыуышына уҡ кереп» китә һәм был хәлде күргән кешенең үҙен солоҡ эсенә бикләп тонсоҡтороуынан саҡ ҡасып ҡотола, ҡойроғо солоҡ ҡапҡасына ҡыҫылып өҙөлөп тороп ҡала.

Ҡомһоҙлоғо, аңра-наҙанлығы, бары тупаҫ көскә таянып эш итеүе арҡаһында айыу ауыр хәлгә тарығаны кеүек, әкиәттә төлкөнөң эгоистик маҡсатҡа хеҙмәт иткән аҡыл-зирәклеге һәм хәйләкәрлеге лә хупланмай. Кешенең килеүе тураһында айыуҙы иҫкәртеп тә тормай ҡасып китеп, уға хыянат итеп, ул «йәнлектәр алдында… маҡтана торған» дуҫлыҡтан да, «донъялағы иң тәмле» аҙыҡтан да мәңгегә ҡолаҡ ҡаға.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың әкиәттәрен уҡығанда шул күҙгә ташлана: идея йөкмәткеләре йәһәтенән улар бер бөтөн циклды тәшкил итә. Уларҙа уй-фекерҙәр градацияһы бер-береһен дауам иттереп, тулыландырып килеүе, бер сюжеттың икенсе сюжетҡа бәйле үҫтерелеше күҙәтелә. Әкиәттәренең күбеһендә автор «Ни өсөн?», «Ниңә?» тигән һорауҙар ҡуя ла, хатта уларҙы әҫәрҙәренең атамаһына уҡ сығара ла («Айыу *ни өсөн* ҡыш буйы өңөнән сыҡмай?», «Бал ҡорттары *ни өсөн* кешегә эйәләшкән?», «Айыу ҡырмыҫҡаға *ниңә* үсле, ә ҡырмыҫҡа *ниңә* көслө?» һ.б.), бер яҡтан, уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уята, икенсе яҡтан, бер сюжеттағы мотивты икенсеһендәгенә бәйләй һәм үҫтерә. Әйтәйек, «Айыу ни өсөн ҡыш буйы өңөнән сыҡмай?», «Бал ҡорттары ни өсөн кешегә эйәләшкән?», «Айыу ҡырмыҫҡаға ниңә үсле, ә ҡырмыҫҡа ниңә көслө?» әҫәрҙәрендәге төп мотивтар геройҙың ҡойроҡһоҙ ҡалыуы «трагедияһы» һәм уның сәбәптәрен күҙаллатҡан идеяларҙан этәргес ала һәм эҙмә-эҙлекле үҫтерелә. Ҡойроҡһоҙ ҡалғанға бик ҡайғырып, йәнлектәр алдында ғәрләнеүенән ер аҫтына инерҙәй булып йөрөгән айыу, элекке дуҫының йәйен урманда, үлән араһында йәшеренеп кенә йөрөрһөң дә ул, ә көҙөн, ҡышын «ат ҙурлыҡ кәүҙәң менән ҡайҙа йәшеренә алырһың икән?» тигән һорауының ироник асылы хаҡында уйлап та тормаҫтан, уның: «Һиңә бер генә юл бар хәҙер: көҙ көнө өң ҡаҙып инеп, ҡыш буйына шул өң эсенән сыҡмай тик ятырға ғына ҡала», – тип кәңәш биреүенә бик шатланып, уны еренә еткереп атҡара башлай. Ә инде артабанғы әкиәттә ҡойроҡһоҙ ҡалған «яуыз-яҫытабан» хәҙер «беҙҙең нәҫел- ырыуыбыҙҙы ҡалдырмаҫ, ҡоротор» инде тип хафаланған

бал ҡорттары: «Кеше килеп айыуҙы ла туҡмап ебәрҙе, оябыҙҙы ла рәтләне,.. ҡышҡылыҡҡа тип йыйған балыбыҙҙы ла үҙебеҙгә ҡалдырҙы», – тип кеше янына барырға, унан үҙҙәрен «айыу тигән яуыздан» һаҡлауын һорарға ҡарар иткәндәр. Кеше уларҙы яҡты йөҙ менән ҡаршы алған. Шулай бал ҡорттары кешегә эйәләшеп, ул яһаған «матур-матур умарталар эсендә шатланышып» йәшәй башлаған. Бында шуныһы ҡыҙыҡлы: яҙыусы әкиәтенең идея йөкмәткеһен, сюжет ептәрен хәҙерге заманға, балалар үҙҙәре күреп-белеп йөрөгән тормош күренештәренә килтереп ялғай. «Хәҙер ундай умарталар… колхоздарҙа меңләп бар… Бал ҡорттары… колхоздарға йыл һайын йөҙәр ботлап бал йыйып бирәләр, ти» тигән юлдар менән тамамлап ҡуя ул әҫәрен.

«Айыу ҡырмыҫҡаға ниңә үсле, ә ҡырмыҫҡа ниңә көслө?» әкиәтендә лә ҡырмыҫҡалар тешләүенән ғазап сиккән төлкө «Айыуҙың ниңә ҡойроғо юҡ?» әҫәрендәге ваҡиғаларҙы – үҙе тотоп килтергән ҡуян балаһын яҫытабандың бер үҙе ашап бөтөрөүен, ҡорт балын ауыҙ иттермәүен иҫенә төшөрә, уның өңө эсендә «ҡыш буйына тархан кеүек йоҡлап ятырға өйрәнеп китеүенә лә көнләшә һәм, хәйлә ҡороп,» ҡырмыҫҡаларҙы айыу өңөнә ебәрә. Унда «мискәнән ҙурыраҡ булып, рәхәтләнеп йоҡлап ятҡан» айыуҙың йөнө бик ҡалын булып сыға, тәнен бер ҙә тешләрлек түгел. Шул саҡ ҡырмыҫҡалар уның йөнөн йолҡоп алып, билдәрен «өҙөлә яҙғанса нығытып быуып», дәррәү эшкә тотонғандар, үҙ маҡсаттарына өлгәшкәндәр, хатта айыуҙың мороно эсенә үк инеп киткәндәр. «Балын ашаған өсөн бал ҡорттары мине эҙләп табып, үс алалар микән?» – тип уйлаған «арҡыраяҡ, яҫытабан», ҡото осоп, өңөнән килеп сыҡҡан, үҙен һырып алған эре-эре ҡыҙыл ҡырмыҫҡаларҙы, уларҙың ояларын күреп ҡалған, уларҙы «сапсып туҙҙырырға», үс алырға керешкән. Шунан бирле ҡырмыҫҡалар билдәрен ныҡ итеп быуып эшләгән үҙенә күрә түгел көслө затҡа әүерелгән, ә айыу уларға үсле булып ҡалған. Уның ҡырмыҫҡа ояларын туҙҙырып, ер менән тигеҙләп йөрөү кеүек яуыз ҡылығы үҙ башына булған: һунарсылар өсөн бик ҡулай һынамыш булып киткән.

Ж.F. Кейекбаев бына шулай мауыҡтырғыс итеп, әкиәт стиле менән төрлө хайуандарҙың үҙенсәлекле сифаттарын асып бирә, балаларҙы йәнле тәбиғәт менән таныштыра, уларҙың күңел-зиһен донъяһын байыта. Уның әкиәттәре бик ерлекле, тормошсан. Хайуандарҙы кешесә уйлатҡан, һөйләштергән, эш-ҡылыҡтар ҡылдырған хәлдә лә, уларҙы бөтөнләй «кешеләштереп» тә ебәрмәй, фантастик әкиәттәрҙәге кеүек, тәбиғи булмаған уйҙырмаларға, мажараларға ла төшөп китмәй. Хайуандар үҙ ҡылыҡтары, үҙ сифаттары менән балаларҙың күҙ алдына улар аңларҙай күренештәр, хәл-ваҡиғалар, төшөнсәләр аша баҫтырыла. Уларҙы «кешеләштереү» алымын ҡулланһа ла, автор тормош факттары, ысынбарлыҡ күренештәре менән эш итә. Кесе йәштәге балаларҙың зиһен-ҡеүәһе яҡтылығынан ҡарағанда, был бик урынлы художество алымы булып тора.

Хайуандар тураһындағы халыҡ әкиәттәренә хас булғанса, Ж.F. Кейекбаев әкиәттәрендә ситуацияға ҡарап, ниндәй йән эйәһе менән аралашыуына ҡарап, төп геройҙарҙың ҡылыҡ-ғәмәле нығ ҡына үҙгәреп тә киткеләй. Бына яҙыусының барлыҡ әкиәттәрендә тип әйтерлек осраған төлкө образы. Ул – үтә хәйләкәр, мәкерле, шул уҡ ваҡытта зирәк йән эйәһе. Шундай сифаттарға эйә булыуы арҡаһында ул һәр саҡ тиерлек маҡсатына ирешә, хатта иң көслө кейек – айыуҙы ла йыш ҡына төп башына ултырта. Ләкин нисек кенә хәйләкәр һәм зирәк булмаһын, төлкөнөң үҙенең дә башҡа йәнлектәр тарафынан ауыр хәлгә ҡалдырылған, еңелгән осраҡтары юҡ түгел. Бында халыҡтың һәм, әлбиттә, яҙыусының әхлаҡи-этик, эстетик ҡараштары ҙур роль уйнай: яуызлыҡ һәм

мәкерлек фашланырға тейеш. Был осраҡта әкиәттәрҙә конфликт, ҡағиҙә булараҡ, «көслө – көсһөҙ» антитезаһы тирәһендә ойоша һәм көсһөҙҙәр файҙаһына хәл ителә. Мәҫәлән, «Төлкө менән терпе» әкиәтендә ҡуян, тейен, төрткө, терпе, йомран, ялман, шәшке, көшөл, ирлән, йәтсә, сысҡан кеүек ваҡ йәнлектәр йыйылып, нисек итеп үҙҙәренә көн күрһәтмәгән яуыз төлкөнән ҡотолоу тураһында кәңәш ҡора, төрлөһө төрлө тәҡдим яһай, тик терпе генә: «Ҡорған тоҙаҡтарға, һалған ҡапҡандарға үҙегеҙ генә эләгеп харап буласаҡһығыҙ бит», – тип уларҙың тәҡдимдәрен кире ҡаға тора. Шул саҡ йәнлектәр уны төлкөгә һатылғанлыҡта ғәйепләп, аҡылға ултыртырға булалар, уға дәррәү ябырылалар, хатта иң бәләкәй сысҡан да «батырлыҡ» күрһәтә: беренсе булып терпенең аяғын тешләп ала. Әммә көтмәгәндә төлкөнөң килеп сығыуы була, был «батырҙар» йәндәрен төрлөсә һаҡларға тырышып ята: иң башлап ҡурҡаҡ ҡуян күҙ эйәрмәҫ тиҙлек менән ҡасып китә, тейен ағас башына уҡтала, төрткө ерҙе йырмалап ҡасып китә, ирлән баҫыуға һыпырта һәм ерҙе тәрән итеп ҡаҙып инә, сысҡан да йән-фарман ауыл яғына ҡаса, йорт-ҡура тирәһендә көн күреүсе йәнлеккә әүерелә. Бер терпе генә, күпме тырышһа ла, тиҙ ҡасып китә алмай. «Мин бөтәһен дә ишетеп торҙом. Бөтә ваҡ йәнлектәрҙе миңә ҡаршы ҡотортоусы һин генә. Хәҙер һине юҡ итәм», – тип төлкө бер ниндәй гонаһһыҙ терпегә ташлана. Ҡурҡышынан шар һымаҡ бөршәйгән терпенең йөндәре тырпайып, энәләй ҡатып китә. Һеләгәйҙәрен ағыҙып, уны йоторға уҡталған төлкөнөң ауыҙ эсен ут ялмап алғандай була. Алғы аяҡтары менән этләнә-һыҙлана саҡ тартып сығара ул уны ауыҙынан. Эҫе бутҡа тирәләй йөрөгән бесәй кеүек, һаман терпе тирәһендә хәйлә ҡороп йөрөгән төлкө саҡ-саҡ һунарсының ҡорбаны булмай ҡала. Шулай әкиәттә көсһөҙҙәрҙе йәберләүсе хәйлә, мәкер, яуызлыҡ эйәһе тейешле язаһын ала. Ә бына кәмһетелгәндәрҙе аллегорик кәүҙәләндереүсе терпе образы унда ыңғай, оптимистик планда һүрәтләнә. Үҙен яуызлыҡ, хәйлә ҡорбаны булыуҙан ҡотҡарған кешегә рәхмәтле йәнлек уға изгелек кенә эшләүсе эскерһеҙ, ярҙамсыл зат булараҡ күҙ алдына баҫтырыла.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың «Төлкө менән терпе» әкиәтендә юмористик планда сағылыш тапҡан көслөләр менән көсһөҙҙәр араһындағы көрәш, уның һуңғылар файҙаһына хәл ителеү мотивы, эгоистик маҡсатҡа хеҙмәт иткән көстө һәм зирәклекте хупламау идеяһы уның «Терпе менән йылан», «Төлкө менән бөрсә» әкиәттәрендә лә урын ала һәм ироник ситуацияларҙа яҡтыртыла. Тәүге әҫәрҙә көслөнө көсһөҙ итеп уйлау, йәғни бер нәмәне икенсе төрлө ҡабул итеү, ҡурҡыу-ҡурҡытыуға ҡоролған коллизия, йыландың телмәрендәге маҡтаныу, терпенекендәге ғәҙәттән тыш мәсхәрәләү (сарказм) элементтары көлкөлө картина тыуҙыра. Күп йәнлектәрҙән «шәберәк йүгерәм», «шәберәк ишетәм», «ҙурыраҡ хайуандарҙы йотам», «саҡһам,.. һыйырҙар, хатта айыуҙар, бүреләр ятып үлә» тип кәпәренгән йылан бәләкәй генә бер терпенең үҙенән: «Шулай булһаң да, бик ҡотһоҙ хайуан икәнһең,.. һинең кеүек һыпатһыҙ хайуанды күргәнем юҡ ине әле. Моғайын, берәйһенең ҡарғышы төшкәндер һиңә. Шуға ҡотһоҙ булып ҡалғанһыңдыр», – тип көлөүенә ярһып, бер ялмауҙа йотмаҡ булып, уға ташлана, һәм ауыҙына ҡаҙалған йәнлектән нисек кәрәк айырылып, ҡасып ҡотола.

Эгоистик маҡсатҡа, яман ниәткә хеҙмәт иткән аҡыл-зирәклекте, сослоҡ-хәйләкәрлекте хупламау мотивы, көслөнөң көсһөҙҙөң табышына әүерелеү күренеше алда телгә алынған ике әкиәттең идея-тематикаһы, сюжеттары үҫтерелеше булған һәм улар менән берлектә циклды хасил иткән «Төлкө менән бөрсә» әҫәрендә төп образдың һәм персонаждарҙың характерын, холоҡ-фиғелен ҡыҫҡа, тапҡыр образлы һүрәтләү аша тағы ла сағыуыраҡ, нескәрәк сағылыш

таба. Ваҡ йәнлектәр унан ҡасып, төрлөсә һаҡланып йәшәй башлағас, аслыҡтан эштәре мөшкөлләнеүе сәбәпле ауылға тауыҡ урламаҡ булып килгән төлкөнөң бөтә зирәклеге, хәйләкәрлеге бәләкәй генә бөжәктәр арҡаһында «селпәрәмә» килә. Тиреҫлектә уңайлы мәлде көтөп ятҡан сағында үҙен һырып алған бөрсәләрҙән таланып йөрөй торғас, ул торғаны бер йолҡошҡа әйләнә, бөтөнләй хәлһеҙләнә, тәбиғәт стихияһы арҡаһында осраҡлы рәүештә генә үлемдән ҡотолоп ҡала.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың ошондай характерҙағы әкиәттәрендә халыҡтың әхлаҡи принциптары, эстетик ҡараштары, ыңғай идеалдары юғары художестволы кимәлдә сағылыш таба. Балаларға белем биреүҙә, уларҙың хыял-фантазияһын, зауығын үҫтереүҙә, әхлағын камиллаштырыуҙа әкиәттәрҙең әһәмиәте бик ҙур. Быны уның П. Бажов әҫәре буйынса яҙған «Урал тау әкиәте» лә сағыу дәлилләй. Уны «Каспий далаларынан Боҙ диңгеҙенә» тиклем һуҙылған Урал тауы армыттарының, күлдәре һәм йылғаларының, яландары һәм урмандарының һүҙҙәр ярҙамында тыуҙырылған йәнле «панорамаһы», бай мәғлүмәттәр биргән «географик картаһы» тип атарға булыр ине.

Оло талант һәр ваҡыт күп яҡлы була. Ж. Ғ. Кейекбаев – тап шундай шәхес. Аналитик тәбиғәтле лә, нескә хисле лә шағир, ҡобайырсы сәсән, йор һүҙле әкиәтсе, тапҡыр тәржемәсе булыу өҫтөнә, ул үҙен хикәйә, повесть оҫтаһы, атаҡлы романист итеп тә таныта. Хикәйә һәм повестарында ла ул балалар әҙәбиәтенә тоғролоғон һаҡлай. Был йәһәттән уның «Оморҙаҡ бабай» хикәйәһе айырым бер иғтибарға лайыҡ[5]. Ул мажаралы әҫәрҙәр тибындағы мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡоролған. Үҙәгендә балалар һәм тәбиғәт темаһын, халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән һунарсылыҡ кәсебен, уның үҙенсәлектәрен йәнлектәрҙең холоҡ-ҡылыҡтарын яҡтыртыу, шуларға һәм төрлө хөрәфәттәргә бәйле мажаралы ла, көлкөлө лә хәл-ваҡиғаларҙы бәйән итеү тора. Унда автор балаларҙа тәбиғәткә, ғөмүмән, уратып алған ысынбарлыҡҡа ҡарата фәнни ерекле, гуманлы мөнәсәбәт, һөйөү тойғоһо тәрбиәләү маҡсатын ҡуя. Элек-электән кешеләр өсөн сер булып торған тәбиғәттең улар күңеленә шом һалып килгән күренештәрен мажаралы хәл-ваҡиғалар аша һүрәтләп һәм уларҙың көлкө тыуҙырырҙай серҙәрен асып, ул балаларға убыр, аждаһа, ен һымаҡ хөрәфәттәрҙең реаль ерлеге булмаған буш нәмәләр икәнлеген мауыҡтырғыс итеп күрһәтеп бирә, уларҙа был хөрәфәттәргә ҡарата ышанмаусанлыҡ тойғоһо тәрбиәләй.

Хикәйәттең төп геройы Хөрмәт, өләсәһе убыр әбейҙәре, ен-пәрейҙәр, аждаһалар тураһында ҡурҡыныс итеп һөйләһә лә, олатаһының улар хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәүенә аптырап, берҙән-бер көндө унан был ҡурҡыныс заттарҙы күреү-күрмәүе тураһында һорарға йөрьәт итә. Ғәжәпкә ҡаршы, Оморҙаҡ олатаһы ла аждаһаны ла, ен-пәрейҙе лә күргән икән. Тик, аҙаҡтан асыҡланыуынса, уның аждаһа тигәне үҫмер сағында муйыл йыйып йөрөгәндә, ел-дауыл сығып, йәшен йәшенләп, күк күкрәп, көслө ямғыр яуғандан һуң, дүрт-биш тиҫтере менән ҡабаланып һаҙлыҡ аша сығып килгәндә осраған, уларҙы йығыла-йығыла, муйылдарын түгә-түгә ҡасырға мәжбүр иткән, «ике бүрәнә оҙонлоғо, бүкән йыуанлығы» булып, бер-береһенә эйәрешеп, бейек ҡамыштарҙы ярып һаҙлыҡтан сығып килгән унлаған ҡара һарыҡ булып сыға. Был «мажаралы» хәл хаҡындағы бәйәнде башта шомланып тыңлап ултырған Хөрмәт аҙаҡтан еңел һулап, көлөп ебәрә: бына бит ниндәй «аждаһа»ны осратҡан олатаһы бәләкәй сағында.

*[5]Был хикәйә Ж.Ғ. Кейекбаевтың "Әкиәттәр" (1960) йыйынтығының 41—53-сө биттәрендә баҫылған.*

Оморҙаҡ ҡарт ир ҡорона ингәс күргән ен-пәрей менән дә шундайыраҡ хәл килеп сыға. Көнө буйына һуҫар артынан йөрөп арығанлыҡтан утарҙа таң атҡансы йоҡлаған һунарсы, уянып китһә, ишек төбөндә үҙенә ике күҙен ут һымаҡ баҙлатып ҡарап торған енде күреп ҡото оса, уға яткан еренән генә атып ебәрә. Дары төтөнө таралыу менән, теге юҡҡа сыға. Пәрейҙең башына етеүенә ҡыуанған, күңеленә «йән кергән» Оморҙаҡ утарҙан китергә йыйынғанда ғына енден «сер»енә төшөнә: баҡһаң, «ут һымаҡ баҙлаған ике күҙ» ишеккә тотҡа ҡуйыу өсөн тишелгән ике урындан ҡараңғы утар эсенә төшкән ҡояш нуры икән. «Курҡканға ҡуш күренә, таҡыр ерҙә аты һөрөнә» тигәндәр боронғо бабайҙар. Бер нәмәнән дә ҡурҡырға ярамай», – тип тамамлай Оморҙаҡ бабай ейәненә бәйән иткән һабаҡ булырҙай мажаралы ла, көлкөлө лә хәл-ваҡиғаларҙы.

Ж. Ғ. Кейекбаевтың балалар әҙәбиәтенә, әкиәттәргә, хикәйәттәргә тартым мажаралы әҫәрҙәр стиленә тоғролоҡ һаҡлауы, ижадта фәһемлеккә ынтылыуы «Дуҫлыҡ» тигән повесында ла күҙәтелә. Мажаралы сюжетҡа ҡоролған был әҫәр Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы үҫмерҙәр тормошон сағылдыра. Ҡыҙғаныска ҡаршы, үҙ ваҡытында повесть композицион бер бөтөнлөгөндә уҡыусыға еткерелмәй. Уның айырым бүлектәре генә хикәйә рәүешендә донъя күрә. Ә бына прозаиктың мәктәптә бергә уҡыған яҡын дуҫы, Советтар Союзы Геройы Зөбәй Үтәғолов хаҡындағы әҫәре бер нисә тапҡыр баҫылып сыға, төрлө быуын уҡыусылар араһында киң танылыу таба, рус телендә лә донъя күрә.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың «Зөбәй Үтәғолов» тип аталған был сәсмә әҫәре башлап 1944 йылда баҫыла. Уның һуңғы битенә автор «Сентябрь, 1943, Ҡаранйылға» тип яҙып ҡуйған. Тимәк, китап Жәлил Ғинийәт улы Сәйетбаба урта мәктәбендә директор булып эшләгән осорҙа яҙылған. Унда әҫәрҙең жанры күрһәтелмәгән. Күп кенә мәҡәләләрҙә, мәғлүмәти характерҙағы сығанаҡтарҙа (мәҫәлән, «Писатели Советской Башкирии», 1969; «Писатели земли башкирской», 2006) ул очерк тип билдәләнгән, ә бына Ж.Ғ. Кейекбаевтың «Библиография»һында (2001) хикәйә тип күрһәтелгән. Һуңғы йылдарҙа уны повесть жанрына ҡаратыу осраҡтары ла күҙәтелә.

Композицияһына, образдар системаһына ентекләп күҙ һалғанда, «Зөбәй Үтәғолов»тың кеше тормошондағы бер ваҡиғаға ҡоролған бер сюжетлы хикәйә жанры ҡыҫаһында ҡалған әҫәр түгеллеге күренә. Ул бер яҙмышты ғына яҡтыртыу менән сикләнмәй. Унда персонаждарҙан алып герой, тип кимәлендәгесә образдар галереяһы бар. Ваҡиғалар ҙа бер нисә һәм төрлө урындарҙа бара, сюжет һыҙығы ла шуларға бәрәбәр бер нисәгә тармаҡланып китә. Әҫәрҙең күләме лә ҙур ғына. Ул күп кенә ҡатнашыусыларҙы һәм эпизодтарҙы эсенә алған ҡатмарлы ижтимағи-эстетик күренеште хасил итә. Шуның менән әҫәр, миңә ҡалһа, повесть жанрына тарта.

Әҫәрҙе очерк тип нарыҡлауға килгәндә, бының төп сәбәбе, күрәһең, – уның тормошта булған реаль хәл-ваҡиғаларҙы, уларҙа ҡатнашҡан кешеләрҙе үҙ исем-есемдәре менән нисек бар шулай һүрәтләү кеүек документаль ерлеге. Ләкин унда автор төп герой биографияһын теп-теүәл генә бәйәнләүҙе, уның тулы портретын тыуҙырыуҙы үҙмаҡсат итеп ҡуймай. Шуға ла уны очерк-портрет тип булмай, ә инде очерк-проблемаға ҡаратыу бөтөнләй ситен. Стиль йәһәтенән дә әҫәрҙе фәҡәт документаль йә публицистик очеркка ҡаратыу ауыр. Унда һүрәтләү, тасуирлау саралары, образлылыҡҡа ынтылыу, хыял-фантазияға, уйҙырмаға бирелеү шаҡтай юғары кимәлдә. Әҫәрҙең тәүге биттәренән үк беҙ авторҙың үҙ геройҙарының күңел донъяһын, уй-кисерештәрен, холоҡ-фиғелдәрен, уларҙы уратып алған тәбиғәт, тормош күренештәрен образлы итеп күҙ алдына

баҫтырыу өсөн йәнләндереү, сағыштырыу, диалектизм, архаизм, профессионализм, ирония, синоним, эпитет, антитеза, антоним кеүек төрлө-төрлө һүрәтләү сара-алымдарын, мәҡәл-әйтемдәрҙе киң һәм бик уңышлы ҡулланыуын күрәбеҙ. Миҫалды әллә күпме табырға булыр ине. Дәлил өсөн бер-ике генә өҙөк килтереп үтәйек: «Саңҡуй тауы башына килеп еткәс, *артмағын* һалып, юл буйындағы киҫкә өҫтөнә ултырҙы. Был уй эсенән Баҡыйҙан Маҡарға табан ялан тартым *үтәгә* берҙән-бер юл килеп сыға… Уй башы *алаңҡырт*… Уй башынан ҡарауға уның күҙ алдына бөтөнләй ят бер һүрәт асылды: күҙ күреме ерҙән *ҡыйғыр* яландар *ялтырап күренә, күк* арҡалар *ҡайылып ята*. Алыҫта-алыҫта зәңгәр *саңыртҡа* уранған данлыҡлы Торатау күренә, ул ҡола яланда *кәбәнсе онотоп ҡалдырған* япа-яңғыҙ күбә һымаҡ ҡына булып ослайып ултыра. Уң яҡтараҡ – үркәсле Ҡуштау. Биртабайыраҡ *маңлайҙарын көньяҡҡа сәнсеп ятҡан* шыр яланғас ағасһыҙ тауҙар, улар *кәнте сәсен алдырған* кеше һымаҡ, үҙҙәре лапаҡ ҡына. Был тауҙарҙы ул оҡшатманы… Егеткә ялан тәбиғәте уғата ирмәк тойолдо ахрыһы: ул ихтиярһыҙ керпек ҡаҡмай бик оҙаҡ ҡарап ултырҙы.

Йәйәүләп ер аяғы ер башы юл килеүгә уның аяҡтары талыҡҡан, үҙе *әбеккән, һамҫыған, билғау аҫты ла бәләкәс бушаған*. Ул әҙерәк тамаҡ ялғап алмаҡсы булды». «Йә, йә, әй! – Малайҙар Зөбәйҙе *быуарттылар. Ҡыян* икән был малайҙар, тип уйланы ул эстән генә». «Туҡта, туҡта, ашыҡма, – тине Үтәғолов… – *ашыҡҡан – ашҡа бешкән, әкрен барған – ҡуянға еткән,* тигәндәр ҡарттар. Уйлап эшләргә кәрәк, аҡыл менән». «Ликунов бер ҙә үҙгәрмәне, ул шаяртты: – Ну, егеттәр, *элек килгән урын өсөн, аҙаҡ килгән тамаҡ өсөн*, тигәндәй, үҙегеҙгә түрҙән урын алығыҙ»[6].

Әҫәрҙең ғилем эстәп тыуған ауылын ҡалдырып киткән төп геройы Зөбәйдулла үҙен ҡаһарманлыҡҡа илткән тормош юлында төрлө хәл-ваҡиғалар аша үтә, күп кешеләр менән осраша. Төрлө мөхиттә, төрлө ситуацияларҙа тап булған был кешеләр менән мөнәсәбәттә уның кешелек сифаттары формалаша, тулыраҡ асыла, камиллаша бара. Уның яу яланында батырлыҡ күрһәтеп һәләк булыуына тиклем һәм унан һуңғы халыҡ хәтерендәге ғүмер юлы асылда әҫәрҙең ике төп сюжет һыҙығын тәшкил итә. Тап улар бәләкәйерәк хәл-ваҡиғалар һыҙыҡтарын, эпизодтарҙы үҙҙәре тирәләй туплай, үҙәкләштерә. Автор ошо ваҡиғалар үҙәгендә торған геройының күркәм сифаттарын төрлө яҡлап асыуға баҫым яһап, хикәйәләүгә, әҫәренең тәрбиәүи һәм художестволы-эстетик яғына иғтибарын ныҡыраҡ йүнәлтә. Шул уҡ ваҡытта ул нигеҙһеҙ хыял-уйҙарға юл ҡуймай, мөмкин тиклем герой тормошона бәйле реаль хәл-ваҡиғаларҙы һайлап алып бәйәнләргә, уларҙа ҡатнашлыҡ иткән кешеләр образын үҙ асылында, йәғни нисек бар шулай яҡтыртырға тырыша. Быларҙың бөтәһе лә күпмелер дәрәжәлә әҫәрҙең документаль-биографик һыҙығын барлыҡҡа килтерә. Композицион төҙөлөшө йәһәтенән әҫәрҙә тарҡаулыҡ, фрагментарлыҡ, эскизлыҡ һиҙелеп ҡалһа ла, ундағы күҙгә күренер художестволы һыҙат-сифаттар ана шул һыҙыҡ менән берлектә уны документаль повесть тип иҫәпләргә тулы нигеҙ бирә.

Повесть, үҙенең документаллегенә ишаралағандай, төп герой Зөбәйдулланың «нисәмә быуаттар урманға ҡаушырынып», тау араларында ятҡан тыуған ауылы Баҡыйҙың тарихын, ундағы халыҡтың көн итеү шарттарын ҡыҫҡаса ғына һүрәтләүҙән башланып китә. Баҡыйҙар яҙын ҡыуғын ҡыуғандар, һал бәйләп ағыҙғандар, йәйен «йүкә ағасы ашҡаяҡ саҡта, кемуҙарҙан һалабаш төшөргәндәр, дегет ҡайнатҡандар, умарта күтәргәндәр,.. солоҡ юнығандар,.. манма һыуға

[6] *Ж.Кейекбаев. Зөбәй Үтәғолов. — Өфө, 1944. — 5, 9, 24, 28-се биттәр.*

төшөп… бесән сабыр булғандар», ҡышын инде «туғын сапҡандар, күнәк-санаҡ эшләгәндәр, һунарға йөрөгәндәр». Шулай ҡара көс менән көн күргән төпкөл ауылдан бер көндө таң һарыһынан 14 йәшлек үҫмер, атаһының: «Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала? Ағайың уҡығас та етәр», – тип теше-тырнағы менән ҡаршы тороуына ҡарамаҫтан, арҡаһына бестрәүләп аҙыҡ-түлек, кейемһалым һалынған тоҡ аҫып, оҙам юлға сығып китә. Уй-теләге бер генә: «Уҡырға,уҡырға! Бер нәмәгә ҡарамай уҡырға». Маҡсатына өлгәшә тырыш малай: олоҫ үҙәге Маҡарға килеп, «белем ҡаяларының итәгенә барып менеүсе дәртле йәштәр араһына инеп китә… Ҡылау тауының битендә ыуылйым ултырған ҡара көртмәлене сүпләгән һымаҡ, белем еләктәрен сүпләй башлай». 1939 йылға тиклем дауам итә уның шулай «белем еләктәрен сүпләүе». Шул йылда Өфөләге Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлап, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып китә. Мәләүез районында янып-дәртләнеп эшләгән, институтта уҡыған сағында дуҫлашҡан ҡыҙы Дина менән ғаилә ҡороу, балалар үҫтереү хаҡында яҡшы пландар ҡороп йөрөгән сағында һуғыш башлана. Һөҙөмтәлә бөтә матур уй-хыялдар селпәрәмә килә. Зөбәй һуғыш башланғандың икенсе көнөндә үк фронтҡа китә. «Ҙур уҡыған кешене» һуғышҡа алмаҫтар әле, тип «улы менән киленен бал ҡойоп, тәкәләр һимертеп сабырһыҙлыҡ менән көткән» Фаиза әбейгә уның хаты ғына килеп төшә.

Ут-ғәрәсәт эсенә Зөбәй таланған, яндырылған Украина ерендә барып инә. Форсат сыҡҡан һайын ул яуҙаштары менән бергәләп украин крәҫтиәндәренең йорт-ҡаралтыларын, колхоз ҡуралырын аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итә. Институтта немец телен ярайһы ғына өйрәнгән яугирға, әсирҙәрҙән һорау алғанда, йыш ҡына тәржемәсе ролен дә үтәргә тура килә. Бындай эпизодтарҙа автор төпкөлдән генә сыҡҡан башҡорт егетенең ниндәй мәҙәниәтле, һәләтле, уҡымышлы, кешелекле булыуына баҫым яһай. Әҫәрендә ул хатта уның немец әсирҙәренә биргән һорауҙары һәм уларҙың яуаптарына яһаған тәржемәләре текстарын тулы килеш килтерә, русса-немецса махсус хәрби һүҙлекте нисек еңел үҙләштереүен ентекләп һүрәтләй.

Бына ошондай эпизодтар аша Ж. Ғ. Кейекбаев үҙ геройын төрлө яҡлап ҡылыҡһырларға, уның ябай, әммә күңел-зиһен донъяһы бай, тормошҡа ҡарашы киң шәхес, илһөйәр һәм телһөйәр патриот булыуын күрһәтеп бирергә, уны ҡаһарманлыҡҡа илткән кешелек сифаттарын, йәшәү принциптарын күҙ алдына баҫтырырға тырыша.

Зөбәй Үтәғоловтың бай күңелле, киң ҡарашлы, ярҙамсыл, ихлас кеше булыуы рота командиры Ликунов, взвод командиры Рубцов менән булған алсаҡ аралашыуында, төплө һәм урынлы фекер-лөғәт алмашыуында тағы ла асығыраҡ күренә. Ябай һалдат ысын мәғәнәһендә уларҙың матур әңгәмәсеһе, кәңәшсеһе, таянысы була. Уның кеше күңелен йылытыр йә уйға һалыр һәр һүҙенә иғтибарлы улар. Быны иҫбатлар күренештәр күп осрай әҫәрҙә. Шуларҙың береһен генә килтереп үтәйек: «Бөгөн төнө буйы буран ойоҡһотоп торҙо. Ләпшелдәп торған мәре ҡарлы был йылы буранды шиһаҡа бураны йәки аҡман-тоҡман бураны тип йөрөтә ҡарттар… Гвардеец Зөбәй Үтәғолов тышҡа сығып әйләнде.

– Ошоноң кеүек йәбешкәктә малайҙар менән ҡар бәрешеп уйнай торғайныҡ беҙ бәләкәй саҡта, – тине ул күршеһенә. Уның был һүҙен амбразуранан ҡарап тороусы Ликунов ишетеп ҡалды һәм ул:

– Ә хәҙер, олоғайғас, ҡурғаш менән бәрешәбеҙ бына уның урынына, – тине»[7].

---

[7]Ж. Кейекбаев. Зөбәй Үтәғолов. – 22-23-сө биттәр.

Һәр яуаплы эште ышаныслы, төплө, алсаҡ гвардеецҡа йөкмәтер йә уның менән бергәләп башҡарыр булып китә командирҙар. Тимер юлы станцияһын, уның аръяғындағы ҡасабаны немецтарҙан азат итеү өсөн барған ҡан ҡойғос һуғышта ла шулай була: взвод командиры тап Үтәғолов менән бергә тимер юлы эргәһендәге дошман нығынған йорттоң көлөн күккә осора, рота яугирҙарының һөжүменә юл аса; рота командиры тап Үтәғолов һәм йәнә ике һалдат менән ҡасаба ситендәге мәктәпкә бәреп инә, ундағы немецтарҙы юҡ итә. Уларҙың ҡыйыулығынан илһамланған яугирҙар йәнә ике йортто баҫып ала. Ләкин фашистар тиҙ генә бирешергә теләмәй, танкылар ярҙамында һөжүмгә күсә, һигеҙ танкыһын юғалта. Уларҙың береһен үҙен аямай һуғышҡан Үтәғолов юҡ итә. Әммә, ҙур юғалтыуҙар иҫәбенә, немец һалдаттары өйҙәрҙе һәм мәктәпте ҡамап, улар тирәләй һалам һалып, ут төртөүгә өлгәшә. Ләкин бер генә совет яугиры ла, янып үлһә үлә, дошманға бирелмәй. Зөбәй ҙә, рота командирынан рөхсәт алып, мәктәп ишеген миналай. Дошман бәреп инергә ынтылған саҡта, лейтенант Ликунов – «Россия өсөн!», ә рядовой Үтәғолов «Ә мин Россия һәм Башҡортостан өсөн!» тигән ант һүҙҙәрен әйтеп, ҡосаҡлашып хушлашҡан килеш, үҙҙәре менән бергә бер өйөр немецтарҙы шартлата.

Батыр үҙе ҡайта алмаһа ла, даны тыуған яғына әйләнеп ҡайта. Республика, район, ауыл Советы, партия етәкселәренән алып Баҡый ауылының һәр кешеһенә тиклем Зөбәй Үтәғоловҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелеүенә ҡыуаналар, уның менән ғорурланалар. Ә бына әсә кешегә шөһрәтле исем түгел, баланың үҙе ҡәҙерлерәк. Улына илдең иң юғары наградаһын биреү тураһында гәзиттә баҫылған указ тексын уҡып ишеттергәс тә, Фаиза әбейҙең тәүге һүҙе: «Ҡасан ҡайта тигән һуң?» – тигән һорау була. Әсәгә улының үлеме тураһында әйтергә ҡыймаған ауыл Советы рәйесе лә, сәркәтибе лә: «Уныһын яҙмағандар яҙыуын… Ул дошманды төбө-тамыры менән ҡырып бөтөргәс тә ҡайтасаҡ», – тип яуап ҡайтарғас, әбей сабый бала һымаҡ шатлана, хатта барлы-юҡлы аҙыҡ-түлегенән табын әҙерләй һалып, оло улы менән киленен, күрше-күләнен сәйгә саҡырып ала. Унда ул улын маҡтауҙарына, әсә һиҙеп ҡуймаһын инде, тигән уй менән уның иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуын, үҙенә бер таяныс булыуын теләүҙәренә эстән генә ҡыуанып, баҫалҡы ғына: «Һе-э шул!» – тип әйтеүҙән, ҡәнәғәтлеген, шатлығын шул рәүешле белдереүҙән ары китмәй.

Повеста композицион тарҡаулыҡ, күренештәрҙе, хәл-ваҡиғаларҙы, образдарҙы яҡтыртыуҙағы эскизлыҡ үҙҙәрен шаҡтай һиҙҙертһә лә, бына шундай көтөлмәгән күренештәр, киҫкен ситуациялар, башҡорт, рус һәм башҡа халыҡтарҙың характерлы һыҙаттарын күҙ алдына баҫтырырҙай образдар һәм ҡапыл да күҙгә салынып бармаҫтай образ-деталдәр аша Ж.Ғ. Кейекбаев халыҡтың тәрән аҡылын, илһөйәр рухын, яу яланындағы һәм тылдағы хайран ҡалырлыҡ ҡаһарманлығын, ғәжәйеп баҫалҡылығын, түҙемлеген бөтә типиклығында ярайһы уҡ тәьҫирле социаль-психологик тәрәнлек менән асып биреүгә өлгәшә. Был яҙыусының, бөтә башҡорт прозаһы масштабында уҡ булмаһа ла, мөһим бер ижади уңышы ине.

Шулай итеп, Ж. Ғ. Кейекбаев, аналитик тәбиғәтле, нескә хисле шағир, ҡобайырсы-сәсән, йор һүҙле әкиәтсе булыуы өҫтөнә, үҙен хикәйә һәм повестар оҫтаһы итеп тә танытты. Уҙған быуаттың 30 – 60-сы йылдарында ул, талантлы ҡәләмдәштәре менән бер рәттән, башҡорт әҙәбиәтенең матур биттәрен яҙышты.

**Ғиниәт ҠУНАФИН,**
**филология фәндәре докторы, профессор.**

# Ебәрелгән һәм алынған хаттар

Беҙ – Кейекбаевтарҙың балалары, һөйөклө атайыбыҙ (Жәлил Ғиниәт улы) менән ғәзиз әсәйебеҙҙең (Халиҡова Нәфисә Хәлил ҡыҙы) 1940 йылда танышып, шунан йыл дауамында хатлашыуҙарын, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас өйләнешеүҙәрен белә инек. Әммә уларҙың хаттары һаҡланыуы миңә атайымдың вафатынан аҙаҡ мәғлүм булды: әсәйем менән өй китапханаһын рәтләп булашҡанда эре томдар араһында ҡыҫтырыулы бер бәйләм иҫке ҡағыҙға юлыҡтым. Әсәйем: „Мәрхүм атайығыҙ менән минең хатлашыуым унда, уҡырға ярамай... Минең шәхсән иҫтәлегем... Ул монаятты үҙем менән бергә ҡәбергә күмеү фарыз“ , – тип хаттар менән ҡыҙыҡһыныуымды тыйҙы. Ни хәл итәһең, ҡушҡанды тыңланым, әҙәп һаҡлап, аманат хаҡында ҡабат һүҙ ҡуҙғатманым.

Икенсе тапҡыр хаттарҙы 2007 йылда – бер туған энем Морат* атайыбыҙҙың барса документтарын һәм ҡағыҙҙарын БР үҙәк дәүләт архивына тапшырғас күрҙем. Архивта мин атайыбыҙҙың мираҫы нисегерәк һаҡланыуын белергә теләгәйнем, ҡәнәғәт ҡалдым: бөтәһе лә тәҫләп һаҡлана, тик монаяттарҙың бер өлөшө бүлектәргә төркөмләнеп бөтмәгәйне.

Баҡһаң, музейҙың бер нисә хеҙмәткәре атам-әсәмдең һуғыштан алдағы хатлашыуҙары менән ентекләп танышҡан һәм бик оҡшатҡан икән. Бына шулай, ҡәҙерлеләремдең икәү-ара уғата шәхсән хаттарын ят күҙ-ҡулдарҙан үткәнлеген белгәс кенә, үҙемдә лә уларҙы уҡып сығыу теләге уянды.

Бер ниндәй ҙә фән аңлата алмай: ниңә бер кеше үҙенең тормош юлында осраған бихисап кешеләр араһында ҡапыл ғына икенсе кешене күрә, ул иһә уның яҙмышына әйләнә.

Аҡыл эйәләренән кемдер әйткән: „Хоҙай ир кешегә талант бирә, Хоҙай ир кешегә ҡатын бирә“. Моғайын, беҙҙең ата-әсәләребеҙ менән дә ошолай булғандыр.

...1940 йыл, август. Жәлилгә егерме һигеҙ йәш. Өфө педтехникумында, Мәскәүҙә сит телдәр пединститутында биш йыл уҡыу, Мәскәү янындағы Рошаль ҡалаһында бер йыл сит ил телдәре уҡытыусыһы булып эшләү, Өфөлә медицина институтында преподаватель булыу, сит телдәр институтында бер йыл директор урынбаҫары вазифаһын башҡарыу йылдары – артта.

Моғайын, Хоҙай шулай теләгәндер, беҙҙең әсәйебеҙ туғыҙынсы класты тамамлағандан һуң, 1940 йылдың йәйге каникулында үҙенең атаһы Халиҡов Хәлил һәм бәләкәй һеңлеһе Рәйсә менән ун йыл уҙғандан һуң тәү тапҡыр Урта Азияның Ғафури районының Үтәш ауылындағы туғандарына ҡунаҡҡа ҡайтҡан.

* *Морат Жәлил улы Кейекбаев — 1959 йылда тыуған. Социология фәндәре докторы, тарих фәндәре кандидаты, РФ Дәүләт Думаһы депутаты.*

Урта Азияға кире китергә бер нисә көн ҡалғас әсәйебеҙ үҙенең әхирәте менән Ғафури районының Еҙем-Ҡаран ауылы баҙарына бара.

Шул уҡ көндө, шул уҡ мәлдә ошо баҙарға атайыбыҙ ҙа килә, ул иһә йәй һайын Еҙем-Ҡарандан алыҫ булмаған тыуған ауылы Ҡаранйылғала ял иткән. Әсәйем ул саҡта баҙарҙа уны күрмәй, ләкин атайым, уны тәү күреүҙән үк ғашиҡ була. Әлбиттә, әсәйем башҡаларҙан айырылыбыраҡ торған, был яҡтарға хас булмағанса ҡояшта яныуы менән дә. Ул буйға һомғол, зифа, ике йыуан ҡара толомло була сәсе, яҫы маңлайына улары тулҡынланып төшкән. Ҡуйы ҡара ҡашлы һәм ҡара күҙле була.

Ул көндө атайым уға яҡын барырға баҙнат итмәй, әммә уның ҡайҙан, кем икәнлеген белешә. Аҙаҡ инде Өфөлә уртаҡ таныштары ярҙамында Нәфисә менән танышырға, ул китерҙән алда адрестар менән алмашырға ярҙам итәләр. Хәйер, былар хаҡында уларҙың хаттарында ентекле күрһәтелгән.

Мин бик тә хөрмәт иткән Мәрйәм Бураҡаева Үҙәк архивта эшләгән килененән атам-әсәмдең хаттары хаҡында белгәс, был хаттарҙы үҙенең сираттағы бөйөк кешеләр мөхәббәте серияһының сираттағы китабында баҫырға һораны минән.

Әгәр ҙә был хаттар ир кеше менән ҡатын кеше араһындағы мөхәббәт хаттары ғына булһа, мин уларҙы ташҡа баҫырға ҡыймаҫ инем. Ләкин был хаттар, әлбиттә, йәш егет менән ҡыҙ араһындағы мөхәббәт хаҡында, шулай уҡ атай-әсәйҙәргә, туғандарға, яҡташтарға, дуҫтарға, ғәзиз Башҡортостан тупрағына, уның тәбиғәтенә, Уралға, Ағиҙелгә, Өфөгә, Мәскәүгә, халыҡ йырҙарына, ҡурай моңдарына – ғөмүмән, кешеләргә һәм тормошҡа һөйөү хаҡында.

Атайымдың бынан етмеш йыл элек әсәйемә ун ай эсендә яҙған хаттары үҙенең мемуарҙары, фәнни һәм әҙәби әҫәрҙәре, кем тарафынандыр Кейекбаевтың биографияһын йә уның хаҡында иҫтәлек яҙғандар биргәндән кәмде бирмәй. Был хаттарҙа ниндәйҙер художестволы дөйөмләштереү һәм ысынбарлыҡты үҙгәртеп һүрәтләү юҡ; уларҙа донъяның асылын эскерһеҙ ҡабул итеү бар.

Кейекбаевтың хаттары – уның уйҙары, тойғолары, кәйефтәре ул. Был хаттар йәш Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың характер һыҙаттарын, уның донъяға ҡарашының, ҡыҙыҡһыныуҙарының киң икәнен, үҙен уратып алған кешеләр менән мөнәсәбәтен, әхләҡи тормош принциптарын сағылдыра, был принциптарға иһә ул ғүмеренең аҙаҡҡы көндәренә хәтлем хыянат итмәне. Кейекбаевтың хаттары Бөйөк Ватан һуғышы башланмаҫ борон 1940-1941 йылдарҙағы һуңғы тыныс тормош мөхитен тойомларға мөмкинлек бирә. Был хаттарында атайым үҙе тормошон шундай образлы итеп һүрәтләй, уларҙы уҡығанда гүйә мин бынан етмеш йыл элек уның менән Өфө урамдары буйлап йөрөгәндәй хис итәм. Бына урамдарҙы тәүге һепертмә буран ҡаплай, ана уларҙан яҙғы гөрләүектәр шаулап йүгерә, ҡала алма ағастарының һәм муйылдарҙың аҡлығына күмелә, уларҙың ботаҡтарында гүйә һандуғастар һайрай; гүйә мин атайым менән бергәләп театрҙар һәм кинотеатрҙар афишаларын уҡыйым, театр тамашалары, яңы кинокартиналар хаҡында уның фекерен тыңлайым; хаттарҙы уҡып, атайым менән бергәләп Мәжит Ғафуриҙың алтмыш йыллыҡ юбилейына барғандай, һуғыштан алдағы һуңғы 1 май демонстрацияһында йөрөгәндәй булдым. Һәм Ағиҙелдең текә ярында атайыма йәнәш торғандай хис иттем, гүйә унда 1941 йылдың яҙындағы икһеҙ-сикһеҙ дарья менән һоҡландым. Шулай уҡ үҙемде атайым

менән бергәләп уның дуҫтары башҡарыуында ҡурай моңдарына кинәнгән, башҡорт халыҡ йырҙарын мөкиббән тыңлағандай хис иттем. Таулы урмандарҙың һауаһын һулағандай, уның йәнтөйәгендәге үләндәрҙең һәм сәскәләрҙең еҫен тойғандай булдым.

Әсәйебеҙ Нәфисәнең хаттарын – тормошҡа сыҡҡансы ул Халиҡова фамилияһы менән дә йөрөй – мин тәүҙә атайымдың хаттарына ҡуша матбуғатҡа бирмәҫкә теләгәйнем. Ләкин әсәйемдең хаттары шуны күрһәтә: уның, ун һигеҙ йәшлек ҡыҙҙың шундай сифаттары булған ки, һәм шул сифаттар атайымды шундай ҡыҙыҡлы хаттар яҙырға этәргән дә инде. Быға ҡәҙәр әсәйем инде донъяның әсеһен татырға, күпте аңларға өлгөрә. Тормошҡа уның етди, реаль ҡарашы ярала. Атайым менән хатлаша башлаған саҡтарҙа әсәйем бик ҡыйын тормош хәлдәрен кисерә. Һәм беҙҙең буласаҡ атайыбыҙ, әлбиттә, уға терәк була. Әсәйебеҙ музыка ярата, уҡыу менән мауыға һәм етди әҙәбиәтте күп уҡый. Атайым ише ул да үҙенең Урта Азиялағы тормошон образлы һәм мауыҡтырғыс итеп тасуирлай. Атайым менән икеһенең дә күп әхләҡи проблемаларға уртаҡ ҡараштары асыҡлана һәм, әлбиттә, уларҙың икеһен дә Ватанға – тыуған Башҡортостанға, башҡорт теленә, башҡорт йырҙарына уртаҡ һөйөү берләштерә.

Әсәйем Урта Азияла ун йылдан ашыу йәшәй, урыҫ мәктәбендә белем ала, башҡортса яҙыу ҡағиҙәләрен онота төшә, шул сәбәпле күп кенә хаттары яртылаш рус телендә яҙылған. Әгәр ҙә әлеге хаттарҙағы рус һүҙҙәрен башҡорт теленә йә иһә башҡорт һүҙҙәрен рус теленә тәржемә итһәң, улар әсәйемдең шәхсиәтен сағылдырыу һәләтен юғалта һәм, иң мөһиме, улар атайым уҡыған һәм күңеленә һеңдергән хаттарҙың тәбиғилеген һәм хиссиәтен юғалтасаҡ.

Әсәйем атайымдан килгән бөтә хаттарҙы ла һаҡлаған шикелле. Әммә уның атайға һалған бер нисә хаты ғәйеп. Ихтимал, улар килеп тә етмәгәндер...

Йәнә шул: хаттарҙың һәммәһе тиерлек яҙылыу календары буйынса тәҡдим ителә, бүтәнсә „хат һалдым – яуап алдым“ тәртибе боҙола. Сөнки атайым йә әсәйем, ебәргән хатына яуап та көтөп тормай, ҡабат ҡағыҙ-ҡәләмгә үрелгән.

Матбуғатҡа әҙерләгәндә бәғзе хаттарҙың элеккеләренә оҡшаш баштарын һәм аҙаҡтарын ҡыҫҡартыуҙы кәрәк таптым.

Ҡайһы бер хаттарҙың аҙағында һәм иң һуңынан, хаттарҙы уҡығанда үҙемдә тыуған уйҙарҙы һәм хәтирәләрҙе өҫтәп, комментарийҙар бирәм.

**Зөһрә КЕЙЕКБАЕВА,**
**М. Аҡмулла исемендәге**
**Башҡорт дәүләт университеты доценты,**
**педагогия фәндәре кандидаты,**
**Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы.**

**25 сентябрь, 1940 йыл, Өфө**

*Нәфисә, Һеҙгә бик күп сәләм. Үҙемдең хәлдәр һаман бер көйө.*

*Эш ҡыйратырҙай булып эшләп йөрөгән көн. Уҡыуҙарҙы башлап ебәрҙек. Нәфисә, Һеҙ миңә бик асыуландығыҙ, шикелле, хәтерегеҙ ҡалды, буғай. «Төшөнмәйем» тигәнһегеҙ. Шулай булғас, билгеле, асыуланғанһығыҙ. Ләкин мин Һеҙҙең асыуланмауығыҙҙы үтенер инем. Әгәр асыуланмаған булһағыҙ, ошо адрес менән хат яҙырһығыҙ: Сталин урамы, 22, 1-се квартир. Асыуланған булһағыҙ, хәл юҡ. Иҫән-һау барып еттегеҙме? Һеҙ бик шәп уҡыйһығыҙҙыр инде. Шәп уҡыуығыҙҙы теләп ҡалам. Мин октябрҙә Мәскәүгә барам, фәнни командировкаға. Башҡа артыҡ хәбәрем юҡ. Сәләм менән Жәлил. Хат яҙығыҙ, әгәр төшөнгән булһағыҙ һәм хәтерегеҙ ҡалмаған, асыуланмаған булһағыҙ. Хуш, уңышлыҡтар теләп ҡалам.*

**7 ноябрь, 1940 йыл, Өфө**

*Нәфисә!*

*Бик күп сәләмдәремде ебәрәм. Һеҙҙе һәм Һеҙҙең шат йәшәүегеҙҙе теләп ҡалам. Һеҙҙән хат килеү мине шул тиклем шатландырҙы, һүҙ менән әйтеп бирерлек түгел. Киреһенсә, Нәфисә, Һеҙ мине онотҡанһығыҙҙыр инде, тип уйлай инем әле. Иҫегеҙгә төшөрөп хат һалыуығыҙ өсөн бик ҙур рәхмәт.*

*Мин кисә генә Мәскәүҙән ҡайтып төштөм. Былай ҙа бик күтәренке рух менән, шат ҡайтҡайным, өҫтәүенә, ҡайтыуыма Һеҙҙән хат килеп торған. Ул мине тағы ла шатландырҙы. Мәскәүгә китмәҫ борон мин һеҙгә бер открытка яҙып һалғайным, күрәһең, Һеҙ уны алмағанһығыҙҙыр.*

*Мәскәүҙә бер айҙан артығыраҡ йөрөнөм. Командировканы ла, отпускымды ла шунда уҙғарҙым. Әйбәт кенә ял иттем, театрҙарға, киноларға йөрөнөм, ауыл хужалығы күргәҙмәһендә булдым. Мәскәүҙә минең таныштар, бергә уҡыған иптәштәр бик күп, улар менән осраштым. Башҡортостандан барған иптәштәр күп. Шулар менән бергә-бергә әйбәт кенә уҙғарҙыҡ ваҡытты. Һуңға табан бик ҡайтҡы килә башланы. Байрамға Өфөгә ҡайтып етергә ашыҡтым. Шуныһы: Мәскәүҙә шау-шыу бик көслө, өйрәнмәгән кешегә ҡыйын. Хәрәкәт бик тығыҙ. Өфөлә байрам иттем. Мәскәүҙә итергә мөмкин ине, ләкин Өфөнө бик һағындым. Бында өйрәнгән ер. Иптәштәр, дуҫ-иштәр Мәскәүгә ҡарағанда күберәк. Ҡурайсы, йырсы иптәштәр бар, шулар менән байрам итеүе күңеллерәк булыр, тинем.*

*Мәскәүҙә мин бик күп байрам иттем. Сталин, Молотов, Ворошилов һәм башҡа юлбашсыларҙы бер нисә тапҡыр күрҙем мин. Ҡыҙыл майҙандан әллә нисә тапҡыр үттем.*

*Ләкин Өфөлә көн насар булды, ҡар ҡатыш ямғыр яуып ебәрҙе, аяҡ аҫты бик бысратты. Шулай ҙа күңелле булды…*

*Нәфисә, мин Һеҙҙең менән ултырған, һөйләшкән минуттарҙы һис бер ваҡытта ла онотмаясаҡмын. Ул минуттар изге бер төш кеүек кенә минең өсөн ул. Әҙ генә ваҡыт эсендә минең өсөн бер ғүмер булып ҡына ҡалды. Ләкин һеҙ асыуланмағыҙ, Нәфисә… Кеше менән асыуланышһам йә иһә ирешһәм, шундуҡ ярашам мин.*

*Тау тау менән осрашмай, кеше кеше менән осрашыр, тиҙәр бит. Бәлки, ғүмер бар булһа, беҙгә тағы ла осрашырға тура килер. Осрашыуыбыҙ ҙа бик мөмкин, кешеләр ағас башынан йөрөмәй бит – ерҙән йөрөй. Әйткәндәй, осрашһаҡ, мин бик шатланыр инем…*

*Түҙемһеҙлек менән хат көтөп ҡалам һәм, оҙаҡламай ҡаршы яуап хат яҙырһығыҙ, тип ышанам, киләһе хатығыҙға күп һүҙҙәр яҙығыҙ, дөрөҫ адресығыҙҙы бел-һәм, күп һүҙҙәр яҙыр инем, тигәнһегеҙ бит хатығыҙҙа.*

*Миңә бер карточкағыҙҙы ебәрер инегеҙ, Нәфисә, бер иҫтәлек булыр ине, исмаһам, ҡарап иҫкә алыр инем.*

*Ярай, хушығыҙ, Нәфисә. Бик күп сәләм үҙегеҙгә.*



(Атайым Мәскәүҙә уҡыған йылдарын һәр саҡ һағынып хәтерләй торғайны. Ысын интеллигент булған ғалим-уҡытыусыларҙы — бигерәк тә. Студенттарҙы хөрмәт иткән һәм уларҙың аңына үҙ-ҙәре уҡытҡан фәнде еткерә алған өсөн. Студенттар араһында бер-береңә таяныу һәм үҙ-ара ярҙамлашыу хөкөм һөргән. Мәскәүҙең үҙендә тыуып-үҫкән һәм илебеҙҙең төрлө тарафтарынан килгән студенттар араһында бер ниндәй ҙә айырымланыу булмауын, ғәрип булараҡ, иптәштәренең уға ҡарата, хәстәрлек күрһәтеүҙәрен рәхмәт тойғолары менән иҫләр ине.

Атайым Ҡыҙыл майҙан трибунаһында күргән ил етәкселәренән башҡа кешеләр хаҡында ла һөйләй торғайны. Студент сағында ул иптәштәре менән бергәләп яҙыусылар, шағирҙар, билдәле кешеләр менән осрашыуҙарға йөрөргә, төрлө әҙәби сараларҙа ҡатнашырға ятаҡан. Атайым уҡыған институт студенттары утыҙынсы йылдар башында сит илдән СССР-ға Максим Горькийҙың ҡайтасағы хаҡында хәбәрҙе ҙур энтузиазм менән ҡабул итә. Атайым араларында булған студенттарҙың ҙур төркөмө атаҡлы һәм бөтәһе лә ятаҡан яҙыусы ултырып киләсәк поезды ҡаршылар өсөн вокзалға бара. Поезд вокзалға яҡынлашҡас, студенттар М. Горькийҙы вагон тәҙрәһенән күрә. Ҡыуаныс һәм һоҡланыу менән студенттар Горькийҙы ҡысҡырып сәләмләй, яуапҡа Горький уларға ҡулын болғай. Һуңынан атайыма башҡа студенттар менән бергәләп совет яҙыусыларының I съезы барған ултырыштар залы галеркаһына эләгергә насип итә. Трибунаға Горький сыҡҡас галерканан студенттар хурлау ауаздары һәм ҡул сабыуҙар менән уны бөтәһенән дә яңғырауыҡлыраҡ тәбриклә́й. Горький галерка яғына ҡарай ҙа уларға яңынан ҡул болғай. Атайым һөйләй торғайны: студенттар шул саҡта Горькийҙың үҙ-ҙәренә ҡул болғауына ышанған, сөнки ул кемдәрҙең үҙен вокзалда ҡаршылауҙарын таныған.)

**Редакциянан: артабан да З. Ж. Кейекбаеваның комментарийҙары йәйәләр эсендә бирелә.**

**17 ноябрь, 1940 йыл, Карши**

*Жәлил ағай!!!*

*Һеҙгә күптән-күп сәләм! Иҫән-һау һәм күңелле йәшәүегеҙҙе теләп ҡалам. 7 ноябрҙә яҙған хатығыҙҙы алып уҡып бик шат бултым, мыны хатҡа яҙып әйтеп бөтөрөрлөк түгел. Мин был хатҡа тиклем Һеҙгә ике хат яҙған инем. Берһен 23/IX яҙҙым, ул ваҡытта мин точный адресығыҙҙы белмәй инем. Ул хатты ебәреп, 3 көн уҙғас, Һеҙҙән открытка килте. Һеҙ анта «Октәбрҙә Мәскәүгә китәм» тип яҙғайнығыҙ. Открыткағыҙҙы алғас, 29/IX мин тағы бер хат ебәрҙем, аныһын әле һаман алмағанһығыҙ икән.*



*Ул хат үҙегеҙ юҡта барып юғалғандыр. Жәлил ағай, ә Һеҙ юҡта хаттарығыҙҙы кем алып ҡуйған һуң?*

*Бик досадно, что ул хатты Һеҙ алмағанһығыҙ. Мин ул хатты оҙонораҡ итеп яҙған инем. Юғалһа, бик йәл.*

*Мин Һеҙҙең телеграммағыҙҙы алтым. Бик ҙур рәхмәт аның өсөн.*

*…Һеҙҙең «Тау менән тау осрашмай, кеше менән кеше осраша» тигән һүҙегеҙ ысын булһа кәрәк. Дөрөҫ, ғүмер булһа, ә ул әле булырға тейеш, осрашырбыҙ, но ҡасан икәне билгеле түгел…*

*Миңә шул йәл, Өфөлә, вообще Башҡортостанға ҡайтҡан ваҡытта, Һеҙҙең менән яҡыныраҡ таныша алманыҡ. Был минең өсөн ғүмер буйына үкенестә ҡаласаҡ. Минең үҙемә асыуым килә – ни өсөн мин билеттарҙы 17/VIII-гә алтыштырҙым. Тағы бер генә көн һунғыраҡ алғанда, ул тиклем ашығыс булмаҫ ине. Ни хәл итәһең, ярар инте…*

*Һеҙҙең Мәскәүҙә ваҡытығыҙҙы күңелле үткәргәнегеҙҙе ишетеп бик шат бултым. Миңә, урыҫса әйткәндә, просто завидно, что я кроме Узбекистана никогда ничего не видела. Мәғлүм тә түгел – туры килерме берәй ваҡыт Мәскәүҙә булырға, бөтәһен тә күрергә.*

*Жалко осознавать, что живя в Узбекистане, отстала от жизни и от людей. Һеҙ яҙаһығыҙ, что аяҡ аҫты бысраҡ булһа ла, Октябрь байрамын күңелле уҙғарҙыҡ, тип. Мынта әле ҡар түгел, ямғыр ҙа һис яуғаны юҡ, Октябрь байрамын күңелле үткәреп булманы. Дөрөҫ, вечер, мәжлестәр булты. Минтә лә ҡыҙлар бултылар. Йырлашып, бейешеп, көлөшөп ултырҙыҡ. Аларҙы оҙатҡас, «Урал» көйөнөң пластинкаһын патефонға ҡуйып, кискә хәтле тыңлап илап ултырҙым. Кискә иптәш ҡыҙларым килеп, көсләп театрға алып киттеләр. Ә әтейем күп ваҡыт өйҙә булмай, ул командировкала.*

*Уҡыулар ҙа бик шәп бармай. Уҡытыусылар етмәй. Булғандары ла бик әйбәттән түгелләр, эсәләр, дәрескә килмәй, опаздывать итеп йөрөйҙәр. Купләренә суд булты. Немец теле уҡытыусыһы совсем юҡ. Өйҙә самостоятельно заниматься итергә тура килә. Үзбәкстан мәктәпләрентә малограмотный кешеләр әҙерләп сығаралар…*

*Башҡортса яҙыуы минең өсөн бик ҡыйын. Онотолған. Башҡортса мин икенсе синыфта ғына уҡыған инем, анан һуң 11 йыл уҙып китте.*

*Жәлил ағай. Әгәр мөмкин булһа, Һеҙ миңә «Һеҙ» тип яҙмағыҙ. Ул һүҙҙе кеше үҙенән ҙурыраҡ кешегә әйтһен. Йәме? Әгәр мин Һеҙгә «һин» тип яҙһам, уңайһыҙраҡ булыр. Шуның өсөн был правоны миңә ҡалтырығыҙ…*

**25 ноябрь, 1940 йыл, Өфө**

*Нәфисә!*

*Хатыңды алғас, шул тиклем шатландым, беләһеңме, ул шатлыҡты хатҡа яҙып та, һөйләп тә аңлатып булырлыҡ түгел. Мин һинән дүрт күҙ менән хат көтә инем. Рәхмәт хатың өсөн. Беҙҙең араны бер нисә мең саҡрымдар айыра, ләкин хатыңды уҡығас, мин һинең үҙеңде күргән һымаҡ булдым һәм миңә яҡындарҙан-яҡын булып тойолдоң. Һинең менән осрашҡан ваҡыттар иҫкә төштө, мин шул осрашыуҙы яңынан башымдан кисерҙем, шул күп булһа, 30 ғына минут ваҡытты тағы бер тапҡыр тәрән переживать иттем. Һинең менән осрашҡан минуттар минең хәтеремдә мәңге-мәңге иҫтәлек булып ҡаласаҡтар. Мин шул осрашыуҙы һәр ваҡыт матур итеп хәтеремә төшөрәм. Ул осрашыу һағынып һөйләрлек кенә булып ҡалған инде хәҙер. Ләкин бик-бик әҙ булды. Шулай ҙа аның өсөн үкенергә лә, ҡайғырырға ла ярамай. Беҙ һинең менән осрашырға тейешбеҙ…*

*Һин, патефонда «Урал» көйөн уйнатып илап ултырам, тип яҙаһың. Ләкин һин бер ваҡытта ла илама, ялғыҙһынма, Нәфисә. Һиндә Уралды һәм Башҡортостанды минең шикелле яратаһың шикелле. Әле бына айҙан артыҡ Мәскәүҙә йөрөнөм, һуңғы табан шул тиклем һағына башланым, ҡайтырға ашыҡтым.*

*Быйыл „Ҡыҙыл Башҡортостан“ гәзитендә башҡорт халҡының героик эпосы*

*„Иҙеүкәй һәм Мораҙым“ баҫылып сыҡты. Оҙаҡламай ул ҡалын китап булып баҫылып сыға. Мин шул эposты бик яратып уҡыным. Шунда Урал тау тураһында былай тиелгән:*

*Һай, Урал тау, Урал тау,*
*Барына ата булған тау,*
*Барына әсә булған тау.*
*Атам кейәү булған тау,*
*Әсәм килен булған тау.*
*Уралда тыуған баланың*
*Теле сыға башлағас,*
*Әсә тигән һүҙҙән һуң*
*Икенсеһе Урал тау.*

*Бына, нисек яратмаҫһың, нисек һағынмаҫһың инде шул Уралды. Бигерәк матур әйтелгән. Был йырҙы халыҡ сығарған.*

*Һин анда торғас, белмәйһеңдер, хәҙер йыр, музыка, театр, ғөмүмән, искусство һуңғы бер нисә йыл эсендә бик үҫте, алға китте.*

*Кисә башҡорт халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 60 йыллыҡ юбилейы үткәрелде. Культура һарайында бик ҙур тантаналы кисә булды. Мәскәүҙән, башҡа республикаларҙан да яҙыусылар килде, Үзбәкстандан да бер яҙыусы бар ине. Доклад һәм ҡотлауҙарҙан һуң бик ҙур концерт булды. Йыр, бейеү, ҡурай – бөтөнөһө, бөтөнөһө бар ине. Мин, рәхәтләнеп тыңлап ултырҙым. Концерт сәғәт 2-лә генә бөттө. Бик һуңлатып ҡайттым. Ҡайтыуға һинең хатың килеп торған. Хат тиҙ йөрөй икән. Мин, ноябрь аҙаҡтарһыҙ яуап ала алмам, тип уйлай инем әле. Был һинең икенсе хатың. Һинең икенсе хатыңды мин ала алманым. Хатты, юғалмай килһә, хозяйка алып ҡайта.*

*Нәфисә, һин тырышып уҡып, урта мәктәпте тамамла һәм уҡырға бында ҡайт. Анда булған институттар бында ла бар, минеңсә, бында институттар көслөрәк, ҙур профессорҙар етерлек. Теләгән институтҡа керерһең…*

*Үткән хатта мин яҙмағанмын, яҙып, әйтеп бөтөрмәгәйнем, шуңа күрә был хатта яҙып бөтөрөп ҡуйырға уйлайым (сразу ярамай бит).*

*Мин һине бик яратам, Нәфисә.*

*Асығыраҡ итеп әйткәндә, был инде минең признание в любви – мөхәббәтте асып биреү. Мин теге вакытта өлгөрә алманым. Уны тел белән әйткәндә әйбәт булыр ине, ләкин мөмкинлек булмағас, хат аша булһа ла әйтергә булдым. Һин яратаһыңмы, юҡмы, аныһы – һинең эш. Ә инде үҙ тойғоларымды белдереү – минең долг. Сөнки һин ятраҡан сүрәттә лә ғүмерҙә әйтмәйәсәк инең. Билгеле, мөхәббәтте тел белән әйткәндә эффективныйыраҡ булыр ине, хат аша әллә нисек. Ләкин, математический тел белән әйткәндә, ошондай формула килеп сыға – любовь без взаимной любви равна нулю. Һинеңсә нисектер, мин шулай тип ҡарайым.*

*Һин үҙеңдең тарафтан яуап яҙырға тейешһең.*

*Башҡортса ҡыйынһынһаң, урыҫса яҙ.*

*Барыһын да яҙып бөттөм шикелле. Онотолғандарын киләһе хатта яҙырмын.*

*Я думаю, что тебе все ясно стало теперь.*

*Ләкин һин бер нәмәгә лә үкенмә, мы еще встретимся. Встретимся так, что эта встреча навсегда останется в нашей памяти. Только не горюй.*

*Как твоя сестренка? Я забыл как ее зовут, кажется, Рәйсә.*

*Если Ты интересуешься, как я живу, то могу описать. Живу я обычно. В Уфе у меня очень много друзей. Знакома почти вся Уфа. По вечерам бываю в кино,*

*театрах. В Уфе есть пять театров, кажется, пять-шесть кинотеатров. Время проходит незаметно. Работы, конечно, много, но это у каждого.*

*Зимой в январе, наверное, опять поеду в Москву, будет совещание, летом опять.*

*Я, между прочим, очень доволен своей осенней поездкой. Жить пришлось продолжительно, везде побывал, видел всех друзей.*

*Былар һиңә, билгеле, интересно түгелдер, яҙып тормайым. Үҙең барһаң ғына интересно була ул. Киләһе йыл Башҡортостанға ҡайтһаң, обязательно Мәскәүгә апарып бөтөнөһөн йөрөтөп күрһәтәм үҙеңә, Нәфисә. Әйткән һүҙ – атҡан уҡ, ти. Һинең ҡайтыуыңда ғына тора эш. Сөнки мин йәй буйы буш. Теләһәң, Мәскәүгә параход белән барырға ла була, ләкин бик оҙаҡ бара, ун көн.*

*Ярай, хуш, Нәфисә. Хатҡа яҙып һүҙ бөтмәй инде, күпте яҙһаң да, уҡый-уҡый ялҡып бөтөрһөң әле үҙең дә.*

*Бик күп, бик һағынышлы сәләм үҙеңә. Түҙемһеҙлек белән хат көтөп ҡалам. Жәлил.*

*Ноябрь, төнгө сәғәт 3.*

*Миңә хатты до востребования яҙма.*

(Ғиниәт олатайыбыҙ революцияға тиклем Үтәш мәҙрәсәһендә Мәжит Ғафури менән бергә уҡыған. Ул Ғафуриҙың шул осорҙа уҡ шиғырҙар ижад итеүен, уларҙы шәкерттәргә күрһәтергә тырышыуын һөйләр ине. Әммә бәғзе һабаҡташтары уға бигүк ышанып етмәй, һин Туҡайҙан күсереп алғанһың, ә шиғырҙы үҙең яҙмағанһың, тип тә әйткәндәр, хатта түпәләп тә алғылағандар. Олатайымдың һөйләүе буйынса, Ғафури йәш сағында кәүҙәгә төпөш, ҡураныс була, үҙен йәберләүселәргә «сдача» бирә алмай. Һәм Ғиниәт олатайға уны йәберләгәндәрҙең кәрәген бирергә тура килә. Тегеләр Ғиниәткә тейергә ҡурҡып йөрөй, сөнки ул буйһыу, кәүҙәгә елле, көслө, шул уҡ ваҡытта ҡыҙып барыусан була. Ғиниәт Кейекбаев ана шулай Мәжит Ғафуриҙы хөрмәт итә, сөнки үҙе лә шиғырҙар яҙыу менән шөғөлләнә.

Ж. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романында әҫәр геройы Ғибаттың Герман фронтынан хатына һалып ебәргән бәйете урын алған. Ә бит Ғибаттың прототибы — Ғиниәт Кейекбаев, һәм был бәйетте ул сығарған икән.)

**3 декабрь, 1940 йыл, Карши**

*Жәлил ағай !!!*

*Һеҙгә минән Урал тауҙары хәтле сәләм!*

*Һеҙҙең 25/XI - тә яҙған хатығыҙҙы алып, әйтеп бөтөрлөк түгел шатландым. Хатығыҙ өсөн бик-бик ҙур рәхмәт. Дөрөҫ, беҙҙең араны меңәр саҡрым айырһа ла, Һеҙҙең хатығыҙҙы уҡығас, үҙегеҙҙе күреп үҙегеҙ белән һөйләшкәндәй бултым.*

*Жәлил ағай, Һеҙ минең өсөн күптән уҡ донъяла иң яҡын кеше инегеҙ, ә һуңғы хатығыҙ Һеҙҙе миңә тағын да яҡынырак итте.*

*«Үткән эшкә үкенмә», тигәнһегеҙ. Һис үкенмәй булмай… Мин дә «осрашырға тейешбеҙ һәм, шулай булғас, осрашырбыҙ» тип уйлайым. Ләкин беҙҙең осрашыу фәҡәт минән генә зависеть итмәй – во-первых – икебеҙҙән дә, во-вторых, от обстоятельств. Мин Башҡортостанды, анда үҙнәмәһен дә яратам. Жәлил ағай, Урал тауын һис күргәнем юҡ, ләкин ишетә беләм, аның тураһында байтаҡ ҡына йырҙар беләм, китаптар уҡыным. Во всяком случае, Башҡортостанды һәм башҡортто яратмай, ҡайһы ерҙе һәм кемде яратайым һуң…*

*На основании народной же песни «Атам кейәү булған тау, әсәм килен булған тау» – это так и было, это и миңә лә әҙерәк относиться итә. Дөрөҫ, мин*

*Башҡортостандағы булған үҙгәрештәрҙе һәм аның достиженияларын белмәйем, ләкин я очень рада за нее, т.е. за свою родину, Жәлил ағай.*

*Минең Башҡортостанға бик ҡайтҡым килә, һәм беләм, что антағы институттар мынтағына ҡарағанта яҡшы икәнлеген, ләкин хәҙергә был турала һис нәрҫә әйтә алмайым. Есть некоторые причины, препятствующие этому. Әлбиттә, мин бөтөм көсөмдө приложить итеп ҡарармын мының өсөн. Мин үҙемде донъялағы бәхетлеләрҙән берһе тип хисаплар инем, әгәр ҙә Һеҙҙең хатығыҙҙа яҙылганнар исполниться итһәләр.*

*Дорогой Жәлил ағай! Һеҙ бик яңлышаһығыҙ, думая, что мне не интересно, знать, как Вы живете и как проводите время. Мне интересно все, что Вас касается. Это я говорю искренне.*

*За Вашу откровенность и за это чувство ко мне Вам большое спасибо. Мин үҙемдең тарафтан мына шуны әйтәм – мин һеҙҙе яратам һәм бик ныҡ, ләкин, был турала берәй ваҡыт яҙырмын или әйтермен, тип уйламай инем…*

*Большое спасибо Вам, что помните мою сестру. Аның исеме Рәйсә. Она жива и здорова, ходит в детский сад.*

*Хатты миңә башҡортса яҙығыҙ, Жәлил ағай. Ә мин шулай яртыһын башҡортса, яртыһын урыҫса яҙған булырмын, әгәр шулай яҙырға мөмкин булһа. Һеҙ, хат тиҙ йөрөй икән, тигәнһегеҙ. Хат 8 көн йөрөй. Был минең өсөн бик оҙаҡ күренә…*

*Хатҡа әллә нәмәләр яҙаһым бар кеүек ине, ләкин, яҙа башлағас, онотолдо. «Үҙеңде лә күреп һөйләмәгәс, хатҡа яҙып һүҙҙәр бөтәме...». Буранбай мыны бик дөрөҫ әйткән.*

*Мин бик шатмын, что Һеҙҙең ваҡытығыҙ бик күңелле һәм культурно үтә. Ә мынта, беҙ торған ерҙә, бер кинотеатр, бер драмтеатр бар. Драмтеатрҙа гел үзбәксә генә постановкалар ҡуялар, анта европейская публика совсем бармай ҙа, ә киноға тоже часто барып булмай. Күп ваҡыт иҫке картиналарҙы ҡабат-ҡабат күрһәтәләр, ә яңы кино булһа, халыҡ, башҡа бара торған ер булмағас, бик күп йыйыла. Тағы мынта бәләкәй генә бер летчиклар клубы бар (беҙ торған шәһәр хәрби һәм Афғанстан белән пограничный), анта мин бик һирәк барам. Ҡыҙҙарҙың күбеһе шунта ғына бара, ә мин яратмайым, летчиктарҙың бик алама ғәҙәттәре бар – привязываться итәләр (говоря уличным жаргоном).*

*Вот и все. Как по-вашему, культурно мы живем? Правда, бывают в школе вечера, и на дому, но все это надоело. Уҡыуға сәғәт 2-гә барам, 7 1/2 ҡайтабыҙ. Кис дәрес әҙерләйем. Да, и өй эше күп. Буш ваҡытларҙа художественная литература уҡыйым, но күберәк ваҡытым Һеҙҙе уйлауға китә. Уҡыулар хәҙергә ничего – бик шәп тә түгел, бик насар тип тә әйтергә булмай, уртаса.*

*Мынта көндәр йылы. Ҡар ғинуарһыҙ яумаҫ, ә ҡайһы ваҡыт ғинуарҙа ла яумай, фәҡәт ямғыр яуып аяҡ аҫты йөрөрлөк булмай – бысраҡ ята.*

*Һеҙ, яңынан Мәскәүгә барам, тиһегеҙ, Жәлил ағай. Мәскәүҙә ваҡытығыҙҙы (әгәр буш ваҡытығыҙ булһа) как можно лучше желаю провести. Был хат өсөн тағы ғәфү итеүегеҙҙе һорайым. Оно получилось какое-то чудное. Вообще, письмо теряет не только эффект, но и смысл того, о чем хочешь передать на словах. Мне много есть о чем рассказать Вам, но это отложим до встречи, если она будет.*

*Не знаю, придется ли нам встретиться. Как бы я хотела видеть Вас...*

*Ну, пока. Һеҙгә иҫәнлек-һаулыҡ теләп ҡалам.*

*Сәләм белән, Нәфисә.*

*Төнгө сәғәт 1.*

**27 ноябрь, 1940 йыл, Өфө**

*Нәфисә!*

*Бик күп сәләм үҙеңә.*

*Бынан ике көн элек кенә һиңә бер хат яҙып һалғайным. Заказной һәм үҙеңдең ҡушыуың буйынса адресын до востребования яҙҙым. Быныһын мәктәпкә адресланым. Береһе бармаһа, береһе барыр, моғайын. 25-е яҙған хат интереснораҡ булыр һинең өсөн. Мин ул хатҡа яуап көтәм. Һин андағы бөтөн мәсьәләләргә лә яуап яҙырға тейешһең. Был хатҡа уларҙы яҙмайым. Минеңсә, ул хат һинең өсөн бигерәк тә интересно булырға тейеш (минең өсөн яуап интересно).*

*Бөгөн шулай эштән бик арып ҡайттым да тик торғансы һиңә ҡыҫҡа ғына хат яҙып ташларға булдым.*

*Мин һинең икенсе хатыңды алманым. Һин анда нимәләр яҙғанһыңдыр. Үҙеңдең әйтеүең буйынса, бик ҡыҙыҡлы хат булырға тейеш. Һин киләһе хатыңда унда яҙған хәбәрҙәреңде хәтереңә төшөрөп яҙырға тырыш.*

*Үҙемдең хәлдәр бер көйө. Өфөлә мыңарса бер ҡар яуып, бер ямҡыр яуып бысратып торғайны. Хәҙер әҙерәк туңдырып, ҡар яуып ебәрҙе. Былай көн бик йылы. Бөгөн башлап төгеһенән буран булды. Йылы буран. Занятиенан ҡайтыуға ишек алдына буран өйөрлөтөп-өйөрлөтөп ҡар һалған. Атлауға күңелле, йылы, әйбәт. Буранлап торғас, бөгөн бер ҡайҙа ла сыҡманым. Иҙелдең боҙо тора башлаған, ләкин нығынмаған әле, сығып йөрөрлөк түгел. Былтыр ҡыш бик һыуыҡ килгәйне, быйыл нисек булыр инде. Тәжрибәле кешеләр, быйыл ҡыш йылы килә, тиләр.*

*Занятиенан ҡайтышлай «Октябрь» һәм «Салауат» кино-театрҙары алдынан үтеп киттем. Кеше буран тип тормай, гөж килеп киноға инергә йөрөйҙәр. «Музыкальная история», «Светлый путь», «Последний вальс» тигән картиналар бара. Мин быларҙың барыһын да Мәскәүҙә ҡарап ҡайтҡайным. Бик һәйбәт картиналар. Тиҙҙән башҡорт халыҡ геройы «Салауат Юлаев» кинокартинаһы сыға. Быйыл Мәскәүҙән килеп йәй буйы снимать итеп йөрөнөләр. Хәҙерге көндә иң һуңғы эпизодтарын Мәскәүҙә снимать итәләр. Салауат ролендә Башҡорт академия драма театры артисы уйнай. Бик шәп картина буласаҡ. «Салауат Юлаев»ты Бөтә Союз күрәсәк.*

*Драматический академия театрында быйыл яңы әйберҙәр барасаҡ. Иң шәпләре «Салауат» тигән пьеса (кинонан башҡа), унан һуң «Урал батыр» тигән пьесаны ҡуйырға әҙерләнәләр. Тағы әллә ниндәй пьесалар ҡуялар, опера театрында «Һаҡмар» операһы бара. «Мәргән» тигән опера ҡуйылырға әҙерләнә. „Травиата" операһы, „Евгений Онегин" операһы ҡуйыла (классик репертуарҙан). Ҡайһыныһына барырға ла өлгөрөп булмай.*

*Бына, әгәр Өфө хәлдәре белән ҡыҙыҡһынһаң.*

*Йә, рус драматик театрында быйыл бик әйбәт яңы әйберҙәр барасаҡ. Рус театры бик көслө, артистар бөтөнөһө лә Ленинградтан, Мәскәүҙән килгән, бик яҡшы уйнайҙар. Мин былтыр регулярно йөрөнөм.*

*Йә, Башҡорт академия драма театрында быйыл «Мәжит Ғафури» әҫәре ҡуйыласаҡ. Ул бигерәк тә ҡыҙыҡлы буласаҡ. Мәжит Ғафуриҙың тормошонан алып яҙылған.*

*Ошоноң белән хатымды тамамлайым, ҡыҫҡа булыр тигәйнем, оҙон булды. Ҡыҙыҡһынһаң, тағы яҙырмын.*

*Хуш, сәләм, бик һағынышлы сәләм үҙеңә.*

*Түҙемһеҙлек белән яуап көтөп ҡалам. Жәлил.*

**8 декабрь, 1940 йыл, Карши**

*Жәлил ағай!*

*Һуңғы хатығыҙҙы 4-ендә алтым. Мыңа хәтле 25-ндә яҙған хатығыҙға яуап ебәргәйнем, аны алғанһығыҙҙыр. Ул хатта барыһын да яҙған инем, булһа кәрәк.*

*Беләһегеҙме нәрҫә, Жәлил ағай, ул хат өсөн мин извиняться итәм, мин анда күберәк кәрәкмәгән нәмәләр яҙып ташланым шикелле. Хәҙер үҙем дә уңайһыҙланып торам. Дөрөҫ, мин аны яҙғанға үкенмәйем, тик ул хат өсөн мин үҙемне навязывать итәм, тип уйламағыҙ...*

*Даже не верится, что у Вас там зима и бураны. Здесь еще погода хорошая, дни теплые.*

*Мына ун йыл булты минең буран һәм настоящий ҡыш күрмәгәнемә. Бырыһы ла онотолған.*

*Әгәр ҡасан булһа ла Башҡортостанға ҡайтырға тура килһә, бөтөн условияларына яңынан өйрәнергә кәрәк булыр. Мынтағы условиялар мне надоели за десять лет. Но ничего не поделаешь.*

*Оҙаҡламай Яңы йыл. Беҙгә 25-нсе декабрҙән каникул бирәләр. Мин каникулда Сәмәрҡәндҡә барып килмәксемен. Анда 35-енсе йылдан бирле булғаным юҡ. Анда беҙҙең Башкирияныҡылар бар, әллә ҡасанан бирле саҡыралар.*

*Сәмәрҡәнд Үзбәкстандың бөтөн шәһәрләренә ҡарағанда матур һәм культурныйыраҡ. Больше европейцев. Үҙе исторический шәһәр. Много памятников старины. Например, мечеть Тамерлана – замечательная башня, огромных размеров, сохранившаяся до наших дней. Есть и другие достопримечательности такого рода.*

*Ташкент – ҙур шәһәр. Өфөгә ҡарағанта 2-3 мәртәбә ҙурыраҡ булыр, пожалуй, но йәмһеҙ, күңелһеҙ бер шәһәр. 1939 йылда ҡыш көнө анта бер 10 көн тороп килдем. Бик ялҡытты шул 10 көн эсендә. Анта ла таныштар бик күп. Өфөнән килешләй анта туҡталтыҡ, әтейем дуҫ-иштәрен күреп, оҙаҡлабыраҡ ҡалты, ә мин 3 көн торҙом та, һеңнемде алып, юлға сыҡтым.*

*«Последний вальс» киноһын Ташентта күреп килгәйнем. «Светлый путь», «Музыкальная история»ларҙы әле ҡарағаным юҡ. Улар әле мынта килмәне. «Салауат Юлаев»ты бик күрәһе килә, тик ул экранда тиҙ булмаҫ.*

*Опералар мынта үзбәксә бара. Артистары неплохо уйнайлар, но йырлай башлаһалар – сығып ҡасырлыҡ. Ләкин һәр кемдең үҙ теле, үҙ йыры үҙенә арыу күренә. Үзбәктәр ҙә үҙләренең йырларын бик ярата. Сәхнәгә ҡарап, ауыҙларын асып тыңлап утыралар. Мин дә, башҡортса опера күрергә тура килһә, шулай тыңлар инем.*

*Русса опералрҙан «Евгений Онегин»ды Ташкентта 1938 йылда күргәйнем.*

*Башҡортостанда ла урыҫ алфавитына күстегеҙме, Жәлил ағай? Мынта күстеләр, ләкин бик ҡыйын булты ул, һүҙҙең мәғәнәһе алышына…*

*Жәлил ағай, бик ҙур рәхмәт ваҡыт табып хат яҙыуыҙға (я представляю, сколько у Вас работы).*

*Хуш-һау булығыҙ. Сәләм беләән Нәфисә.*

**12 декабрь, 1940 йыл, Өфө**

*Һөйөклө Нәфисә!*

*Һиңә йөрәгемдең иң тәрән еренән сыҡҡан иң ҡәҙерле, иң һағынышлы сәләмдәремде ебәреп ҡалам. Хатыңды алдым (от 3 декабря). Рәхмәт, мең-мең тапҡыр рәхмәт! Мин һинән бөгөн хат көтә инем. Был хатың өсөн мин шул тиклем шатмын, Нәфисә, әгәр белһәң... Тәрән диңгеҙҙәрҙән дә тәрән мөхәббәт ҡайнай һинең өсөн минең йөрәктә. Әгәр мин ҙур ҡош булһам, осоп барыр ҙа, һине*

*ҡанатыма ултыртып, Тыуған илгә, Уралға, Иҙел буйына алып ҡайтыр инем.*

*Ләкин һин бел, Нәфисә, шул көн килер, бына үҙең дә һиҙмәй ҡалырһың. Ул көндө көтөргә кәрәк. Ул шундай бер көн булыр, мин шул көндө ғүмеремдең иң бәхетле көндәренән һанар инем. Эйе, ул көн булыр. Мин аңа һис шикләнмәйем. Сөнки ул көндөң булыуы беҙҙең икебеҙҙән зависит. Билгеле, бында быһың өсөн иң мөһиме – ике яҡлы тәрән мөхәббәт (взаимная любовь). Если она будет взаимна, то она равна всему-всему на свете. Ҡыҫҡаһы, аңа – мөхәббәткә тиң нәмә юҡ донъяла. Для любви нет никаких пространств, никаких преград. Немец классик яҙыусыһы Шиллер былай ти: ( немесца яҙырға мөмкин ине, тик урыҫса мәғәнәһен генә яҙам)*

*Любовь делает все земное небесным,*
*А небесный мир еще прелестным.*

*( Шиллер, «Гимны к любви»)*

*Ҡыҫҡаһы, аның нимәгә тиң булғанын хатҡа яҙып та, һөйләп тә бөтөрлөк түгел. Ләкин һин шуны бел: минең үткән хатта яҙған һүҙҙәрем (признание) ысын күңелдән, йөрәктән әйтелде. Шуның өсөн был хатта уны тағы ҡабатлайым. Үткән хатта яҙылғандарҙың исполниться итеү (башҡарылыу) тураһында шик тә булыу мөмкин түгел. Мин уйлайым, һин йәй буйы унда ятмаҫһың. Йәй көнө ул тирәлә бик эҫе була, имеш, тиләр. Ул эҫелә нисек йәйҙе үткәрәһең.*

*Уҡыу бөткәс, июнь аҙаҡтарында ҡайтырһығыҙ, тип уйлайым. Мин дә шул осорҙа отпуск алам, июль баштары тирәһендә. Ҡайтһаң, Мәскәүгә обязательно алып китәм мин һине. Мауғың ҡанғанса йөрөтөп күрһәтер инем үҙеңде, ләкин ҡайт, обязательно ҡайт. Ә үткән эшкә үкенмә.*

*Билгеле, беҙҙең осрашыуға ниндәй обстоятельстволар ҡамасаулауын да беләм мин. Әгәр ул бер һинең менән минән генә торһа, бер ни ҙә булмаҫ ине. Ул обстоятельстволарҙы был хатҡа яҙып тормайым ҡапылта, ул һиңә асығыраҡ билгеле. Мәскәүгә мин быйыл бармам әле. Йәй барам, отпуск ваҡытында икәүләп китербеҙ.*

*Бик, бик һағынам мин һине, Нәфисә.*

*Минем баш осонда СССР картаһы элеүле тора. Унда һин йәшәгән Карши ҡалаһы төшөрөлгән. Мин шул урынды ҡарайым да һине күҙ алдыма килтерәм. Иҫкә ҡылт итеп бер йыр килеп төшә. Ул бик әйбәт йыр:*

*Ағиҙелкәй буйында, һай, бер тирәк,*
*Ояҡайҙары ултыра, ҡошо юҡ.*
*Сит ерҙәрҙә йөрөй бер ҡыҙ бала*
*(Бер йәш егет, тип тә йырлайҙар),*
*Хәлкәйләрен белгән кеше юҡ.*

*Шул йырҙы „Урал“ көйөнә мандолинала үҙем уйнап йырлайым. Ләкин предупреждаю, һин күңелһеҙләнмә, йырҙы йырлап ҡайғырма. Шуны хәтереңдән сығарма – мин һәр ваҡыт һинең менән, һин яңғыҙ түгел. Һин минең турала ни тиклем уйлаһаң, мин дә шул тиклем күп уйлайым, һинең турала хәтерләйем. Мин күберәк уйлайым, матур итеп хәтерләйем.*

*Йә, һин бит карточканды ебәрәм тигәйнең, ҡасан ебәрәһең?*

*Уңайһыҙланма, мин һинең менән хат яҙышҡанды бер кемгә әйткәнем юҡ. Уны һөйләп йөрөүҙең кәрәге юҡ бит. Тик мин һин берәй серҙәш ҡыҙыңа һөйләгәнһеңдер, бәлки, тип уйлағайным, һүҙ араһында хат яҙышыуҙы ғына әйткәнһеңдер тип уйлағайным. Әйтмәгәнең яҡшы.*

*Үҙем иҫән-һаумын. Һинең дә иҫән-һау булыуыңды ысын күңелдән теләйем. Уҡыуыңда уңышлыҡтар теләп ҡалам. Һаман шул эшләп йөрөгән көн, уҡытыу сәғәттәре бар бер аҙ. Немец теле тарихын уҡытам. Театр, кинолар бик ҡыҙыу бара.*

*Оҙаҡламай „Салауат Юлаев“ тигән ҙур кинокартина сыға, дүрт күҙ белән шуны көтәбеҙ. Башҡортостан өсөн ул бик ҙур бер сенсация буласаҡ. Опера театрында оҙаҡламай (ошо айҙа) „Мәргән“ тип аталған башҡорт операһы ҡуйыла. Мәргән – башҡорттоң легендар геройы, элекке Буранбай, Салауат кеүек, ул да башҡорт батыры. Шул операны көтөп йөрөгән көн.*

*Йә, театр, киноларҙа нимәләр барыу тураһында мин һиңә мәктәпкә адреслап бер хат яҙғайным, алғанһыңдыр тип уйлайым.*

*Әллә нәмәләр яҙмаҡсы инем, онотолоп бөттө. Киләһе хатҡа яҙырмын әле.*

*Рәйсә һылыуға минән күп-күп сәләм. Беҙҙең хат яҙышҡанды Рәйсә белһә ярай, исмаһам. Был юлы ошолар менән тамамлайым хатымды.*

*Һиңә Урал тауҙарынан да, Ағиҙелдән дә сәләм.*

*Иң һағынышлы, йөрәгемдең түренән сыҡҡан ҡайнар сәләм үҙеңә.*

*Уҡыуыңда уңыштар теләп ҡалам.*

*Түҙемһеҙлек белән хат көтәм үҙеңдән.*

*Сәләм белән Жәлил.*

**15 декабрь, 1940 йыл, Өфө**

*Ҡәҙерле һәм һөйөклө Нәфисә!*

*Һиңә иң һағынышлы, иң ҡәҙерле сәләм. Ике-өс көн элек бер хат яҙып һалғайным, алғанһыңдыр. Ул хат минең үҙемә бер ҙә оҡшамаған кеүек, ҡабаланып яҙылды. Хат алғас, тиҙерәк яуап бирергә ашыҡтым. Сөнки кеше яуап хаты көтә бит, ә хат көтөүе бик ҡыйын, килһә, тағы бер хәл, килмәһә, көтөп-көтөп төңөләһең, уңайһыҙ була. Мин дә хат көтәм. Шунан инде, ахырыһы, үҙем хат яҙырға тотонам. Шунан инде һағынған йөрәк тынысланып ҡалғандай була.*

*Ошо хатҡа яҙылған ябай һүҙҙәр һиңә яҙғы һыу кеүек ташҡан мөхәббәтемде һөйләр һымаҡ. Ләкин ул тойғоно, ул мөхәббәтте хатҡа ғына яҙып бөтөрөп булмай. Бына һинең үҙеңде күреп һөйләшергә ине. Мин һиңә бөтөнөһөн дә һөйләр инем, Нәфисә. Ҡасан килер икән шул көн? Ваҡыт шул тиклем оҙаҡ, шул тиклем яй үтә һымаҡ минең өсөн. Һиңә нисектер...*

*Ә беҙ һинең менән осрашырға тейеш һәм осрашырбыҙ. Ул минем өсөн иң-иң бәхетле көн буласаҡ һәм ул көн миңә ғүмергә иҫтәлек булыр. Билгеле, мин үҙемде һис шикһеҙ әле лә бәхетле һанайым.*

*Ваҡ-төйәк кисерештәрҙе иҫәпкә аламағанда, мин һис бер ваҡытта ла ҡайғырып йәшәгәнем юҡ. Мин һинең дә бәхетле булыуыңды, шат йәшәүеңде ысын күңелдән теләйем һәм аңа ышанам.*

*Йә, Нәфисә. Өфөнән хат яҙғанға аптырап ҡалма һин тағы. Нишләп был әйләнә лә хат яҙа, тип уйлама. Мин хат яҙырға ғөмүмән әүәҫ кеше. Ике хат яҙһам, берәһе бармаһа, берәһе барыр. Бер уйлағанда ҡапылта шул хат белән ҡәнәғәтләнеп торорға туры килә. Ләкин нисә әйтһәң дә хат – хат инде. Аның белән барыһын да әйтеп булмай.*

*Бына осрашырбыҙ. Хаттың кәрәге лә булмаҫ. Анда инде асыҡтан-асыҡ һөйләшербеҙ. Мин үҙем һөйләшергә асыҡ кешеләрҙән һаналам. Тик мин йәй осрашҡанда бер аҙ подкачать иттем. Һиңә әйтәһе һүҙемде әйтмәнем. Әйтһәм дә, фиаско (провал) булыр, тип шикләндем. Сөнки беҙ ул ваҡытта ныҡ таныш түгел инек. Мин уны бик оҙаҡ уйлап йөрөнөм. Шулай ҙа бер нәмәгә ҡарамай хатҡа яҙырға булдым. Боронғолар «ятып ҡалғансы, атып ҡал» тигән бит. Ул мәҡәл бик дөрөҫ. Аҙаҡ инде дүрт күҙ белән һинән яуап көтөп йөрөнөм.*

*Һин мине асыҡ (откровенный) тигәнһең, был миңә ҡарата бик дөрөҫ. Мин һәр нәмәне асыҡтан-асыҡ әйтәм. Атайым да шулай минем. Ләкин мин үҙем асыҡлыҡты бик яратам. Кеше асыҡ күңелле булһын ул. Был – кешенең яҡшы сифаты.*

*Кеше көн кеүек асыҡ булһын. Халыҡ телендә әйтәләр бит, аның эсендәгеһе тышында, тип.*

*Кисә кис, эштән ҡайтҡас, Башҡорт дәүләт филармонияның артисы-ҡурайсыһы килеп ултырҙы. Аның бер ике ҡурайы һәр ваҡыт миндә тора. Ул ҡурай белән славиться итә Өфөлә, һәр выҡыт радиола уйнай. Мин аның белән бик дуҫ. Ул бик күп көйҙәр белә һәм көйҙәрҙе бик оҫта, дөрөҫ уйнай. Бигерәк тә „Урал“ көйөн уйнауын яратам мин аның. Йәшәп-йәшәп, мин шәп ҡурайсыларҙан Әхмәтовты ғына бер-ике тапҡыр тыңлағаным булыр. Әхмәтовты хәҙер Башҡортостанда «Король кураистов» тип йөрөтәләр. Был егет тә шәп уйнай. Хәҙер Мәскәүҙә күрһәтеләсәк башҡорт сәнғәте декадаһына ҡарата Өфөлә ҡурайсылар ансамбле төҙөлә.*

*Миндә әҙерәк ултырғас, ҡурай белән тағы бер иптәш янына киттек. Ул өйҙә ине, анда сәғәт бергә тиклем ултырҙыҡ, уйнамаған, йырламаған көйҙө ҡалдырманыҡ. Аның үҙе бик яратҡан «Ғилмияза» тигән бер көйө бар. Ул шул көйҙө бик ихлас, бөтөн йөрәге белән уйнай. «Ғилмияза» көйөнөң йырҙары ла бик матур. Ғилмияза тигән бер 8 - 9 йәшлек ҡыҙҙы ҡаҙаҡтар урлап алып киткән. Ул тыуған илен һағынып:*

*«Ағиҙелкәй һыуы, һай, ағалыр*
*Урал ғына буйлап, көн битләп.*
*Тыуған илкәйемә ҡайтыр инем*
*Аяҡҡайларым талһа, имгәкләп.*
*Ташҡара ла тигән таш башында*
*Ҡалды минең уйнаған ташҡайым.*
*Һигеҙ генә туғыҙ, һай, йәшемдә*
*Аҙды ла минең ғәзиз башҡайым», –*

*тип йырлаған. Миңә бик оҡшай аның йырлары. Ҡурайсы егет бик матур йырлай.*

*Шулай итеп, ял көндәрен, байрамдарҙы бик шәп үткәреп ебәрҙек. Ул ҡурай уйнағанда, мин йотлоғоп тыңлап һине уйлап ултырҙым. Шунан мин мандолина уйнайым, ул йырлай. Ул беҙҙең саҡ-суҡ ҡошо һымаҡ айырылып йәшәгәнде белгән һымаҡ, Ғилмиязаны йырлай. Мин һине һағынғанымды эстән бик-бик тәрән кисерәм. Әллә нисек үҙем шатланам тағы, осрашырбыҙ, тигән өмөт белән шатланам.*

*Һинең 8 декабрҙә яҙған хатыңды алдым. Ваҡыт табып хат яҙыуың өсөн рәхмәт. Үҙең яҙған навязывать итеү тураһында бер-ике һүҙ. Ул турала минем башыма ла килгәне юҡ ине әле һинең хатыңа тиклем. Киреһенсә, бына мине бәйләнә тип әйтергә мөмкин, исмаһам, дөрөҫ бит.*

*Бер уйлағанда, бәйләнеп тә әллә ни эш ҡайратып булмай инде. Кешегә бәйләнергә бер ҙә яратмайым. Бәйләнеү – это хуже всего. Һинең үткән хатыңда яҙғаның – ул бер ҙә бәйләнеү түгел. Мөхәббәт тураһында сиған халҡының бик оҫта мәҡәле бар: «Любовь вольна как морская волна и как солнце горяча». Был бик дөрөҫ. Шулай булғас, бында бәйләнеү тураһында һис һүҙ булырға мөмкин түгел. Мин шуның өсөн асып бирҙем, сөнки аны күптән уҡ уйлап йөрөй инем. Шуңа күрә һиңә бәйләнә ҡуйҙым инде. Ләкин мин тағы ҡабатлайым – бик-бик яратам һине, Нәфисә. Возможно, һин минең был һүҙҙе көлкөгә алырһың, кем белә. Хаттағы әйтелгән һүҙҙең, хат белән булған мөхәббәттең эффекты несравненно әҙ була, минеңсә. Хат, нисә әйтһәң дә, хат инде.*

*Ну, күңелгә бер төйөн булып ҡалмаһын тинем, аҙаҡ үкенерлек булмаһын тинем. Әгәр мин әйтмәгән, яҙмаған булһам, һин дә әйтмәй ҙә, яҙмай ҙа инең бит, миндә лә үкенестә ҡала ине, һәм, яҙыуың буйынса, һин дә үкенестә ҡала инең.*

*Нәфисә, наоборот, һин асыуланма миңә, бәйләнә ҡалды бит был, тип. Мин үҙем шуның өсөн уңайһыҙланам. Әгәр шулай була ҡалһа, мине ғәфү итерһең бөтәһе өсөн дә. Барыһы-барыһы өсөн дә ғәфү ит.*

*Мәгәр миндә булған, һинең өсөн булған мөхәббәт, ихтирам итеү һис ваҡытта ла һүнмәйәсәк һәм һаҡланасаҡ. Ғәфү ит. Ни өсөн икәнен йәй ҡайтҡас осрашҡанда һөйләрем. Беҙҙең вәғәҙә – йәй икәүләп Мәскәүгә барыу. Һин аны онотма. Эш тик һинең ҡайтыуыңда тора.*

*Ярай, хуш, Нәфисә, хатҡа яҙып һүҙ бөтмәҫ. Киләһе хатҡа ла ҡалһын. Үҙең хат яҙ, көтәм. Бөтөн эшеңдә уңыштар теләп ҡалам. Бик күп-күп сәләм, иң һағынышлы сәләм.*

*Жәлил.*

*Карточҡаңды ҡасан ебәрерһең?*

*(Атайым үҙе лә ҡурайҙы оҫта тарта ине. Йәйҙәрен беҙ Ҡаранйылға ауылына барған саҡта атайым, тауҙарға китеп, унда ҡурай көпшәләре йыйып ҡайта торғайны. Ҡурайҙы кәрәк оҙонлоҡта киҫеп, тишемдәрен уя ла төрлө көйҙәрҙе онотолоп уйнар булды. Атайымдың XIX быуатта Италияла эшләнгән һәйбәт мандолинаһы бар ине, ул уны уҡыған йылдарында Мәскәүҙең комиссион магазинында һатып алған. Мандолина ҡара футлярҙа һаҡланды, ул фил һөйәге менән биҙәлгәйне. Тауышы ифрат матур сыға, эсендә итальян телендә яҙылған фирма маркаһы йәбештерелгән. Үкенескә, 50-се йылдар башында атайымдың бер туғаны мандолинаны хәҙер «Аграр университет» тип аталған трамвай туҡталышында юғалтып китә. Милицияға мөрәжәғәт итеү ҙә, гәзиттәрҙә иғландар сығарыу ҙа мандолинаны табырға ярҙам итмәне. Әлбиттә, атайым Мәскәүҙән яңы мандолина һатып алып ҡайтты. Ләкин ул инде бөтөнләй икенсе ине.*

*Былтыр Өфөнөң антиквар магазины витринаһында мин осраҡлы ғына рәүештә иҫке мандолина күреп ҡалдым... Дөрөҫ, атайымдың инструменты түгел ине ул, мәгәр мин һатыусы менән һөйләшеп киттем, һәм ул миңә бер ҡыҙыҡлы ваҡиғаны бәйән итте. Ике йыл элек уларҙың магазинына ике йәш кеше күп тотоноуҙан һәм шымарып бөткән мандолина тапшыралар. Эсендәге йәбештермә уның XIX быуатта Италияла эшләнгән икәнен күрһәтә. Егеттәр монаят өсөн ҙур ғына суммала валюта һорайҙар. Әтнәкәһе шул: улар был мандолинаның ҡайҙан, кемдән үҙҙәренә килеп эләгеүен белмәй, ғаиләләрендә күптән һаҡланһа ла, уны берәү ҙә йүнләп сиртә белмәгән, ә былар малай сағында уны уйынсыҡ һымаҡ тотонған. Ләкин кемдер уларға әйтә: был бит бик ҡиммәтле музыка ҡоралы, реставрациялап һатып, мул ғына аҡса эшләргә мөмкин. Йәш алыпһатарҙар һораған сумма магазинда табылмай, һәм уның хужаһы быларға мандолинаны Сәнғәт академияһының ҡыллы музыка ҡоралдары кафедраһына илтергә кәңәш бирә. Уйлауымса, был, моғайын да, атайымдың туғаны юғалтҡан мандолина булғандыр һәм уны тапҡан кеше, үҙе уйнай белмәгәс, балаларына уйынсыҡ итеп биргәндер.)*

**20 декабрь, 1940 йыл, Карши**

*Добрый день, дорогой Жәлил ағай!*

*12 декабрҙә яҙған хатығыҙҙы алып, әйтеп, яҙып бөтөргөһөҙ шатландым. Ул хатығыҙ өсөн ҙур рәхмәт Һеҙгә. Миңә ул хатты көтөп алыу оҙаҡ һәм ҡыйын тойолдо. Нет слов, чтобы описать мою радость, когда получила от Вас письмо. Мин үҙемдең күңелемдә, йөрәгемдә булғаннарҙы хатҡа яҙып, төшөндөрә*

*алмайым. Как бы я хотела видеть Вас, говорить с Вами. Я, пожалуй, не ошибусь и не обману Вас, если скажу, что нет часа, чтобы я не думала, не вспоминала о Вас. Но я надеюсь, что мы еще встретимся. Я очень и очень хочу этого.*

*Яҙа башлағансы яҙаһы һүҙҙәр бик күп күренә ине, ә яҙа башлағас, әйтәһе һүҙҙәр әллә ҡайҙа юғалдылар.*

*Яҙған йырығыҙ тураһында – ул минең турала яҙылған йыр кеүек. Мин аны уҡып, действительно, (Һеҙҙең предупреждениеғыҙға ҡарамаҫтан) күңелһеҙләнеп алдым. Ул йыр минең үҙемте напоминать итте. Был турала мин яҙырға ла теләмәгән инем, ләкин яҙам. Мин Һеҙҙе донъялағы иң яҡын кешем итеп күрәм. Шулай булғас, Һеҙҙән һис нәмәне йәшерергә тейеш түгелмен.*

*Эйе, мин ялғыҙмын, Жәлил ағай, в полном смысле этого слова. Почему так, я пока писать не хочу. В дальнейшем это будет известно.*

*До встречи в Вами я не думала, что когда-нибудь вернусь на Родину, да и незачем мне было туда возвращаться. Ведь меня там почти никто не знал и у меня там никого не было. Но теперь другое дело. Вы для меня дороже всех родственников. Может быть, миңә быларҙы яҙырға кәрәк түгелдер. Мин яҙҙым шуның өсөн, чтобы все было известно между нами.*

*Мин Һеҙҙе яратам, но в то же время боюсь своей любви. Ведь подумать только, какая большая грань между Вами и мною. Эти года, проведенные мною здесь, сделали меня не тем, какою я была бы, может быть, при других условиях. Я отстала от людей, культуры и вообще от многого по сравнению с Вами. Здесь, конечно, многие об этом не думают. Но мин күп уйланым был турала и нашла, что это именно так. Я это пишу просто. Вы не подумайте что-нибудь. Я немного предупреждаю Вас, чтобы потом не возникли недоразумения…*

*Мин Һеҙҙең хатығыҙҙы ҡабат-ҡабат уҡып сыҡтым. Хәҙер ҙә алтымта һуңғы хатығыҙ белән рәсемегеҙ ята… Миңә Һеҙ көннән-көн яҡыныраҡ, ҡәҙерлерәк күренәһегеҙ. Миңә, әгәр йәйен ҡайталмаһам, бик ҡыйын буласаҡ. Ә йәйгә тиклем күп ваҡыт бар әле!*

*Жәлил ағай, Һеҙ әҙерәк төшөнөп етмәйһегеҙ булһа кәрәк то, о чем я писала. Это о причинах, мешающих нашей встрече. Һеҙ ул сәбәптәрҙе белмәйһегеҙ. Нимә тип уйлаһағыҙ ҙа, аңлышаһығыҙ.*

*Ләкин мине һис бер ниндәй причиналар тотасаҡ түгел. Һеҙ үҙегеҙ яҙаһығыҙ бит, что для любви нет никаких преград. Это действительно так, меня ничто не остановит.*

*Күптән түгел читала французский роман (в переводе, конечно). Анда яҙылған, что «любовь заставляет старых все забывать, а молодых на все решаться…». Мин, кажется, аҙаҡҡы группаға относиться итәм. Вот и все, Жәлил ағай.*

*Һеҙ, Мәскәүгә ҡыш бармайым, тигәнһегеҙ. Мин дә Сәмәрҡәндҡә бармаҫҡа бултым. Раздумала…*

*Жәлил, ағай, Һеҙ бик арый тораһығыҙҙыр инте, эшегеҙ күп булғас. Анда хәҙер бик һыуыҡтыр, һыуыҡ тейҙермәгеҙ. Һеҙҙең «анда йәй көнө бик эҫе була, тиләр» тигәнегеҙ дөрөҫ. Ләкин ун йыл буйына өйрәнелде инде – эҫегә лә, барыһына ла. Бик эҫе була. Өҫтәүенә, малярия белән ауырыла…*

*«Салауат Юлаев»ты күрергә тырышырбыҙ, әгәр килһә. Ә башҡортса опера һәм театрларҙы Башҡортостанға ҡайтмай күрергә мөмкинлек юҡ.*

*Рәйсәнән сәләм. Ул бик бәләкәй, бер нәмәне лә төшөнмәй шул әле.*

*Карточканы оҙаҡламай ебәрермен.*

*Һеҙгә иң, иң, иң һағынышлы сәләмем! Нәфисә.*

*Кис, сәғәт 10.*

**31 декабрь, 1940 йыл, Өфө**

*Ҡәҙерле һәм һөйөклө Нәфисә!*

*Хатыңды алдым. Рәхмәт, ысын күңелемдән, йөрәгемдән рәхмәт. Был хатыңды алғас, мин шул тиклем шатландым, ул шатлыҡ донъяға һыйырлыҡ түгел, шатлыҡтан бөтә донъяға ишетерлек итеп ҡысҡырып йырлағы килә. Шатлыҡтан әллә нишләге килә, сөнки ул шатлыҡ йөрәккә һыймай…*

*Шатлыҡтан йөрәк һис тыныслана алмай, түҙмәй хатта. Йөрәк һине күрергә, һөйләшергә атлыға һымаҡ.*

*Минең һиңә булған мөхәббәтем көндән-көн арта, көндән-көн таша. Ошо хатҡа яҙылған ябай һүҙҙәр һиңә минең яҙғы ташҡын һыу кеүек ташҡан мөхәббәтемде һөйләп бирһендәр, теҙеп бирһендәр ине… Юҡ шул, ул мөхәббәтте был хаттағы һүҙҙәр генә әйтеп бирә алмайҙар. Нисек кенә итһәң дә, ул тойғоно, ул мөхәббәтте хатҡа ғына яҙып төшөндөрөрлөк түгел.*

*Әгәр һин минем янымда булһаң, мин һиңә барыһын да, барыһын да һөйләр инем, Нәфисә.*

*Ҡасан килер икән шул көн? Ул көн килер, ышанайыҡ. Уның өсөн бер генә шарт кәрәк, ул да булһа – миңә булған һинең мөхәббәтең. Ул ваҡытта инде, һинең мөхәббәтең минеке һымаҡ көслө булһа, беҙ осрашыр ғына түгел, тауҙарҙы аҡтарып ташлай алырбыҙ. Унда инде был хатҡа яҙған һүҙҙәрҙең кәрәге булмаҫ, асыҡтан-асыҡ һөйләшербеҙ…*

*Һин мине асыҡ (откровенный) тигәнһең, был миңә ҡарата дөрөҫ булыр. Мин үҙемдең уйымдағы нәмәне һәр кемгә асыҡтан-асыҡ әйтергә яратам. Кеше кристалл кеүек таҙа, көн һымаҡ асыҡ булһын. Был кешенең иң яҡшы сифаты.*

*«Мин яңғыҙмын» тигәнһең һин. Юҡ, алай тимә, Нәфисә. Һин яңғыҙ түгел. Бөтә күңелем, йөрәгем һинең менән. Быға тиклем яңғыҙ булғанһыңдыр. Хәҙер алай түгел. Дөрөҫ, үҙең әйтмешләй, беҙҙең араны 5000 километр ара айыра, ләкин минең йөрәк һәр ваҡыт һинең менән, беҙҙең йөрәктәр яҡын.*

*«Боюсь своей любви» тигәнһең тағы. Аны ни өсөн әйткәнеңде лә төшөнәм, әгәр дөрөҫ төшөнһәм. Ләкин һин ул фекереңде ташла, аны онот. «Чтобы потом не возникли недоразумения» тигәнһең. Аны ла онот. Минең тарафтан һис-һис бер ваҡытта ла ундай фекер, ҡараш булғаны юҡ һәм булмаясаҡ та. Мин әле ул турала башыма ла килтергәнем юҡ ине. Ябайлаштырып әйткәндә, «Ул уҡыған кеше, мине әҙәмгә һанамаҫ» тип әйтмәксе булаһың, буғай, дөрөҫмө? Шунан недоразумениелар килеп сыға була инде, шулаймы?*

*Юҡ, юҡ, Нәфисә, мең мәртәбә юҡ, шулай уйлаған булһаң. Әгәр һин Өфөгә ҡайтып, сит ил телдәре институтын (институт иностранных языков) бөтөрөп сыҡһаң, культураға эйә буласаҡһың. Сит ил телдәрен белеү – ул иң юғары культура, ул – цивилизация.*

*Йә, әйткәндәй, күптән түгел генә Башсельхозинституттың 10 йыллыҡ юбилейы булды. Торжественный кисәгә беҙҙең институттан вәкил булып (саҡырылып) мин барҙым. Күп кенә приветствиялар булды, шуларҙың араһында мин дә тәбрикләп немец телендә речь һөйләнем. Ышанмаҫһың, профессорҙар, докторҙар, ғөмүмән, бөтөн публика шаҡ ҡатты. Минең речь бик оҡшаған икән барыһына ла. Торжественный вечерҙа Совнарком һәм Верховный Советтан да кешеләр бар ине.*

*Шуға күрә мин һиңә сит ил теле өйрәнергә, уҡырға кәңәш итер инем. Һин обязательно иностранный тел белергә һәм Өфөгә ҡайтып беҙҙең институтҡа инергә тейешһең – Уфимский институт иностранных языков. Беҙҙең институтта бер генә сит теле түгел, ике тел уҡытыла: береһе – основной, икенсеһе – как подсобный. Тимәк, һин әгәр ул институтҡа инеп уҡыһаң, ике тел белеп*

*сығаһың тигән һүҙ. Һиңә бөтөн кеше һоҡланасаҡ, кто-то будет завидовать. Между прочим, минең үҙемә бик күптәр завидовать итәләр. Дуҫтарым ғына түгел, хатта мине күрә алмай, мине һоғонорға йөрөгән кешеләр ҙә тана алмайҙар, аларға бигерәк тә завидно. Минең дуҫтарым быбың өсөн шатланалар, әлбиттә.*

*«О мешающих нашей встрече причинах» бер-ике һүҙ. Һин минең ул турала нимә уйлағанды яҙыуҙы һорағанһың. Мин уйлайым «привязанность к семье, к отцовскому дому». Башҡа ниндәй сәбәп булырға мөмкин? Бәлки, мин белмәгән башҡа сәбәптәр барҙыр, уныһы миңә ҡараңғы булыу бик мөмкин һәм тәбиғи. Булһа, барыһын да һис тартынмай асыҡтан-асыҡ яҙ. Бөтә сәбәптәрҙе яҙ. Бәлки, мин ул сәбәптәрҙе ситкә ташларға (устранять итергә) һиңә ярҙам итә аламдыр, практический ярҙам, әлбиттә. Мәгәр шулай булһа, мин ул сәбәптәрҙе еңеп сығырға тырышасаҡмын.*

*Ләкин һин әгәр йөрәгеңдә миңә ҡарата тәрән мөхәббәт һаҡлаһаң, бер генә төрлө сәбәп тә ҡамасаулай алмаясаҡ. Ә минең йөрәктә һинең өсөн шишмә һыуы кеүек таша, аяҙ көн кеүек асыҡ, тәрән диңгеҙҙән тәрән мөхәббәт һаҡлана. Һин шуны һис ҡасан онотма. Мин сәғәт һайын, минут һайын һинең белән генә, тик һине генә уйлайым. Һин минең өсөн иң яҡындарҙың яҡыны, Нәфисә…*

*Минең үтенес – урта мәктәпте тырышып тамамла. Ҡулыңа аттестат алыу белән июнь аҙаҡтарында юлға сыҡ. Ә июль башында минең отпуск, Мәскәүгә китәм. Һин онотма, минең һиңә биргән вәғәҙә бар – һиңә Мәскәү күрһәтеү.*

*Минең сәләмәтлекте ҡайғыртҡаның өсөн бик-бик шатмын. До чего внимательная, предусмотрительная и заботливая һин, Нәфисә. 5000 алыҫлыҡта йәшәп минең сәләмәтлекте ҡайғыртаһың. От глубины души спасибо за это. Мин бик сәләмәт әле, ауырыған-һыҙланған юҡ, һыуыҡ та тейгәне юҡ. Башҡортостанда быйыл һыуыҡтар юҡ әле. Мин һинең дә сәләмәт йәшәүеңде ысын күңелдән теләйем. Бер һыуыҡ көндө төшкән рәсемем өлгөрә оҙаҡламай, ебәрермен әле үҙеңә. Ә һин карточкаңды тиҙерәк ебәр. Ҡарар инем, исмаһам, туйғанса карточкаңа булһа ла.*

*«Ғилмияза» тигән бер бик матур көйҙөң ике йырын яҙайым тигәйнем, йыр тас һиңә арналған. Ғилмияза исемле 8 - 9 йәшлек башҡорт ҡыҙын ҡаҙаҡтар урлай. Көйө бик матур аның. Әҙерәк «Урал» көйөнә оҡшаған… Һин Тыуған илгә ҡайтырға тейешһең, ә Ғилмияза ҡайта алмаған. Тыуған илдә йәшәү – ҙур бәхет. Йырлайҙар бит:*

> *Урал ғына тауҙың, ай итәге –*
> *Атай-бабайҙарҙың төйәге.*
> *Уралҡайын һаҡлап ҡорбан булған*
> *Шунда ята аларҙың һөйәге.*

*Был бик дөрөҫ йыр. Улар Уралда тыуып, Уралын, Тыуған илен һаҡлап үлгәндәр. Ниндәй бәхетле булғандар улар.*

*Киноларҙа яңы картиналар бара, был арала барғаным юҡ. Был хат бик оҙон булды, уҡый-уҡый ялҡып бөткәнһеңдер әле.*

*Өфөлә күҙ асҡыһыҙ бурандар башланды. Трамвай линияларын ҡар күмгән.*

*Мин ошоноң белән бөтөрөргә булдым хатымды. Яҙаһы һүҙем бөттө һымаҡ. Һүҙҙе хатҡа ғына яҙып бөтөрөрлөк түгел инде ул. Мин һиңә булған мөхәббәтемде хатҡа түгел, бер нисә томлы китапҡа яҙһам да бөтөрә алмаҫ инем, Нәфисә.*

*Хатың буйынса аңлашыла, Тыуған илгә ҡайтырға почти решилась, но не окончательно әле, минеңсә. Һин окончательно хәл итергә тейешһең.*

*Рәйсә һылыуға минән сәләм.*

*Яңы йыл менән ҡотлап телеграмма һуҡҡайным, алдыңмы? «Килеп алъансы» (до востребования) һуҡтым.*

*Яңы йылды «Башҡортостан» гәзите редакцияһында уҙъарырмын тип торам. Ундаъы егеттәр саҡырҙылар. Аларҙа бик күңелле була, йыр, уйын һәм башҡалар. Октябрь байрамын да шунда уҙъарҙыҡ.*

*Ярай, Нәфисә, хәҙергә хуш. Хәҙер сәъәт 3 инде, таъы 21 сәъәттән 1941 йыл башлана. Шул йыл белән ҡотлайым. Һин был хатты 8-ләрендә алырһың инде. Шул йыл һинең өсөн дә, минең өсөн дә иң бәхетле йыл булһын, мин шуны теләйем. Беҙ йылдың июль башында осрашырға тейешбеҙ. Һин июнь аҙаҡтарында экзамендарҙы тамамлап юлъа сыъырһың. Бында бер аҙ ял итәрһең, анан Мәскәүгә китербеҙ.*

*Хуш, Нәфисә. Уҡыуыңда иң яҡшы уңыштар теләйем. Ысын күңелемдән, йөрәгемдән сәләм һиңә.*

*Мин был хатты бигерәк откровенно яҙҙым шикелле. Яҙып бөткәс, быныһын ебәрмәй, икенселәй яҙайым микән әллә тип тә торъайным, ебәрергә булдым. Әйткән һүҙ – атҡан уҡ, тиләр бит.*

*Хат яҙ, түҙемһеҙлек белән хат көтәм.*

*Иң матур сәләм белән һине ысын күңелдән яратыусы Жәлил.*

*31 декабрь, төнгө сәъәт 3.*

(Атайымдың йәш сағынан алып вафатына тиклем «Совет Башҡортостаны» гәзите журналисы Шакир Насиров ағай яҡын дуҫы булды. Шакир ағай беҙгә яңғыҙы ла, ғаиләһе менән дә йыш килгеләне, атайыма ярҙам итте һәм атайым да уны ярҙамынан өҙмәне. Ағай бик йор телле, кеше менән танышмаҡлы ине. Беҙгә ҡунаҡтар йыйылһа, мотлаҡ берәйһе ҡурай менән килә. «Перовский» яңғырау менән, Шакир ағай бейергә төшөп китә. Уның һымаҡ оҫта итеп бейегән кешене минең бер ҡасан да күргәнем юҡ. Был, әлбиттә, шәхсән фекер. Мәгәр мәжлестәрҙә бөтәһе лә уның бейеүенә һоҡланмайынса ҡалмаҫ ине.

1961 йылда атайыма 50 йәш тулды. Ул эстән генә, юбилейын берәү ҙә иҫенә төшөрмәҫ, һәм шым ғына, һиҙелмәй генә үтер ҙә китер, тип көтөп йөрөнө. Сөнки атайым үҙенә күмәк кешенең иғтибар итеүҙәрен өнәп бөтмәне. Ләкин БДУ студенттары һәм эш буйынса коллегалары, үҙенә әйтмәйсә, тантаналы кисә әҙерләп, уға күп бүләк тапшырҙылар, бихисап йылы ҡотлауҙарын еткерҙеләр. Ә инде ҡунаҡтарҙы өйҙәге мәжлескә йыйыуҙы Шакир ағай ойоштторҙо. Ул теге йәки был таныштары аша ҡайһылыр складтарҙан шул йылдарҙа дифицит һаналған аҙыҡ-түлекте тапты, һый өҫтәлен әҙерләште һәм ҡунаҡтар йыйылғас үҙе аяҡсы булды.

Дуҫ булһалар ҙа, атайым Шакир ағай менән йыш ҡына бәхәсләшә, хатта ҡайһы берҙә әрләшә лә торғайны. Бер саҡ мин унан һораным: «Атай, һин бит бүтән берәү менән дә үҙеңде улай тотмайһың, ә Шакир ағай менән ниңәлер бәхәсләшергә, әрепләшергә яратаһың?». «Шакир — минең дуҫым, мине аңлай, мин дә уны аңлайым, ҡалғандар иһә ҡәҙимге әшнәләр һәм таныштар», — тип яуап бирҙе ул. Был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгө атайым китеп барғас та раҫланды. Үҙен Кейекбаевтың дуҫы тип һанаған күп кенә ғалимдар, яҙыусылар, композиторҙар, артистар һәм башҡалар... вафатынан һуң Кейекбаевты оноттолар тиерлек. Шакир ағай ғына беҙгә килеп йөрөнө, шылтыратты, берәй нәмә кәрәкмәйме, берәй төрлө мохтажлығығыҙ юҡмы, тип белеште. Бик йәл, ағай үҙе лә 1968 йылдың аҙағында гүргә инде.)

**21 ғинуар, 1941 йыл, Өфө**

*Ҡәҙерле Нәфисә!*

*Бик күп һағынышлы сәләм үҙеңә. Һинән хат килерме тип көтөбөрәк йөрөп, хат яҙмай йөрөгәйнем. Нишләптер, ошо көнгә тиклем һинән бер төрлө яуап юҡ. Ғәҙәттә, яуап 7-8 көн дә килә торғайны һәм мин 10-дарында һинән яуап көткәйнем. Һин бик аккуратный була торғайның. Йәшермәй әйткәндә, хат килмәүгә мин борсола биреп ҡуйғайным һәм бер-бер хәл булғандыр, тип уйланым. 31 декабрь яҙған хат бик оҙон ине, һин уны уҡый-уҡый ялҡып та бөткәнһеңдер. Ул хатта төрлө глупостлар ҙа бик күп ине, буғай. Әгәр инде һинең хәтереңдә ҡалырлыҡ берәй һүҙ булһа, һин мине барыһы-барыһы өсөн дә ғәфү ит, Нәфисә үтенәм.*

*Үткән бер хатыңда рәсем ебәрәм тип вәғәҙә иткәйнем, шуның өсөн ошо хат менән шул рәсемде ебәрергә булдым. Уны 3-ндә үк алһам да, ебәрмәй торҙом, сөнки һинән хат көттөм. Рәсем матур түгел. Сәбәбе – тыумыштан матур булып тыумағас, рәсемдә матур булып булмай. Бына, оҡшатһаң, ошо рәсемде иҫтәлек итеп һаҡларһың, оҡшатмаһаң, үҙең беләһең.*

*Был хатты бик ашығып ҡына яҙам. Ҡабаланам шуның өсөн – бөгөн көндөҙгө поезд менән Мәскәүгә китәм, билет-ней алып ҡуйғайным. Быйыл ҡыш бармам тигәйнем, барырға тура килә, саҡырҙылар. Нимәгә саҡыртҡандарын үҙем дә белмәйем әле. Һәр хәлдә был барыуҙа Мәскәүҙә 8 – 10 көндән ары йөрөмәм тип уйлайым.*

*Һинең, Мәскәүҙән хат яҙырһың, тигән һорауыңды үтәрмен һәм Мәскәүҙән хат яҙырмын һиңә, Нәфисә, обязательно.*

*Мин үткән барыуҙа хат яҙмағаным өсөн дә бик үкенәм һәм һинән ғәфү үтенәм.*

*Башҡа яҙыр әллә нәмә юҡ. Һинең Яңы йыл менән ҡотлап һуҡҡан телеграммаңды алдым. Әйтеп бөтөргөһөҙ шатландым, рәхмәт, Нәфисә, бик-бик ҙур рәхмәт Яңы йылда мине иҫкә алыуың өсөн…*

*Хат яҙ, Нәфисә, Өфөгә адреслап.*

*Уҡыуыңда матур уңыштар теләйем. Һау-сәләмәт йәшә. Ысын күңелемдән шатлыҡ һәм бәхет теләп ҡалам.*

*Һиңә иң һағынышлы, иң ялҡынлы сәләм.*

*Хуш, Нәфисә, хуш.*

*Һине һағынып Жәлил.*

**10 ғинуар, 1941 йыл, Карши**

*Здравствуйте, дорогой и любимый Жәлил ағай!*

*Һеҙгә бик күп һағынышлы сәләмдәремде ебәреп ҡалам.*

*Һуңғы хатығыҙҙы алып әйтеп, яҙып бөтөргөһөҙ шат бултым. Яңы йыл менән ҡотлап һуҡҡан телеграммағыҙҙы мин һуңнатып алтым. За хорошие пожелания Вам большое спасибо. Мин Һеҙҙе своевременно поздравить итә алалманым. Һеҙҙән күптән бирле хат булмағас, бәлки, Өфөлә түгелһегеҙҙер, тип уйланым.*

*Һуңғы хатығыҙҙы көтөп алыу миңә бигерәк тә оҙаҡ һәм ҡыйын тойолдо. Хатты алғас, был шатлыҡты Һеҙгә төшөнтөрә алмайым инде. У меня для этого не хватает слов. Придет день, когда я на словах это расскажу. Мин хәҙер ул көндөң килеүенә ышанам, раз аның өсөн һеҙҙең әйтеүегеҙгә ҡарағанда, бер генә шарт кәрәк – Һеҙгә булған минең мөхәббәтем көслө булыу ғына. Ә ул мөхәббәт тураһында ҡабат-ҡабат яҙып тормаһам да булыр инде. Она (любовь) увеличивается и крепнет во мне с каждым днем. Ей нет конца и краю. Мысленно я всегда только с Вами – вижу и говорю с Вами.*

*Былтыр йәй, действительно, ваҡыт әҙ булты. Был турала күп үкенмәй, ҡайғырмай, киләсәктәге осорашыуҙа ваҡыт күберәк былыуын теләйем.*

*Ярар, Жәлил ағай, мин хәҙер ялғыҙ түгелмен. За это участие ко мне благодарю Вас. Этого я никогда-никогда не забуду.*

*«Боюсь своей любви» тигәнемне Һеҙ дөрөҫ төшөнгәнһегеҙ. Беләһегеҙме, Жәлил ағай, – когда человек искренно любит, у него могут возникнут различные сомнения и даже страх. Так было и со мной. Ладно, я по Вашему же совету об этом теперь не буду думать. Недоразумений не будет – это хорошо.*

*Сит ил телләре институтына инеп уҡыу тураһында мин күп уйлап ҡараным, Жәлил ағай. Спорить не приходится, дело хорошее. Против ничего не имею. Но боюсь, что попасть туда будет очень трудно. Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, хәҙерге көнгә тиклем беҙҙә сит ил уҡытыусыһы булманы. Ә өйҙә самостоятельно уҡып, әллә ҡайҙа китеп булмай. Правда, обещают нам, что с третьей четверти преподавателя назначат. Посмотрим, какие будут у меня успехи по этому предмету. Думаю, что не отстану.*

*Я искренне рада, что Вы с успехом произнесли речь на немецком языке. Я бы желала быть в это время в зале, для того, чтобы смотреть и слушать Вас…*

*Хәҙер әҙерәк о причинах, мешающих нашей встрече. «Привязанность к семье, отцовскому дому» – бик ҙур сәбәптәрҙән түгел. Һис кем үлгәнсе ата йортонда тормай. Ҡайҙа ғына уҡырға керһәм дә, барыбыр на некоторое время придется расстаться с семьей. Меня удерживает в семье не привязанность, хотя она тоже есть, конечно. Я никогда об этом не хотела писать, находя неудобным. Дело в том, что у нас создалось положение, при котором бросить семью я не могу. Как долго это будет продолжаться – пока неизвестно. Это очень основательная и трудная причина, которая может помешать в дальнейшем многому. Есть надежда, что из этого положения выйдем. За готовность помочь мне – Вам большое спасибо. В данное время Вашей помощи не нужно. Если я когда-нибудь буду нуждаться в помощи, то обязательно обращусь к Вам.*

*Вы и так до этого времени поддерживали меня морально, а это очень много значит. Материально я не нуждаюсь. Һеҙ миңә асыҡтан-асыҡ яҙмағанға асыуланмай тороғоҙ, Жәлил ағай. Киләһе хатта яҙырмын был хаҡта.*

*Искренно рада, что Вы здоровы. Я тоже здорова, чего желаю всегда и Вам.*

*Рәсемегеҙҙе түҙемһеҙлек менән көтәм. Минеке оҙаҡламай әҙер була шикелле, киләһе хатта ебәрермен.*

*Между прочим, мынта ла 5-енән ҡар яуып көннәрҙе һыуытып ебәрҙе–15 градус һыуыҡ. Был бик күп күренә. Һыуыҡ булһа ла, күңелле. Гел ямғыр ғына яуып ялҡытып ташланы. Ҡыш март айында совсем бөтә. Мартта ағаслар япраҡ ярып, сәскә ата, ә апрель аҙаҡтарында эҫе була.*

*«Тыуған илдә йәшәү – ҙур бәхет» тигәнһегеҙ. Я того же мнения. Мне обидно, что не по своей воле приходится находиться за пределами Родины.*

*Һеҙҙә лә оҙаҡламай каникулдар башлана. Каникул ваҡытында буш ваҡытығыҙҙы күңеллерәк үткәреүегеҙҙе теләйем. Беҙҙең каникулдар үтеп тә киттеләр. 13-өндә уҡырға барабыҙ.*

*Мин Сәмәрҡәндкә барманым. Ни өсөндөр барғым килмәне. Яңы йылты өйҙә ултырып ҡаршы алтым. Ҡыҙларҙы саҡырған инем, алар менән төнө буйы шаярышып сыҡтыҡ. Мәктәптә бал-маскарад ойошторолғайны, анта ла барманым. Маскарадҡа тип теккән костюмым менән масканы бергә уҡыған ҡыҙға биреп ебәрҙем. Ул аны кейеп 2-се урын алған. Так что мой труд не пропал зря.*

*Көннәр бик күңелһеҙ үтә. Мынта бер көн торғом килмәй.*

*«Светлый путь» менән «Музыкальная история»ны яңыраҡ күрҙек. Башҡа ерҙә*

*алар онотола башлаганнарҙыр, ә мынта һаман яңы картина тип хисапланалар. Икеһе лә һәйбәт картиналар, особенно «Музыкальная история». Иртәгә мәктәптә литературный вечер. Миңә доклад яҙырға кәрәк…*

*Яңы йылды нисек һәм ҡайҙа ҡаршы алыуығыҙ тураһында яҙығыҙ…*

*Ни хәтле яҙһам да, һүҙҙе барыбер бөтөрөп булмай.*

*Хушығыҙ хәҙергә, Жәлил ағай. Бик һағынам, бик күрәһе килә Һеҙҙе.*

**25 ғинуар, 1941 йыл, Мәскәү**

*Һөйөклөм, Нәфисә!*

*Һинең һуңғы хатыңды бик һағынып көтөп алдым. Алғас шул тиклем шатландым, бала шатлығы белән шатландым ул хатыңды алғас, Нәфисә. Ул шатлыҡты ҡағыҙға яҙып ҡына бирерлек түгел! Хатыңды алмаҫ борон мин ҡыҫҡа ғына бер хат яҙып теге карточканы ебәргәйнем, мыңарса алғанһыңдыр инде.*

*Китер алдынан, вокзалдан телеграмма ла һуҡҡайным. Мәскәүгә 24-ендә көндөҙ килеп төштөм. Килеп төшөү белән шундай бер хис, тойғо һиҙелде – мин үҙемдең тыуған илгә килеп төшкән кеүекмен. Бөтә урамдар, майҙандар, йорттар таныш, ҡайҙа барыуҙы уйлап тораһы юҡ, ҡайнап торған кеше ағымына ҡушылып, үҙ юлыңдан китә бирәһең. Бер ергә барыр булһаң, кешенән юл һорайһы түгел, тиҙерәк барып етеү яғын ҡарайһың. Мәскәүҙә февралдең 1-енә тиклем булам. Нәфисә, хат яҙһаң, Өфөгә адреслап яҙ, шуңа күрә был хатҡа мин адрес яҙмайым, хат яҙһаң да килеп етмәҫ, өлгөрмәҫ. Һин был хатты алғанда Өфөлә булырмын инде. Мине утверждениеға саҡырғандар икән. Бөгөн «подвыходной» бер иптәш белән киноға барырға булдыҡ. Кисә бер ергә лә барманым. Бер-ике тапҡыр театрға барып ҡайтырға уйлайым.*

*Нәфисә, хәҙер һинең белән осрашыуға ышанысым нығынғандан-нығый, һәм беҙ күрешербеҙ. Мин шул буласаҡ шатлығымды башыма ла һыйҙыра алалмайым. Хәҙер бик-бик һағынам һине. Тик мин, һине атайың ебәрмәҫ, тип уйлайым. «Ҡуй, йөрөмә бер үҙең, унда кемең бар», – тип әйтер. Сәбәптәрҙең береһе шул. Икенсеһе – һин үҙең дә китә алмаҫһың, тип уйлай инем һәм уйлайым, сөнки һин бит бер үк ваҡытта йортта хужа. Әгәр әсәйең булһа, китеү һинең өсөн бер нәмә булмаҫ ине. Мин шуны ла уйлайым, Рәйсә бер үҙе ҡала. Билгеле, ошо сәбәптәр беҙҙең осрашыуға арҡыры ятырға мөмкин. Ләкин мин һаман элекке яҙған фекеремә ҡайтам – әгәр беҙ бер-беребеҙҙе ысын күңелдән, таҙа саф мөхәббәт белән яратһаҡ, беҙ мотлаҡ осрашырбыҙ. Ул сәбәптәрҙе хәл итеүе еңел буласаҡ ул саҡта. Минең тарафтан булған мөхәббәт тураһында һин һис бер ваҡытта ла икеләнмә. Билгеле, ул мөхәббәтемде мин ҡағыҙға яҙып ҡына бөтөрә алмайым. Унда яҙып аңлатыу мөмкин түгел. Бына беҙ осрашырбыҙ, мин барыһын да, барыһын да һөйләрмен һиңә, Нәфисә. Бөтә нәмә тураһында һөйләшербеҙ.*

*Яңы йылды бик шәп үткәрҙек. Минең ҡурайсы иптәшем бар, бик оҫта уйнай. Уның уйнамаған көйө юҡ. Ул миңә һәр ваҡыт кистәрен, ғәҙәттә, ял көнө алдынан, килеп ултыра. Ул ҡурай тарта, мин мандолинала уйнайым, ул йырлай, шунан мин йырлайым. 31 декабрь кисен ул миңә килде, беҙ уның белән сәғәт 2-гә тиклем ҡурай, мандолинала уйнап йырлашып ултырҙыҡ, йырламаған көй ҡалманы. Уның да, минең дә иң яратҡан көй – „Урал“ көйө. Көйләрҙе уйнайбыҙ ҙа – тағы „Урал“ды йырларға тотонабыҙ. Унан да моңло көй юҡтыр донъяла тигән фекергә киләбеҙ. «Башҡортостан» газетаһы редакцияһында эшләүсе егеттәр саҡырғайны, буран булыу сәбәпле, анда барманыҡ.*

*Һин Өфөгә ҡайтҡас, мин ул егетте обязательно саҡырам, тыңларһың, ул бик-бик оҫта уйнай.*

*Нәфисә, һин рәсемеңде ебәр, мин ул рәсемеңде һуңғы хатың менән көткәйнем әле. Көтөп-көтөп килмәгәс, мин үҙемдең рәсемде ебәрергә булдым. «Вәғәҙә – иман» тигәндәр бит боронғолар.*

*Нәфисә, Мәскәүгә килһә килеүҙә икәүләп килербеҙ инде. Йәй көнө Мәскәү бик матур була. Мин һиңә биргән шул вәғәҙәмде үтәһәм, бик бәхетле һанар инем үҙемде. Сөнки мин һинең Европа культураһы менән таныш булыу өсөн бик ҡыҙыҡһынам. Шуның өсөн тырышасаҡмын мин. Сит ил телдәре өйрәнеүгә өндәүҙең бөтә маҡсаты шул.*

*Мин хатымды ошоноң менән тамамлайым инде. Бик оҙон яҙып ташланым.*

*Ҡайтыр алдынан тағы бер хат һалырмын әле Мәскәүҙән.*

*Ярай, хуш, хуш, Нәфисә. Һиңә иң һағынышлы сәләм. Уҡыуыңда матур уңыштар теләйем. Иҫән-һау һәм шат йәшә.*

*Һине һағынып Жәлил.*

*P.S. Бик ҡабалан яҙылды. Йөрөйһө ерҙәр бик күп. Эшләйһе эштәр бар. Мәскәүгә килһәң, тегендә-бында сабып йөрөүҙән бушап булмай. Анда барһаң, бында барһың – шулайтып кис тә булып китә. Беҙҙең каникул хәҙер. Уҡыуҙар 7 февраль башлана.*

*Хат яҙ, Нәфисә, ашығып көтәм.*

*Тағы сәләм.*

(Атайым Мәскәүҙе бик яратты. Уның баш ҡалаға барып йәшәргә һәм унда эшләргә бер нисә тапҡыр мөмкинлеге булды. 1944 йылда Юғары дипломатия мәктәбенә уҡырға керә. Мәктәпте тамамлап, дипломат булыуы ихтимал ине. Ләкин республика етәкселеге уны Башҡортостандан ебәрмәне. Илленсе йылдар башында атайыбыҙҙы атаҡлы тюрколог, академик Н. К. Дмитриев СССР Фәндәр академияһына эшкә саҡырған. Дмитриевтың хаты архивта һаҡлана.)

**30 ғинуар, 1941 йыл, Мәскәү**

*Һөйөклөм, Нәфисә!*

*Ваҡытым иркен, шуңа күрә поезға ултырыр алдынан тағы бер хат яҙып һалайым тинем. Мәскәүгә килгәс, һиңә өсөнсө хат яҙам шикелле. Ысын күңелдән әйтәм, һинән башҡа хат яҙаһы бер кемем дә юҡ минең. Ну, атайыма, әсәйемә яҙам, бөгөн уларға ла яҙып һалдым.*

*Ошо бәләкәй генә хат һиңә барып етеп, һин уны уҡыһаң, минең йөрәккә әллә нисек рәхәт һәм еңел булып ҡалған һымаҡ. Сөнки мин һинең миңә булған мөхәббәтеңде бик-бик хөрмәт итәм, ололайым. Мин ул мөхәббәтте һис бер вакытта ла онотмам. Дөрөҫ, беҙҙең ара бик-бик алыҫ. Бына мин хәҙер Мәскәүҙә йөрөйөм, һин Урта Азияның әллә ҡайһы бер ерендә, ҡом сәхрәләрендә йәшәйһең. Мин ул ерҙең Мәскәүҙән нисә мең километр икәнен дә белмәйем. Ләкин эш анда түгел, беҙҙең ара әллә нисәмә мең километр булмаһын, беҙҙең йөрәктәребеҙ яҡын. Дөрөҫөрәге, минең йөрәгем бигерәк тә яҡын. Шуның өсөн, бик һағынһам да, ҡайғырмайым, шатланам. Ә осрашҡас, нисек шатланасағымды уйлай-уйлай күҙ алдына килтерәм.*

*Йә, мин һиңә бер хат һөйләп һалғайным. Алдыңмы, юҡмы – айырып яҙ. Тик һин уны патефонда энәһен үҙәктән ситкә табан ҡуй, ул шулай эшләнгән. Мин унда әллә нимәләр бутап бөттөм шикелле, сөнки һөйләгәндә яңлыштыра, ҡабаланып та һөйләнем үҙем. Тауыш үҙгәрә һөйләгәндә, аҙаҡ тыңлап ҡараным, бөтөнләй минең тауыш түгел һымаҡ, ярар инде, нисек булһа ла булғандыр.*

*Хәҙер инде Өфөгә ҡайтҡас та һинән хат көтәм. Уйлайым, 11-12 февраль һинән хат килер.*

*Әҙ генә ваҡыт эсендә Мәскәүҙең театрҙарында, киноларында булдым. Көҙ килгәндә театрға күп йөрөгәйнем, быйыл күп булып булманы.*

*Хәҙер инде Мәскәүгә йәйһеҙ килә алмам. Йәй, июлдә, кәңәшмә була. Шунда килергә тура киләсәк. Һин июль баштарында ҡайтып етһәң, бик шәп булыр ине, Мәскәүгә икәүләп китер инек.*

*Шул ҡайтыу мәсьәләһе тураһында хат һайын яҙып, ялҡытып бөтмәйемме һине, Нәфисә? Мин ул турала бик-бик күп уйлайым. Уйымда тик бер һинең белән генә йәшәйем, барлыҡ уйым, барлыҡ шатлығым тик бер һин яңғыҙың ғына. Мин был һүҙҙәрҙе искренно, ысын күңелем белән яҙам.*

*Башҡа яҙырҙай әллә нindәй һүҙҙәрем юҡ һымаҡ. Ошоноң белән тамамлайым хатымды. Мәскәүҙә иптәштәрем белән (өс кеше) рәсемгә төштөк. Шул булды тағы бер эш.*



*Ярай, хуш, Нәфисә. Һиңә иң-иң һағынышлы сәләм. Уҡыуыңда уңыштар теләп ҡалам.*

*Жәлил.*

*(Атайым менән фотоға төшкән иптәштәре – Мәскәүҙә кәңәшмәлә булған Өфө вуздары преподавателдәре: Ҡадир Даян (баҫып тора), ул саҡта К. А. Тимирязев исемендәге Башпединституттың башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире һәм шул уҡ институттың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әхнәф Харисов (фотола – уңда).*

**2 февраль, 1941 йыл, Карши**

*Иҫәнмеһегеҙ, Жәлил ағай!*

*Һеҙгә йыраҡ илдәрҙән үҙемдең һағынышлы сәләмемде ебәреп, иҫәнлек-һаулыҡ теләп ҡалам.*

*21/1 яҙған хатығыҙ белән рәсемегеҙҙе алдым. Жәлил ағай, Һеҙгә барыһы өсөн дә бик ҙур рәхмәт, особенно рәсемегеҙ өсөн.*

*Прочитав письмо, я узнала, что Вы до сих пор не получили мое письмо от десятого января. Это очень неприятно. 31 декабрь яҙған хатығыҙҙы мин 9-ынсы ғинуарҙа алтым. 11-ендә яуап яҙып ебәрҙем. По моим подсчетам, Вы его должны получить не позднее 19 января. Странно, что не получили. Я там написала о многом. Ответила на все Ваши вопросы и предложения, и сама задала кое-какие вопросы. Будет очень жаль, если оно потерялось…*

*Между прочим, Жәлил ағай, һуңғы рәсемегеҙ миңә больше понравился. Не говорю, что первое было плохое, наоборот, возможно, тот снимок и лучше сделан, но, говоря откровенно, глядя на него я не могла Вас ясно восстановить в памяти, Вы казались каким-то чужим. А последний снимок действительно натурален. Я долго смотрела и мне стало казаться, что я давно и близко знаю Вас …*

*«Рәсем матур түгел и т.д.» тигәнһегеҙ, Если Вы так рассуждаете, то мне совсем не следует посылать своей фотокарточки, так как это меня бог не наградил красотой, поэтому и на карточке не выхожу лучше чем есть. Я заранее предупреждаю Вас, чтобы Вы не испугались, получив мое фото. Правда, наверное, приятно иметь красивую физиономию, но ничего не поделаешь, если не имеешь ее… К искусственной красоте прибегать не желаю. Мин был хатты Һеҙҙең Мәскәүҙән ҡайтыуығыҙға ҡаратыбыраҡ яҙам. Хаттар үҙегеҙ юҡта барһа, юғалалар булһа кәрәк…*

*Теперь немного о себе. В предыдущем письме я обо всем написала, кажется. Повторять снова, точно не зная, получили ли Вы то письмо или нет, как-то неудобно. Вы, может быть, его еще получите. Не может же оно так потеряться.*

*По-прежнему дни проходят скучно, однообразно друг за другом, не внося в мою жизнь ничего инетересного. Веселюсь и радуюсь только тогда, когда получаю письмо от Вас.*

*Живу, сама не знаю для чего. Никаких перспектив на будущее нет. Будущее для меня очень страшно. У меня были какие-то желания и планы, первое из них - это встреча с Вами летом этого года. Но вот появляются препятствия, мешающие этому. После этого нельзя ни с радостью, ни с улыбкой смотреть на жизнь.*

*Вы меня извините за все это. Только не подумайте, что я жалуюсь и хочу сожаления. Нет. Это было бы ошибкой. Сожаления я не хочу.*

*Көннәр ҙә күңелһеҙ. Төнө-көнө ямғыр яуа. Аяҡ аҫты бысраҡ. Һис нәмә лә эшләге килмәй. Читаю что попало. Недавно перечитывала «Семья Оппенгейм» Леона Фейхтвангера. Книга очень хорошая, но имею некоторые недоразумения, хотя два раза читала ее. Прочитав ее, я изменила свои взгляды на некоторые вещи. Напишите, какого Вы мнения о ней. Потом читала «Котрапунк» английского писателя О. Хаксли. Книга современная, много критики. Вы, вероятно, читали ее.*

*Смотрела на днях картину «Возвращение». Поучительная картина. На зрителя производит большое впечатление.*

*Да, чуть не забыла. Немец теленән уҡытыусы килде. Йәш кенә кеше. Практикаһыҙ. Немец телен үҙе лә яҡшы белмәй булһа кәрәк. Еңел генә вопростарға яуап бирә алманы…*

*Хат урыҫса яҙылты, Жәлил ағай. Башҡортса һис яҙып булмай.*

*Өфөлә бик һыуыҡтыр хәҙер, ҡар яуа торғантыр, ә мынта ҡар күптән эреп бөттө, инде оҙаҡламай йәй була…*

*Түҙемһеҙлек белән хат көтәм. Вообще напишите обо всем.*

*Сәләм белән, любящая Вас и скучающая по Вам Нәфисә.*

**11 февраль, 1941 йыл, Өфө**

*Һөйөклөм, ҡәҙерле Нәфисә!*

*Кисә хатыңды алдым. Рәхмәт, Нәфисә. Мин бик-бик шатландым. Һинән килгән һәр бер хат миңә ялҡынлы шатлыҡ, ҡайнар дәрт килтерә. Мин һинең үҙеңде күргәндәй шатланам. Һине бик-бик һағынам мин, һағынһам да шатланам.*

*2 февраль яҙған хатың тураһында бер-ике һүҙ. Һин ул хатыңды бик упадочное настроение белән яҙғаның күренә. «Живу сама не знаю для чего. Будущее для меня странно, никаких перспектив на будущее нет» тиһең. К чему ул һүҙләр һәм ундай настроениелар? По твоему письму от 10 января я был твердо уверен в том, что ты теперь живешь радостно, весело, потому что Ты сама писала об этом, что теперь ты не одна…*

*Я, между прочим, догадываюсь, почему ты была в таком настроении. Это потому, что мое письмо было коротко и сухо (т.е. то письмо, где была карточка). Когда я писал это письмо, я был в настроении беспокойства, т.к. от тебя почему-то долго ничего не было. Мин үҙем бик үкенәм шуның өсөн – ул хатты мин 21 ғинуар иртә белән яҙҙым. Шул көнө уҡ занятиянан ҡайтыуыма һинән хат килеп торған. Ул хатыңды уҡығас, мин шул тиклем шатландым, Нәфисә, беләһеңме... Мин ул хатты Мәскәүгә үҙем белән алып киттем. Бик ҡабалан ине. Хат яҙып торманым, Мәскәүҙән яҙырмын тинем һәм поезға ултырыр*

*алдынан һиңә телеграмма ғына һуҡтым да киттем. Мәскәүгә 24 ғинуарҙа барып төштөм, шул көнө уҡ һиңә хат яҙҙым. 26 ғинуар (йәкшәмбе көн) «говорящее письмо» һалдым. Һин ул хатты алғанһың һәм тыңлағанһыңдыр инде.*

*Мәскәүҙән 30 ғинуар өсөнсө хат яҙҙым һиңә һәм шул көндө Өфөгә ҡайтыуым тураһында телеграмма һуҡтым. Надеюсь, һин уларҙың барыһында алғанһыңдыр инде.*

*3 февраль дә яҙған хатың тураһында – ул хатың ҡыҫҡа ғына булһа ла, минең өсөн бик ҡиммәтле. Иртәгәһенә инде һин бөтөнләй икенсе настроениела булғанлығың күренә. Күңелле, шат настроение. Надеюсь, что һин ни өсөн шулай булғаныңды үҙең дә беләһең. Мин һине, ошо минутта ла шундай яҡшы, шат настроениелаһыңдыр, тип уйлайым. Минеңсә, тормошта була торған төрлө влияниеларға ныҡ бирелеп, күңелһеҙ йәшәргә ярамай – мин аңлайым, кеше машина түгел, автомат түгел, кеше төрлө нәмә тураһында уйлай. Шуның өсөн төрлө ваҡыт була – ҡайсаҡта настроение бик һәйбәт була, ҡайсаҡта насар ҙа була. Шуны көрәшеп еңергә кәрәк, ул особый внутренний көрәш.*

*Ты пойми одно, дорогая моя Нәфисә – жизнь прекрасна, хороша и сильна, сильнее ее нет ничего на свете. Законы жизни суровы. И человек в жизни должен всегда стремиться, стремиться только вперед, не отступая ни на шаг, беспощадно ломая все встречающиеся преграды. Отступление от своих желаний и целей равно гибели. Жизнь диктует свое, но нужно побеждать в жизни. Побеждает в жизни и достигает вершин только тот, кто терпеливо и неустанно карабкается по ее каменистым тропам. И этот человек считается победителем и счастливым. Ни один человек не рождается счастливым. Жизнь – это большая дорога, по этой дороге нужно идти только вперед.*

*Һин, конечно, был истинаны беләһең, мин тик артыҡ булһа ла, тағы бер мәртәбә һинең иҫеңә төшөрөр өсөн генә яҙҙым. Я прошу Тебя, моя любимая, Ты хорошо запомни эту истину и не забывай.*

*Хатыңда һин яҙаһың: «У меня были кое-какие желания и планы – это встреча с Вами летом этого года… но появляются препятствия, мешающие этому…» и т.д. и т.п. Я понимаю это примерно так – выходит, что у Тебя когда-то были кое-какие желания и планы встречи со мной. А теперь их нет, что ли у Тебя? Выходит, что Ты сейчас отказалась от них, т.е. от встречи со мной? Я, может быть, неверно понимаю, тогда извини.*

*Я понимаю, что тебе одной очень и очень трудно и скучно. Я очень беспокоюсь за Тебя. Мин эштә лә, буш ваҡыттарымда ла һине генә, тик бер һине генә уйлап йәшәйем. У меня сейчас только одно желание, только одна цель – это встреча с Тобой. От этой встречи будет зависеть многое, от нее будет зависеть судьба моей любви к Тебе, возможно, от нее будет зависеть и моя судьба. Я люблю Тебя и высоко ценю и уважаю Твою любовь ко мне, если она у Тебя так же сильна, как и у меня. Һин бер генә нәмәне иҫеңдә тот: я не люблю Тебя одной только любви ради.*

*Мин шуныһын да аңлайым: һин фактически являешься хозяйкой дома. Әгәр һинең әсәйең булһа, „ата йорто“н ҡалдырыу һинең өсөн куда легче булған булыр ине. Был – бер. Икенсенән: препятствиеләр атайың тарафынан булырға мөмкин. Ул, билгеле, беҙҙең отношениены белмәй. Һәм атайың һиңә, конечно, нимә булһа ла әйтә торғандыр. Ты заканчиваешь среднюю школу и Твое будущее должно волновать не только Тебя самой, но прежде всего оно волнует Твоего отца, потому что Ты его любимая дочь. Я это знаю из своей практики. Я помню, сколько мой отец старался для меня. Он ругал меня, давал советы и помогал (мало того, в детстве даже поколачивал немного за неправильные поступки). И я за это сейчас очень благодарен своему отцу. Хороший отец таким и должен быть. И я не сомневаюсь, что Хәлил ағай очень хороший отец. Ты должна любить и уважать его.*

*«Сожаления я не хочу», – говоришь Ты. Мин, ғөмүмән, кешене ҡайғыһы үҙенән тормаһа ғына йәлләйем. Бер яҡтан ҡарағанда, мин бында торған көйө һине йәлләп тә әллә ни эш ҡайрата алмайым. Һинең шундай упадочное настроениела булыуыңа бер аҙ миндә лә ғәйеп бар. Сөнки мин хатты ҡоро яҙғанмын, шул арҡала һиндә насар настроение тыуған. Һин мине бының өсөн ғәфү ит. Мин һинән бик оҙаҡ хат килмәй торғас, ысынлап та беспокоиться итә башланым. Аны мин һинән йәшермәйем.*

*Һуңғы хатың менән рәсемеңде көткәйнем, нишләптер, был юлы ла ебәрмәгәнһең. Һаман көтөүемде дауам итәм, обязательно ебәр, Нәфисә.*

*Ә матурлыҡ (красота) тураһында һөйләүҙе ҡалдырайыҡ. Одна только красота не решает дело. Важно то, чтобы человек был кристалльно чистый и честный. Стремление только к внешней красоте – это легкомыслие.*

*Если Ты не передумала, то мы летом этого года обязательно должны встретиться. Я люблю Тебя и в моей любви к Тебе не сомневайся. Наша встреча должна решить судьбу нашей взаимной любви, а, может быть, и нашу судьбу.*

*Мәскәүгә ни өсөн саҡыртыуҙары тураһында мин бер аҙ яҙғайным. Мине утверждениеға саҡырғандар. Положение буйынса институт һәм университет директорҙарын һәм заместителдәрен фәҡәт Мәскәү Наркомпрос РСФСР и Комитет по делам Высшей школы при СНК СССР утвердить итә. Утверждениеға директор һәм заместителдәр персонально саҡыралар (для личного знакомства). Шулай итеп, мине лә саҡырҙылар. Ҙур-ҙур начальниктарға индереп, күрһәтеп таныштыралар. Аның да церемонияһы бар, үҙенә күрә түгел. Ахырҙа утвердить итеп, ҡулға приказ тоттороп ҡайтарып ебәрҙеләр. Шул церемония 5 - 6 көн дауам итте. Мин бер һылтау менән Мәскәүҙә йөрөп ҡайттым. Мин былтыр уҡ барырға тейеш инем, үҙем согласие бирмәй тартышып йөрөнөм. Бик ҡыҫтап саҡыра башлағас, барҙым. Ризалығымды шуның өсөн бирмәгәйнем – яуаплылыҡ бик ҙур.*

*Мәскәүҙә мин тик бер һине генә уйлап йөрөнөм. 21 ғинуар, китер көндө, һинән хат алғайным, шул тиклем һәйбәт настроение менән ултырып киттем поезға, хатта минең менән бергә барыусы беҙҙең преподаватель замечать итте: «Ты почему-то сегодня в особенно хорошем расположении духа»,– тине. «Я сегодня получил замечательное письмо, какого я еще в своей жизни никогда ни от кого не получал»,– тинем. Он, конечно, подробности не расспрашивал. И всю дорогу у меня в голове была только одна мысль – Ты, дорогая и любимая. И когда я ходил по Москве (я люблю ходить по Москве пешком), я мечтал и думал только об одной Тебе, дорогая и любимая моя Нафиса.*

*В Москве, конечно, ничего особенного со мной не случилось – в этом будь уверена.*

*Л.Фейхтвангерҙың «Семья Оппенгейм» тигән китабын мин немецсаһын күптән уҡ уҡығайным. Киноһын да күрҙем. Киноһы бик шәп эшләнгән, көслө сыҡҡан. Киләһе хатта мин «Оппенгейм» һәм «Контрапункт» тигән әҫәрҙәр тураһында язырмын әле.*

*Хатыңа ҡарағанда, һин күп уҡыйһың икән, романдар менән увлекаться итәһең. Был бик һәйбәт эш, күп уҡырға кәрәк. Ләкин һәр бер уҡыған әйберҙең йоғонтоһона, тәьҫиренә бик бирелеп китергә ярамай, критически ҡарарға кәрәк. Аҙмы ни андай көслө яҙылған әҫәрҙәр.*

*Немец теле уҡытыусыһы бик шәп түгел тиһең инде. Йәштер, тәжрибәһе юҡтыр, күрәһең. Ул – тәбиғи хәл. Уҡыусылар, ғәҙәттә, төрлө һорауҙар биреп сәнскеләйҙәр. Ул минең өсөн яңылыҡ түгел. Һеҙҙең уҡытыусы йәшлеге менән просто растеряться итеп ҡалғандыр, күрәһең.*

*«Вообще напишите обо всем» тип яҙаһың... Мин был хатымда бөтөн нәмә тураһында яҙҙым, буғай, урыҫса ла башҡортса ла яҙҙым үҙең һымаҡ. Ҡайһы телдә яҙһам да минем өсөн барыбер, әлбиттә, тик урыҫса уҡыу һинең өсөн еңелерәк булыр тинем.*

*Мәскәүҙә Фридрих Вольф тигән дуҫым, ул немец яҙыусыһы, бар минең. Мин аңа гел немецса яҙам, ул да миңә немецса яҙа. «Профессор Мамлок» тигән киноны, бәлки, күргәнең барҙыр, шуның авторы. Йәй Мәскәүгә барғас, таныштырырмын әле үҙеңде, ул урыҫса белмәй тиерлек, бик насар һөйләшә. Һин аңа тиклем бер аҙ немецса өйрән. Возможно, беҙ туп-тура аңа барып төшәрбеҙ. 1936 йыл беҙ аның белән икәүләп Өфөгә килдек һәм Йоматау санаторийында айҙан артыҡ ял итеп яттыҡ, ул үҙе бик һәйбәт, простой кеше.*

*Мин уйлағанымды барыһын да теҙеп яҙҙым. Һин дә барыһын да яҙ, Нәфисә. Мин түҙемһеҙлек белән хат көтәм. Һинән хат килһә, ул минең өсөн ҙур шатлыҡ. Мин бит бөтөн уйым, хыялым белән тик бер һинең белән генә йәшәйем. Шуны белһәң ине һин, һөйөклөм. Асыҡтан-асыҡ яҙғанға асыуланма. Рәсемеңде обязательно ебәр.*

*Өфөлә хәҙер көндәр йылына башланы, мыңарса һыуытҡайны, Мәскәүҙә лә бик һыуыҡ булды. Хәҙер Өфөлә 10 – 15 градус.*

*Өфөнөң театрҙарында һәйбәт пьесалар бара. Академтеатрҙа – «Человек с ружьем». Ленин ролен йәш кенә бер артист бик шәп уйнай. Урыҫ дәүләт театрында – «Кремлевские куранты», анда ла Ленин ролен матур башҡаралар. Сталин ролендәге артист та бик яҡшы уйнай. «Аҡбуҙат», «Урал батыр» һәм «Башҡорт туйы» тигән пьесалар әҙерләнә. «Салауат Юлаев» картинаһы Өфөгә килде, оҙаҡламай барасаҡ.*

*Быйыл йәй Өфөлә, ғөмүмән, искусство байрамы буласаҡ, сөнки 1942 йылдың башында Мәскәүҙә башҡорт искусствоһы декадаһы була. Шуңа бик ҡаты әҙерлек бара. Райондарҙан данлыҡлы ҡурайсылар, йырсылар, бейеүселәр саҡырылғандар. Шуларҙы һайлар өсөн райондарҙа бригадалар эшләп йөрөй хәҙер. Быныһы, ҡыҫҡаса Өфө хәлдәре.*

*Үҙемдең хәлдәр һәйбәт, бик шатмын. Һаман эшләп йөрөгән көн, 7 февраль уҡыуҙар башлана.*

*Хат яҙ, Нәфисә, бөтөнөһөн дә яҙ, рәсемеңде ебәр.*

*Һинең шат, күңелле йәшәүеңде ысын йөрәктән теләп ҡалам.*

*Хуш, Нәфисә, хуш, минең берҙән-бер һөйөклөм.*

*Крепко-крепко целую. Һине һағынған Жәлил.*

(Атайым бер ваҡытта ла оло начальник булырға ынтылманы. Университеттың сит телдәр факультеты деканы вазифаһынан үҙенең үтенесе буйынса бушатҡастар, һөйөнөүен хәтерләйем. 1957 йылда Башҡорт педагогия институты университетҡа әйләнгәс, атайыма проректор булырға тәҡдим яһайҙар, ләкин ул ризалыҡ бирмәне. БДУ ректоры Ш. Х. Чанборисовтың өйөбөҙгә бер нисә тапҡыр килеп атайымды ошо вазифаға димләүе һәм тәғәйенләүе онотолмай. Ул проректор булып оҙаҡ та эшләмәне, эштән үҙ теләге буйынса бушатыуҙарын үтенеп ғаризалар яҙҙы. Ә инде кафедра мөдире вазифаһына егелеүҙе башҡорт телен уҡытыуға һәм фән булараҡ был ғилемдә практик ҡараштарын бойомға ашырыу мөмкинлеге итеп һананы. Ысынын ғына әйткәндә, аҡса һәм матди байлыҡ туплау мәсьәләләре уны бер ваҡытта ла ымһындырманы.)

**9 февраль, 1941 йыл, Карши**

*Ҡәҙерле һәм һөйөклө Жәлил ағай!*

*Һеҙгә иң һағынышлы сәләмдәремде ебәреп ҡалам.*

*Һуңғы (Мәскәүҙән ебәргән) хаттарығыҙҙы алып, әйтеп, яҙып бөтөргөһөҙ шатландым. Рәхмәт, мең тапҡыр рәхмәт, Жәлил ағай. «Өфөгә ҡайтам» тигән телеграммағыҙҙы алғас, хат яҙып тормаҫҡа булғанһығыҙҙыр, тип уйлағайным. Оказывается, я ошиблась.*

*Не знаю, как объяснить Вам благодарность за все-все. Я, конечно, не ожидала говорящего письма. Об этом я даже не думала. В условиях Средней Азии это еще совершенно ново. Представьте мою радость и восхищение, когда я услышала Ваш голос. Сегодняшний день был для меня большим праздником. Хатығыҙҙы ҡабат-ҡабат тыңлап кинәндем. Шатлыҡ йөрәккә һыймай.*

*Тауышығыҙҙы, үҙ телегеҙ беләнәйткән һүҙҙәрегеҙҙе ишеткәс, Һеҙҙе тағы нығыраҡ күргем килә. Үҙегеҙ әйтмешләй, әгәр беҙ быйыл осраша алмаһаҡ, бик йәл булыр. Быйыл йәй күрешә алмаһаҡ... Остальное без слов понятно. Тогда неизвестно, когда и при каких обстоятельствах мы еще встретимся.*

*В моей любви Вы тоже не должны сомневаться. Когда человек любит впервые, он любит искренно, всей душой. «Любовь побеждает все, даже смерть» – читала я где-то. Это верно. Но иногда и любовь бывает не в силах побороть препятствия, создающиеся на пути к достижению цели. Вот и у меня так. Я Вас люблю, как никогда и никого еще не любила.*

*Я должна Вас видеть. Я всем сердцем желаю этого. Те обстоятельства, о которых я Вам писала, они мешают мне. Мешают многому. Обстоятельство, которое у нас создалось, может сделать меня несчастливейшим человеком (О них я напишу ниже).*

*Жәлил ағай, беҙҙең осрашыуға атайым мешать итмәй, вернее, в данное время он не в состоянии помешать чему-либо...*

*Тағы ла «үҙеңә ғаиләнән айырылып китеүе ҡыйынтыр» тигәнһегеҙ. Дөрөҫ, ҡыйын. Потому что ғаиләне ташлап китеүе һис мөмкин түгел. Семья состоит из 3 человек –мин үҙем, Рәйсә һәм ауылдан алып килгән ике туған энем Әхмәт. У Вас возникает вопрос: а где же отец и брат отца? Әтейемдең энеһе Ташкентта уҡый, ә әтейем...*

*Жәлил ағай, миңә был турала яҙыу бик ҡыйын һәм оят, ләкин яҙмай булмай. Надеюсь то, что я напишу, кроме Вас, никто знать не будет. Был турала мин һис яҙырға теләмәй инем, но рано или поздно я вынуждена была бы сказать Вам правду. Лучше сейчас же.*

*Дело в том, что әтейем находится в тюрьме, вот уже өсөнсө ай. Суд булғаны юҡ әле. Статью предъявили небольшую, надеемся, что он будет на свободе. Но только – надеемся. Вам, наверное, известно, что он юрист. Не знаю, на какой почве у него возник конфликт с прокурором. Они поругались, папа чем-то оскорбил его. Он вообще очень вспыльчивый, нервный. Мне его не очень жалко, хотя он и отец мне. Было бы, быть может, и жалко, если бы это случилось с ним в первый раз. Каждый раз это кончалось каким-нибудь несчастьем – первый раз мы вынуждены были покинуть Родину (в 1930 году), второй раз (это было в 1937 году) умерла мать и я осталась одна с сестренкой. Пришлось бросить учебу и поступить на работу. А сколько пришлось переносить унижений и т.д. Я все это не могу забыть, а он забыл, не взял ничего к сведению. Ничто его не исправило.*

*Вы представить не можете, какой это позор – город небольшой, живем в нем семь лет. Все знают меня, и я всех знаю. Вот даже на улицу выйти неудобно, начинаются расспросы – неужели опять твой отец сидит, за что и т.д. А какое*

*унижение – идти просить пропуск на передачу. Там десять раз обо всем расспросят, зададут совсем не относящиеся к делу вопросы. Все это ужасно надоело. А на свидание я ходила только один раз. Больше, сознаюсь, не хочу. Только расстроюсь.*

*Это мешает и учебе. Учебу в этом году закончу, а дальше? Дальше ничего не могу придумать. Если бы я одна была, дело было бы другого рода. Могла бы и в дальнейшем продолжать учиться. К несчастью, я не одна. Сестренку совершенно некуда устроить, да и жалко ее. Ей семь лет. Әнейем үлгәндә аңа 3 кенә йәш ине. Хәҙер ул миңә бик нык өйрәнгән. Вот она-то и является причиной всего.*

*Положение вот такое. Асыҡтан-асыҡ яҙъанъа мине ъәйепләмәгеҙ, Жәлил аъай. Үҙегеҙ әйткәйнегеҙ бит, асыҡтан-асыҡ яҙ, тип.*

*Сами живем ничего. Только то плохо, что мы совершенно одни. Обо всем нужно заботиться самой. Былар барыһы ла уҡыуъа ла әҙерәк мешать итәләр. Шул сәбәптән быйыл бик яҡшы уҡып булманы. Биш айҙан уҡыуҙар ҙа бөтә, а дальше? Неизвестно что… После школы придется идти на работу. Работа меня не страшит, я уже привыкла к ней и могу работать, но жалко, что не смогу продолжить дальнейшую учебу. Әтейемә суд булъансы һис нимәне решить итеп булмай. Әгәр әтейем освободиться итһә, ул мине тота алмай. Я могу просто не подчиниться его воле.*

*Вот и все. Все это не мешает мне любить Вас. Наоборот, моя любовь увеличивается к Вам. Большое счастье для меня, когда приходят от Вас письма. Радуюсь как ребенок. Но как подумаю о том, какая пропасть нас разделяет…*

*Мин был хатты яҙъанда, Һеҙҙең рәсемләрегеҙҙе алтыма һалып ҡуйҙым. Ниңәлер мне кажется, что Һеҙ ябыҡҡанһыъыҙ, по сравнению тәүгеһе белән и вообще. Йәй Һеҙ былай ябыҡ түгел инегеҙ. Ауырыныъыҙмы әллә, Жәлил аъай? Йәки эшегеҙ бик күптер... Я беспокоюсь. Тәүлә мин рәсемегеҙҙе алъас та замечать итмәгән инем.*

*…Когда начала писать, настроение было упадочное, а заканчиваю в повышенном. Сәбәбе – патефон уйнай. Һеҙҙең хатыъыҙҙы ҡабат-ҡабат тыңлайым. Күңел күтәрелеп китте. Перечитываю под музыку Завела «Дождь идет». А на дворе тоже дождь…*

(Әсәйемдең атаһын — Хәлил олатайыбыҙҙы беренсе юлы коллективизация осоронда хөкөмгә тарттыралар. Юрист булараҡ, ул Үтәш ауылында бөтә кешеләрҙе лә көсләп колхозға индереүҙәренә ҡаршы төшә. Бының өсөн уның атаһын — бик тә ихтирамлы Закир Халиҡов мулланы, ҙур өйөн, барлыҡ мөлкәтен конфискациялап, урамға ҡыуып сығаралар, тотош Халиҡовтарҙы раскулачивать итәләр.

Ҡулға алынғандар һәм һөргөнгә ебәрелгәндәр араһында Закир Халиҡовтың бер туған ағаһы күренекле дин әһеле, ижтимағи һәм сәйәси эшмәкәр Мансур Халиҡов та була. Мансур Халиҡов тураһында Башҡортостан Республикаһы энциклопедияһында мәҡәлә бар.

Хәлил олатайҙы өс йылға Соловки һөргөнөнә ебәрәләр. Ул Соловкиға нисек алып барыуҙарын, башҡа арестанттар менән урман ҡырҡырға ебәреүҙәрен иламһырап һөйләй торғайны.

Эш башлар алдынан бөтәһен дә сафҡа теҙеп, урман кәсебен белгәндәрҙе өс аҙым алға сығырға фарман бирелә. Бойороҡ ике мәртәбә яңғырай, ләкин берәү ҙә сафтан сыҡмай. Өсөнсө мәртәбә яңғырағас, өс аҙымды Хәлил яһай. Ни генә тимә, башҡортмон бит әле, урманлы яҡта үҫкәнмен, моғайын да, урман кәсебендә бирешмәм, тип уйлай. Әмәлгә таянғандай, уға урман



ҡырҡыу нормаһын теркәп барыу эше генә йөкмәтелә, бының өсөн хатта ашарына бирәләр. Норма ауыр була, кем уны үтәмәй, шуға ризыҡ бирелмәй... Ул осор һөргөндә Ленинград Фәндәр академияһы ғалимдары ла ыҙа сигә, араларында хатта 82 йәшлек ҡарт тотҡон була. Академик меҫкен ағас йығыу түгел, аяғын саҡ һөйрәп йөрөгән. Олатайым көн һайын уның фамилияһы тапҡырына «нормаһын үтәне» тип сыймаҡлай һәм бының өсөн ҡарт ғалимға шыйыҡ баланда һәм ҡара икмәк телеме тәтей. Башҡалар эшләгән саҡта академик түңгәк өҫтөндә ултырып тора һәм Халиковҡа рәхмәт уҡый. Бер саҡ хатта былай тип юрай:«Һин, Халиҡов, изгелек ҡылаһың, бының өсөн оҙаҡ йәшәрһең, минең йәшемә етерһең!»— ти.

Хөкөм срогын тултырып, Хәлил олатайыбыҙ ҡатыны һәм ҡыҙы менән Урта Азияға барып төпләнә һәм унда адвокат булып эшләй. 1936 йылда олатайымды Татарстандан килгән бер дуҫы менән, нахаҡ ошаҡ буйынса «халыҡ дошманы» яһап, ҡулға алалар.

Олатайҙың хәтәр хәтирәләре күңелгә уйылған... Тәүҙә уларҙы берәм-һәрәм оҙаҡ һәм ҡаты итеп язалайҙар, икеһенең дә тикшереү ҡағыҙҙарына ҡул ҡуйыуҙарын талап итәләр. Ләкин ике дуҫ алдан уҡ бер ниндәй ҡағыҙға ла имза һалмаҫҡа һүҙ беркетә, һөҙөмтәлә улар атыуҙан йә иһә оҙайлы һөргөндән ҡотола. 1940 йылда допростарға һәм язалауҙарға етәкселек иткән хеҙмәткәрҙәрҙең береһе прокурор булып китә һәм барыбер ҙә үҙ һүҙле адвокат Халиҡовты яңынан төрмәгә тығыу һылтауын таба.)

**17 февраль, 1941, Өфө**

*Иң ҡәҙерлем, иң һөйөклөм, Нәфисә!*

*Ошо хатым белән һиңә йөрәгемдең иң тәрән еренән ташып сыҡҡан сәләмдәремде ебәрәм. Һинең сәләмәт йәшәүеңдә, шат йәшәүеңдә ысын күңелемдән теләп ҡалам.*

*Һинең һуңғы хатыңды алдым. Беләм, һин ул хатыңды ысын йөрәгеңдән яҙғанһың. Шуның өсөн мин һине тағы ла көслө, тығы ла ныҡ, үҙ туғаным һымаҡ күреп яратам, Нәфисә.*

*Килер бына бер көн, ә ул көн мотлаҡ киләсәк, мин һиңә барыһын да, барыһын да һөйләр инем. Һинең шул асыҡлығың, саф, таҙа күңелле булыуың өсөн мин дә һиңә үҙемдең уйымды, теләгемде асыҡтан-асыҡ яҙырға булдым һәм һин асыуланмаҫ, тип уйлайым. Мин һиңә бер тапҡыр асыҡлыҡ күрһәтеп яңлышмағанмын (ул асыҡлыҡ мөхәббәтте асып биргән саҡта ине). Был юлы ла яңлышмам, тип уйлайым. Мин ул турала үткән хатымда яҙа биреп тә ҡуйғайным, ләкин мин анда туранан-тура әйтмәнем. Шулай ҙа, һин шул һүҙҙәрҙе ҡарап логически вывод яһағанһыңдыр, тип уйлайым. Мин ул хатты яҙғанда һинең был хатыңды алмағайным әле. Ул хатта әллә ниндәй һүҙҙәр бик күп булды, шуның өсөн һин миңә асыуланма, ғәфү ит. Анда мин: «У тебя (когда-то) были желания встречи со мной летом этого года, а теперь их нет что-ли»,– тип һорап ҡуйғайным, шуның өсөн бик борсолам, ғәфү ит, мин уны кире алам,*

*сөнки мин төп сәбәпте белмәй инем. Хәҙер инде минең өсөн барыһы ла асыҡ.*

*Һин яҙаһың: «Вот она то и является главной причиной»,– тиһең. Ул Рәйсә инде. Ләкин һин әҙерәк яңлышаһың, Нәфисә. Рәйсә беҙҙең осрашыу өсөн һис бер ваҡытта ла төп сәбәп була алмай. Ни өсөн? Һин хәҙер Рәйсә өсөн әсә урынында ҡалғанһың, ул һинең берҙән-бер туғаның. Ул һине әсәһен яратҡан һымаҡ яратып өйрәнгән, ул һинән айырыла алмай. Һин дә уны ятараһың һәм йәлләйһең, ул шулай булырға тейеш тә. Был һинең бик һәйбәт сифатың. Мин хатта үткән хаттарымдың береһендә яҙҙым да, буғай, һиңә, Өфөгә килгәндә, Рәйсәне обязательно алып кил үҙең менән, тип. Әллә шул турала уйлап, һиңә яҙманым микән, хәтерләмәйем. Мин дә ул турала уйланым.*

*Нәфисә, һин атайың ҡайтарылған сүрәттә лә Рәйсәне ҡалдырма. Ул анда һине һағыныр, илар. Һин бында аны һағынырһың, ҡайғырырһың. Һин аны үҙеңдән ҡалдырма, алып кил.*

*Нәфисә, һөйөклөм! Һин ғәфү итерһең һәм ғәфү итеү тураһында хат яҙырһың. Мин һиңә нисбәттән тағы бер тапҡыр асыҡлыҡ күрһәтергә уйлайым. Эта откровенность может ошеломить тебя… Ләкин мин ысын күңелемдән яҙам, Нәфисә. Һине һис бер ваҡытта ла түбәнһетергә теләмәйем, һис, һис бер ваҡытта ла. Ул һүҙҙе мин әйтмәһәм, бырыбер башҡа кеше әйтәсәк, ҡасан булһа ла бер ваҡыт берәү әйтәсәк. Иртәме-һуңмы, иртәгәме, иртәгәнән һуңмы – һин ул һүҙҙе кемдән булһа ла ишетәсәкһең. Һәм ул һүҙҙе мин обязательно әйтергә тейешмен. Мин әйтмәһәм, һин үҙең ғүмерҙә әйтмәйсәкһең. Мин аны күптән үк яҙайым тип йөрөгәйнем. Тартынынҡырап йөрөнөм, һәм, йәй осрашҡас, тел менән әйтергә тип тә уйлағайным. Хатта яҙып әллә нисек һымаҡ, «хат – документ» тиҙәр юриспруденция вәкилдәре. Ышанам, һин был турала бер ҡасан да бер кемгә лә һөйләмәҫһең. Был фәҡәт икебеҙҙең араһындағы сер.*

*Нәфисә, иң ҡәҙерлем, иң һөйөклөм. Мин һине ғүмерлек иптәш итергә уйлайым. Был һүҙҙәрҙе яҙғанда, мин һинең турала шул тиклем ныҡ уйланым, баштарым әйләнеп китте. Сөнки мин бындай һүҙҙе үҙ ғүмеремдә бер кемгә әйткәнем дә, яҙғаным да юҡ ине. Үҙем шикләнәм дә, әллә нисек, шулай булһа ла, яҙырға булдым. Бына шулай, Нәфисә. Үтенеп һорайым, асыуланма, үпкәләмә. Мин һине уғата, артыҡ көслө яратҡанға ғына яҙам, әйтәм. Әгәр мин яңлышһам, ғәфү ит. Төрлө саҡ булырға мөмкин, бәлки, мин яңлышамдыр, кем белә. Әгәр (случайно) мин яңлышмаған булһам, хат яҙ. Һин Өфөгә ҡайтырһың, теләгән вузға уҡырға керерһең. Рәйсә лә уҡыр… Әйткән һүҙемде ҡабул итһәң, аны ла алып ҡайт.*

*Был инде, асыҡтан-асыҡ әйткәндә, – «Предложение» яһау. Әгәр һин шуны ҡабул итһәң, я буду считать себя обрученным. «Обручение» – ул, билгеле, иҫке йола. Ләкин Ленин әйткән: «Любите по старому» тигән. Был һүҙ бик тәрән мәғәнәле һәм бик тура әйтелгән.*

*Предложениемды шуға күрә баҙнат итеп яһайым. Әгәр мин һине ысын йөрәгем менән яратам икән, һәм һин дә мине ятараһың икән, беҙҙең арала булған көслө мөхәббәт ҡатып ҡалырға тейеш түгел. Сөнки һинең мөхәббәтеңә ныҡ, ысын күңелемдән ышанам һәм яңлышмайымдыр, тип уйлайым.*

*Предложение яһау менән, билгеле, мин һиңә алтын тауҙар, тау-тау тиклем бәхеттәр вәғәҙә итмәйем. Әгәр мин шулай итһәм, ҙур хата эшләгән булыр инем.*

*Бәхетте берәү ҙә «мә» тип килтереп тоттормай, уны кеше тырышлығы менән генә таба. Беҙ бер-беребеҙҙе ысын күңелдән ятраһаҡ, ысын уважение менән ҡараһаҡ, бер-беребеҙҙе ҡаҡмаһаҡ, икебеҙҙә бәхетле булырбыҙ. Татыулыҡ, бер-береңә ышаныу – ул үҙе ҙур бәхет. Халыҡта бер йыр бар. Ул йырҙы миңә атайым йырланы. Ул кисә генә ҡайтып китте әле. Ул йыр былай:*

*Бәләкәй, бәләкәй, һай, күк бүртә,*
*Әкрен-әкрен юртып тиҙ етә.*
*Ашағандар бөтә, кейгән туҙа,*
*Татыулыҡайларға ни етә.*

*Был йыр миңә бик-бик оҡшаны һәм мин уны яҙып алдым. Мин аны ғүмергә онотмаясаҡмын.*

*Минең үтенес – әгәр һеҙ ҡабул итмәһәгеҙ, минән көлмәгеҙ, Нәфисә. Нисек хәл итһәгеҙ ҙә, бер кемгә лә әйтмәгеҙ, кәңәш итмәгеҙ, нисек хәл итһәгеҙ ҙә, бер үҙегеҙ хәл итегеҙ. Мин дә шулай эшләнем. Әгәр ҡабул итмәһәгеҙ, мин һис-һис асыуланмаясаҡмын һәм Һеҙгә уважение белән ҡарайсаҡмын. Әгәр инде ҡабул итһәгеҙ, миңә хатҡа яҙығыҙ. Һис тартынмағыҙ. Бына шул.*

*Фоторәсем тураһында – мин ысыннап та ябыҡ төшкәнмен, сөнки мин уны эштән ҡайтып барғанда төшкәйнем, хатта тамаҡҡа ла ашамағайным, әҙерәк арылған да инде. Анан һуң ас ҡарынлай (натощак) төшөргә кәңәш бирмәйҙәр икән. Иптәштәр әйткән булды, бик әйбәт сыҡҡан, тигән булдылар, шуңа күрә ебәрергә булдым. Ә йәй ял итеп ауылдан яңы ғына килгәйнем. Һеҙҙең белән осрашҡанда, вполне естественно, шулай булғас. Киләһе ял көнө тағы төшәм әле. Ә Һеҙ рәсемегеҙҙе обязательно ебәрегеҙ, мин бит һаман көтәм.*

*Ошо хатҡа эйәртеп Һеҙгә бәләкәй генә бер посылка ебәрәм. Посылкала – Мәскәү бүләктәре һәм йыуасалары, Рәйсәгә конфеттар. Бүләк тип әйтеү ҙә ҡыйын инде аны, сөнки нимә алырға белмәнем. Шуларҙы тоттом да алдым. Һеҙ уларҙы ҡабул итеп алығыҙ, Нәфисә, әгәр ҡабул итһәгеҙ, мин бик-бик шат булырмын.*

*Мин хатымды ошоноң белән тамамлайым. Хәҙер сәғәт төнгө берҙе һуғып, 15 минут китте. Бөгөн 17-һе, иртәгә 18-ендә иртәнсәк занятияға барышлай һалам.*

*Нәфисә, һөйөклөм… Мин һиңә барыһын да ысын йөрәгем, ысын күңелем белән яҙҙым. Минең йөрәгемдә һиңә булған мөхәббәт шул тиклем ташҡан, ул мөхәббәт ташҡын һыуҙарҙан да ташҡын, көслө диңгеҙ тулҡындарҙан да көслө. Шуңа күрә мин ул һүҙҙәрҙе һиңә ҡасан булһа ла бер ваҡыт әйтер йә иһә яҙыр инем.*

*Әгәр һин ҡабул итмәһәң, ҡабул итмәүеңә төрлө сәбәптәр килтермә, мин былай ҙа аңлармын. Рәйсә быңа һис бер вакытта ла сәбәп була алмай. Мин ул турала яҙҙым. Атайың ҡайтҡан сүрәттә лә, һин уны ҡалдырып китергә тейеш түгелһең…*

*Һин тағы шундай фекерҙә ҡалма: «Бына мин шундай положениела ҡалғас, был мине, йәнәһе, ҡотҡарырға булған икән»,– тип уйлама. һис, һис улай түгел…*

*Хатымды ошоноң белән тамамлайым.*

*«Һөйләгән хат»ты алыуыңды белеп мин дә һинең белән шатландым.*

*Хуш, хуш, Нәфисә. Хуш, һөйөклөм һәм ҡәҙерлем.*

*Иң ҡайнар сәләмдәремде ебәреп ҡалам үҙеңә, Рәйсәгә лә сәләм.*

*Крепко-крепко целую, һағынып Жәлил.*

***P.S.** Был хатты ни тиклем матур яҙырға тырышып ҡараһам да, килеп сыҡманы. Ҡытыршы ерҙәре күп булды. Ғәфү итерһең тип уйлайым.*

*(Дауамы бар.)*

## ИЛЕ МЕНӘН БЕРГӘ КҮРҘЕ*

Билдәләгән ваҡытта Ишҡар ауылы яғынан ҡара болот кеүек ҙур ғәскәр килгәне күренә. Ара дүрт саҡрым булһа ла, ғәскәрҙең башы Лаяштыға килеп еткәндә, аҙағы Ишҡарҙан сығып бөтмәгән икән. 200-ләп атлы, «Йәмле Ағиҙел буйҙары» көйөнә йырлап, ауылға килеп инде. Канцелярияға килеү менән, Ғиззәт ҡартты уратып алып: «Ҡайҙа отрядың? Давай, хәҙер үк!» – тип екеренергә, башҡаларҙы ла: «Тиҙ генә ат егеп сығығыҙ!» – тип ҡамсы менән ҡурҡытырға тотоналар. Отряд, тиҙ генә йыйылып, Әсәнгә йүнәлә. Баш күтәреүселәрҙең иҫәбе-һаны юҡ, төркөм-төркөм булып үтеп кенә торалар. Иң арттан Ҡарабаш һәм Ишмөхәмәт ауылдарында ойошторолған язалау отряды үтә. Халыҡ ҡыҙған, бер ауылдан икенсеһенә һанһыҙ элемтәсе атлылар сабыша.

Көндөҙгө 11-ҙә «Дүртөйлөнө алдыҡ» тип сабышып ҡайтыусылар күренде. Ауылдан берәү яраланған икән. Ул арала Исмаилдан: «Әңгәсәккә ҡыҙылдар килгән. Ғәскәр ебәрегеҙ!» – тигән бойороҡ килә. Иртәгәһен дә Ҡарабаш, Ишмөхәмәт отрядтары Дүртөйлө яғынан ҡайтыусыларҙы Исмаилға ҡыуып йөрөй. Кискә табан ҡыҙылдарҙың еңелеүе тураһындағы хәбәрҙе ишеткәс, Билал күңелһеҙләнә. Ҡоро Аласыҡ ауылынан бер иптәште тотоп килтергәс, уның документтарын уҡып бирергә ҡуштылар. Билал: «Ул большевик түгел. Герман һуғышында ғәрипләнгән. Өфөлә инвалидтар курсында уҡып, ауылға ҡунаҡҡа ҡайтҡан», – тип аңлата. Ғиззәт ҡарт та пропуск яҙырға ҡушып, «Беҙҙән зыян булмаһын» тип, мөһөр һуғып бирә.

Бер көндө Омск ҡалаһынан ялға ҡайтҡан ҡыҙыл командирҙы алып киләләр. Ғиззәт ҡарт уның кемлеген белешә лә: «Йәркәй аша йөрөмә, тотоп үлтерерҙәр. Сөйәркүл, Шишмә ауылдары аша иҫән-һау үтеп китерһең», – тип пропуск тоттора. Тәртип буйынса бер ауылда пропуск алған, төҫ-кейеменән большевиклығы күренмәгән кешене бүтән ауылдарҙа туҡтатып тормайҙар. Пар аттарҙа китеп барған бер кешене тотоп килтерһәләр, уның Түбәнге Новгородтан Өфө губернаһына иген әҙерләү өсөн ебәрелгән вәкил булыуы асыҡлана. Ғиззәт ҡарт менән Билал уға ла пропуск биреп, ҡайһы яҡҡа барырға кәрәклеген өйрәтеп ебәрәләр.

Бөрө яғынан һуғышҡа әҙерләнеү тураһында хәбәрҙәр килеп тора. Ишҡар һәм Исмаил ауылдарынан: «Большевик Билалды нишләп канцелярияға ҡуйҙығыҙ? Хәҙер үк Йәркәйгә штабҡа ебәрегеҙ! Ебәрмәһәгеҙ, отряд менән барып алабыҙ», – тип ике-өс бойороҡ килә. Ә Ғиззәт ҡарт: «Уның большевик булғаны юҡ. Хөкүмәт ултырғансы уны ошонда тотабыҙ, шунан тейешле урынға оҙатасаҡбыҙ», – тип хәбәр ебәрә. Билал өсөн өйҙә бер атты һәр саҡ эйәрле тоталар. Кәрәк була ҡалһа тип, «Элемтә өсөн ебәрелде» тигән документ та әҙерләп ҡуялар.

---

*Аҙағы. Башы 8-се һанда.

Өсөнсө көн киское табан пулемет тауыштары ишетелә башлай. Олоҫ башҡарма комитетынан «Этәй һәм Йәркәй ауылдарына ҡыҙылдар кергән» тигән хәбәр килә. Төндә Ҡоро Аласыҡ ауылынан таныш булмаған ике ир, Мутиковтың өйөнә килеп: «Канцелярияғыҙ, комендатығыҙ ҡайҙа? Барығыҙ ҙа большевиктар!» – тип аҡырынып сығып китә.

Пулеметтарҙан көслө ут асып, ҡыҙылдар Әсәнде баҫып ала. Район йыйылышы барған йортҡа инеп, президиумда ултырыусыларҙың барыһын да ҡулға алалар. «Ҡарағош яуы»нда ҡатнашҡандарҙың байтағы шулай ҡыҙылдар ҡулына эләгә. Яҡын-тирәләге ауылдарҙа тикшереү башлана. Бөгөлмә яғынан килгән Өфө отрядтары Ишҡар, Минзәлә, Йәркәй ауылдарында урынлаша. Фетнәлә әүҙемлек күрһәткән Ҡарабаш, Ишҡар, Этәй, Исмаил ауылдарынан бик күп кеше ҡулға алынып, Минзәлә яғына ебәрелә. Исмаилдан – 20, Ишҡарҙан – ике-өс, Иғмәттән алты кешене аталар. Урындарҙа партия йыйылыштары үткәрелеп, иҫән ҡалған һәр большевик үҙ ауылында кемдәрҙең баш күтәреп ҡатнашыуын, айырыуса әүҙемлек күрһәткәндәрҙе атап, исемлек төҙөп отрядҡа бирә.

Ауылдарға йөрөп агитация яһарға, булған ҡоралды йыйырға, әүҙем боласыларҙы ҡулға алырға ячейканан ун кеше билдәләнә. Үҙ ихтыяры менән ҡоралын тапшырырға теләмәгәндәрҙе ҡамсы менән һуҡтыралар. Олоҫ башҡарма комитеты Ишҡар ауылына күсерелә. Ляяштыла етем балалар өсөн балалар йорто төҙөлә башлай. Олоҫта бөтәһе өс балалар йорто һалына. Һәнәк һуғыштары бөтөү менән, уҡыу-уҡытыу, шулай уҡ партия эше юлға һалына.

Шул йылдың яҙында Билал кантон съезына вәкил итеп һайлана. Советтар илендә юлбашсылыҡ итеү, партия күрһәтмәләрен олоҫ съезы аша тормошҡа ашырыу тормошҡа ашырыла. Шулай ҙа халыҡтың байтағы, бигерәк тә байҙарҙың, коммунистарға дошманлығы Советтарға әүҙем эш алып барырға ҡамасаулай. Һәр олоҫта бер-ике хеҙмәт мәктәбе асыу буйынса ныҡлы әҙерлек башлана. Исмаил олоҫонда был мәктәптәр Ляяшты, Абдулла, Йонно ауылдарында асылырға тейеш булып, партия ағзаларына уға етәкселек итергә ҡушыла. Һабантуйҙарҙы ҡыҙыл һабантуй итеп үткәреү тураһында хәстәрлек күрелә. Тағы ла комиссия ойошторолоп, рәйес итеп Мутиков һайлана.

1 майға ике мәктәптә лә төҙөлөш эштәре тамамланып, һәр береһенә 60-тан ашыуыраҡ бала ҡабул ителә. Әлбиттә, иң элек – үкһеҙ етем, ярты етем, ҡыҙыл ғәскәрҙәгеләрҙең балалары. Мәктәптәр ауылда, хужалыҡ итергә өйрәтеү менән бергә, үкһеҙ етемдәр өсөн балалар йорто ла була. Йәшелсә баҡсаһында уҡыусылар йәшелсә үҫтерергә өйрәнә. 1 майҙа ситән үреү, баҡса һөрөү буйынса тәүге өмә үткәрелә.

Май аҙағында Мутиков Бөрө өйәҙенең Советтар съезына вәкил булып бара. Уны элекке дуҫтары Мөхсинов, Вахитов, Тупиевтар ҡалала ҡалырға өндәп, гәзит сығарыуҙы яйға һалыуҙы йөкмәтә. Билал ризалаша, шунда уҡ губерна съезына вәкил итеп тә һайлана. Съезд июндә Веденеев баҡсаһындағы театрҙа йыйыла. 20 июндә һабантуй үткәрергә булалар. Алдан иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, мулла-монтағайҙарҙың: «Коммунистарҙың һабантуйына бармағыҙ, унда барғандарҙы ер йотасаҡ», – тип ҡотортоуы arҡаһында, тәғәйенләнгән көндә байрам үткәрелмәй. Хатта, икенсе көндө лә йыйылған халыҡ ситтән генә ҡарап тора: йәнәһе, майҙанға инһәләр, уларҙы ер йота. Тағы ла өгөтләргә тура килә.

Һабантуй митинг менән асылып, Әғзәм Мөхсинов, Вафа Йосопов, Сәхибгәрәй Бәҙриев, Ғата Исхаҡи, Билал Мутиковтар һабантуй тарихын, уның киләсәктә нисек үткәрелергә тейешлеген аңлата. Билал урыҫ булмаған

халыҡтар араһында мәҙәни-сәйәси эш алып барыу бүлегендә эш башлай. Бүлек мөдире Шәйехзада Вахитов, урынбаҫары Фәтих Садиҡов булып, Мутиковҡа информатор һәм мөхәррир вазифаһын йөкмәтәләр. Башта уның гәзит эшенә оҫталығын тикшереп, «Известия» гәзитенең баш мәҡәләһен тәржемә иттереп ҡарайҙар. Артабан Билал хәҙерге хәл тураһында мәҡәлә лә яҙа. Тикшереүҙе үткәс: «Бик яҡшы, әйҙә, эшкә тотон», – тиҙәр.

Бөрөлә урыҫса типография бар, тик хәреф йыйырға башҡорт һәм татар ғына юҡ. Был эшкә Садиҡов менән Мутиков икәүләп тотона. 1920 йылдың 21 июлендә телеграфтан алынған сығанаҡтарҙан «Хәбәрҙәр» тип аталған стена гәзитенең тәүге һанын сығаралар. Артабан гәзит аҙна һайын сыға, һәр һанын баш мәҡәлә, һуңғы хәбәрҙәр биләй. Ике эшсене хәреф йыйырға йәлеп итеп, урыҫ иптәштәрҙән гәзитте баҫырға ла өйрәнәләр. Ләкин был эш оҙаҡҡа бармай, Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу башланып, Билал шунда йәлеп ителә һәм үҙенең олоҫона ҡайтарыла. Төркөмдөң етәксеһе Хәмзин, ярҙамсыһы Барый Ғәниев булып, төркөмгә Билалдан башҡа Фәтих Садиҡов, Рабиға Йосопова, Мәғсүмә Халиҡова, Гөлсөм, Өрҡиәләр ҙә инә.

Иҫәп алыу тамамланып, Бөрөгә ҡайтҡас, Вахитов, Садиҡов, Мөҡсинов, Йөҙөм Ҡадировалар гәзит эшенә тотона. 1920 йылдың 7 ноябрендә тәү тапҡыр «Тура юл» исемле дүрт битле гәзит сыға. Көҙ еткәс Мулланур Вахитов исемендәге клубта культура эштәре алып барыу, татар-башҡорт театрын юлға һалыу менән ныҡлап шөғөлләнә башлайҙар. Театрҙың етәксеһе Әминев булып, труппала Хәниф Мусин, Йөҙөм Ҡадирова, Гөлсөм Шиһабетдинова төп уйнаусы иҫәпләнә. Уларҙан тыш Зәки Мөҡсинов, Мутиков, Садиҡов, Хәниф Ғәбитов, Зөфәр Мостафин, Ғәйдәни Мөҡсинов, Рабиға Йосопова, Мәғсүмә Халиҡова, Өрҡиә һ.б. бер нисә кеше ҡатнаша. Театр спектаклдәрҙе бушлай аҙнаға ике тапҡыр күрһәтә. Башлап эшләүселәргә һәм ғәскәриҙәргә контрамаркалар бирелә. Һәр спектакль алдынан берәй сәйәси тема буйынса сығыш яһала, күберәк уны Мөҡсинов менән Мутиковтан һөйләтәләр. Фронтта күп кенә митингыларҙа ҡатнашып оҫтарғанлыҡтан, Билалға был бер ни түгел. Уның илдең эске һәм тышҡы иҡтисади хәле хаҡында сәғәт ярым һөйләргә һәләтен «штатлы агитатор» тип баһалайҙар.

Шул йылдың көҙөндә Мутиков крәҫтиән ҡатын-ҡыҙҙарҙың беренсе өйәҙ конференцияһында ҡатнаша. «Өйләнергә лә кәрәктер инде» тигән уй ҙа шул ваҡыттарҙа килә. Йөҙөм Ҡадирова уға кейәүгә сығырға ризалығын белдерә. Билал уға өйләнһә, партияға инергә, йәғни бергәләп эшләргә ниәтләнеүен дә йәшермәй. Әммә егет уға өйләнергә теләмәүен, әҙәп һаҡлап та тормай, әйтә лә бирә. Рабиға Йосопова уға бик оҡшай, сөнки, берҙән, уҡымышлы, икенсенән, комсомол эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Өҫтәүенә, бик ябай, башҡа ҡыҙҙарға хас мещанлығы ла һиҙелмәй.

Өйәҙ советында ҡатын-ҡыҙҙар бүлеге ойошторолғас, ҡыҙҙарҙың инструктор вазифаһында Билал менән бер бүлмәлә эшләүе уларҙы тағы ла яҡынайта. Өйәҙ делегаттары декабрҙә Өфөгә съезға барып ҡайтҡандан һуң, был дуҫлыҡ көсәйә төшә. Ара-тирә записка ла яҙышалар, театрға ла йөрөйҙәр. Рабиға ғаиләһенең Өфөлә булып, уларҙан айырым йәшәүен әйткәс, Билал ҡыҙҙың үҙ аллы йәшәүенә шатлана ла, ғорурлана ла. Бер-береһенә эҫенә төшкәс, Мәскәүгә барып уҡыу, бергә тормош ҡороу тураһында һөйләшәләр. Йәштәр ауылдарға сығып спектаклдәр ҡуя. Быға тиклем татар-башҡорт театрҙарының булмауы сәбәпле, халыҡ, ҡыҙыҡһынып, бик күп йыйыла. Ә дин әһелдәре, революцияны ек күргән байҙар, мөнәсәбәттәрен һиҙҙереп, төрлө насар һүҙҙәр еткерә. «Мин-минлек

ҡорбандары» тип аталған спектаклдә төп ролдәрҙе Рабиға менән Билал башҡара. Өсбүлә ауылында ошо уҡ тамашанан һуң Зәки Мөҡсинов яҙған «Ҡан» пьесаһын да күрһәтәләр. Әсәндә иһә спектаклдәрҙе ике көн тороп ҡуялар. Клуб булмағанлыҡтан, Сәхипзада Мәҡсүтовтың буш торған мәҙрәсә залын ҡулайлаштырырға тура килә. Аҙаҡ Үрге Маншыр, Исмаил, Йәркәй ауылдарында ла спектаклдәр күрһәтәләр. Илемдә өс көн торғандан һуң, үҙешмәкәр артистар Иҫәнбай ауылына килә. Рабиға Йосопова Мутикова булып киткән. Исмаил тирәяҡта иң бай һәм иң фанатик ауылдарҙың береһе булып, йәштәр унда үҙҙәренә ҡаршы бик көслө ҡотҡоға юлыға. Улар төшкән фатир хужаһы өй йылытырға утын биреүҙән баш тартҡас, төндә мәсет утынын урлап алырға тура килә.

Мәскәү олоҫоноң Сабанай, Нәрештә ауылдарында ла булып, ай ярымдан һуң ғына труппа Бөрөгә ҡайта. 13 урында 27 кисә үткәрелеп, шул саҡлы доклад уҡыла, гәзит сығарыла, спектаклдәр ҡуйыла. Улар ойошторған кисәләрҙә кәмендә 6-7 мең тамашасы ҡатнашҡан. Билалдың Рабиға менән ҡауышыуы тураһындағы хәбәр таралып та өлгөрә. Ләкин Билал – үҙ фатирына, Рабиға үҙе торған ҡарттарға ҡайта. Ауылдарҙа яҙғы сәсеүгә төшөү ваҡыты ла етеп килә. Уға берәмләп түгел, ә төркөмләп барырға булалар. 4 февралдә юлға сығып, Киҙгәнбаш, Ҡаҙансы, Иҫке Балтас, Тәтешле, Ҡыҙыл Яр, Ваныш-алпауыт, Борай олоҫтарында йөрөп, 7 апрелдә генә Бөрөгә ҡайталар. Рабиға ҡатын-ҡыҙҙар конференциялары ойоштororға тейеш булып, уны Билал менән бергә башлай. Һүҙ күберәк ҡатын-ҡыҙҙың азатлығы, хужалыҡ ҡороу, баҡсасылыҡ эштәре тураһында бара. Наҙанлыҡ көслө булғанлыҡтан ораторҙарҙың һүҙҙәрен йүнләп тыңлап та тормаҫтан: «Беҙгә азатлыҡ ниңә кәрәк? Беҙгә күлмәк-ыштанлыҡ тауар, кәрәсин-тоҙ, шырпы бирегеҙ!» – тип ҡысҡырған ҡатындар ҙа бар. Ҡайһылары хатта: «Бына беҙ хәҙер ниндәй ыштан кейеп йөрөйбөҙ», – тип итәктәрен асып та күрһәтә. Сөнки баҙар юҡ, аҡсаның ҡәҙере ҡалмаған. Тауарҙы кооперация аша ғына аҙлап-аҙлап алырға мөмкин. Кәрәсин урынына ауылдарҙа май, сыра яндыралар. Эш алып барыу бик ауыр, тик ошо хәлгә төшөүҙең сәбәптәрен аңлатып биргәндә генә халыҡ аңлай. Аҙаҡ: «Бына рәхмәт һиңә, юҡһа хөрриәт тиҙәр ҙә, беҙгә ауыҙ асып һөйләргә ирек бирмәйҙәр. Бына шулай ултырып һөйләшкәс, бер-береңде аңлайһың бит», – тиҙәр. Ваныш алпауыт олоҫонда Рабиға менән Билал ЗАГС-ҡа инде.

Бөрөгә ҡайтҡас, Рабиға алдан әҙерләп ҡуйған фатирға урынлашып, бергә йәшәй башланылар. Үрге Покровская урамындағы ике ҡатлы йорттоң бер бүлмәһендә Хәмзиндар менән бергә торалар. Мебель – ике ултырғыс, иҫке генә өҫтәл, тимер карауат. Һауыт-һаба – ауылдан алып килгән самауыр ҙа ике пар сынаяҡ. Бына шулай яңы тормош ҡороп ебәрә йәш ғаилә. Ашау-эсеүгә килгәндә, икеһе лә паек ала. Билалды эшселәр рәтенә индереп, айына 17 ҡаҙаҡ арыш оно, биш ҡаҙаҡ һары май, ике ҡаҙаҡ шәкәр ҡомо, биш ҡап папирос бирһәләр, Рабиғаның бер айлыҡ паегы 11 ҡаҙаҡ он, ике ярым ҡаҙаҡ май, шәкәрҙән тора. Ауылдан алып килгән талҡанды көн дә кис ҙур кружкаға һалып, ҡайнар һыуға май болғатып ашайҙар. Йәшлек дәрте, революцион рух күтәренкелеге был етешһеҙлектәр алдында баш эйергә бирмәй ине. Йәй көндәре Ағиҙелгә төшөп, кәмәлә йөҙәләр, ҡыштарҙы театрҙа репитициялар үткәреп, спектаклдәрҙә уйнап үткәрәләр.

1921 йылдың майында Бөрө өйәҙенең башҡорт һәм татар коммунистарының дөйөм конференцияһына әҙерлек башлана. Өйәҙҙә йәшәгән төркиҙәр араһындағы эштәр башлыса Шәйехзада Вахитов етәкселегендә алып барыла ине. Ләкин башҡорт һәм татарҙарҙы вазифаға үрләтеү мәсьәләһендәге

иғтибарһыҙлығы, Мәскәүгә уҡырға кешеләр ебәрмәүе, Свердловск ҡалаһында асылған журналистар курсына ике кеше оҙатырға тейеш булып та, уны ойоштормағаны өсөн ул эшенән алына. ВКП (б)-ның өйәҙ комитетына яңы ағзаларҙан сәркәтип итеп Зәки Мөҡсинов, ағзалыҡҡа Билал Мутиков һәм Зөфәр Мостафин һайлана. Милләттәр эштәре бүлеге мөдире итеп аҙаҡ Мутиков үрләтелә. Уларға башҡорт, татар, мари һәм удмурттар араһында эшләү йөкмәтелеп, ревизия, инструкторҙар, информация бүлектәре лә ойоштоа. «Тура юл» гәзитен сығарыу ҙа ошо бүлеккә тапшырыла. 56 кеше, шул иҫәптән 16 инструктор өйәҙҙә төрлө эш алып бара, төрлө кампанияларҙа ҡатнаша. Мутиковтарҙан тыш инструкторҙар булып Әхмәтдин Мөхөтдинов, Ҡәләм Ғөбәйҙуллин, Сәрүәр Янышев һ.б. эшләй.

1922 йыл. Ауылдар, ҡалалар ас кешеләр менән тулған. Урамдарҙа хәлһеҙ ятыусылар көн һайын арта. Барлыҡ көс аслыҡҡа ҡаршы көрәшкә йүнәлтелгән булып, Билал тыуған яғында вәкил булып йөрөй, ә иптәштәре ауылдарҙа ашханалар асыуға сығарып ебәрелгән. Аслыҡ аңлатып бөтөрә алмаҫлыҡ дәрәжәлә көслө. Хатта ауылдарҙа ла арыш икмәге таба алмаҫһың. Булған ҡәҙәре алабута ононан аш бешереп ашайҙар. Ул да бик ҡәҙерле, күптәргә эләкмәй. Малдары булғандар итен генә түгел, тиреләрен дә мейестә өтөп ризыҡлана. Эт, бесәй, ҡарға кеүек хайуан, ҡош-ҡорт ҡалмай. Ҡайһы бер ауылдарҙа кеше ашау ваҡиғалары ла күҙәтелә. Халыҡ ҡот осҡос ябыҡҡан, күҙҙәре йоторҙай булып ҡарай. Күңелдәрҙә: «Был мине тотоп ашамаһа ярар ине», – тигән уйҙар тыуа. Бик күп кеше юлда, урамдарҙа астан йығылып үлә. Һәр 10 – 15 саҡрым һайын биш-алты үлек осрау ғәҙәти күренешкә әүерелә. Төрлө ауырыуҙар арҡаһында ла кеше күпләп һәләк була. Ҡәбер ҡаҙыу, мәйеттәрҙе күмеү сиратлап башҡарыла. Лаяштыла аслыҡҡа тиклем 1300-ҙән ашыу йән булһа, аслыҡтан һуң ни бары 700 самаһы кеше иҫән ҡала.

Яҙға табан ашханалар асылыу, Американың «Ара» ойошмаһы аша бирелгән ярҙам менән күпмелер кешенең, бигерәк тә балаларҙың, туҡланыуын еңелләштерә. Әммә астарҙың барыһын да туҡландырыу мөмкин түгел. Билал йәшәгән Коммунистик урамындағы йорт астар менән шығрым тулып, көн һайын 10 –15 кеше үлә. Мәйеттәрҙе амбарға ҡуйып торалар ҙа бер нисә көндән, ылауҙарға тейәп, күмергә алып китәләр.

Яҙ халыҡҡа сәсеү орлоғо таратыла. Уны ашатмай сәстереү өсөн ҡәтғи саралар күрелеүгә ҡарамаҫтан, ҡайһы берәүҙәр барыбер ризыҡҡа тотона. Күптәр шул арҡала үлемдән тороп ҡалды. Йәйгә сыҡҡас халыҡ балтырған, кесерткән кеүек үлән менән тамаҡ аҫрай. 1923 йылда иген яҡшы уңып, көҙгә тиклем халыҡтың хәле күҙгә күренеп яҡшыра.

Үҙәк күрһәтмәһе буйынса февралдә Билал эшләгән милләттәр бүлеге бөтөрөлә. Ай ярым эшһеҙ ятҡандан һуң, уны партияһыҙ крәҫтиәндәр конференцияһын үткәрергә ебәрәләр. Юлдан ул бик ныҡ өшөп, биҙгәк менән ҡаты ауырып ҡайта ла оҙаҡ ҡына түшәктә ята.

Бер аҙҙан Мутиковты ВКП (б)-ның Бөрө район комитеты секретары итеп ҡуялар. Был вазифа бөтөрөлгәс, ул тағы эшһеҙ ҡала. Ҡалала вазифалы эштәге урыҫтар араһында үҙ-ара көрәш башланған мәл. Ер эштәре бүлегендә эшләгән Касатухин һәм Белозеровтар был көрәш башында тороп, башҡорт һәм татарҙар уларға ҡыҫылмай ине. Төркөмдөң сәйәсәте – партияның өйәҙ комитеты секретары Елагин менән өйәҙ Советы башҡармаһы рәйесе Рудаковтарҙы ҡыуҙырып, урындарына үҙ кешеләрен ҡуйҙырыу. Сөнки барлыҡ аппарат

башында ла тип әйтерлек ситтән килгән кешеләр ултыра. Ошо хаҡта Билалдың да фекерен белешкәс, ул Касатухин фатирында үткәрелгән кәңәшмәгә бара. Өйәҙ комитеты сәйәсәтенә риза булмайынса, улар ВКП (б) Үҙәк Комитетына ялыу яҙа. Тикшереү башланһа, һәр кем үҙенә ҡағылған пункт тураһында һөйләргә, тип килешәләр. Мутиковҡа «милли сәйәсәт дөрөҫ алып барылмай» тигән пункт буйынса һүҙ әйтеү йөкмәтелә. 92 кеше ҡул ҡуйып, ғаризаны ебәрәләр. Аҙаҡ партияның губерна комитетынан Герасимов һәм Парекин етәкселегендәге төркөм килеп, ялыуҙы тикшерә. Билал милли сәйәсәт, атап әйткәндә, эштең башҡорт һәм татар телендә йөрөтөлмәүе, хужалыҡ һәм идара эштәренә төрки халыҡтарҙы ҡатнаштырмауҙары һ.б. тураһында миҫалдар менән һөйләп бирә.

Тикшереү тамамланғас, актив йыйылышы саҡырылып, мәсьәлә унда ла ҡарала. Икенсе йылды Бөрө өйәҙе Башҡортостанға ҡушыла. Сентябрҙә Билалды холоҡ төҙәтеү йортона тәрбиә бүлеге мөдире итеп ебәрәләр. Тотҡондар 300-ҙән кәм түгел, эш бик күп. Мутиков бында ла күп эш башҡара. Иң элек наҙанлыҡты бөтөрөүгә ныҡлап тотоналар. Труппалар ойошторолоп, аҙнаға бер тапҡыр спектаклдәр ҡуйыла. Ҡыллы оркестр концерттар күрһәтә. План буйынса әңгәмә, докладтар үткәрелеп, тимерлек, столярлыҡ, слесарлыҡ, ҡап һуғыу, өҫ һәм аяҡ кейемдәре тегеү оҫтаханаларына заказдар ҡабул ителә. Тотҡондар үҙен яза кисереүселәр итеп түгел, ә ысынлап та холҡон төҙәтергә ебәрелеүселәр итеп тоя. Ярты йылда бер генә тотҡондоң да ҡасмауы ошоно дөрөҫләй.

1922 йылдың декабрендә Мутиковтарҙың тәүге балалары тыуа. Ҡыҙ балаға исемде Йәүиә тип ҡушып, иптәштәре менән бәпес туйы үткәрәләр. 1923 йылдың февралендә Билал ВКП (б) өйәҙ комитетына эшкә алына. Агитпроп мөдире – Альшаков, Мутиков уның ярҙамсыһы булып, гәзит сығарыу эшен тағы ла уға тапшыралар. Яҙға табан ул крәҫтиәндәр йыйылыштарында йөрөп ҡайта, ауылдарҙа ҡыҙыл һабантуйҙар үткәреүгә әҙерләнә, комиссияға етәкселек итә. Исмаил ауылы Советы рәйесе Сәлих Сафиуллин менән һөйләшеп, һабантуйҙы шунда үткәрергә булалар.

Йәркәйҙә ойошторолған һабантуйға Бөрөләге башҡорт, татар һәм урыҫтарҙан 50-ләп кеше пароход менән килеп төшә. Үҙҙәре менән фотограф һәм тынлы оркестр ҙа алып килгәндәр. Көн иҫ киткес матур. Пароход палубаһында өҙләкһеҙ музыка уйнай, йыр яңғырай. Һабантуйға меңгә яҡын кеше килгән, халыҡтың кәйефе күтәренке. Байрамды Сафиуллин аса, тәбрикләүҙәр яңғырай. ВКП(б)-ның өйәҙ комитеты һәм өйәҙ Советы башҡарма комитеты исеменән Белоусов сығыш яһай. Сығыштарҙы хәҙерге хәлдәр тураһында доклад менән Билал тамамлай. Аҙаҡ уйындар башланып, һабантуй өс көн бара. Кистәрен спектакль күрһәтәләр. Йәркәйҙән һуң һабантуй Өсбүлә, Борай, Тәтешле ауылдарында ла үтә. Һәр байрам фотоға төшөрөлә, тынлы оркестр уйнай.

Шул йәйҙә Мәскәүҙә үтәсәк Бөтә Рәсәй Ауыл хужалығы һәм сәнәғәт төҙөлөшө күргәҙмәһенә вәкилдәр ебәреүгә әҙерлек башлана. Мутиковтың да бик барғыһы килә, ләкин Бөрө ҡалаһы вәкилдәренә бирелгән урындар самалы булғанлыҡтан, ул Исмаил ауылынан барасаҡ иптәштәр төркөмөнә инә. Юлға 5 мең һум бирәләр, йәғни алтын менән иҫәпләгәндә 50 һум самаһы. Тәүҙә Өфөлә Ер эштәре халыҡ комиссариатында йыйылыш үтә, хөкүмәт башлығы Шәһит Хоҙайбирҙин сығыш яһай. Вокзалға музыка менән оҙаталар. Мәскәү вокзалында уларҙы еңдәренә ҡыҙыл таҫма бәйләгән кешеләр ҡаршы ала. Роза Люксембург исемендәге заводка яҡын араҡы заводы йортона урынлаштыралар. Бөтәһе

меңдән ашыу кеше йыйыла. Икенсе көндө 40-ар кешелек төркөмдәргә бүленеп, күргәҙмә урынлашҡан ергә киләләр. Унда тау, урман сәнәғәте, кооперация, малсылыҡ, ҡошсолоҡ, эсемлектәр яһау, баҡсасылыҡ һәм төрлө халыҡтарҙың тормошон күрһәткән бүлектәрҙе ҡарап йөрөйҙәр. Билалға бигерәк тә ситса, папирос фабрикаларының, малсылыҡ, баҡсасылыҡ һәм төрлө халыҡтарҙың тормошон күрһәткән бүлектәр оҡшай. Бер көндө ҡалалағы иң бейек 12 ҡатлы йорттоң түбәһенә менеп, Мәскәү тарихын тыңлайҙар. Икенсе көндө лә ҡала менән танышыу дауам итә. Кис Роза Люксембург исемендәге завод эшселәре байрам ойоштора. Күргәҙмәнең электр уттары менән яҡтыртылыуы, уттарҙың гел генә алмашынып тороуы, тирә-яҡта прожекторҙарҙың балҡып яныуы ғәйәт дәрәжәлә күңелле булып, иртәгә үк социализмға аяҡ баҫабыҙ икән, тигән уй менән күңелдәргә дәрт өҫтәй. Һәр халыҡ вәкиле тарафынан йыр, бейеү, төрлө уйындар башҡарылып, араларында Украина дәүләт хоры иң яҡшыһы тип табыла. Уларҙың хор менән «Интернационал»ды йырлауы халыҡҡа бигерәк тә оҡшай. Башҡорт ҡурайсылары һыҙҙырып ҡурай тарта, гөрләтеп ҡул сабалар , бейеүселәр арымай-талмай бейей.

***

Тормош дауам итә. Эйе, ул ҡатмарлы осорҙоң кешеләре, яҙмыштары үҙ-ара үрелеше: яғаға-яға килешеү, күҙ йәштәре, йәнә бер ҡатлы кешеләрҙең яңылышыуҙары менән үрелеп аҡты. Ирле-ҡатынлы Мутиковтарҙа уҡып кеше булырға ынтылыш, йәшәүгә тырышлыҡ, халыҡ өсөн файҙалы кеше булыу теләге бик ҙур ине.

1930 йылда Билал Мутиковты Борай район Советы башҡарма комитеты рәйесе итеп ҡуялар. Өс йылдан ғаилә яңы ойошторолған Көйөргәҙе районына күсеп килә, Рабиға китапханала эшләй. Аҙаҡ ғаиләгә Өфөнән фатир бирәләр. Мутиковтар ишәйә, Маиса менән Фәрит тыуа. Рабиға ВКП(б) өлкә комитетында секретарь-машинистка булып эшләй. Икеһе лә коммунист була.

1934 йылдарҙа «партия сафтарын таҙартыу» башланғас, ғаилә Ҡариҙел районына күсеп китә. Балалары үҫә төшкәс, Учалы районының Миндәк ҡасабаһына киләләр, Маиса 10 класты шунда тамамлай. Билал да, апаһы Роза Шәйҙуллина ире Фәхри менән Наурыҙ, Муса, Ҡаҙаҡкол ауылдарында балалар уҡыта.

Бөйөк Ватан һуғышында Билал Мутиков Сталинград янындағы ҡаты һуғыштарҙа ҡатнаша. Һуңғы хатында ул «Волга яна» тип яҙа. Рабиға Мутиковаға «Ирегеҙ батырҙарса көрәште, хәбәрһеҙ юғалды» тигән хәбәр генә килә. Атаһынан ике йәштә ҡалған Рәсүл Васфетдин улы Мутиков та 1939 йылда армия сафына алынып, 1945 йылда Ляяштыға әйләнеп ҡайта. Юллама буйынса уны Учалы районына уҡытырға ебәрәләр. 42 йыл ғүмерен балалар уҡытыуға бағышлаған коммунист Рәсүл Мутиков 1987 йылдың сентябрендә 71 йәшендә мәрхүм булды. Бөтә ғүмерен балалар уҡытыуға бағышлаған Роза Мутикова-Шәйҙуллина, Билал Мутиков, Рәсүл Мутиковтар күптән был донъя кешеһе түгел. Ләкин заман, тыуған ил төшөнсәләре – үткәне, хәҙергеһе, киләсәге менән бер бөтөн. Әгәр кеше нәҫел-нәсәбен онотһа, тарихи хәтерен юғалтһа, хәтерһеҙ бер бәндәгә әйләнер ине.

**Дилара МӘХМҮТДИНОВА-МУТИКОВА.**
**Учалы ҡалаһы.**

## АҠЫЛ БАЙЛЫҒЫН ҺАҠЛАҒАН УСАҠ

«Кеше уйлап тапҡан меңәрләгән асыш араһында айырыуса мөғжизәлеһе, моғайын, китаптыр. Китап – кешенең аҡыл һәм күңел донъяһын бөҫкәртмәйенсә быуаттарҙан-быуаттарға алып килеүсе һәм киләсәккә илтеүсе һүнмәҫ-төкәнмәҫ рухи хазиналар ҡаҙанышы ла ул»,– тип яҙа академик Ғайса Хөсәйенов. Халыҡтың төп рухи байлығын һаҡлаған китапханалар цивилизациялар тормошонда мөһим урын алып тора. Академик Дмитрий Лихачев: «Әгәр донъяла афәт ҡубып, музейҙар, театрҙар, һәйкәлдәр юҡҡа сыҡҡан хәлдә лә, китапханалар һаҡланып ҡалһа, цивилизация ҡотҡарылыр ине»,– тигән аҡыллы фекер әйтеп ҡалдырған. Ысынлап та, китапханаларҙа кешелектең барлыҡ хәтере һаҡлана. Шулай ҙа был китаптың йәмғиәттәге ролен, әһәмиәтен һаҡлау өсөн уларҙың заманса һулыш алыуына, кешеләрҙең төрлө мәғлүмәти һәм мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерерлек итеп эшләүенә өлгәшеү зарур.

Йәмәғәтселектә китапханаларҙың кәрәклеге тураһында бәхәс туҡталмай. Ҡайһы берәүҙәр, был институтты интернет ҡыҫырыҡлап сығара, глобаль селтәр кәрәкле барлыҡ мәғлүмәтте бирә ала, тигән ҡарашты алға һөрһә, икенселәр, киреһенсә, интернет селтәрендәге мәғлүмәттәрҙең сифаты самалылығына һылтанып, традицион баҫма сығанаҡтарҙы үҙ итеүен белдерә. Заман талабы булараҡ, компьютер менән интернеттың ихтыяжы, әлбиттә, шикһеҙ. Традицион сығанаҡтар ҙа, электрон сығанаҡтар ҙа бер-береһен байыта, сөнки йәмғиәткә кәрәкле мәғлүмәтте төрлө формала алыу уңайлы.

Салауат ҡалаһында китап һөйөүселәрҙе 11 китапхана хеҙмәтләндереп, уларҙың дөйөм фонды 532 мең баҫманан тора. Китап уҡыусылар ҡала халҡының 34,8 процент тәшкил итеп, бында йылына 1,5 миллион тирәһе документ (барлыҡ баҫмалар ҙа: китап, гәзит-журнал, аудиокассета һ.б.) бирелә. Ҡаланың үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы етәксеһе Татьяна Гончаренко әйтеүенсә, китапханалар заман талаптарына яраҡлашып эшләргә тырыша, электрон каталог төҙөлә, Мәҙәниәт министрлығының «Руслан» программаһы үҙләштерелә. Заманса технологияларҙы ҡулланыу Салауат ҡалаһының ғына түгел, башҡа ҡалаларҙың китапханалары менән дә бәйләнеш булдырырға, уларҙың электрон каталогтарынан файҙаланырға, китап

уҡыусыларға ла электрон каталогтар аша үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәтте тиҙ арала алырға мөмкинлек бирә.

Китапханаларҙы яңы баҫмалар менән тулыландырыуға федераль, республика һәм урындағы хакимиәттәр етерлек кимәлдә аҡса бүлә. Ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу өсөн ҡала хакимиәте ярҙам итә. Һәр китапхананың эшмәкәрлеген бер йүнәлеш буйынса махсуслаштырыу ҙа, уларҙы китаптар менән комплектлау ҙа ҙур роль уйнай. Мәҫәлән, тыуған яҡты өйрәнеү, сәнғәт, балалар, тарих һәм рухи яңырыу һ.б. йүнәлештәге китапханалар эшләй. Ниндәйҙер яңы баҫмалар килгән хәлдә, улар иң беренсе тейешле йүнәлештәге китапханаларға оҙатыла.

Үҙәкләштерелгән китапханалар системаһының 4-се филиалы – Тыуған яҡты өйрәнеү китапханаһына айырыуса туҡталғы килә, сөнки ул, берҙән, иң яҡшылар исемлегендә тора; икенсенән, салауаттарҙа, бигерәк тә йәш быуын араһында Башҡортостан тарихын, милли мәҙәниәтте, йолаларҙы, башҡорт телен пропагандалаусы мәҙәниәт усағы ла. Коллектив ҡаланың педагогия, индустриаль, музыка, медицина колледждары менән тығыҙ бәйләнештә эшләй. Йәштәрҙе урындағы яҙыусылар менән осрашыуҙар, шиғриәт, хәтер, республикабыҙҙың иҫтәлекле даталарына, шәхестәренә арналған кисәләр, шәжәрә байрамдары, китап уҡыусылар конференциялары, китаптарҙың исем туйҙары кеүек сараларҙа китапҡа һөйөү тәрбиәләү менән бер рәттән, милли үҙаң, патриотлыҡ тойғолары тәрбиәләү кеүек бурыстарҙы ла тормошҡа ашыра. Тап ошондай сараларҙа өлкәләр ҙа, йәштәр ҙә әүҙем ҡатнаша, үҙ-ара аралаша, оло йәштәгеләр үҙҙәренең китап һөйөүен йәш быуынға еткерергә тырыша.

1990 йылдан бында башҡорт әҙәбиәтен һөйөүселәр клубы эшләй. Әммә торлаҡ йорттоң икенсе ҡатында ғына урынлашҡан китапхана бик бәләкәй, китаптар урынлаштырырға урын етмәй, һәм был уҡыусыларға фондтан үҙ аллы китап һайлап алыуға етди ҡамасаулай. Уҡыусыларға яҡшы шарттар тыуҙырыу өсөн иркенерәк бина талап ителә.

Дөйөм китапханалар системаһындағы етешһеҙлектәрҙең береһе – ул кадрҙар мәсьәләһе, һәм ул иң элек коллективтың ҡартая барыуы менән бәйле. 56 хеҙмәткәр араһында пенсия һәм шуға етәрәк йәштәге кешеләр өҫтөнлөк итә, уртаса йәш – 45. Һуңғы ваҡытта китапханаға эшкә урынлашырға килеүсе йәштәр юҡ. Быны сәбәбе, әлбиттә, – эш хаҡының түбән булыуы. Шулай ҙа электән эшләгән хеҙмәткәрҙәр – үҙ һөнәренең патриоты. Китапханаларҙа осраҡлы кешеләр юҡ, һәр береһе үҙ һөнәренә күңелен биреп эшләй. Күбеһенең хеҙмәт стажы – 20 йылдан ашыу.

– Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, китап уҡыусылар кәмене, әммә күпме анализ яһап ҡараһам да, уның сәбәбен аңлата алмайым, – ти Татьяна Гончаренко. – Мин китапханасы булып эшкә килгән 70-се йылдарҙа ла уҡыусылар күп түгел ине. Һуңынан, юғары уҡыу йорттары күпләп асылыу менән дә бәйлеме икән, уҡыусылар күпкә ишәйҙе, киске

сәғәттәрҙә хатта сираттар барлыҡҡа килә торғайны. Даими уҡыусыларыбыҙ хәҙер ҙә китапханаға йөрөүен ташламай. Мин үҙем дә ниндәйҙер электрон вариантҡа ҡарағанда китапты ҡулға алып, еҫен тойоп уҡыуҙы өҫтөнөрәк күрәм.

Оло быуын вәкилдәре – китапханаларҙың тоғро дуҫтары. Улар электән китапты күпләп уҡый, ваҡытлы баҫмаларҙы ла элегерәк күпләп алдырған. Тик аҙаҡҡы йылдарҙа, һуңғыһына хаҡтар күтәрелеү менән бәйле, улар гәзит-журналдарҙы китапханала уҡырға мәжбүр. Бының өсөн улар хатта китапхана асылғанға тиклем үк килеп көтөп тора.

Бер осор ҡала китапханалары түләүле хеҙмәткә күсеп, йылына 800 мең һум тирәһе аҡса эшләүгә ирешә, әммә ҡала прокуратураһы быны законһыҙ тип таба һәм түләүле хеҙмәтте тыя. Ә бит был аҡсалар китаптар менән тулыландырыуға һәм техник яҡтан йыһазландырыуға ҙур ярҙам булыр ине.

Уҡыусыларҙы күберәк йәлеп итеү өсөн китапханалар коллективы тарафынан ғәйәт күп эш башҡарыла. Киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре булараҡ, быға үҙебеҙ ҙә шаһит: төрлө әҙәби, мәҙәни саралар үткәрелеп тора, яңы сыҡҡан китаптар тураһында мәғлүмәттәр бирелә, балалар өсөн китаптар менән таныштырыу, төрлө конкурстар, осрашыуҙар уҙғарыла һ.б. Ғаиләләрҙе, кластарҙы йәлеп итеү өсөн саралар ойоштороla. Китап һатып алғанда ҡайһыларына ихтыяж күберәк булыуы иҫәпкә алынып, был мәсьәләне хәл иткәндә ҡала хакимиәтенең мәғариф бүлеге менән дә хеҙмәттәшлек алып барыла. 8-се филиалда һуҡырҙар өсөн тактиль китаптар алына.

Китапҡа һөйөү ғаиләлә, мәктәптә тәрбиәләнә, тип иҫәпләй китапхана хеҙмәткәрҙәре. Балаһының китап уҡырға өйрәнеүе менән ҡыҙыҡһынған ата-әсәләр күп. Уҡыған баланың фекерләү ҡеүәһе күпкә киңерәк, уйлау һәләте, телмәре лә ярайһы үҫешкән була. Кемдер китапты – дөйөм белем алыу программаһын үтәү, икенселәр – ниндәйҙер һөнәр үҙләштереү, уның буйынса камиллашыу, өсөнсөләр – күберәк белеү, дүртенселәр күңел өсөн уҡый. Нисек кенә булмаһын, ышаныслы, белемле киләсәк тәрбиәләүгә ҙур өлөш индереүе, хатта кешенең тормошон оло мәғәнә менән тулыландырыуы менән баҫмаларҙың, китапханаларҙың әһәмиәте баһалап бөтөргөһөҙ. Шуға күрә уның яҙмышына дәүләт тарафынан иғтибар кәмемәйәсәгенә иманыбыҙ камил. Һүҙебеҙҙе ҡеүәтләп, Нурмөхәмәт Йомраниҙың түбәндәге һүҙҙәрен еткерге килә: «Донъяла аҡыллы һәм ырыҫлы булғың килһә, китап уҡы, китаптан айырылма, шунда бәхет табырһың».

**Гөлнара АСҠАРОВА,**
**“Салауат” гәзите хәбәрсеһе.**
**Салауат ҡалаһы.**